# Ағиҙел

**Өфө,
февраль
2011**

**2(1054)**

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Мөхәмәт БАҒЫШАЕВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары)*,
Марат ҠӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Ноғман МУСИН,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Әмир ЮЛДАШБАЕВ.

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип)*,
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире)*,
Ләйсән Мараҡанова *(өлкән мөхәррир)*,
Харис Сәғитов (баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары),
Гүзәлиә Тутаева, Әлфиә Махиянова *(корректорҙар)*,
Рәйсә Ҡамалетдинова, Ләйсән Ишембәтова *(компьютерҙа йыйыусылар)*,
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Рима Нәзифуллина, Зөлфиә Биктимерова *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 августында теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС-37206.

---

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 01.02. 2011. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70x100 1/16.
"Times" гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 4 432 экз. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0010.11.

---

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel.pressarb.ru.

---

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

---

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты» дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

---

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**© «Ағиҙел», 2011 (2,1054)**

# БЫЛ ҺАНДА:

ШИҒРИӘТ

**Сафуан Әлибай.** Башҡортостан. Ш и ғ ы р ҙ а р . ..................................5
**Гөлгизәр Фәйзи.** Үрһәләнеү. Ш и ғ ы р ҙ а р . ..................................12
**Әсхәр Кәшфуллин.** Афәттәр үтер әле. Ш и ғ ы р ҙ а р . ..................18

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Иҙрис Ноғоманов.** Һаҡмарбаш. Т а р и х и р о м а н . *Дауамы.* .....23
**Наил Ғәйетбай.** Бәхет сере. Э с с е . *Аҙағы.* ....................................89

ДУҪЛЫҠ КҮПЕРҘӘРЕ

*“Ағиҙел”дә ҡунаҡта – Ҡалмыҡстан әҙиптәре*

**Эрдни Эльдышев.** Йыр уятһын беҙҙең дуҫлыҡ. .............................110
**Эрдни Эльдышев.** Әсә кәңәше. **Владимир Нуров.** Барыҫ йылы. **Александр Соловьев.** Әҙәм менән Һауа. **Алексей Скакунов.** Ҡалмыҡ ҡыҙы. **Николай Санджиев.** Туған тел. **Василий Чонгонов.** “Далам минең! Алтын, һары далам...” **Валерий Хотлин.** Сығанаҡ. **Виктор Папуев.** Элегия. **Валентина Лиджиева.** “Эй далам һин минең, даланым...” **Лилия Щеглова.** Көҙгө алдында. Ш и ғ ы р ҙ а р . **Николай Бурулов.** Бүре ҡапҡаны. Х и к ә й ә . **Николай Илюмжинов.** Мазул руднигында. Х и к ә й ә . **Игорь Гриньков.** Әҙәми шәүләләр. Х и к ә й ә . .............................156

*Башҡортостан яҙыусыларының сираттағы съезы алдынан*

Әҙәбиәт тормош дәреслегеме бөгөн?
Балалар әҙәбиәте хаҡында һөйләшеү. **Ҡамса Мортазиндың Айһылыу Йәғәфәрова** менән әңгәмәһе. ..................................163

ШӘХСИ ФЕКЕР

**Ғәлим Хисамов.** Сәсәнлекте тергеҙәйек. .....................................170
**Иршат Йәнбирҙин.** Халыҡ мираҫына мөнәсәбәт. ........................174

ДИН ҺӘМ ФӘН

**Ишғәле Нурғәлиев.** Аллаһы Тәғәлә – һуңғы таяныс. ....................180

САТИРА ҺӘМ ЮМОР

**Закир Әкбәров.** Батырлыҡ. Замана ҡаҙанышы. *Ю м о р е с к а л а р .* ......................................................................188

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

ПОЭЗИЯ

**Сафуан Алибай, Гульгизар Файзи, А. Кашфуллин.** *Стихи.*

ПРОЗА

**И. Нугуманов.** Сакмарбаш. *Исторический роман. Продолжение.*
**Наиль Гаитбай.** Секреты людского счастья. *Эссе. Окончание.*

МОСТЫ ДРУЖБЫ

*В гостях у «Агидели» – калмыкские писатели*

**Э. Элдышев**. Пусть возродит песню наша дружба. **Э. Элдышев, В. Нуров, А. Соловьев, А. Скакунов, Н. Санджиев, В. Чонгонов, В. Хотлин, В. Папуев, В. Лиджиева, Л. Щеглова** *(стихи)*. **Н. Бурулов.** Капкан для волка; **Н. Илюмжинов.** В мазульском руднике; **И. Гриньков.** Людские тени *(рассказы)*.

*Встречая съезд писателей Башкортостана*

Является ли литература учебником жизни? *Интервью **К. Муртазина** с **А. Ягафаровой** о детской литературе.*

ЛИЧНОЕ МНЕНИЕ

**Г. Хисамов.** Возобновить бы традиции сэсэнов.
**И. Зианбердин**. Лицом к народному фольклору.

РЕЛИГИЯ И НАУКА

**И. Нургалиев.** О, силы всемогущие.

САТИРА И ЮМОР

**З. Акберов.** Храбрость. Достижения современности. *Юморески.*

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА…

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир – 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип – 274-89-65
Баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаҫары –292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре –277-87-73
Проза бүлеге – 277-87-50
Бухгалтерия – 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.
● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.
● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.
● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.



**Сафуан ӘЛИБАЙ**

## Башҡортостан

*Башҡортостан — башҡорт иле,*
*Шунда беҙҙең тамырҙар.*
*Беҙҙең ҡайнар ҡаныбыҙҙа*
*Сал тарихтың даны бар.*

*Башҡортостан — башҡорт иле,*
*Торна булып сыңрар ил;*
*Сор ҡурайҡай һыҙҙырғанды*
*Ғаләм өнһөҙ тыңлар гел!*

*Башҡортостан — башҡорт иле,*
*Ағиҙелкәй, Уралкай;*
*Мең михнәттәр күргәндә лә,*
*Дуҫлыҡ утын ул һаҡлай.*

*Башҡортостан — башҡорт иле,*
*Ул — беҙҙең әсе яҙмыш;*
*Шуны кемдер аңғармаһа,*
*Яуыр уға мең ҡарғыш.*

*Башҡортостан — башҡорт иле,*
*Күкрәгендә — ут-ташҡын;*
*Мәңгелектән мәңгелеккә*
*Барыр юлы тоташһын!*

---

*Сафуан Әлибай (1941) — Салауат районы Тирмән ауылынан. Тиҫтәнән ашыу шиғри йыйынтыҡ авторы.*

*Ҡәләмдәшебеҙҙе юбилейы менән ихлас ҡотлайбыҙ, һаулыҡ, ғаилә тыныслығы, ижади уңыштар теләйбеҙ!*

## Уралымда

*Күрҙем инде күп ерҙәрҙе,*
*Күп юлдарҙы ураным.*
*Эсер һыуым — Иҙелгенәм,*
*Тик Уралым — ораным.*

*Сит-ят ерҙәр ситтә ҡалды,*
*Мин, елдәргә ҡушылып,*
*Остом тыуған Уралыма,*
*Тала белмәҫ ҡош булып.*

*Ят ерҙәрҙә уй-хыялдар*
*Ер-һыуҙарҙы урамай;*
*Ҡашлаҡтарҙа ҡурайым юҡ,*
*Күңелдәрем йырламай.*

*Сағылташҡа килеп баҫһам,*
*Онотола аһтарым;*
*Сәхрәләрен бер байҡаһам,*
*Кирелә ҡанаттарым.*

*Зәңгәр күккә һибәм әле*
*Иҙелемдең һыуҙарын,*
*Һәр тамсыһы сәскә булып*
*Биҙәр Урал буйҙарын.*

*Күктәрҙең ете ҡатына*
*Талмайса күтәреләм,*
*Ҡаурый ҡанаттарым менән*
*Йыр яҙам күктәренә.*

*Ҡанаттар ерҙә нығынғас,*
*Күктәрҙә тормаҫ өркөп;*
*Мин башҡа ерҙәрҙә түгел,*
*Уралда ғына бөркөт.*

## Юлым уңһа...

Сәфәр сыҡҡанда, эт осраһа — юл уңыр.

**Халыҡ һүҙе**

*Мағмайҙарҙы мин күп күрҙем,*
*Дуҫ, юлдаш та булғанын,*
*Юлдарымда булды шуға*
*Уңғаным да туңғаным.*

*Уңғанымда уйламаным,*
*Үҙемме, тип, булдыҡлы?*
*Хәҙер генә һынай киләм —*
*Кемдәр изге, юллыҡлы.*

Ҡайһы саҡта — тертләп киттем —
Кемдер сыҡты абалап,
Тыр-пыр ышыҡ эҙләмәнем,
Түгел өкө-ябалаҡ.

Ҡай саҡ берәү ташланһа ла
Миңә тейеш ҡалъяъа,
Ҡан талашып, хаттин ашып
Ыу сәсмәнем донъяъа.

Дуҫ тигәнең дә тешләһә,
Һанап һине өркәккә,
Иң ъәрлеге: эләктерһә
Салъый түгел, йөрәктән.

Үҙ һуҡмаъым үҙемдеке,
Сәңкелдәһен сәүектәр;
Улар тыйып бөтөрлөкмө
Юлдарыңда: "Сеү, етер!"

Алъюҫыҡҡа сәйнәшмәйем,
Эҙләп хилаф, яҙыкты.
Асыръанъан саҡтарымда
Әйтмәм: "Юлдан яҙлыҡтым".

Һәр көнөмә сәфәр сыъам,
Бихисап уй, эштәр күп.
Юлдарым уңа ла тора...
Ахыры, ерҙә эттәр күп.

## Күҙҙе йомһам...

Ярһыуҙарҙың әле ярҙары юҡ.
Елдәр менән киләм мин елеп.
Мәңгелеккә сыҡҡан бәйгелә мин
Килергәме тейеш иң элек?

Уй-хыялдың мәңге сиктәре юҡ,
Эштәрҙең юҡ мәңге бөтәһе;
Юлдарымдың сыҡтым осона, тип
Юҡтыр әле йәнде өтәһе.

Артылаһы үрҙәр ымһындыра,
Ҡояшты йә айҙы күтәреп;
Мәңгелек бер ъүмер алда көүек,
Шәйләмәйһең уның үтерен.

Был ъүмерҙең сиге юҡтыр һымаҡ,
Мәңгелектә — аҡыл, зиһендәр.

*Мәңгелеккә бер саҡ күҙҙе йомһам,*
*Мәрткә генә киткән, тиһендәр...*

***

*Минең күңел — дала, туғай,*
*Хуш гөл генә урманы;*
*Шөкөр итәм, уның әле*
*Булманы буш торғаны.*

*Сут-сут ҡоштар, яңы таңым*
*Уянғанды белдереп,*
*Ыҫыҡ кисеп килә таңым,*
*Ҡолонсаҡтай елдереп.*

## Төшөрөрҙәр...

*Мин тырмашып тауға үрмәләйем,*
*Йәнәш киләм һеҙгә, туғандарым,*
*Ә уйҙарҙың, сая бөркөттәрҙәй,*
*Ҡаяларға тоям ҡунғандарын.*

*Талымһыҙ ҙа әле ҡулбаштарым,*
*Изгелектәр генә йөкмәгәнмен;*
*Аҫта ҡала ваҡыт йылғалары,*
*Үҙ түбәмә менеп етмәгәнмен.*

*Бер йырлармын донъя яңғыратып,*
*Баҫырмын да үркәс ҡаяларға;*
*Дуҫ-иштәрем, һеҙҙе гел тырыштым*
*Бәлә-ҡазаларҙан араларға.*

*Үрә баҫып, байҡап торормон бер,*
*Елдәр тынмаҫ, булыр кем таяныс?*
*Бейеклектәр түмен тойғас ҡына*
*Төшөүҙәре булыр, эй, аяныс.*

*Дуҫ-иштәрем, беләм, төшөрөрҙәр,*
*Ышанамын иман, ғәҙеллеккә.*
*Гонаһтарым булһа, ғәфү ҡылып,*
*Мәлен белеп кенә төшөрөр ҙә...*
*Күтәрһәләр икән... мәңгелеккә...*

## Нәфис ҡайын, ғорур ҡарағай

Друидтар календары буйынса
мин — ҡарағай.

*Берәүҙәрҙе кемдер,*
*аҡ ҡайын, ти,*
*Берәүҙәрҙе тиңләй имәнгә.*
*Үпкәләмәм, кемдер:*

*“Тик һин генә*
*Әллә нисек булдың”, — тигәнгә.*
*Мин ҡайын да кеүек,*
*ҡарағай ҙа,*
*Һәр яҙ һайын,*
*гүйә, бөрөләр —*
*Был донъяның йылы тынын тойоп,*
*Өмөттәрем*
*көнгә тереләр.*
*Ә йәйҙәрен*
*хистәр япраҡланып,*
*Күбәләктәй леп-леп тирбәлә;*
*Баш осонда — йәшен,*
*тамырыма*
*Балта һелтәй көнсөл*
*эргәлә.*
*Тупрағымдан килгән һөт-һут кеүек,*
*Сабырлыҡ бар миндә,*
*ҡыҙыулыҡ,*
*Ә хис-дәртем*
*гөлтләп китер төҫлө*
*Сайыр булып йәки туҙ булып.*
*Боронғолар әйтһә,*
*хаҡ әйткәндер,*
*Ҡайғылы, тип, нәфис ҡайынды.*
*Йәшел ылыҫ көйө*
*ҡалды сәмем,*
*Татыһам да аҙмы ҡайғыны.*
*Мин ҡайын да булдым,*
*ҡарағай ҙа*
*Ғорурланып күккә тоташҡан:*
*Ҡая-ташты тишеп,*
*тамырҙарым*
*Ерем яҙмышына олғашҡан.*
*Замананың ҡойон,*
*дауылында*
*Быуындарым шуға ныҡынды:*
*Ҡарағайҙар шартлар*
*хәлгә етһә,*
*Ҡайын булып,*
*бөгөлөп һығылдым.*
*Бөгөлмәнем*
*ялған ҡаршыһында.*
*Һығылманым*
*нахаҡ алдында.*
*Ыңғырашып ҡуя*
*ағастар ҙа,*
*Елдәр шашып,*

алһа алҡымдан.
Япраҡ түгел,
хатта ылыҫтарҙы
Елдәр ҡоя,
беләм,
аямай.
Мин тупраҡҡа ҡалғас,
үҫеп сығыр
Әллә ҡайын,
әллә ҡарағай...

## Һандуғастар ҡайтты тағы ла

Ҡыләүектә турғай ҡойонғанда
Гөрләүектәр китте йүгереп.
Өҙөлөп кенә ҡайтты һандуғастар,
Көй-моңдары китте түгелеп.

Һандуғастар сут-сут иткән саҡта,
Онотола башҡа ҡошсоҡтар.
Бәпембәнең алтын уймағында
Емелдәшер көмөш ысыҡтар.

Бөрөләр ҙә түҙмәй күҙен асыр,
Һәр тарафҡа сихри моң тулғас;
Йәнем тетрәп моңға талпынғанда
Тел асҡысы бирһен һандуғас.

Һандуғастар сут-сут һайрар мәлдә
Беләме ни хистәр ярҙарҙы!
...Осондороп яҙҙар килгән һайын,
Алыҫая йәшлек яҙҙары.

Гөрләүектәр гөрләп алды ла бер,
Маңлайҙарҙа ҡалды юлағы;
Һандуғастар өҙөлөп һайрағанда
Килә ятып түгелеп илағы...

## Ерҙә яралһа ла...

Ерҙә яралһа ла, оса
Өндә, төштә лә — анһат;
Ай-йондоҙҙарға талпына,
Ҡулдары, — гүйә, ҡанат.

Анау ғына тауҙа кеүек
Был донъяның сиктәре;

*Офоҡҡа бер күтәрелһәң,*
*Юҡтыр кеүек биктәре.*

*Аңғармаҫтан ғына шулай*
*Осор ҙа китер йәнем.*
*Мамыҡ ҡына аҡ болотто*
*Ҡыуыр ҙа етер инем.*

*Тик бер күтәрелеп алһа,*
*Осор ҙа осор әле,*
*Ергә ҡабат төшөүҙәрҙе*
*Ул йә онотор әле...*

*Бергә-бергә ҡаҡмайыҡ та,*
*Һаҡлайыҡ Ерем йәмен,*
*Улай әле, ҡапыл ғына,*
*Осмай торайыҡ, йәнем!*

## Ҡыш ғүмере

*Ҡыш ғүмере ҡыҫҡа була, тиҙәр...*
*Әйтмәгәндәр икән һис бушҡа:*
*Күҙгөләрен ватҡас, күҙөм китте.*
*Килеп керҙе ерем саҡ ҡышҡа.*

*Шығырҙап та ята баҫҡан һайын,*
*Быймаларға икән көн килгән.*
*Төн сыҡҡансы ерем ап-аҡ булған,*
*Йым-йым йондоҙҙармы һибелгән?!*

*Ҡыймай барам хатта баҫырға ла,*
*Сыжлап килә ваҡыт санаһы.*
*Ҡыйыныраҡ һымаҡ тау үрләүе,*
*Ә түбәнгә белмәй саманы.*

*Ҡышҡынамдың өҙөр ғүмерҙәрен*
*Һыҙылып ҡына тамыр тамсылар;*
*Сатнап ҡына барған донъяларҙы*
*Ул барыбер яҙға тапшырыр.*

*Ҡыш ғүмере ҡыҫҡа ғына, тиҙәр...*
*Ә булмаҫ та һымаҡ аҙағы.*
*Ала-сола ятҡан донъялар ҙа*
*Ҡала төҫлө унан ағарып...*



**Гөлгизәр
ФӘЙЗИ**

# ҮРҺӘЛӘНЕҮ

## *Эҙләгәнмен юҡты*

*Мин тауҙарға аштым...
Ҡанаттарым
Ҡаяларға бәрелеп имгәнде.
Минме ратманым ғәзиз ерҙе,
Түгел инемме ни ил йәнле?*

*Сей ярамды ялай-ялай тағы,
Тауҙарға тип алға ынтылдым.
Дауылдары ҡабат бәреп йыҡты,
Упҡындарҙан йәнә йотолдом.*

*Йондоҙома барып етер өсөн,
Еңеп сыҡтым ҡара упҡынды.
Ә ул йондоҙ күптән атылған бит,
Эҙләгәнмен икән юҡ һынды.*

*Күккә ҡарап инде тилмермәмен,
Ҡанатланып йондоҙ һүпләмәм...
Кәк(е)ре һорау булып албырғата
Атыр таңым, килер иртәгәм.*

---

*Гөлгизәр Фәйзи (Әхмәткужина Гөлшат Фәйзелғаян ҡыҙы) (1951) Әбйәлил районының Юлдаш ауылында тыуған. Башҡорт дәүләт университетын тамамлай, төрлө гәзит-журналдарҙа эшләй. Шағирә, драматург, проза әҫәрҙәре лә яҙа.*

*Ҡәләмдәшебеҙҙе юбилейы менән ихлас күңелдән тәбрик итәбеҙ!*

## Яҙмыш – үгәй инәм…

Нисә ҡабат ҡәһәтләндем шулай,
Көлдән яралам, тип, янъас-иткәс.
Тик алданып ҡалдым һаҙаъайъа,
Күктәр күкрәп, йәшен йәшнәп үткәс.
Юҡ, һаъыштан талҡан булъан йәнем
Ел ыңъайы осоп таралманы.
Йөрәккенәм әрнеп ҡаралһа ла,
Көнгә баъыр йөҙөм ҡарайманы.
Мин йәнә лә һыуъа таянамын…
Эй, тәң(е)рем, сөңгөлдәрҙән ҡотҡар!
Һалам һона яҙмыш — үгәй инәм,
Ҡайҙа йәрем, ҡайҙа булъан дуҫтар?
Япа-яңъыҙ упҡын-сөңгөлдәрҙә
Үрһәләнәм йәнгә талашып.
… Тап итмәгән тиңем, мине эҙләп,
Алыҫтарҙа ҡалъан аҙашып.

## Мин фәрештә түгел

Фәрештәләр был донъяъа килмәй…
Улар урыны — күктә, бейектәрҙә.
Минең яҙмыш — бында,
Ер өҫтөндә,
Бәндә күргән хәсрәт-көйөктәрҙә.

Фәрештәләр минән эҙләмәгеҙ,
Тиңләмәгеҙ мине мадоннаъа.
Йыр юлында йәнем хасил булды,
Моңдан ъына килдем был донъяъа.

Мин — фәрештә түгел…
Түгел иблис.
Мин бер көсһөҙ, мөсһөҙ бисә генә.
Күңелкәйем йыһандаръа аша,
Үҙем һыйынам һаман кисәгемә.

Шул кисәлә аҙашып тороп ҡалъан
Үткәндәрем — йәнем кисәгенә…

## Һатылманым данъа

Аулап үтте инде ъүмер
Ҡоно булмаҫ өйрәкте.
Тормош мине сыбыртҡыъа,
Шыйыҡ талъа өйрәтте.

*Төпһөҙ кәмәгә ултырып,*
*Иңләнем даръяларҙы.*
*Илай-көлә аҙағынан*
*Яланым яраларҙы.*

*Ҡомъа терәлгән саҡтарым*
*Һыҙырҙы ит-тиремде.*
*Һантый башты ҡомъа күмеп,*
*Мин йәнә лә терелдем.*

*Һатылманым аҡса, данъа,*
*Йылы һүҙгә һатылдым.*
*Алтмыш тиеп аяҡ баҫҡас,*
*Ни хәжәте аҡылдың?*

## Йондоҙ тиһәм...

*Бөгөн йәнә йондоҙ яуҙы күктән.*
*Былдай матурлыҡты*
*Күргәнем юҡ ине күптән.*

*Хайран итеп төнгө сикһеҙлекте*
*Байҡаным мин бөгөн.*
*Әйтерһең дә, ем-ем емелдәгән*
*Балҡыр йондоҙ үҙем.*

*Күңелемдең гәлсәр кеүек мәле*
*Һаъындырҙы шул саҡ.*
*Күҙҙәремдә бөтә донъя балҡый,*
*Эскерһеҙмен, алсаҡ.*

*Барса ъаләм, гүйә,— моң бишеге,*
*Бәндәләрҙә тик изгелек күрәм.*
*Наҙлы һүҙҙән үҫә ҡанаттарым,*
*Күккә тейә түбәм...*

*Эй, ъәжәйеп бер миҙгелем минең,*
*Ҡалдың инде йыраҡ...*
*Йондоҙ тиһәм...*
*Төпһөҙ төнгөлөктә*
*Сәсрәй икән сыраҡ...*

## Серләштек беҙ...

*— Дәъүәң бармы? — тине яҙмыш миңә...*
*Һил төн ине.*
*Күҙгә-күҙ ҡарашып,*
*Серләштек беҙ икәү шулай.*

*Барыһын да төбө-тамырынан*
*Үҙгәртергә ҡайһылай ҙа ҡулай!*

*Өндәшмәнем...*
*Ҡаты уйға ҡалып,*
*Тын ултырҙым.*
*Ниҙе икән кәрәк үҙгәртергә?*
*Мәғәнәле берәй һүҙ әйтергә*
*Тейешмендер хәҙер.*
*Уйҙарымды борҙом*
*Уңға, һулға...*
*Юҡ, булманы...*
*Яҙмыш!*
*Һин йөкмәткән йөктө*
*Артабан да күндәм күтәрергә*
*Мин һаман да әҙер.*

## Бармы берәй ышығы?

*Була мәлдәр:*
*Үҙ-үҙеңде*
*Яратыуҙан туҡтайһың.*
*Айға ҡарап олойһоң да*
*Үкенестән һыҡтайһың.*

*Үҙеңде яратмауҙан да*
*Ауыр тойғо бар микән?*
*Ҡанһырап тулаған йәнгә*
*Киң йыһан да тар икән.*

*Башты ташҡа бәрер мәлем*
*Ошо микән, ошомо?*
*Ырашҡынан үшеккәндә*
*Юҡ шул берәй ышығы...*

## Һаман һорау хәлендә

*Ҡаға-һуға, ҡаға-һуға*
*Йөрәгемә моң-һағыш,*
*Тағы ниндәй хикмәттәрен*
*Әҙерләй икән яҙмыш?*

*Диңгеҙ булып, тулып-тулып*
*Күҙ йәштәрем ағырмы?*

*Саҫҡау һыуыҡтарҙа йәнем*
*Йәнә туңып ҡалырмы?*

*Әллә йәйҙең йомшаҡ еле*
*Һыйпар микән башымдан?*
*Минме, ергә яңылыш килеп,*
*Сараһыҙҙан шашынған?*

*Минме йәшәү, йәшнәү өсөн*
*Аямаған йәнен дә?*
*Мең үкенес-икеләнеү*
*Һаман һорау хәлендә...*

## Көйлө-көйһөҙ

*Был тормоштоң көйһөҙ минуттары...*
*Көйлөһөнән улар күберәк.*
*Яуын-сәсен әйләнә лә килә,*
*Сыуаҡ көндәр иһә бик һирәк.*

*Көйһөҙ минуттарҙың бәҫен беләм,*
*Моңға һала улар күңелде.*
*Күк аяҙый — инде яралырға*
*Әҙер йырым ҡапыл өҙөлдө.*

*Мин шаталаҡ, сыуаҡ яҙым менән*
*Ҡыуыша-ҡыуыша йүгерәм тағы ла.*
*Һауа ярып көлгән тауышымдан*
*Ерем быуындары яҙыла.*

*Күктәремде йәнә болот баҫа...*
*Көйһөҙ мәлем килә ҡабалан.*
*Моңһоуланып моңло көйҙәр һуҙам,*
*Күңелемдә моңдар ярала.*

## Күҙөм

*Утлы ирене менән үбә күҙөм*
*Ишек алдындағы сағанды.*
*Ҡара йәшел тәңкә япраҡҡайҙар*
*Ни арала шулай алланды?*

*Оялдымы әллә наҙ-иркәнән, —*
*Ҡан йүгерҙе саған йөҙөнә.*
*Өмөт өҙөп мин дә йәшлек-йәйҙән,*
*Һыйынамын ҡара күҙөмә.*

*Ҡар яумаған әле эҙҙәремә,*
*Утлы саған — йөрәк хистәрем,*
*Күкрәгемә инһә ҡыш һыуығы,*
*Көрттәр һалһа эҙем, нишләрмен?*

*Әйләнәмдә йырлай күҙ елдәре,*
*Күңелем моңон көйгә һаламы?*
*Баҙырап янған күҙгә сәскәләргә*
*Күмелеп ҡалған ғүмерем яланы.*

*Күкрәгемдә тулы наҙлы шуҡлыҡ,*
*Ут сәсрәтмәй әммә табаным.*
*Ҡыуанысым хәҙер баҫалҡы ла,*
*Хаҡ-баһаһын беләм яраның.*

*Үбә күҙем наҙлап сәстәремде,*
*Йән әрнеткес уның наҙҙары.*
*Өндәремдә — күҙҙең алтын йөҙө,*
*Төштәремә инә яҙҙарым.*

## Сағыммы һин?..

*Суҡ саҡыра Сағын —*
*Өҙөлә йән,*
*Яңғыҙҙарҙың ауыр хәлдәре.*
*Иҫтәремә төштө*
*Үҙемдең дә*
*Суҡ ишеләй зарлы мәлдәрем.*

*Йәнгенәмде устарыма ҡыҫып*
*Һалҡын ҡышты ҡаршы алыуым;*
*Байып барған ғүмер юлын уйлап*
*Берсә туңып, берсә яныуым.*

*Һин Сағыммы минең,*
*Суғым микән?*
*Ҡайһылай ҙа инде беҙ бергә.*
*Аһ, ышанғым килә һөйөүеңә,*
*Бәхетебеҙ микән ғүмергә?!*

*Аһ, табынғым килә бары һиңә,*
*Ҡуйыныңа һинең һыйынғым...*
*Суҡ саҡыра Сағын...*
*Күккә бағам,*
*Илауҙарҙан саҡ-саҡ тыйылып...*



Әсхәр
**КӘШФУЛЛИН**

## *Афәттәр үтер әле*

*Ниндәй халәттә йәшәйһең,*
*Йәшәйһең төҫлө көлөп?*
*Халәтем инде шул сама —*
*Илдәге хәлдәр кеүек.*

*Күп илдәрҙе һыуҙар баҫа,*
*Мәңгелек боҙҙар эреп.*
*Янам, көйәм, өҙгөләнәм,*
*Илдәге хәлде күреп.*

*Ил байлығы урман дөрләй —*
*Һис тә булмай һүндереп.*
*Ахры, заман афәттәре*
*Килә күҙгә күренеп.*

*Их, ҡойһа ине ямғырҙар,*
*Ер күкрәген сылатып.*
*Иген көйә ҡоролоҡтан,*
*Игенсене илатып.*

*Хәлдәрең нисек, тиһең һин, —*
*Йәшәйһең төҫлө көлөп?*
*Күҙ йәштәре аша көләм,*
*Илдәге хәлде күреп.*

*Әсхәр Кәшфуллин (1930) Кушнаренко районы Тартыш ауылынан. Бер нисә шиғри йыйынтыҡ авторы. Башҡортостан Яҙыусылар союзы ағзаһы.*

*Тик шулай ҙа йәшәйек беҙ,*
*Аҡ өмөттәр һүнмәһен.*
*Был афәттәр үтер әле,*
*Күңелдәр һүрелмәһен.*

## Ҡолас йәйеп

*Һағындым мин бесән сапҡан*
*Сәскәле болондарҙы,*
*Хуш еҫле бөтнөк үләнле*
*Ҡырҙарҙы, яландарҙы.*

*Һағындым мин ҡаҡыларын,*
*Балтырған, йыуаларын.*
*Йәшлегемдең бер ҡатлығын,*
*Сабыйҙай йүләрлеген.*

*Һағындым мин гөл баҡсамды,*
*Бәпкә үләндәремде.*
*Туғандарымдай бик яҡын*
*Күрше-күләндәремде.*

*Һағындым мин аҡ һаҡаллы*
*Кәңәш бирер ҡарттарҙы.*
*Ул бит беҙгә йөкмәтелгән*
*Әҙәп, намыҫ һаҡлауы.*

*Өйәңкеләрҙе һағындым,*
*Ҡарғаларына саҡлы.*
*Ҡолас йәйеп сығаһығыҙ,*
*Һеҙ һүң, һеҙ миңә шатмы?*

## Тыуған яҡ еле

*Әрем еҫе, миләш әселәре —*
*Тыуған яҡтың еле ҡағылһа.*
*Һағыныу-һағыштарҙы белмәҫ инем,*
*Мөхәббәтем һиндә ҡалмаһа.*

*Йәнем ирей, аҡ бәхет кисереп,*
*Халҡым моңо күңелем нурлаһа.*
*Арыш еҫе, арыш тулҡындары*
*Йөрәгемә кереп уралһа.*

*Белмәҫ инем тыуған яҡ ҡәҙерен,*
*Яҙмыш һағыштарға һалмаһа.*
*Өҙгөләнмәҫ инем тыуған яҡ тип,*
*Кендек ҡаным һиндә таммаһа.*

## Зарланмайык

*Зарланмайыҡсы тормоштан,*
*Табалмаҫты таптырмайыҡ.*
*Бер-беребеҙҙе ҡояш күреп,*
*Ҡараштарҙан яҡтырайыҡ.*

*Ҡайғыларға бирешмәйек,*
*Һағыштарҙан һығылмайыҡ.*
*Мөхәббәттән нурланайыҡ,*
*Һөйөүҙәрҙән ҡабынайыҡ.*

*Һәр бер иҫкән елдәргә лә*
*Талдар кеүек бөгөлмәйек.*
*Һөйөнөс йәштәре булып*
*Түгелһәк беҙ түгеләйек.*

*Юҡ-барҙарға борсолмайыҡ,*
*Төшөнкөлөк кисермәйек.*
*Иҫерһәк беҙ халҡыбыҙҙың*
*Моңдарынан иҫерәйек.*

*Зарланмайыҡсы тормоштан,*
*Табылмаҫын таптырмайыҡ.*
*Бер-беребеҙгә ҡояш кеүек*
*Ҡараштарҙан яҡтырайыҡ,*
*Ҡараштарҙан яҡтырайыҡ.*

## Тәүәккәллек

*Тәүәккәллек ҡылманыңмы —*
*Бәхетең ҡыйыласаҡ.*
*Йәнең үкенескә инеп,*
*Һағышҡа буяласаҡ.*

*Тәүәккәллек — ҙур бәхет ул,*
*Ҡалаларҙы яулай ул.*
*Тәүәккәлдәр батыр була,*
*Уттарҙа ла янмай ул.*

*Тәүәккәллек — егетлек ул,*
*Иҫән сыға яуҙарҙан.*
*Иң беренсе булып менә*
*Иң-иң бейек тауҙарға.*

*Ҡурҡаҡтарға хас түгел ул*
*Тәүәккәллектәр ҡылыу.*
*Тәүәккәл менән ҡауыша*
*Иң затлы матур һылыу.*

*Үкенестәр цртәмәһен,*
*Бул тәцәккәл, бул йылғыр.*
*Кешеләрҙең был сифаты*
*Үҙе матур бер йырҙыр.*

*Рейхстагҡа байраҡ элә*
*Иң батыр, тәцәккәлдәр.*
*Ҡыйыуҙың цткән юлына*
*Үҫә хуш еҫле гөлдәр.*

*Тәцәккәлдәр генә яулай*
*Мөхәббәткә тоғроно.*
*Ғүмерле, йәшәүсән була*
*Тәцәккәлдең орлоғо.*

*Ебегәндәр һәм ялҡауҙар*
*Була алмай тәцәккәл.*
*Тик тәцәккәл заттарға бит*
*Ҡуйыла алтын һәйкәл.*

*Был донъяны тәцәккәлдәр*
*Матур, нурлы йәшәтә.*
*Ҙур уңыштарға ирешә*
*Тәцәккәлдәр һәр эштә.*

## *Һау ғынамы, тыуған яғым*

*Һау ғынамы, тыуған яғым,*
*Ауылым, кцршеләрем,*
*Иген иккән баҫыуҙарым,*
*Йәшлектә һөйгән йәрем.*

*Һаумыһығыҙ, яҡташтарым,*
*Булдыҡлылар бар яҡлап,*
*Һеҙҙең әҙәп, намыҫлыҡты*
*Йөрөтәм иҫтә һаҡлап.*

*Һағындырған аҡландарым,*
*Сибәр ҡара ҡаштарым.*
*Көтә микән әсәйемдең*
*Кесерткәнле аштары?*

*Минең һағынғанды белеп,*
*Талпына турғайҙары —*
*Яҡты һағыштар уята*
*Баҫыу ҡыңғырауҙары.*

*Һаумыһығыҙ, игенселәр,*
*Мул булһын уңышығыҙ.*
*Донъяларҙы нурландыра*
*Һеҙҙең изге эшегеҙ.*

*Һеҙ бит — мәңгелек бәхетем,*
*Әсәйемдәй ҡәҙерле.*
*Йәннәттәргә тиңләрлек бит*
*Тыуып-үҫкән еремде.*

## Һиңә ҡайттым

*Һиңә ҡайттым, тыуған яғым,*
*Ерҙәштәрем, һағынып.*
*Ҡайҙа  йөрөгән саҡтарым*
*Мөхәббәттән ҡабынып?*

*Ҡайҙа бураҙналар ярып*
*Йөрөй икән ул малай?*
*Күрәһеңме, мин бит инде —*
*Һикһәнде үткән бабай!*

*Ә һин һаман баҫыуҙарҙа*
*Йөрөйһөң иген игеп.*
*Еңеүгә үҙ көсөң һалып,*
*Фашист мәлғүнде һүгеп.*

*Ебәк башлы ҡылғандары*
*Елдәрҙә елферҙәшә.*
*«Балам, хәлдәрең нисек?» — тип,*
*Гүйә, әсәм өндәшә.*

*Баҡыр шишмәгә килһәм мин,*
*Һандуғастар серләшә.*
*Һандуғастар йырын тыңлап,*
*Баҡыр шишмәм, мең йәшә.*

*Болондарға барам әле,*
*Бесәндәрем кипкәндер.*
*Бына-бына килер, тиеп*
*Мөхәббәтем көткәндер.*

*Ҡайтһам тыуған ауылыма,*
*Хискәйҙәрем яңыра;*
*Әрнештәрем, ҡайғыларым,*
*Һағыштарым тарала.*

Иҙрис
НОҒОМАНОВ

# ҺАҠМАРБАШ

## ТАРИХИ РОМАН

### IV. Хәтәр аҙым

*...Илкәйенә ингән яуға ҡаршы*
*Ат ҡушаҡлап сапҡан ир яҡшы.*

(Халыҡ йырынан)

Яҙалаусы әтрәттең бына-бына ҡуҙғалып китерен Биксәнтәй бар булмышы менән тоя. Эйе, күңеле һиҙә: уҙа барһа бер-ике көн торорҙар, ә ул, ниәтләгәнен бойомға ашыра алмай, һаман икеләнә. Илбаҫарҙарҙың Әүжән — Иҙелбаш тарафтарына яҡынлашҡан регуляр ғәскәрҙәргә ярҙамға барыуына юл ҡуйырға һис ярамағанлығын хәҙер белә бит инде, ләкин, нишләптер, һаман һуҙып-һуҙа. Салауат фарманында яҙылғандарҙы үҙ күҙҙәре менән күрҙе лә баһаң. Тимәк, үлһәң үл, старшина, әммә йәлләдтәрҙең артабанғы юлын быу! Был эш бары һинән генә тора. Ә нисегерәк итеп тотҡарларға һуң уларҙы? Көс менән алдырып булмаҫы көн кеүек асыҡ. Ярайһы ғына яҡшы ҡоралланған, буштан төшкән байлыҡҡа өмөт итеп, осһоҙло табыш көҫәп сәфәргә сыҡҡан алты йөҙ илленән артыҡ кеше туплаған алайға бер ауыл халҡы ҡаршы тора аламы? Күршеләрҙең вәғәҙә иткән ярҙамы ҡасан килеп етә? Кем белгән, шунда уҡ йыйылырға, тип әйтергә кәрәк булған уларға. Ул сағында ябауыл менән барырға самалап ҡарарҙар ине. Ә хәҙер...

Ниһайәт, башҡаса бер әмәл дә юҡлығына төшөнгән Биксәнтәй, нисек кенә ҡурҡыныслы булмаһын, баштан уҡ хәтер төбөнә киртеп ҡуйған хәтәр уй-ниәтен кисекмәҫтән тормошҡа ашырырға ҡарар ҡылып, кискелеккә иң ышаныслы һәм ыраҫлы кешеләрен өйөнә йыйҙы. Барыһы ла килеп бөткәс, ғәҙәтенсә ашыҡмай ғына, һәр һүҙен үлсәп кенә һөйләй башланы:

— Тәғзим[120] ағай-эне, һәммәгеҙгә мәғлүм: ауылыбыҙ янында, түмән уҡ

[120] *Тәғзим — хөрмәтле, ҡәҙерле.*

*Дауамы. Башы 1-се һанда.*

булмаһа ла, ҙур сиреү тора. Эреле-ваҡлы биш туптары бар. Әлегә беҙгә зыян итеүгә иткәндәре юҡ, әммә ләкин, ҡуҙғалып киткән хәлдә, Аҡһыу буйындағы яҡташтарыбыҙға буйтым шойҡандары тейеүе бар. Шуға күрә беҙҙең бөгөнгө бурыс: караттарҙы нисек тә артабан Әүжән — Иҙелбаш яҡтарына үткәрмәй тороу. Тик ҡалайтып эшләргә быны? Күреп тораһығыҙ: ҡеүәт әлегә дошман яғында. Йөҙгә-йөҙ ҡаршы барыуҙан фәтүә сыҡмаҫы көн кеүек асыҡ. Көсөбөҙҙән килмәгән эшкә тотоноп, үҙебеҙҙе генә түгел, бөтә ауылыбыҙҙы ла һәләк итеүебеҙ бар. Күршеләрҙең килеүен көтөп ятһаҡ, оҙаҡҡа китә. Шуның өсөн күмәкләп уйлашайыҡ, ағай-эне: нисек итәбеҙ, нисек тормошҡа ашырабыҙ ошо изге ниәтте? Әле һеҙҙе ҡор-кәңәшкә саҡырыуымдың сәбәбе бына шул.

Йыйылыусылар, ауыҙҙарына һыу уртлаған һымаҡ, өндәшешмәй, уйсанланып тик ултыра. Күренеп тора: береһенең башына бер йүнле фекер килмәй. Ахырҙа ауыр тынлыҡты йәнә Биксәнтәй боҙҙо:

— Үҙемдең башта бер уй бар ҙа ул... Бик хәтәр инде, — тине ул, өйҙәгеләрҙе күҙҙән үткәреп. — Килеп сыҡмаған хәлдә ҡортобоҙға ныҡ ауырға тура киләсәк. Быныһын, ағай-эне, алдан киҫәтәм.

— Әйт ниәтеңде, старшина, аҙаҡ күмәкләп уйлашырбыҙ. — Ҡолоҡас мулла йәштәрсә ҡалҡына биреп ҡуйҙы.

Биксәнтәй, аҙ ғына шымып торғандан һуң, эс серен асып һалды:

— Артмыш аламансыларҙың[121] ҡолпалы үә мансафлы ғына берәүһен рәһен[122] итеп алғанда...

Йәнә йән иҙгес тынлыҡ урынлашты.

— Аңлайым, был үтә хәүефле ҡәдәм[123], хатта аҡылһыҙлыҡҡа тиң тәүәккәллек. — Ныҡыш старшина һүҙен дауам итте. — Әммә мин үҙем башҡаса юлын күрмәйем.

— Башҡа юлы юҡ икән, тәүәккәлләргә тура килә инде.— Биксәнтәйҙең хәүефле тәҡдимен әүәл Батырхан ҡеүәтләне. — Аманатҡа кемде самалайһың?

— Тимашевтың үҙен ҡороҡлағанда...— Әлегә тиклем өндәшмәй ултырған Әхмәтйән дә һүҙгә ҡушыла һалды.

— Подполковникты... ярамай, — тине старшина, бәләкәй шәкерткә һабаҡ аңлатҡан мөдәррис ише тәфсирләп.— Кемгә хәжәте бар уның? Урынына икенсе берәүҙе ҡуйырҙар ҙа артабан китерҙәр.

—Ул сағында кемеһе?

— Һеҙ Рейнсдорп тигән исем-шәрифте ишеткәнегеҙ бармы? —Йөҙөнә йылмайыу ғәләмәте сығарған Биксәнтәй береһе лә көтмәгән һорауҙы ҡуйҙы.

— Конфедераттар менән көрмәкләшеп йөрөгән мәлдәрҙә ишетә биреп ҡалған һымаҡмын,— тине Батырхан.

— Яңылышмаһам, Тимашевтың бөгөнгө уң ҡулы ана шул генерал Рейнсдорптың яҡыны, имеш. — Биксәнтәй, хәҙер аңлашыламы инде, тигән шикелле эргәһендәгеләргә ҡарап алғандан һуң, һүҙен ослап ҡуйҙы:— Ә Тимашев – мәкерле, хәйләкәр һәм ярамһаҡ, генералдың яҡынын тиккә генә ярҙамсы итеп алмағандыр, тип уйлайым.

— Ҡалғандар нисектер, старшина, ә мин тел төбөңә асыҡ төшөндөм кеүек. – Ҡолоҡас мулла был юлы һоғон йәшерә алманы. — Тимәк, ҡомһоҙлоҡ менән ялағайлыҡҡа һуҡтырмаҡсыһың.

— Тап шулай.

---

[121]*Аламансы — талаусы.*
[122]*Рәһен — аманат, заложник.*
[123]*Ҡәдәм — аҙым.*

– Киләсәген ҡайғыртып ятҡан Тимәшәү, Рейнсдорптан шөр ебәреүҙән, Миргородскийҙы ҡалдырып бер яҡҡа ла китмәҫ тиһегеҙме? – тип ҡыҙыҡһынды Батырхан.

— Ул мине танымаһа ла, мин подполковник Тимашевты күптән һәм яҡшы беләм. Күреп торорһоғоҙ: барыһы ла беҙ уйлағанса булыр, иманым камил, — тине Биксәнтәй ышаныслы итеп. — Шуның өсөн дә уның ярҙамсыһын тәҡдим итәм. Тимашев унһыҙ артабан бер ҡәдәм дә яһамаясаҡ.

— Беҙ фараз итәбеҙ, Тәңре үҙенсә эшләй. Мәгәр барып сыҡмаһа?

— Ул сағында утҡа ҡаршы асыҡтан-асыҡ ябауыл менән барыу ғына ҡала. Был – һуңғы сара. Аҙағы ни менән бөтөрөн тәфсирләп аңлатып тороу урынһыҙҙыр, тип уйлайым...

Мәртәбәле йыйын аманат юллап хәйләкәр үә ғәйрәтле Батырхан менән йәш, йылғыр Әхмәтйәнде ебәрергә ҡарар ҡылды.

Күҙгә төртһәң дә күренмәҫлек йәйге төндәрҙең береһе. Ғәҙәттә, көн болғауырланып, оҙайлы шыңшыу ямғырҙар алдынан шулай була. Меңәрләгән йондоҙ йылҡылдашҡан йыһан сатыры салт аяҙ булыуға ҡарамаҫтан, хатта бер нисә аҙым арауыҡта торған атты абайларлыҡ түгел. Кемгә нисектер, ә беҙҙең төнгө "һунарсылар" өсөн был, әлбиттә, ифрат ҡулай.

Ошо мәл төнгө ысыҡтан һығыла башлаған үлән араһында икәү боҫоп ята. Унда-бында елпелдәп, инде ләүкеп һүрелә барған әшәктәр яҡтыһына ваҡыты-ваҡыты менән уларҙың күҙҙәре йылтырашып китә. Төн һалҡынлығында еүеш ерҙә оҙаҡ ятып инде өшөй ҙә башланылар, ә көткән кешеләре күренмәй ҙә күренмәй.

Уларҙың бар иғтибары ғәскәр башлығы подполковник Тимашевтың олпат тирмәһе йәнәшәһендәге бәләкәй генә түңәрәк сатырҙа. Ике күҙҙәрен дүрт итеп, баянан бирле ҡараштарын шунан айырмайҙар. Йоҡа, беше тауарҙан әтмәләнгән сатыр эсендә майшәм быҙлай, арлы-бирле хәрәкәт күренгеләп ҡала.

Ниһайәт, көткән мәлдәре етте шикелле! Сатыр ябыуы асылып, унан кемдер берәү сыҡты. Уның шәүләһе яҡындағы мөсһөҙ ут яҡтыһына яҡшы уҡ күренһә лә, үҙен ҡапыл ғына танырлыҡ түгел. Ергә нығыраҡ һырыға биргән ике "аусы"ның мажара көҫәгән күңелдәре елкенеп, йөрәктәре йышыраҡ тибергә тотондо. Сығыусы әшәк янына яҡынлашыуға, уның йөҙөн әшәк нуры һыйпап үтте. Теге әҙәм – Батырхан менән Әхмәтйән баянан бирле тулҡынланып көткән Миргородский ине.

Арҡаһына йылы көртөй һалған Миргородский усаҡ янындағыларға берике ауыҙ һүҙ ҡушты ла ябыулы туптар торған тарафҡа ыңғайланы. Күрәһең, төнгө шәйләктәрҙе тикшерергә сыҡҡан. Писарь ҡараңғылыҡҡа инеп юғалғас та, мөңгөр-мөңгөр һөйләшкән тауыштар ишетелде: кемдер ҡаты итеп һүгенде, кемдер шым ғына көлөп ҡуйҙы.

— Яҡыныраҡ барайыҡ. — Батырхан, һаҡ булырға тырышып, алға шыуышты. Әхмәтйән, ергә йәбешкән еҙ йылан ише борғаланып, артынан эйәрҙе. Шул рәүешле тәғәйен сатырға яҡынлаштылар. Йәнәшәләге быҫҡып ләүкей барған әшәк янында берәү ҙә күренмәй. Сатыр эсендәге шәм дә һүндерелгән. Бына ул оҙаҡ көткән уңай мәл...

Бер-бер артлы йәлп-йөлп итеп тирмә эсенә ике ҡара шәүлә үтте. Шылт иткән дә тауыш ишетелмәне, үлән дә ҡыбырламаны. Тимашев тирмәһендә торған һаҡсы бер ни ҙә һиҙмәй ҡалды.

Ниндәйҙер сепрәк-сапраҡ араһына сумған Батырхан менән Әхмәтйән көтә башланы. Тулҡынланыуҙары үҙҙәренең ахыр сиккә еткән, ярһыуҙарын көскә

баҫып яталар. Икеһе лә яҡшы аңлай: һаҡһыҙ ҡыланып тотола ҡалһаң, үҙеңдең генә башың китеп ҡалмаҫ, яҡташтарыңды, бөтә ауыл халҡын аяныслы яҙмышҡа дусар итәсәкһең. Караттар олоһон да, кесеһен дә аяп тормаясаҡ, сәбәп-һылтауы ғына табылһын.

Писарҙың бер мөйөштәге ҡағыҙҙары араһында тиктормаҫ сысҡан ҡыштырҙай, сатыр эсендә, әллә тышындамы өҙләкһеҙ яңғыҙ сиңерткә сырылдай. Йөрәге алҡымына килеп тығылған Әхмәтйәнгә ошо рәүешле мәңге туҡталмай дауам итер кеүек тойола. Һатлыҡ сиңерткә, үҙенең әсе серелдәүе менән, уларҙы тоттороп ҡуйыр һымаҡ. Ә күпте күргән Батырханды, киреһенсә, сиңерткә йыры тынысландыра ғына. Уларҙы остандаҡ бөжәк һиҙмәгәнде, тимәк, дошман да һиҙмәй.

Яҡында ғына һөйләшеү ишетелде. Шунда уҡ кемдер ҡалын тауыш менән:

— Постовой! — тип гөрһөлдәне.

— Я, ваш брод! – Икенсеһе, ҡабаланып, өҙөк-һурыҡ яуап бирҙе.

— Ваш брод! Ваш брод! — Ҡалын тауыш ризаһыҙлыҡ белдерҙе. — Ваше превосходительство, тип өндәшегеҙ, наҙандар! Күпме ҡабатларға була?! — Быныһы һәр ваҡыт асыулы Тимашев ине.

— Виноват, ваш бр... ваше превосходительство.

— Йә ярай, Миргородский әфәндене саҡыр. Тиҙ бул.

— Ул постарҙы тикшерергә китте, ваше превосх...

— Килгәс тә миңә инһен. — Тимашев постовойҙы бүлдерҙе.

— Слушаюсь!

Һөйләшеү ошо урында өҙөлдө. Тимашевтың тауышын танып алған Батырхан менән Әхмәтйән ергә һеңерҙәй булып яткан ерҙәренән иркен тын алдылар: ярай әле, сатырға килеп инмәне. Юғиһә, ҡапыл биленләүҙән орҙом-бәрҙем ҡыланып, яңылышлыҡ эшләп ҡуйыуҙары бар ине. Ҡараңғының күҙе юҡ...

Алҡынып-тулҡынланып тағы байтаҡ ваҡыт ятырға тура килде уларға. Алда торған хәүефле билдәһеҙлек, яуаплы эш, үҙҙәре теләп яһаған хәтәр аҙым ярһыта ла, йөрәкһетә лә, шул уҡ мәлдә бер аҙ ғына шөрләтә лә ине. Килеп сығырмы ниәтләгән эштәре?

Шулай ята торғас, Батырхандың яйһыҙ урынлашҡан ҡулы ойой башланы. Уныһын бер аҙ яҙып алмаҡ булып, әйләнәйем тигәндә генә, яҡында аяҡ тауышы ишетелде.

— Ваше благородие, һеҙҙе господин подполковник саҡыра! — Баяғы һаҡсы төн һиллеген боҙҙо.

– Мин хәҙер. — Миргородский сатырына килеп инде, ҡараңғы-юҡҡа ҡыштырлатып, ҡағыҙҙары араһында аҡтарынғандан һуң, кире сыҡты.

Тәне эҫеле-һыуыҡлы булып киткән Әхмәтйән ҡалма[124] араһына нығыраҡ һырыҡты. Ул үҙенсә: “Мәлһеҙ саҡырта, ҡәһәрең”, — тип уйлап ҡуйһа, ҡыян Батырхан, киреһенсә: “Осрашып ҡуйыуҙары яҡшы булды әле быларҙың. Тимашев наибын башҡаса, һис юғында таңға тиклем, таптырмай торғанда, аҙ булһа ла ваҡыт отабыҙ”, — тип фекер йөрөттө, киләһе ваҡиғалар уның һиҙемләүен дөрөҫләне.

Шулай ҙа Батырхан менән Әхмәтйәнгә әле оҙаҡ көтөп, оҙаҡ көйәләнергә тура килде. Бер мәлде, үҙҙәре лә һиҙмәҫтән, онотолоп, ойой ҙа башланылар.

—Тыныс йоҡо, Иван Лаврентьевич! — тигән тауышҡа һиҫкәнеп киттеләр. “Ниһайәт”, — тип уйланы ҡапыл ярһып киткән Батырхан. Быны хәҙер ни булһа ла була!

Миргородский кем менәндер тағы бер аҙ мөңгөр-мөңгөр һөйләшеп торҙо

[124]Ҡалма — ҡыйғыпыр әйбер.

ла дөм-ҡараңғы тирмәгә инде. Майшәмен тоҡандырмаҡ булып шырпы һыҙырға маташҡанында, ҡатынҡы ҡул ауыҙын ҡапланы, шунда уҡ муйынына тимер һалҡынлығы ҡағылды. Бындай һөмһөҙлөктө һис көтмәгән ағута[125], затлы асан[126] Миргородский “ыҡ” итергә лә өлгөрмәй ҡалды.

— Тауыш-тыныңды сығараһы булма, артмыш! — Батырхан башҡортсалап уның ҡолағына бышылданы. — Тыпырсынһаң, ахырың ошонда булыр. Мин ҡат-ҡат әйтергә яратмайым...

Ғүмер ҡәҙерле: тегеһе, ризалыҡ белдереп, ҡалтырана-ҡалтырана баш һелкә һалды. Ер иҙәнгә йөҙтүбән йығып, ҡулдарын артҡа шаҡара бәйләп ҡуйҙылар, ауыҙына көнэлгәре әҙерләнгән сүбәкте кипсәп тыҡтылар.

— Молодец, писарь әфәнде, — тип бышылданы Әхмәтйән. — Артабан да үҙеңде шулай тотһаң — йәшәрһең...

Инде эштең хәл иткес өлөшө ҡалды: хәҙер һиҙҙермәй генә сатырҙан сығып шылыу кәрәк. Был юлы бесәйҙән шым, һеләүһендән сос, йыландан йылғыр булырға тейешһең.

Иңбашына мылтыҡ аҫҡан һаҡсы ашыҡмай ғына тегеләй-былай үтештереп йөрөй. Бер яҡҡа үткәнендә байтаҡ ҡына алыҫлаша һәм Тимашев ятҡан тирмәнең аръяғына уҡ уҙып китә. Шулай итеп, Миргородскийҙың сатыры бер мәлгә генә уның күҙенән яҙлыға. Батырхан ошонан файҙаланырға булды. Тәүҙә, Миргородскийҙың шаҡарылған ҡулдарынан тотҡан килеш, шым ғына үҙе сыҡты, ә Әхмәтйән, артабан ни булырын көтөп, сатыр эсендә ҡалды. Бер ниндәй ҙә шипкерт тойолмағас, ул да шыпырт ҡына сығып һыҙҙы.

Алдан һөйләшеп ҡуйылғанса, өс тиҫтә самаһы эре ҡайындарҙан торған Оло баҡсалыҡта осраштылар. Төнгө һунарсылар һәр ауазға ҡолаҡ һалып байтаҡ торғандан һуң ғына тыныслана төштө. Күрәмдә әүәлгесә һил тормош хөкөм һөрә ине. Тимәк, бөтәһе лә уйлағанса килеп сыҡты: һиҙмәнеләр ҙә, шәйләмәнеләр ҙә. Башҡорттарҙың көтөлмәгән аҡылһыҙлыҡҡа тиң тәүәккәллегенән ҡото алынған Миргородскийҙың ҡаршылыҡ күрһәтеү теләге нисектер башына ла инеп сыҡманы. Ныҡ ҡаушауҙан ҡойолоп төшкән писарь тулыһынса яҙмыш хөкөмөнә буйһондо ла ҡуйҙы. Күҙҙәре бәйләнгән көйө уны шул төндө үк Урал төпкөлөндәге Сатра йәйләүенә алып киттеләр ҙә йәй көндәре ит һаҡлар өсөн иркен һәм тәрән итеп, эс яҡтан ерек бура төшөрөп эшләнгән һалҡын өркәткә төшөрөп яптылар. Хәҙер инде үҙен бурҙай эттең иң шәбе менән дә эҙләп таба алмаҫһың...

...Ҡапыл ғына күңел тыныслығын юғалтҡан Тимашев бөгөн ҡояштан алда торҙо. Көндәгесә, иртәнге һалҡындан сирҡаныуҙан йылы юрған аҫтында кирелә-һуҙыла, наҙланып ятманы. Ҡуҙғала торған көндәре лә баһаң. Һыуыҡ һыу менән йыуынып алғандан һуң, өҫтөн рәткә килтергәс, ярҙамсыһын иртәнге ашҡа саҡыртты.

— Миргородский әфәнде сатырында юҡ. — Йомош-юлсы казак бушҡа йөрөп әйләнде. Уны-быны уйламаған Тимашев:

— Ярай, килһә әйтерһегеҙ, – тип кенә ҡуйҙы.

— Слушаюсь! — Тегеһе шунда уҡ юҡ булды.

Башҡа саҡта йәпәтәйләнеп-йылмандап килеп етер наибының таң тишегенән ҡайҙалыр сығып китеүе сәйерерәк тойолдо. “Хәрби поход тормошона өйрәнә барыуы ошомо әллә? Молодец, Александр Иннокентьевич, йоҡлап

---

[125]*Ағута — аҡһөйәк, чиновник.*

[126]*Асан — ҡаҡса, ныҡ ябыҡ.*

ятмай, иртә менән сиреү араһына сыҡҡанһың икән. Күрәһең, шәйләктәрҙе барлап, яугирҙар менән һөйләшәлер", — тип фараз иткән подполковник уны үҙенең ярҙамсыһы итеп яңылышмағанлығына, писарының әкренләп шәп егет була барыуына ҡыуанып ҡуйҙы.

Миргородскийҙы оҙаҡ ҡына көткәндән һуң, Тимашев үҙе генә тамаҡ ялғап алды. Байтаҡ ара күтәрелергә өлгөргән ҡояш инде ихласлап ҡыҙҙыра башлауға, лагерҙа барыһы ла аяғына баҫты һәм артабан ҡуҙғалырға әҙерләнеп зыҡ ҡупты. Тик алай башлығының ярҙамсыһы һаман күренмәне. Бер мәлдә подполковниктың күңеленә һалҡын шик йүгерҙе, әммә ҡапылда көҙөклө фаразына үҙенең ышанғыһы килмәне. "Мәғәнәһеҙ уйҙар уйлап бушҡа борсолоп ултырам", — тип эстән генә үҙ-үҙенән көлдө һәм, Миргородскийҙы тиҙ генә табып килтерергә бойороп, йәйрәп ятҡан күрәм буйлап сапҡын ебәрҙе.

Әкренләп төш етте, көн кискә ауышты, ә Александрҙы таба алманылар. Ул һыуға төшкәндәй юҡ булды ла ҡуйҙы. Йәһәтерәк юлға сығырға ҡабаланыуҙан, ҡыҙыу табаға баҫҡандай ярһып йөрөгән Тимашев артабан ни уйларға ла белмәне. Алда торған ауырлыҡтарҙан ҡурҡып ҡасып киттеме әллә? Әллә... берәйһенең үсе булып... Бәлки, башҡорттарҙыр әле... Хәйер... Юҡтыр ҙа... Урындағы халыҡ Александр Иннокентьевичҡа ҡағылырға баҙнат итмәҫ. Киреһенсә, яҡын-тирәнең кешеһе, ул-был хәлдәрҙән шөрләп, ғәскәрҙең нисек тә был тирәнән тиҙерәк ҡуҙғалып китеүен теләп ята. Уның, Тимашевтың уң ҡулы булған писарының, бөртөк сәсе лә төшөргә тейеш түгел. Боже упаси! Уға ҡул күтәреү түгел, тура ҡарап һүҙ әйтергә ҡыймаҫ улар. Шулай ҙа ярҙамсыһының ҡайҙа китеп олағыуы мөмкин һуң?

Башҡаса көтөргә әмәле ҡалмай, түҙеме ҡаҡшаған Тимашев, ашығыс кәңәшмә ҡормаҡ булып, Ефим, Өстөкәй, Барсын һәм тағы бер нисә ышаныслы кешеһен йыйҙы.

— Әфәнделәр, һеҙгә үтә күңелһеҙ хәбәр еткерергә мәжбүрмен, — тине ул, барыһы ла килеп бөткәс, элеккесә урын тәҡдим итергә лә онотоп: — Әммә был насар яңылыҡты, ошондағыларҙан башҡа, әлегә бер эт тә белергә тейеш түгел.

Тегеләре, әлбиттә, эштең ниҙә икәнлеген һиҙенһә лә, белмәмешкә һалышып, өндәшмәй ҡалыуҙы хуп күрҙе.

— Бөгәсә төнөн Миргородский ғәйеп булды. — Сырайы һытылған подполковник шымтайып тороусыларға һынамсыл текләп торҙо. Ә йөҙ башлыҡтары бер-береһенә аптыраулы ҡараш ташлаған булдылар.

— Нисек инде… ғәйеп?! — Бер нәмә белмәгән Ефимка ғына ихлас ғәжәпләнде.

— Шулай, кис миңә инеп сыҡты, һөйләшеп ултырҙыҡ, иртән тороуға сатырында юҡ ине. Әле һаман юҡ.

— Хыянат түгелме икән? — Казактар башлығы шик белдерҙе.

— Бының булыуы мөмкин түгел, атаман. Александр Иннокентьевичҡа мин үҙемә ышанғандай ышанам. Ышанмаған хәлдә ярҙамсы итеп тә алмаҫ инем. — Подполковник ауыр көрһөндө.

— Шулай ҙа...

— Башҡаса бер ни ҙә әйтә алмайым, әммә ләкин шуныһы асыҡ: был хыянат түгел. – Тимашев атаманды бүлдерә һалды.

— Бәлки, теге старшинаның эшелер? — Өстөкәй ҙә үҙ уйын әйтте.

— Бысағымамы уға Миргородский? — Тотанаҡһыҙ Ефим урынһыҙға ҡыҙа башланы.

— Тыныс ҡына уйлашайыҡ әле, әфәнделәр. Барыһын ныҡлап үлсәп ҡарайыҡ. — Тимашев йөҙ башлыҡтарын сиратлап күҙҙән үткәрҙе. — Был тәңгәлдә һис уйламаған берәй аҫтыртын эштең булыуы бик мөмкин.

Байтаҡ ваҡыт кәңәш-төңәш итеүҙәренә ҡарамаҫтан, сатырҙағылар, уртаҡ фекергә килеп, писарҙың эҙһеҙ юғалыу сәбәбе серен һис күҙаллай алманылар.

Инде өсөнсө тәүлек үтеп, Миргородский һаман пәйҙә булмағас, аптыраған Тимашев һуңғы сараһын ҡулланып ҡарарға йөрьәт итте. Эйе, ошо сиреүҙә бер үҙе генә белеп, башҡа һис кемгә ышанып асылмаған сере бар уның. Серҙең асылы шунда: эшем эйәһе подполковник, әллә ҡасанғыһын алдан уйлап, йәй баштарында уҡ был тарафтарға йәшертен кеше ебәргән ине. Әммә, әлегә ваҡыты ул түгел тип, ҡотҡосоһон мәленән алда аҫҡыһы килмәгәйне. Хәҙер килеп бүтәнсә көтөргә мөмкинселеге лә, сыҙамлығы ла ҡалмаған Тимашев, үҙ кешеһен ҡурҡыныс аҫтына ҡуйыуын асыҡ аңлаһа ла, ни булһа шул булыр, тип аҫтыртын хәйләгә барырға ҡарар итте. “Бер йолҡошто юғалтыу – ҡотолғоһоҙ ҙур фажиғә түгел, һуғыш ҡорбанһыҙ булмай”, — тип фекер йөрөттө. Миргородскийҙы тапмай тороп ары бер аҙым да атламаҫҡа, тигән ҡәтғи ҡарарға килде ул. Һәр саҡ үҙенекен эшләргә күнеккән генералдың яҡынын ҡалдырып киткән хәлдә бына ғына торған ҙур карьераға алып барған юлдың бөтөнләйгә ябыласағын, уның өсөн яҡты киләсәктең өмөт кенә булып ҡалырын Тимашев яҡшы аңлай. Ә бит кисә генә ниндәй яҡын, йәнәшәлә генә ине ул карьера, ҡулыңды һон да тот һымаҡ ине. Әлеге күҙ ҡыҙҙырғыс байлыҡ, төштәренә кереп ыҙалатҡан алпауытлыҡ шулай уҡ бары хыялында ғына ҡалырмы икән ни? Юҡ, быға һис юл ҡуйырға ярамай! Әләм үбә-үбә анттар биреп шуның өсөн сыҡҡанмы ул сәфәренә? Нимә хаҡына төн йоҡоларынан ваз кисеп, ваҡытын да, аҡсаһын да йәлләмәй ошо армайҙарҙы үҙ яғына ауҙарып, бер бөтөн итеп туплап маташты? Аҙапланып Һаҡмар тамағынан башынаса ни өсөн килде ул сағында? Юҡ, ярты юлда туҡтап ҡалып, яҙа-йоҙа ғына ауырлыҡтар алдында тубыҡлана торған кеше түгел Тимашев. Кирелек, үҙһүҙлелек яғынан ул Рейнсдорптан һис тә ҡалышмай һәм башлап ебәргән оло эшенең аҙағынаса барасаҡ. Үлһә үлер, әммә ахырынаса тырышасаҡ, көрәшәсәк, боғаҙ сәйнәшеп һуғышасаҡ!

Иң шәптәрҙән һаналып, илленән ашыу яугир тупланған ышаныслы хауасын эйәртеп Һаҡмарбашҡа килгән подполковник урманға ҡасмай ҡалған барлыҡ кешене лә бер урынға йыйырға бойорҙо. Йыйылыусыларҙың күпселеге ҡарт-ҡоро ла бала-саға ине.

Бер ни булмағандай йыйын урынына китеп барған Куприянды күргән Биксәнтәй:

— Һиңә уларҙың күҙенә салынмай тороуың хәйерлерәк булыр ине, Килдеғол. Үҙ башыңа мажара эҙләп йөрөмә, — тип кире ҡайырмаҡсы итте.

— Һи-и, ҡайҙан белә улар минең кем икәнлегемде? — Куприяндың тәкәббер яуабы старшинаны ғәжәпкә ҡалдырҙы. — Минең дә, мирға сығып, яҡты донъяла ниҙәр булып ятҡанын белгем килә.

— Белгең килһә, урындағы ғауамдан сәүкә көтөүендәге ала ҡарғалай айырылып тораһың.

— Ярай, ышыҡтан ғына күҙәтермен. — Куприян, тиҫкәреләнеп, үҙенекен һөйләне.

— Мәйелең, әйттем дә бөттөм. Бер-бер хәл килеп сыға ҡалһа, үпкәләштән булмаһын, ишетһен ҡолағың.

Мәсетте уратып алған бейек ҡойма буйында боҫа биреңкерәп торған эре

һөйәкле, ҡаҡса Куприян-Килдеғолдо шунда уҡ сырамытып күңеле ирегән Тимашев: “Ҡырынып, сәсен ҡыҫҡартҡас, ҡайһылай үҙгәреп киткән, ә, шайтан!”, — тип уйлап ҡуйҙы. Шунан, алғараҡ сығып, янында торған Биксәнтәйҙән һораны:

— Йә, старшина, барыһы ла йыйылып бөттөмө?

— Йөрөй алғандары бөтәһе лә бында, — тине уныһы рыя ғына.

— Нисек инде йөрөй алғандары? Мин бит барыһын да йыйырға әмер биргәйнем, һин нимә...

— Ҡана һуң әмер биргәндән генә түшәктәгеләр тороп китһә. — Биксәнтәй тура төрттөрҙө. Уның кинәйәһеҙ әйткәнен аңлаған Тимашев күҙ ағы менән ҡарап ҡуйҙы, шулай ҙа башҡаса һүҙ көрәштереп торманы. Бары:

— Йә ярай, башлайыҡ булмаһа, — тине лә, ҡалҡыуыраҡ урынға баҫып, алдында тороусыларҙы һөмһөҙ ҡарашы менән байҡап алды. Уның ҡамсы бөлдөргөһө быуған һимеҙ ҡулы өҫкә күтәрелеү менән, үҙ-ара быш-быш килгән йәмәғәт тынып ҡалды. Ҡурҡыу ҡатыш ҡыҙыҡһыныу менән янған күҙҙәр ҡупшы кейемле, яурынына алтын эполет беркетеп, биленә затлы таштар менән семәрләнгән һаплы ҡылыс таҡҡан ҡупырыш подполковникка төбәлде.

— Кешеләр! — тип ҡысҡырҙы офицер, әйтерһең дә, ҡайнап торған әллә күпме халайыҡ алдында сығыш яһай. — Һәммәгеҙгә мәғлүм булыуынса, яңына үҙе кеүек йыйын йолҡошто туплай һалып, ауыр енәйәттәре өсөн язаға тарттырылған Петр Федорович III исемен үҙләштергән дәғи[127] Емелька Пугачев тигән әҙәм аҡтығы, разбойник Бөйөк батшабикә-әсәбеҙгә ҡаршы сығырға, өҫтәүенә, һөмһөҙ рәүештә алышҡа саҡырыу ташларға баҙнат итте. Әле боласы-башкиҫәрҙәр хөкүмәт ғәскәрҙәрен ваҡытлыса ҡыҫырыҡлап маташа. Ә беҙ ана шул ваҡытлыса ауыр хәлдә ҡалған ғәскәргә, шулай уҡ батшалыҡҡа тоғро кешеләргә ярҙам йөҙөнән китеп барабыҙ. Һеҙгә ҡарата бер ниндәй ҙә яманлыҡ та, боҙоҡлоҡ та ҡылғаныбыҙ юҡ һәм ҡылырға уйламайбыҙ ҙа. Беҙҙең маҡсат бер – тәғәйен ергә тиҙерәк барып етеү. Әммә ләкин был яҡтарҙа үҙ юлы менән тыныс ҡына китеп барыусы зыянһыҙ бер сиреүгә аяҡ салырға маташыусылар ҙа юҡ түгел.

— Асығыраҡ һөйлә, палкауник! — тип һөрәнләне кемдер халыҡ араһынан. – Тоҡ эсендәге ата бесәй нимәгә беҙгә?..

— Ҡыҫҡараҡ тот, эш емерелеп ята. — Икенсеһе уны йөпләй һалды. – Хәбәр тыңлап тора торған мәлме?..

— Асығыраҡмы? Тыңлағыҙ улай булғас. —Үҙҙәрен ярайһы уҡ ҡыйыу тотҡан ябай кешеләрҙең юғалып ҡалмауына аптыраған Тимашев ҡамсы һабы менән шап-шоп итеп итек ҡунысына һуғып алды. — Ҡыҫҡаһы шул: бынан өс көн элек, төндә, минең ярҙамсым ҡайҙалыр ғәйеп булды. Уны аманат итеп урлап алып киткәндәр, тигән фараз бар. Бәлки, шул яуыздарҙы һеҙ беләһегеҙҙер? Үҙегеҙҙең арала булыуы ла бик мөмкин...

— Нахаҡҡа рәнйетәһең, түрә!

— Һинең шүктә[128] наибыңдың бешмәй, ауыҙын асып йөрөгәненә кем ғәйепле?

— Йомортҡанан йөй эҙләп маташмағыҙ!

— Һеҙгә берәй этлек ҡылыр өсөн һылтау кәрәк!

Ғәм ризаһыҙлыҡ белдереп шаулаша башланы, башҡортсанан урыҫсаға

[127] *Дәғи — самозванец.*
[128] *Шүктә — булдыҡһыҙ, эшкинмәгән.*

тәфсир ҡылып торған Өстөкәй, өлгөрмәгәнлектән, күп һүҙҙәрҙе төшөрөп ҡалдырҙы. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, барыһын да аңлап, ҡапыл ғына асыуы ҡабарған Тимашев, онотолоп китеп, екереп ебәрҙе:

– Молча-ать! — Һәм, үҙенең эште боҙа яҙғанын һиҙеп, шул әҙере тыныслана төштө. Яһалма йомшарып: – Мин бит, нәҡ һеҙ ғәйепле, тимәйем. Арағыҙҙа, бәлки, белгән-күргән кеше булыр, ул-был шикле хәбәр ишетеүегеҙ ҙә бар...

Бер кемдең дә тауыш-тыны сыҡмағанын күргән Тимашев дауам итте:

— Бәлки, тәғәнле сит-ят әҙәмдәр күренеп ҡалғаны барҙыр? — Подполковник ҡапыл ғына Куприян-Килдеғол яғына боролоп ҡарауға, уныһы йәһәтләп ҡойма артына ышыҡлана һалды.

— Юҡсы, ишетелмәй ҙә, тойолмай ҙа һымаҡ былай. — Барыһы өсөн дә Ҡолтой ҡарт яуап бирҙе. — Ауыл ерендә ни, барыһы күҙ алдында ла баһаң.

Ике күҙе һуҡыр ҡартластың шул рәүешле аҡыл һатып тороуы еңел холоҡло Тимашевтың йәнә асыуын ҡабартты.

— Алдашаһығыҙ! — тине ул, уҫал йылмайып. — Ана тегендә, ҡойма аҫтында, боҫоп торған кем ул? Бер ҙә һеҙҙең зат-ботҡа оҡшамаған.

"Хәйерһеҙ ҡыл түбә! Тик торғанда эләкте, былай булғас. — Биксәнтәй эстән әсенде. — Өйҙә генә тик ултыр, тип әйтелмәһә, бер асыу".

— Кил әле бында, мужик! — Тимашев ҡамсы ишараһы менән Куприян-Килдеғолдо саҡырҙы. — Эйе, эйе, һин.

"Мужик"тың меҫкен ҡиәфәтендә подполковник ҡаршыһына килеп баҫыуҙан башҡа сараһы ҡалманы.

— Кем булабыҙ? — Тимашев ҡаты өндәште.

— Кил... Килдегул мин...

— Килдегул?! — Подполковниктың әүәл ҡаштары юғары сөйөлөп, сырайы һытылды, унан, әкренләп, яһалма йылмайыуға күсте.

— Эйе. – "Килдегул" бер ҡатлы булып ҡыланды.

— Килдегул! Һа-һа-һа... — Тимашев һыны ҡатып көлөргә тотондо, ә күмәк тауышлы хауасы уға ҡушылды. — Һа-һа-һа... һи-һи-һи... һо-һо-һо...

— Ҡарағыҙ әле, кешеләр! Зәңгәр күҙле, ерән сәсле Килдегул! — Тимашев оҙаҡ көлөүҙән атылып сыҡҡан күҙ йәштәрен һөрттө. — Хи-хи-хи, башҡортса һөйләшә белмәгән Килдегул.

— Башыңды ахмаҡҡа һалма, һорауға яуап бир! — Ефимка ла һүҙгә ҡыҫтырылды. — Юғиһә...

— Килдегул мин, ысынлап әйтәм... — Урыҫ йәнә ыҡ-мыҡ итте.

— Бында ни эшләп йөрөйһөң? — Тимашев кинәт етдиләнде.

— Беҙҙең яҡтарға аҙашып килеп сыҡҡан ул, подполковник. — Куприян өсөн Биксәнтәй яуап бирҙе. — Үҙе шулай ти.

— Аҙашып? Алдашмайһыңмы, старшина?

— Юҡты һөйләп тора, сволочь! — Ефим Куприянға ҡысҡырҙы.

— Мин... теге... — Куприян һаман ни әйтергә белмәгән кеше булып маташты.

— Молча-ать! Һин вор! Бунтовщик! Хужаңдан ҡасып йөрөйһөңдөр әле! Ҡулға алығыҙ үҙен! – Был юлы Тимашев та ҡыҙып китте.

Ике дәү казак "меҫкен" Куприянды шунда уҡ эләктереп, ҡулдарын артҡа ҡайырыуға, ҡаҫҡын, ыңғырашып, сырайын һытты.

— Йә инде, ни ғәйебе бар уның?

— Йөрөгән бер ярпы ла баһаң!

— Тиктомалға бәйләнеү тиһәң, ошоларҙы ҡуш...

— Күрәләтә нахаҡ эш ҡылалар!

Армайҙар ҡулына мәғәнәһеҙ рәүештә барып ҡапҡан “мужик”ты йәлләп, халыҡ йәнә шаулашырға тотондо.

Сәйер, Тимашев был юлы аҡырынып-баҡырынманы, күҙҙәрен ҡыҫа биреп, усал кинәйә менән:

— Ниңә борсолаһығыҙ? Ҡарарбыҙ, тикшерербеҙ, ғәйебе булмаһа, ебәрербеҙ, — тип аҫтыртын көләмһерәне. Ошо, тиген булмаған өҫтөнә, көслөк менән сыҡҡан яһалма йылмайыуҙа Биксәнтәй ниндәйҙер боҙоҡ ниәт, йәшертен ҡыянлыҡ һәм эскерлелек һиҙҙе, әммә эштең айышына ҡапылда төшөнә алманы.

Куприян-Килдеғолдо шунда уҡ эйәргә ҡуша арҡанланылар ҙа алып та киттеләр. Йыйылыусылар оторо геүләште, әммә бер ни ҡыла алманы. Барыһы ла аңлай: хәрби кәсепкә өйрәтелеп, яҡшы ҡоралланған хауаҫҡа ялан ҡул менән ҡаршы тороу – мәғәнәһеҙлек. Ҡорбандарын һөйрәкләгән армайҙар күҙҙән юғалып, оло юлдың саңы баҫылғас ҡына, таралыша башланылар.

Тимашевтың сәйер ҡыланышы, уның алдында Куприяндың үҙен үтә тыныс тотоуы һәм теләп тигәндәй армайҙар ҡулына бирелеүе Биксәнтәйҙе һеркелдәтте. Был шикле эштә ниндәйҙер яман уй, алдан әҙерләнгән боҙоҡлоҡ барын тойоп, ҡапыл һиҫкәнде.

Лагерға әйләнеп ҡайтҡас, Тимашев “тотҡон”до туп-тура үҙ тирмәһенә индерергә бойорҙо. Тән һаҡсыларына ла, шәйләктәргә лә сығып торорға ҡушып, тирмәгә берәүгә лә үтергә ярамағанлығы хаҡында ҡәтғи иҫкәртеп ҡуйҙы. Йәнәһе, һорау алыуҙы үҙе башҡара. Тирмәлә, ниһайәт, икәүҙән-икәү генә ҡалғас, Тимашев:

— Йә, һаумы-шәпме, Иван! — тип Куприянды туғандарса ҡосағына алды. — Шайтан аҙаш!

— Һаумы, Иван Лаврентьевич! — “Ҡаҫҡын”дың күҙҙәре янып китте.

— Хәлдәрең нисек?

— Һеҙҙең фатихала, рәхмәт.

Шыпырт ҡына һөйләштеләр. Тимашев ым менән аҙашын өҫтәл ишараты янына саҡырҙы.

— Әйҙә, ултыр әле. Әүәл тамаҡ сылатып алайыҡ. — Тимер көрөшкәләргә ғолҡолдатып затлы аҡ шарап ҡойҙо ла береһен аҙашына тотторҙо: — Йә, һин һөйлә, мин тыңлайым.

— Хоҙай ярҙамы менән йөрөп ятҡан булына, ваше превосх...

— Ярай, артыҡ ҡупайтма, Иван, үҙебеҙсә генә әйт. — Тимашев, йәнәһе, тәрбиәле кеше, әңгәмәләшен бүлдергән булды.

— Әлегә бер кем бер ни һиҙмәй һымаҡ, Иван Лаврентьевич.

— Хуп, бик мәслихәт. — Ҡәнәғәт подполковник көрөшкәләрҙе сәкәштереп алды. — Йә, тотоп ебәр. Имен-аман осрашыу хөрмәтенә! Һауыттың хөртөрәк икәненә иғтибар итмә. Походта саҡта ошоноһо ла ярап тора инде.

— Затлыларын бунтты баҫҡас күтәрербеҙ, Иван Лаврентьевич.

— Шулай була күрһен!

Көрөшкә төбөндәген тауыш-тынһыҙ ғына йотоп ҡуйҙылар.

— Ух, ҡәһәрең, шәп, ә! Ысын вино тәмен онотоп та барыла. — Куприян башын һелкеп, иңбашын йыйырҙы.

— Да, бар ине заманалар. Эй-й, бер мәшәҡәт белмәгән, ғәмһеҙ саҡтар... — Тимашев уйсанланып китте.

— Ә мин ул ваҡыттарҙың оҙаҡламай тағы килеренә ышанам. — Куприян, йәпәтәй, уңайлы мәлде файҙаланып, ярамһаҡлана һалды.

— Бөтөн конспирация ҡанундарын боҙоп, ни өсөн “ҡулға алған”ды беләһеңме, дуҫ? — Подполковник йөҙөнә соғоллоҡ ғәләмәте сығарҙы.

— Самалайым һымаҡ. — Куприян да кинәт етдиләнде.

— Иван Сергеевич, ҡәҙерлем, беҙ бит уйламағанда-итмәгәндә тотҡарланып ҡалырға мәжбүр. Александр Иннокентьевичты урлауҙары тураһындағы хәбәр уйҙырма түгел, ә ысынбарлыҡ, ҡот осҡос хәҡиҡәт. Писарҙы эҙләп тапмай тороп, артабан юлымды дауам иткем килмәй. Тәнем дә, йәнем дә тартмай. Бына шулай.

— Тәғәйен урынға ваҡытында барып етә алмай һуңлаһағыҙ, оҡшармы һуң, Иван Лаврентьевич? Баштан һыйпамаҫтар бит.

— Ул ғынаһын аңлайым, шуның өсөн ҡабаландырам. — Тимашев, урынында ултырып сыҙамай, тегеләй-былай йөрөштөрөп алды: — Күреп тораһың, бөгөн хатта икебеҙ генә белгән йәшертен эште лә ҡурҡыныс аҫтына ҡуйырға тура килде. Нисек итһәң ит, Нуштаев әфәнде, әммә Миргородскийҙың ҡайҙалығын асыҡла. Бер нәмәгә ҡарамай, аңлашыламы? Бер нәмәгә ҡарамай! — Тауышында рәсми тон яңғырап киткән подполковник йәшел күҙҙәре менән Куприянды быраулаңы. — Белеп торам: Урал ҡырағайҙарында ул, башҡаса бер ҡайҙа түгел. Беләм, әммә йөҙҙәренә бәргәндәй дәлилем юҡ. Шуға күрә йәһәтерәк ептең осон табыу кәрәк.

— Старшиналарының нескә урынын ҡапшап ҡарағанда...

— Уның менән эш сығара алыуың икеле. Үтә һаҡ әҙәм, бигерәк соғол, яҡын барыуы ҡыйын. Алабарманланып үҙеңде ваҡытынан алда асып ҡуйыуың ихтимал. Уяулыҡты юғалтыу ярамай. —Тимашев уйланып торҙо. — Башҡа юлын эҙләргә кәрәк, дорогой, башҡа юлын. Барҙыр бит ниндәйҙер юлы?!

— Иван Лаврентьевич, мин һаман аңлап етмәйем: белекһеҙҙәрҙең Миргородскийҙы аманат итеп алыуҙарының маҡсаты нимәлә һуң?

— Әйтәм бит, аҫтыртын кеше, тип Бикчентай Юламановты, һинең башыңа килмәгәндә ана ул гөман[129] иткән.

— Шулай уҡмы?

— Эйе, Александр Иннокентьевичһыҙ артабан ҡуҙғалып китә алмаҫымды нисектер һиҙеп алған. Уның маҡсаты – минең сиреүҙе ары үткәрмәү, төшөнәһеңме?

— Ана нисек! — Иван Сергеевич ихлас ғәжәпләнде. — Ә Миргородскийһыҙ китеп барһағыҙ?

— Булмай, Иван. — Тимашев ауыр көрһөндө. — Үҙ улым һымаҡ күрәм мин Александрҙы, — тип шылдырҙы шунан. — Йәнә лә... генералға, Рейнсдорпты әйтәм, иҫән-һау көйө алып ҡайтырға һүҙ бирҙем. Офицер һүҙе. — Быныһында дөрөҫтө әйтһә лә, Миргородскийҙан былайыраҡ үҙен ҡайғырта ине.

— Улай икән, хәҙер төшөндөм.

— Төшөнгәсең, бөгөн үк, иң һуңы — иртәгәнән дә ҡалмай Александрҙы табырға кәрәк. Кем белә, беҙҙең яҡты киләсәкте нәҡ ошо хәл итер...

— Әгәр ул Һаҡмарбашта булмаһа?

— Шунда! Бүтән бер ҡайҙа ла түгел! Һәм ошо ҡара эште ойоштороусы әлеге старшина икәнлеген тәнемдең барлыҡ күҙәнәктәре менән һиҙәм, тик, әйтеп торам бит, иҫбат итерлек дәлилем генә юҡ! Аһ, ҡомағай Рейнсдорптың ҡәтғи фарманы булмағанда!..

— Минеңсә, был тәңгәлдә һәр яҡлап уйлап ҡарау кәрәк. Һәм абай булырға...

---

[129]*Гөман — һиҙемләү, фараз итеү.*

— Абай булырға, имеш! Саманан тыш һаҡланам, тип тик ят әйҙә! — Ошоғаса тыныс күренергә тырышҡан Тимашев, тәбиғәтенә тоғро ҡалып, ҡыҙа башланы. — Бөгөнгө көнгәсә беҙҙең эшкә ниндәй файҙа килтерҙең әле? Ни ҡырҙың, ни фәтүәң булды?

— Ваше превосходительство, үҙегеҙ шулай ҡуш...

— Эйе, һүҙҙәремдән баш тартмайым, һаҡ булырға ҡуштым, әле лә шуны талап итәм. — Подполковник әңгәмәләшен тупаҫ бүлдерҙе. — Әммә ләкин бер аҙ ҡыйыулыҡ та һис ҡамасауламаҫ.

— Боласылар араһына һиҙҙермәй генә баш тығыуы – үҙе ҙур уңыш, подполковник, ҡәҙерлем. — Куприян, юхаланып, ҡойроҡ болғаны. — Изге эшкә тотоноуыма яңы. Фәтүәм тейер, кәрәгем булыр әле.

— Ниндәй боласылар? Былдағылар әле, баш күтәреп, бандиттарға ҡушылмаған. Әлегә төптө ябай-ярпы араһына ғына барып индең.

— Уныһына һүҙем юҡ. Бөгөнгә, йәғни хәҙергә, тыныс ятҡан кеше булалар. Йәнәһе, ҡайнап торған ваҡиғаларға ҡарата битарафтар. Тик килер бер көн: бар нәмәне ҡырып-һепереп, шашынған даръяға барып ҡойған йылғасыҡтай, болаға былары ла ҡушылыр. Ана шунда эш тә табылыр. Эш әле күп буласаҡ. Кәрәгем тейер әле минең һеҙгә, Иван Лаврентьевич, тейер.

Тимашев, тәү күргәндәй, Куприян-Килдеғолға аҡайҙы. Тегеһе лә керпек сәнсеп ныҡ торҙо. Ҡараштары менән бер-береһен еңә алмағас, подполковник йомшара төшкәндәй булды:

— Һин, Иван Сергеевич, шулай ҡыҙып барғаным өсөн үпкәләмә. Һуңғы осорҙа һәр төрлө ваҡ-төйәк уңышһыҙлыҡтар күбәйеп китте, нервылар ҡаҡшай, күрәһең, – тип әллә зарланып ҡуйҙы, әллә үкенес белдерҙе.

— Аңлайым һеҙҙе, Иван Лаврентьевич.

— Ошоғаса берәй нәмәгә торошло ни ҙә булһа асыҡлай алдыңмы? —Бөтөнләй тынысланған Тимашев ҙур ҡулъяулығы менән тирләгән битен, һимеҙ елкәһен һөрттө. — Ғауамдың тын алышы нисегерәк?

— Ҡояш аҫтында ятып ҡураған һалам ише. Бәләкәй генә осҡон да етә, гөлт итеп тоҡанып китәсәк, шуны асыҡланым. Хәл ҡырҡыулаша.

— Гөлт итеп ҡаласаҡ, тиһең инде?

— Так точно-с, подполковник әфәнде! — тип кәпәренде Куприян.

— Осонмай тор, хорунжий. — Тимашев бөгөн тәү тапҡыр Куприян Нуштаевҡа хәрби званиеһы менән өндәште. — Әлегә иҫ китмәле асыш яһамағанһың. Ана шул осҡонға юл ҡуйырға ярамағанлығын аңлайһыңдыр?

— Уныһын ғына аңлайбыҙ ҙа ул.

— Шунан, тағы нимә?

— Ошо ауыл халҡының Урал төпкөлөндә оло йәйләүе барлығын белә алдым.

— Хуп.

— Әле, Александр Иннокентьевичты шунда олаҡтырманылармы икән, тигәнерәк уй тыуып тора.

— Йәйләүҙәре ҡайһы тирәлә? — Ҡараштары һүнә барған Тимашевтың күҙҙәрендә өмөт саҡҡылары күренеп ҡалды. – Алыҫмы?

— Уныһын тел ярҙамында ғына аңлатып булмаҫ. Ҡыҫҡаһы, үҙ күҙҙәрең менән күрмәй тороп, табырлыҡ түгел.

— Картанан күрһәтә алаһыңмы? — Тимашев өҫтәлгә таушалып бөткән ҡалын ҡағыҙлы хаританы йәйеп һалды. Куприян, оҙаҡ ҡына текәлеп тороуға ҡарамаҫтан, яҡынса булһа ла йәйләү урынын күрһәтә алманы. Урал төпкөлдәре

унда өҫтән-мөҫтән генә төшөрөлгән ине. Ә йәйләү урынлашҡан Яманйылға буйҙары, ни сәбәптәндер, бөтөнләй күрһәтелмәгән.

— Унда барып етер өсөн күпме ваҡыт кәрәк? —Шымсыһының картала бер ни аңламағанын күреп үртәлгән подполковник төпсөнөүен дауам итте.

— Йәйләп барғанда... бер тәүлек.

— Йәйләп йөрөр мәл түгел, Иван Сергеевич, ваҡыт тар, миңә Белорецкиға ҡуҙғалыр кәрәк. Тиҙерәк ҡуҙғалырға!

— Аңлайым.

— Хәҙер үк ҡайтаһың да был эшкә ихласлап тотонаһың. Һәм... ҡыйыуыраҡ, тәүәккәллерәк бул! Быны мин түгел, бөйөк Рәсәйҙең киләсәге талап итә.

Куприян иртәгәһен таң менән старшинаның ҡаршыһына баҫты. Биксәнтәй урыҫтың әҙәм күргеһеҙ итеп "туҡмалыуына" ҡарамаҫтан, иҫән-һау әйләнеп ҡайтҡанына эстән генә ҡыуанып:

— Ныу матурлағандар үҙеңде, ә! — тип йылмайған булды.

— Булды инде, старшина.

— Нимә өсөн шул тиклем эшкәрттеләр һуң? — Биксәнтәй эйәге менән ымланы. — Ниндәй ғәйебеңде таптылар?

— Хужаңды үлтереп, ҡасып йөрөйһөңдөр әле, тип бәйләнделәр, ләкин бер нәмә лә иҫбат итә алманылар. Бына, ебәрергә мәжбүр булдылар. — Куприян-Килдеғол шәп кеше булып ҡыланды.

— Артабан йәшәгең килә икән, армайҙар үтеп киткәнсе күренмәй генә ятып тор.

— Инде белдем, старшина. – Һыҙырнаған битенә ҡулын тейҙереп алған Куприян сырылып ҡуйҙы. — Мине төпкөлгәрәк йәшереп булмаҫмы? Юғиһә, берәй танығаны килеп сыҡмаҫ тимә...

Биксәнтәй, ҡапыл күтәрелеп, урыҫҡа һынамсыл да, көҙөкләнеп тә ҡарап алды.

— Ниндәй төпкөл тағы? — тине, үҙенең төҫө үҙгәреп китте.

— Бөткәнме ни Уралда ышыҡ урын? Мәҫәлән, йәйләүегеҙ тирәһенә.

— Ә беләһеңме, Килдеғол, һинән башҡа унда бер урыҫтың да аяҡ баҫҡаны юҡ.

Быныһын Куприян-Килдеғол белмәй ине. Үҙе осраҡлы ғына барып тарыһа ла, изге Сатра еренә кафырҙарҙың аяғы баҫырға тейеш түгеллеге ысынлап та уға билдәһеҙ ине. Ул ғына ла түгел, Сатра серен асҡан һәр ят әҙәмдең ғүмере ҡыйылырға тейешлеге хаҡында ла әлегә белмәй Куприян. Борон-борондан килгән ошо ҡаты йоланың әле йомшара төшөп, шуның өсөн генә тере ҡалғанлығын уйлап та бирмәй.

Ҡаҫҡындың тел төбөндә ниндәйҙер шипкерт бар: ошолай уйлаған Биксәнтәйҙең күңеленә шом йүгерҙе. Урыҫ менән юлдаш булһаң... Әллә яңылышамы? Үҙ кешеләрен шул хәлгә ҡалдырғансы ҡыйнамаҫтар ҙа...

— Ярай, бер нәмәһен уйларбыҙ, — тине икеләнеүен белдермәҫкә тырышҡан Биксәнтәй. — Ауылда ҡалыуы һинең өсөн ысынлап та ҡурҡыныслы.

Шул көндә үк Батырхан һәм башҡа ышаныслы кешеләре менән кәңәш иткән Һаҡмарбаш старшинаһы ҡәтғи һығымтаға килде: тамам ышанысты аҡламай тороп, Куприян-Килдеғолдо изге һаналған атай-олатайҙар төбәге Сатраға яҡын ебәрмәҫкә.

— Ана, теге баҙын рәтләп алһын да хәҙергә шунда йәшәп торһон, — тине һарыуы ҡайнап киткән Батырхан. — Артабан күҙ күрер.

— Үҙемдең дә һис яҡынлатҡы килмәй уны Сатраға. — Биксәнтәй һөйләшеүҙән ҡәнәғәт ҡалды. — Әле һин дә шулай тип торғас, бер аҙ тынысландым. Күңелем һиҙә минең, Батырхан, ниҙер булыр һымаҡ. Кәнде генә булыр...

— Баштан уҡ тәғәнле күренгән ине был Куприян тигәндәре, әле лә бер ҙә һыным теймәй. – Батырхан старшина һүҙҙәрен йөпләп ҡуйҙы.

***

Казак ғәскәре башлығы есаул Ефим Боюнов теге көн, Иҫән ауылы янында торғандарында, үҙенә ҡарата әйтелгәндәрҙе һис онота алманы. Самаһыҙ намыҫсан, һеркәһе һыу күтәрмәҫ ҡаҫта эсле казактың бәгеренә уҡ булып ҡаҙалған һүҙҙәр, йәпһеҙ төйөр ише, йөрәгеп өйкәп тик торҙо. Подполковник Тимашев, ярай инде, үҙ кеше, затлы әҙәм, ә бына Батый тоҡомо Өстөкәй менән ҡыҫыҡ күҙ дала пәрейе Барсынға ни ҡалған? Ауыҙ күтәреп, казак һынлы казакка ҡаршы өндәшергә баҙнат итеп торалар! Иң ғәрләндергәне шул: ике ярпының өндәре тығылырлыҡ бер ни эшләй алманы ул көндө... Йолҡоштар! Үҙҙәре ише йөҙәр фәҡир-фоҡараға баш булғандар, имеш. Үҙҙәрен әллә кемгә ҡуйып осоноп йөрөгән Өстөкәй менән Барсынды нисек тә урындарына ҡуйырға ҡарар иткән казак уңайлы мәлде көтә ине. Тик Өстөкәй ҙә, Барсын да ул уйлағанса уҡ иҫәр булып сыҡманы. Хатта, Ефимдың аҫтыртын ниәтен һиҙенгәндәй, берләшә һалып, ҡушаға булып алдылар. Ошоно күргән казак атаманының оторо һарыуы ҡайнаны.

Алай командиры ярҙамсыһы Миргородский күҙ менән ҡаш араһында ғәйеп булғас та, Ефимдың башына бер шәп фекер килде. “Бына ла баһаң ул әллә ҡасандан көткән уңай осраҡ! Уның һымағының башҡаса булмай ҡуйыуы мөмкин. Бындайын ҡулдан ысҡындырыу ярамай”. Һәм есаул Боюнов кисекмәҫтән эш итергә ҡарар ҡылды.

— Рөхсәтме, Иван Лаврентьевич? — тине ул, Тимашевтың тирмә япмаһын асып.

— Ә-ә, Ефим! Әйҙә уҙ, рәхим ит. — Уйҙарға батып, бойоҡ ҡиәфәттә өҫтәл артында ултырған Тимашев, урынынан ҡуҙғалмай ғына, килеүсегә боролоп ҡараны. — Ғүмерең оҙон булыр, һине иҫкә төшөрөп кенә ултыра инем әле.

— Шулаймы? Уйҙарығыҙ насарҙан түгелдер, тип өмөт итәм.

— Ни йомош менән йөрөп ятаһың, есаул? — Кәйефе шәптән түгел Тимашев рәсми тонға күсте. – Әйтер һүҙең бармы әллә?

Боюнов, уратып-суратып тормаҫтан:

— Александр Иннокентьевичтың сәйер генә ғәйеп булыуына ҡарата бер фекер тыуып тора, — тине.

— Ҡыҙыҡ... Йә, йә, тыңлайым...

— Теге ҡапыстарҙың эше түгелме икән?

— Кемдәрҙе күҙ уңында тотаһың? — Подполковник аңламағанға һалышты.

— Ялмауыҙ Өстөкәй менән Барсынды әйтәм. Үҙ-ара килешеп, шулар ҡылманылармы икән әлеге яуыҙлыҡты?

— Был сетерекле мәсьәлә буйынса килеүең маҡтауға лайыҡ, әлбиттә, ләкин бушҡа борсолаһыңдыр, тип уйлайым. — Тимашев атамандың күҙҙәренә ҡараны. — Ҡурҡҡанға ҡуш күренә, тигәндәй...

— Ә мин ҡурҡмайым, подполковник әфәнде. — Боюновтың ҡарашы кинәт уҫалланды. — Өркәктәрҙән түгелмен, үҙегеҙгә билдәле.

Сардарының кинәт көйө киткәнен тойған Тимашев уйламайыраҡ ысҡындырыуын аңланы, буғай:

— Тыныслан, ҡәҙерлем, — тип Ефимдың арҡаһына ҡағылды. — Дөйөм эш

тип янып йөрөүең насар түгел. Әммә ләкин бөгөнгө болғауыр, ниндәйҙер ят бауырға ғынамы, йән дуҫыңа тулыһынса ышаныуы ҡыйын заманда сиреүҙәштәреңә шик белдереп килеүең бер ҙә ғәжәп түгел.

— Дуҫын белмәйем, ә тегеләргә ышаныс юҡ. Татары аҫтыртын булһа, Борҡан жунғарҙары борон-борондан ике йөҙлө, быны һеҙ миңә ҡарағанда яҡшыраҡ беләһегеҙ.

— Беләм. Ләкин, ышаныслымы улар, юҡмы, көнөң ҡалғас, күнергә тура килә. Әлегә... — Тимашев ярым бышылдауға күсте. — Ана, боласы ворҙарҙы пыр туҙҙырып, фетнәсе-самозванецты ҡулға төшөрәйек әле, унан күҙ күрер... — Подполковниктың мәкер ҡатыш хәйләкәр йылмайыуы уҫал көлөмһөрәүгә күсте. — Төшөндөңмө, атаман?

Төшөнмәй буламы Ефим Боюнов?! Әлбиттә, төшөндө. Татар менән ҡалмыҡты башҡортҡа ҡаршы ҡуйып, Тимашев бер юлы ике ҡуян тотмаҡсы. Хәйер, ул ғынамы, хатта Әбей батшаның, уның ҡулы аҫтындағы бөтә Рәсәй дәүләтенең дә аҫтыртын сәйәсәте шуға ҡоролған түгелме ни? Беренсенән, әҙме-күпме булһа ла, "шәп кешеләр"[130] йәлеп ителеп, "верный" ғәскәр туплanһа, икенсенән, халайыҡтар араһында хөсөт күпсетеп, бер-береһенә ҡарата дошманлыҡ орлоҡтары сәселә. Ана шулай серек империя әллә ҡайҙағы киләсәген бөгөн ҡайғыртып яткан көнө. Тәү ҡарауға подполковник үҙенсә дөрөҫ эшләй кеүек, ә төптәнерәк фекер йөрөткәндә, ул бары үҙ мәнфәғәтен генә ҡарай. Ҡыҫҡаһы, аумаҡай ҡалмыҡ менән татарға кәрәгенән артыҡ ышана. Етмәһә, шул мосолман менән борҡандарҙы православный казактарға тиң күрә һымаҡ. Ошоноһо инде Ефимға айырата оҡшамай...

— Үҙ-ара ыҙғышҡа юл ҡуймай тороу хәйерле. — Тимашев Ефимдың сәйер уйҙарын бүлдерҙе. — Дөйөм эште алға ҡуйып, әүәл полк эсендә тәртип булдырайыҡ.

— Казактар араһында тәртип зарланырлыҡ түгел, минеңсә.

— Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, йәмһеҙ осраҡтар ҙа юҡ түгел...

— Йәғни...

— Төнөн тикшергәндә туптар янындағы шәйләк һаҡсыһы бер ни белмәй йоҡлап ята ине. Ә туптарҙы тик казактар ғына һаҡлай... —Атаманына мыҫҡыл ҡатыш һынамсыл ҡараш ташлаған Тимашев һүҙҙәренең тәьҫирен көттө. — Ошонан сығып, инородецтар йәнә берәй этлек ҡылмаҫ, тип кем әйтә ала, есаул?

Ефим Боюновтың күҙ алдында йөҙө ағарынып, ҡобараһы осто. Ул, быума тотҡан кешеләй ҡалтыранып, ыҫылданы:

— Йоҡлап ята ине, тинегеҙме?

— Эйе. Рәхәтләнеп...

— Кем икәнлеген әйтә алаһығыҙмы инәһен эт... талағандың?

— Уныһы мөһим түгел, Ефим, — тине Тимашев тыныс ҡына. — Иң аяныслыһы – ошо хәлдең казактар араһында булыуы. Минең өмөт бағлаған берҙәнбер иң ышаныслы сиреүем араһында.

— Әйтегеҙ, кем ул? — Ҡалтыранып киткән Ефим ҡабатлап һораны.

— Уныһын үҙегеҙ асыҡларһығыҙ.

— Асыҡларбыҙ, ваше превосходительство. Мотлаҡ асыҡларбыҙ.

— Тик, үтә ҡыҙып китеп, эште боҙа күрмә, есаул. — Тимашев, атайҙарса хәстәрлек күрһәткән кешеләй, борсолған булды. — Уйламағанда казактарҙы үҙеңә ҡаршы ҡуйыуың бар.

[130] *"Шәп кешеләр"— батшалыҡҡа тоғро башҡорттар.*

— Тәкәллефләнеп тороу арҡаһында беребеҙҙе юғалтҡанды онотмайыҡ, подполковник. — Ефим юрый Тимашевтың иң ауыртҡан еренә тейҙе.

— Ҡуй, атаман. Былай ҙа эс бошоп торғанда... – Хәҙер инде тегеһенең һарыуы ҡайнай башланы.

— Йәнен алам мин ул йоҡо сүлмәгенең! Башҡаһына һабаҡ булыр! – Ене ҡуҙғалыуҙан йоҙроғон төйнәгән Ефим өтә баҫып сығып китте.

“Йоҡо сүлмәге”н тиҙ таптылар. Йөҙ башлығы шунда уҡ, үҙ белдеге менән, дәү кәүҙәле армайын[131] да тәғәйенләне. Көнйәлә баш, кәгез генә казак йоратын ҡайын һайғауға ҡуша бәйләп, бөтә ғәскәр алдына һуҙып һалдылар.

— Күрегеҙ! — тине Ефим, ажарланып, — бурысына төкөрөп ҡарап, ышанысты аҡламаған һәр ҡайһығыҙ менән дә ошолай буласаҡ!

—Ни эш боҙған һуң ул?

– Ғәйебе шулай ауырмы икән?

– Эй-й, ошо атамандың! Кешесә ҡыланыр көнө булырмы икән...

Аптыраршта ҡалған сиреү геүләй башланы, берәү бер ни белмәй.

— Был асыҡ ауыҙ һағауылда йоҡлап ятҡан! — тип ҡыҫҡырҙы Ефим. — Иң яуаплы урында!

— Мин йоҡламаным, ятып ҡына торғайным. — Аяҡ-ҡулы бәйле меҫкен, асырғанып, арзу ҡылды[132], яҡлау эҙләп башҡаларына ҡараны. — Башҡаса улай ҡабатланмаҫ... ант...

— Имеш, ятып торған берәү! Барыбер түгелме ни?! —Ярһыуынан сәсрәп, ярылыр хәлгә еткән атаман һаҡаллы армайға аҡырҙы: — Нимә ҡарап тораһың, яр үҙен!

Сей ҡайыштан ишелгән шыйыҡ ҡамсы шыйлатып һауа ярып уҙҙы ла, яланғас тәнгә бәрелеп сарт итеүгә, сырмалған байғош үҙәк өҙгөс итеп шарылдап ебәрҙе. Ҡарап тороусыларҙың байтағы, ошо вәхшилекте күрмәҫ өсөн, йөҙөн ситкә бора һалды.

— Ҡарап тороғоҙ! Фәһем алығыҙ! Исмаһам, һағауылда торған килеш төнәр алдынан уйланырһығыҙ! — тип осондо ҡәнәғәтләнеүен йәшерә алмаған Ефим. Әҙәм һынлы әҙәмде ошо рәүешле яфалау уға оло ләззәт бирә ине, буғай.

Йонсоу һаҡсының, йоҡлап ятыуынан былайыраҡ, үҙенә һүҙ тейҙереүе атамандың йәнен ныҡ көйҙөрҙө. Подполковник алдында оятҡа ҡалдырып, аҡланырға мәжбүр иткәненә үртәлде ул. Сәбәбе ябай ғына: Миргородский табылмаған хәлдә, Ефим Боюнов уның урынында инде үҙен күрә башлап, Тимашевтың урынбаҫары булып алыу хыялын йөрөтә ине. Былай барһа, йәшертен хыялдың тормошҡа ашмай ҡалыуы ла бар ҙа баһаң. Эйе, әлеге осраҡтан һуң юғары вазифаның тәтемәй ҡуйыуы бар.

— Үлтерәһең бит, атаман! — Ҡалын тауышлы олпат казак йылан ише борғаланып-һырғаланған иптәшен яҡлашмаҡсы итте. — Ебәр, ҡыҫҡырырлыҡ та хәле ҡалманы!

– Йонсоп киткәндер, бисара...

– Малай ғына бит әле, йәл түгелме?..

– Етәр, армай!..

– Юғиһә, хәҙер үҙеңде шул көнгә төшөрәбеҙ!

– Дөрөҫ! Үҙен ярырға кәрәк, үҙен!

Сафҡа баҫҡан көйө ирекһеҙҙән ошо ҡот осҡос күренешкә тамаша ҡылып

---

131 *Армайын — палач, яза биреүсе.*

132 *Арзу ҡылыу — ялбарып инәлеү.*

тороусыларҙың ҡайһыһы өгөт-нәсихәт уҡыһа, бәғзеләре асыулана башланы. Аяу белмәҫ ҡайыш киҫәге сарт-сорт килгән һайын улар ҙа ҡыҙа бара. Ниһайәт, түҙемлектәре ахыр сиккә еттеме, теге дәү кәүҙәле казак атылып килеп сыҡҡан ыңғайға ҡулындағы ҡамсыны һыпыра тартып алды ла армайҙың арҡаһына һыҙырҙы. Уныһының хатта тирләүҙән һыртына йәбешкән күлдәге теленеп китеп, һырт буйында ҡанлы һыҙат хасил булды. Йәлләд, ауыртыуға сыҙаша алмай сәбәләнә-сәбәләнә, ғәм араһына инеп юғалды. Шул арала бер нисә казак инде иҫен юғалтҡан бәхетһеҙ егеткә ярҙамға ташланды.

— Туҡтағыҙ! — Ефим, көсәнеп, боғаҙ йыртты.— Назад!

Әммә уны ишетеүсе лә, тыңлаусы ла булманы. Шунда уҡ йомарлап алған ғәйрәтле ҡулдар ҡанһыҙ есаулдың үҙен ергә йыҡты. Салҡан ауып барған Ефимдың күҙенә мыҫҡыллы йылмайып торған Барсын менән Өстөкәй салынып ҡалды. Уның өсөн иң әрнеткесе ошо булды.

Подполковник Тимашев килеп өлгөрмәгәндә, атаман менән ни булырын берәү ҙә әйтә алмай ине. Эйе, күпмелер мәлгә Ефим Боюновтың яҙмышы ҡыл өҫтөндә ҡалды. Ошоно күргән Тимашев:

— Туҡтатығыҙ самосудты! Кисекмәҫтән туҡтатығыҙ!— тип бар көсөнә екеренә-екеренә, пистолеттан һауаға атҡандан аҙаҡ ҡына сикһеҙ ярһыған казактар, ҡапыл иҫтәренә килгәндәй, шыңшып ятҡан атаманды ҡалдырҙылар ҙа теләр-теләмәҫ кенә урындарына баҫтылар.

— Низағты бөтөрөүҙе талап итәм! — Тимашев йәнә бер ҡысҡырҙы ла өйәҙәп ятҡан Ефим янына барҙы.

Әле генә әтәс ише кәпәренеп йөрөгән атаманға ҡарап тороуы ҡыҙғаныс: уның ҡупшы кейеме йыртҡыланып, тетелеп бөткән, үҙенең бите-башы ҡанға туҙып, йомарланған бөҙрә папахаһы сирәмгә осоп төшкән. Көслөк менән тороп, аяғына баҫҡан Боюнов һыҙланыуҙан былай ҙа йәмһеҙ сырайын һытты. Ҡан һауған күҙҙәрен яман аҡайтып казактар сафын байҡаған есаул ҡоторонған йыртҡыс хәлендә ине. Унан хатта Тимашев та шөрләй биреп ҡуйҙы.

— Ә-ә, һеҙ шулаймы?! Бунт күтәрәһегеҙме? Антығыҙға хыянат итәһегеҙме, һатлыҡтар? — тип тамаҡ төбө менән ғыжылданы.

— Үҙең ғәйепле, атаман. — Бола сәбәпсеһе йәнә тауыш бирҙе. — Нишләп бер малайға ҡул күтәрәһең?

— Молчать, дурак! Һинең ни эшең бар унда, эт?! — Боюнов, аҡылынан шашҡан кешеләй, билғауына ҡыҫтырылған пистолетын һурып алды ла, тирәяҡтағылар ниҙер аңлап өлгөргәнсе, тегенең эсенә терәп тигәндәй атып ебәрҙе. Ыһ иткән ҡарт казак ҡан урғылған ҡорһағын ҡосаҡлап ергә ауҙы, бер-ике тыпырсынды ла тынып ҡалды. Ә Ефим теш араһынан:

— Кем дә кем бындағы тәртип менән риза түгел, кем минең менән килешмәй бунт күтәреп ҡаршы сыға, барығыҙ менән дә ошолай буласаҡ! — тип һыҙғырҙы.

Күҙҙәре ярым асыҡ килеш ятҡан йәнһеҙ иптәштәренә текәлеп шаҡ ҡатҡан сафтағылар был юлы өндәшмәй ҡалыуҙы хуп күрҙе: яҙмышты икенсе тапҡырға һынап ҡарауы уйын эшме...

Көтөлмәгән сыуалыш менән уның аянысл ахырынан телһеҙ ҡалған Тимашев, үҙенең артынан эйәрергә ҡушып, Боюновҡа ҡул ишараһы яһаны. Аулаҡ тирмәһенә ингәс, ҡара янған Ефимға боролоп:

— Былай ҡыланһаң, сиреүһеҙ тороп ҡалаһың бит, атаман, — тине, — тағы бер иҫкәртәм: саманан артыҡ ҡыҙыуһың.

— Буйһона белмәгән һатлыҡтарҙы енем һөймәй! Һүҙен һүҙ итмәгәс, ниңә сардар хәрби хеҙмәттә?

— Ул яғынан дөрөҫ әйтәһең, — тип ризалашты Тимашев. — Шулай ҙа, ваҡытына ярашлы, үҙеңде ҡулға ала белеү кәрәк, сынок. Улар күмәк — һин яңғыҙың...

— Уһ, мин ул ярпыларҙы! — Ефим, йоҙроҡ төйнәп, уртын сәйнәне. — Аҡылға ултыртырмын!

— Тыныслан! — Торған һайын сырайы ҡараңғылана барған подполковник тауышын күтәрә төштө. — Тәүҙә өлкәндәрҙе тыңларға өйрән, унан ҡул аҫтындағыларҙан талап ит.

Ефим өндәшмәне.

— Йә ярай, есаул, беҙ бында бер-беребеҙгә ғәйеп тағып, кәмселектәребеҙҙе асыҡлар өсөн килмәгәнбеҙ. – Тимашев ихласлап аҡыл һатырға тотондо. – Шуны аңла: татыу түгелбеҙ икән, бер тин шайы тормабыҙ. Һин йәшһең, ҡурҡыу белмәҫ ауанһың, ләкин һуғышта бер батырлыҡ ҡына аҙ. Аҡыл да кәрәк, хәйлә кәрәк, башты эшләтә белеү ҙә һис ҡамасауламай. Шул хаҡта яҡшылап уйланһаң ине: бүрәнә аша бүре күреп йәшәһәк, йүнле эш ҡыра алмабыҙ...

...Подполковниктың нотоғона ҡолаҡ һалдымы, әллә казактарҙың бергәләп дәррәү ҡаршы сығыуы тәьҫир иттеме, ошо көндән Ефим нисектер йыуашайып, баҫыла төшкәндәй тойолдо. Күпте күреп, юҡ-барға бәйләнмәне, алағайымға осоп-ҡунып бармаҫ булды. Әммә был тәү ҡарауға ғына шулай һымаҡ, ә ғәмәлдә, бар асыуын эскә йотоп, ул үс алыуҙың уңайлы мәлен көттө.

Эйе, алты йөҙ илленән ашыу кешене туплаған сиреү эсендә татыулыҡ һәм берҙәмлек етешмәй. Дин менән милләт араһында ла аҫтыртын көрәш бара. Тимашев ошоларҙың барыһын да күрә йөрөй. Өндәшмәһәләр ҙә, йөҙ башлыҡтары ла аңлай. Артабан был рәүешле дауам итеүе мөмкин түгеллеге, үҙ-ара низағҡа юл ҡуйырға ярамағанлығы һәр кемгә мәғлүм, шулай ҙа еңмештәрҙең береһенең дә үҙ һүҙен биргеһе килмәй. Ҡыҫҡаһы, кәрәкмәгән ғорурлыҡтарын ауыҙлыҡлап, тәкәббер холоҡтарын еңә алмайҙар. Күр ҙә тор: казактарҙы яҡлап яңылыш бер һүҙ ысҡындыр, тәүхид мосолмандар[133] менән балбалға табынған борҡан[134] бәндәләре ҡалҡып сығасаҡ. Ә уларына йылы һүҙ әйтһәң, үҙ диндәштәрең һине хыянатта ғәйепләй башлар һәм, интиҡам[135] көҫәп, ҡон ҡайтарыу яғын ҡайырасаҡ. Ә өндәшмәй йөрөһәң, бер-береһен өтөп ашарҙар...

Ике ут уртаһында ҡалған Тимашев ошолай уйлап бошондо.

Йыйын-йыйылмаһаяҡ сиреү эсендә барған күҙгә күренмәҫ өнһөҙ көрәш ығызығыһы Түңгәүер олоҫо старшинаһы Биксәнтәй Юламановҡа ла яҡшы билдәле. Күрше ырыуҙар, бәлки, үҫәргәндәр ҙә, бына-бына килеп етеп, азатлыҡ әләмен елберҙәтергә тейеш. Шуларына ҡушып ошо ала-ҡола ғәскәрҙең татары менән жунғарын да үҙ яғына ауҙарғанда...

Биксәнтәйҙең киләсәккә хыялдары ҙур ҙа ул, нисек барып сығыр. Ә әлегә, көсөң самалыраҡ саҡта, тик үҙ таҫыллығың менән үҙ аҡылыңа ғына таянаһы ҡала. Тимашевты Иҙелбаш яҡтарына нисек тә ебәрмәй торорға! Ҡырҡ сәбәбен табырға, кәрәк икән, башыңды һалырға, әммә ебәрмәҫкә, үткәрмәҫкә! Бүгәс менән Салауатҡа баштан-аяҡ ҡоралланған хөкүмәт ғәскәренә ҡаршы тороуы былай ҙа еңелдән түгелдер. Алты йөҙ илле ҡылыс — байтаҡ көс. Өҫтәүенә – туптары... Юҡ, бүре өйөрөнөң ары ҡуҙғалып китеүенә һис юл ҡуйырға ярамай. Ярамай!

*[133]Тәүхид мосолмандар — хаҡ мосолмандар.*
*[134]Борҡан — Будда динен тотоусы.*
*[135]Интиҡам — үс алыу теләге.*

Тимашев “тотҡоно”нда әҙәм танығыһыҙ итеп “туҡмалып” ҡайтҡан Куприян-Килдеғолға старшинаның: “Хәҙергә урманға китеп тор, ҡабаттан кеше күҙенә салынаһы булма”, — тигәне көтмәгәнсә ҡулай килеп сыҡты. Тимәк, Биксәнтәй әлегә бер ни ҙә һиҙмәй – был бер. Икенсенән, ер йотҡандай ғәйеп булған Миргородскийҙы эҙләү өсөн туранан-тура мөмкинселек асыла лаһа! Нуштаевҡа старшинаның ышанысынан файҙаланып ҡалыу кәрәк. Уңай осраҡты ҡулдан ысҡындырыу яҙыҡ булыр. Бөгөн үк эшкә тотоноп, эҙ юллай башларға!

Куприян-Килдеғол шул көндө үк һикәл башындағы айыу өңөнә, ҡасандыр байтаҡ ғүмерен шоҡорайып үткәрергә тура килгән баҙға, китте. Бер аҙ рәткә килтереп, йүнәтештереп ҡуйыу ҡамасау итмәҫ. Алда нимә көткәнен кем белә. Тағы әллә күпме һалҡын төндө ошонда ҡалтыранып уҙғарырға тура килер, бәлки. Ышыҡ — ышыҡ булыр әле.

Куприян ҡара ауыҙы менән шомло өңөрәйеп торған һалҡын мәғәрә эсенә икеләнеп-нитеп тормайынса инеп китте. Нимәһенән уның ҡурҡырға, өйрәнелгән соҡор ҙа бит. Шулай уйлаһа ла, күп тә үтмәҫтән, ҡото алынған урыҫ атылып кире килеп сыҡты. Күҙгә төртһәң күренмәҫлек ҡараңғылыҡта ул ниндәйҙер йән эйәһенә ҡағылған һымаҡ булды. Тегеһе ҡыбырлап ҡуйғандай итте, ыңғырашҡаны ла ишетелеп ҡалды. Көтөлмәгәнлектән урыҫтың йөрәге ярыла яҙҙы. Өңдәге ялбырҙы ҡышҡылыҡҡа инеп ятҡан йыртҡыс тип уйлаған Куприян бесәй етеҙлеге менән тәү тап булған ағасҡа үрмәләп менеп китте. Күҙ асып йомған арала ул бөртөк тә ботағы булмаған һырғый ҡарағайҙың иң осонда тора ине. Менеп етте лә, ҡапыл ғына тыныслана алмай, ҡалтырана-ҡалтырана күҙҙәрен кепесләтеп, өң ауыҙына текәлгән көйө, артабан ни булырын көттө. Ә өңдәге оҙаҡ тотҡарланманы. Үкермәне лә, баҡырманы ла, енләнеп ағас ботаҡтарын да һындырып торманы. Соҡор ауыҙында, ҡарпыш ҡолаҡлы айыу урынына, ойошоп бөткән оҙон сәсле, һаҡал-мыйыҡ баҫҡан... ҡот осҡос әҙәм башы пәйҙә булды. Ялбыр баш оҙон муйынында һонола бирҙе лә, һаҡ ҡына борғоланып, ян-яҡты байҡап алды. Күрәһең, хәүеф сығанағы булырҙай нәмә күрмәне, шул әҙере кәгез кәүҙәһен дә килтереп сығарҙы һәм, тауышын күтәрмәй генә:

— Эй, кем бар унда? — тип өндәште.

Кеше телмәрен ишеткән Куприяндың ҡапыл ғына быуындары бушап, ағасты ҡыҫып тотҡан бармаҡтары үҙ иркенән тыш яҙылыуҙан, ул ҡолға ише келән олон буйлап шатыр-шотор шыуып төшөп китте. Хәҙер инде уны-быны көтмәгән “өң хужаһы”, әйләнә килеп, йән фарманға ҡаса башланы. Шулай ҙа уныһы ағас башынан төшөүсенең үҙе кеүек үк әҙәми зат икәнлеген тиҙ арала шәйләне буғай, ғәжәпһенеп, туҡтап ҡалды. Шул рәүешле бер-береһенә тексәйешкән ике әҙәм, шаҡ ҡатып, байтаҡ торҙо.

— Һ-һин... кем? — тип сыйылданы Куприян, ниһайәт.

— М... мин Т... Терентий Селиванов. — Тегеһе руссалап төртөндө. — Ә һин нимә ҡарап йөрөйһөң бында?

— Мин Ив... ә-ә, Куприян булам. Ҡа... ҡасып йөрөйөм.

— Ну, ҡотто алдың да һуң!

— Кем кемдекен алды әле...

Эстәрен ҡосаҡлаған ике көнйәлә баштың һаһылдашып көлөшөүенән һил урман яңғырап торҙо.

— Әйтәм, шып-шыма ағасҡа һуҫар шикелле менеп киттең, — тип хихылданы Терентий. — Былай саҡта, артыңдан төртһәләр ҙә, булдыра алмаҫ инең, ә?

— Үҙеңде кем белһен! — Куприян тегеһенә төртөп әрепләште. — Ҡурҡаҡ ҡуяндай һыпырттың, аяҡтарың ергә лә теймәй! Һа-һа-һа...

Бер арауыҡ шулай иһаһайлашып алғандан һуң кинәт етдиләнеп киткән Куприян, үҙен Терентий тип таныҡкан йәтеш кәүҙәле, үтә яшыҡ милләттәше ҡаршыһына килеп баҫты ла, сәйер генә ҡыланып, уның асыҡ-зәңгәр күҙҙәренә төбәлде һәм уҫал итеп:

— Ауыҙ йырып торғансы, әйт әле, ни эш ҡырып йөрөйһөң бында? — тине. Тегеһе хатта артҡа сигә биреп ҡуйҙы. Ҡырау ҡағылып үткән йәпрәй ҡаштары аҫтында ҡыҙыҡһыныусан күҙҙәре уйнап торған, уҫлаптай бәрәңге дәүмәллек йомро танаулы, сырайы тәрән йыйырсыҡтар менән йырғыланған ерән урыҫ, мөжөрәйеп, Куприяндың йәшел күҙҙәренә баҡты. Бер аҙ ҡурҡыу ҙа, ялбарыулы икеләнеү менән ғәжәпләнеү ҡатыш ҡыҙыҡһыныу ҙа бар ине был яғымлы ҡараштa. Эйе, ғәжәп һынамсыл ҡараш. Ә йөҙө һуң, йөҙө! Уның ише мөләйем йөҙҙәр һирәк осрай.

— Һиңә ышанырға буламы һуң? — Мөләйем йөҙ ҡәнәғәт йәйелеп китте.

— Ә ниңә? — Куприян ауыҙ сите менән генә көләмәйләне. – Миңә һинең ышаныу-ышанмауыңдың кәрәге бер тин.

Терентий киҫкен хәрәкәт менән ылҡаһы ҡалмай теткеләнеп бөткән күлдәген өҫкә һыпырып ебәрҙе лә арҡаһы менән Куприянға бороллдо. Күҙҙәре ҡаҙ йоморҡкаһы дәүмәллек булып аҡайған тегеһенең тәне зымбырлап китте: үкенесһеҙ ҡайыҙланған ябыҡ арҡа арҡырыға-буйға телгеләнеп бөткәйне. Тәрән йәрәхәттәр уңалып, ҡутырлай башлаған.

– Ә быныһы минең иң ышанысл дәлилем! — Терентий, асырғанып, күлдәген төшөрҙө. — Егерме йылдан ашыу буштан-бушҡа бил бөккәнем хаҡына хужам мине ошолай "бүләкләне", әсе тиремдең әжерен шулай ҡайтарҙы. Күрәм: хозяиның һине лә ныҡ "хөрмәт иткән". — Ул, йылмая биреп, Куприяндың "ҡутырлы" йөҙөнә ымланы.

— Булды инде. — Куприян йөҙөн ситкә бора һалды: яһалма йәрәхәттәрҙең асылып ҡуйыуы бар ҙа баһаң...

— Да-а, һәр ерҙә лә шул инде беҙҙең өлөш. — Терентий ауыр көрһөндө.

— Үҙең ҡайһы яҡтарҙан? Бәлки, земляктырһың да әле?— Хәҙер инде Куприян ҡыҙыҡһынырға тотондо. — Бында нисек килеп тарының? Ниндәй яман елдәр ташланы?

— Әүжәндән мин. — Терентий, әңгәмәләшенә тамам ышанғанын белдергәндәй, асылып китте. — Ярты ғүмеремдә урман эшендә үткәрҙем: мөлөмсө[136] булдым. Оҙон ҡыш буйына ағас йығып өйәбеҙ ҙә яҙғы силда[137] ағыҙабыҙ. Ҡыуғын[138] менән шөғөлләнә инек. Түҙеп торғоһоҙ йәшәйеш, оло гонаһ ҡылып, кеше ғүмеренә ҡул һуҙырға мәжбүр итте — ирекһеҙҙән приказчикты дөмөктөрөргә тура килде. Унан һуң баш һуҡкан яҡҡа сыҡтым да киттем. Сөнки аңланым: тегендә минең өсөн урын бөттө. Бына, инде өс айҙан ашыу, кеше күҙенә салынмаҫҡа тырышып, ҡасып-боҫоп йөрөйөм, үлем менән йәшәү араһында көн күрәм.

— Беҙҙең яҙмыштар оҡшаш икән. — Куприян үҙе менән таныштырыуҙы күрәләтә алдаҡтан башланы. — Мин дә шул тарафтарҙан бит. Дөрөҫ самалағанмын да баһаң! Тимәк, беҙ ысынлап та яҡташтар булып сығабыҙ. Һинең кеүек үк, алпауытыма ҡул күтәрҙем дә, бына, язаһынан ҡурҡып, ҡасып йөрөйөм.

— Әле ҡайҙан килә ятыуың?

---

[136]Мөлөмсө — һал ағыҙыусы.
[137]Яҙғы сил — яҙғы ташҡын.
[138]Ҡыуғын — ағас ағыҙыу эше.

— Яҡындағы ауылға барып урағайным.

— Ауылға? Көпә-көндөҙ? Нисек тотоп алманылар?

— Тоттолар. Бына күрәһең бит. — Куприян “тукмалыу”ҙан күкле-йәшелле төҫ алған йөҙөнә күрһәтте. — Тарый ҡалһаң, һине лә аяп тормаҫтар.

— Кемдәр һуң улар?

— Кем булһын, башҡорттар.

— Ҡулдарына эләкһәң, тота ла ашайҙар икән, тигәндәрен ишеткәнем бар ине, — тип ҡуйҙы бер ҡатлыраҡ күренгән Терентий.

— Эйе, эләгә ҡалһаң, һабағыңды уҡыта белерҙәр. Шуға күрә, юлдарына тәл булмай ғына, уларҙан алыҫыраҡ йөрөргә кәңәш итәм. — Куприян үҙен һыйындырған кешеләргә ҡарата оятһыҙ рәүештә ҡотҡо һалып, хөсөт өйҙө.

Терентий төптө ялғанға ышандымы, юҡмы, башҡаса төпсөнөп булашманы, көрәк һаҡалын һыйпаштырып, уйға ҡалып торҙо.

Икәүләшеп тар өркөттө киңәйтә биреп, ипкә килтерҙеләр. Еүеш иҙәнгә йәйек[139] түшәп, өҫтөнән ҡалын итеп күрән һалғандан һуң, ташландыҡ өң, ҡараңғы булһа ла, буйтым йәшәп торорлоҡ торлаҡҡа әүерелде лә ҡуйҙы.

– Минең менән булғанда һиңә хәүеф-хәтәр янамаҫ. — Һунарсы Батырхан биргән сүлмәкте тоҡандырылған әшәк өҫтөндәге аҫҡаҡҡа элеп маташҡан Куприян маһайып алырға ла онотманы. — Ауыл кешеләре араһында ла арыуҙары бар ул барлыҡҡа. – Шунан, һүҙ ағышын ҡапыл үҙгәртеп: – Ә һин бынан алыҫ түгел тау һыртында карательный әтрәт туҡталғаны хаҡында беләһеңме? – тип ҡуйҙы.

— Карательный отряд? — Терентий аптырап китте. — Улары ниміәһенә темеҫкенеп йөрөй икән тағы?

— Темеҫкенмәй, ҡәҙерлем, ә оло болаға ҡушылған башҡорт ерендә тәртип, именлек урынлаштырыр өсөн килгәндәр.

— Именлек даулап йөрөгән кеше каратель була тиме?

— Ә һин нисек уйлаған инең?! Империя һынлы империяға ҡаршы күтәрелгән яуыздар менән көрәшеүселәрҙе башҡаса кем тип атайһың?

— Каратель түгел инде һәр хәлдә...

— Ярай, мәле еткәс, аңларһың. — Куприяндың йөҙө йәмерәйҙе. — Ә хәҙергә үҙең хаҡында һөйләһәң, яҡшыраҡ булыр. Өс ай буйына, япа-яңғыҙ көйө таныш түгел тарафтарҙа нисек итеп йән аҫрай алдың?

Һүҙҙе йәнә икенсегә бора һалған Куприянға Терентий сәйерһенеп ҡарап ҡуйҙы ла вайымһыҙ ҡиәфәттә:

— Урлашып тамаҡ туйҙырҙым, — тине,— күберәген аслы-туҡлы йөрөргә тура килде, төндәрҙе, мүккә төрөнгән көйө, кәкрәйеп үткәрҙем.

Куприяндың күҙҙәре янып китте. Терентийҙың ошоғаса ауыл тирәһендә күренгәне булмағанын ул бит белә. Тимәк, ҡайҙалыр икенсе тирәлә һәптәнләгән. Бәлки...

— Ошо ауыл халҡын таланың инде ул сағында, — тине, юрый ҡыланып. – Яман эш менән булашҡанһың икән. Яман һәм хәүефле...

— Юҡ та, урман төпкөлөндә бер кордон ишараты бар, шуның тирәһендә урағылландым. Был яҡтарға осраҡлы ғына килеп сыҡтым...

Кордон һүҙен ишетеп йөрәк тибеше бермә-бер йышайған Куприяндың күңеле уйнап китте: бына ла баһаң уға кәрәкле йәйләү! Шул, үҙе! Башҡаса булыуы мөмкин түгел!

---

[139] *Йәйек — ҡарағай ботағы.*

Ә бер ни һиҙенмәгән Терентий әҫәрләнеп һөйләүен дауам итте:

— ...Аласлау[140] өсөн ылашҡа йәйелгән ҡорот, баҙға ҡуйылған эремсек, һары май сәлдереп көн иттем. Һирәк-һаяҡ булһа ла икмәк, хатта ит тә эләккеләй ине. Беләһеңме, кешеләр һиҙенмәһен өсөн, эҙләп кенә алдым, ә һауыт-һабаларына бөтөнләй оронманым. Көнө буйы боҫоп ятам да төнөн һунарға сығам. Урлашырға. Тфү! Хас та темеҫкенеп йөрөгән хужаһыҙ берәҙәк эт инде.

— Эйе, еңелдән түгел беҙҙең өлөш. — Куприян уфтанған булды.

— Ҡуй инде, иҫкә төшөргө лә килмәй. — Терентий ихлас күңелдән бошонндо. — Ундағы кешеләрҙең эттәре лә миңә ҡарағанда тәрбиәлерәк булғандыр әле.

— Әлеге шул башҡорттарҙыр инде?..

— Шуларҙыр. Күпме ҡолаҡ һалып тыңлаһам да, телдәрен һис төшөнә алманым.

— Ә хәҙер ул урынды таба алыр инеңме? — тип һорап ҡуйҙы Куприян. Үтә ныҡ ҡыҙыҡһыныуы уның йөҙөнә бәреп сыҡҡан ине. Быны хатта бер ҡатлы Терентий ҙа һиҙҙе шикелле. Һиҙҙе һәм, һөйләй белмәгән ауыҙы менән артығыраҡты ысҡындырыуына үкенә биргәндәй:

— Әллә инде, урман ҙур. Сикһеҙ-ҡырыйһыҙ бит ул, ай-һай табыуҙары, — тип асыҡтан-асыҡ борғаланды.

— Эҙләп ҡарайбыҙмы әллә? — Тегеһенең шылдырып маташҡанын күргән Куприян аҫтыртын көлөмһөрәне, — бәлки, иҫеңә төшөр, ә, дуҫ?

— Нимәгә ул һиңә? — Терентий көтөлмәгәнсә тура бәреп һораны.

— Былай ғына... — Терт итеп ҡалған Куприян ҡапылғара килешле яуабын таба алмай аҙапланды. — Ашарға күп, тигәнгә шулай ҡыҙыҡһынғайным да...

— Күп үк булмаһа ла, йән аҫрарлығын табырға була.

— Алып бар мине шунда! Икәүләп барайыҡ, зёма.

Албырғап киткән Терентий Куприяндың йәшел күҙҙәренә йәнә текәлде.

– Әйҙә, һинеңсә булһын. Тик бер шартым бар...

— Әйт һуң.

— Ундағыларға берәй шойҡаның тейә торған булһа, минән изгелек көтмә. Ишетһен ҡолағың.

— О, бог мой! Ниндәй шойҡан ти ул тағы?! — Куприян ялағайланып суҡына һалды: — Бына һиңә тәре!

Уның ыңғайына Терентий ҙа изге һаналған ғәмәлдәрен өс тапҡыр башҡарып алды.

— Тәүәккәлләрбеҙ, улай булғас...

Куприян менән Терентий юлға таң беленер-беленмәҫтән сыҡтылар. Тәүгеһе кемгәлер хаслыҡ уйлап алҡынһа, икенсеһе, үҙе лә белмәҫтән, уға юл күрһәтә бара. Терентий, башта үҙ-үҙенә ышанып бөтмәһә лә, киске эңер төшөүгә кәрәкле урынға алып барып еткерҙе. Төндө еүешлек аңҡып торған ҡарағай мүге аҫтында уҙғарҙылар. Ныҡ асығыуҙарына ҡарамаҫтан, эттәрҙе ҡуҙғытмаҫ өсөн, ҡапылда тирмәләр тирәһенә бармай торорға ҡарар иттеләр. Төнө буйына лауылдашып сыҡҡан эттәр көндөҙ, ғәмһеҙләнеп, уяулыҡтарын юғалта, ана шул мәлдә инде... Йәнә лә киске эшкә ҡарағанда иртәнгеһе хәйерлерәк...

Әшнәләргә көн башындағы ығы-зығының баҫылыуын оҙаҡ ҡына көтөргә тура килде. Көтөү ҡуҙғалып китеүгә, ҡатын-ҡыҙ, ваҡ-төйәк эшен ослай һалып,

[140] *Аласлау — ыҫлау.*

ҡайһыһы емеш-еләк артынан юлланды, ҡайһыһы шифалы үлән менән татлы балтырған йыймаҡҡа һаҙ буйына төштө. Тирмәләр янында, нигеҙҙә, бала-саға ғына ҡалды.

Ике эшем эйәһе, кеше күҙенә салынмаҫҡа тырышып, ҡаса-боҫа, әүәл Аҡбикә инәйҙең оло ҡаҙаны эленгән әшәк урынына килделәр. Башҡа ваҡытта ҡаҙан эргәһенән китешмәгән әбей бөгөн нисектер күренмәй ине. Бушап ҡалған ҡыуышты ҡабалан-ҡарһалан байҡап сыҡһалар ҙа, үлтереп килгән аслыҡты алдаштырып тамаҡ ялғағандай бер тәғәм дә тапманылар. Аҡбикә ҡыуышынан йөҙ аҙым самаһы арауыҡта урынлашҡан тирмәләр тирәһендә лә бер кем күҙгә салынмай һымаҡ. Салынмай һиңә! Тәү ҡарауға ғына шулай икән. Ана, ситке тирмә янында өс сабый ҡырсынташ менән уйнай, арыраҡ бер нисә ҡарсыҡ үҙ-ара көңгөр-ҡаңғыр килеп йөн иләй. Ҡәҙимге йәйләү тормошо дауам итә. Юлдаштар ошоларҙың барыһын да әлегәсә кеше аяғы баҫмаған шырлыҡ эсендәге бейек ҡыршан[141] араһынан күҙәтеп ята.

Куприян йәйләүҙе табыуын тапты, уға илткән юлды ла хәтеренә һеңдерҙе һымаҡ. Шулай ҙа ҙур асыҡ уртаһында йәйрәп ятҡан йәйге йорт тирәһендә иғтибарҙы йәлеп иткәндәй тәғәнле[142] бер нәмә лә күҙенә ташланманы. Ул, үкенә биреп: “Шулай уҡ бында түгелме ни Миргородский”, — тип уйланды. Анауы кейеҙ тирмәләрҙең береһендә бот күтәреп ятмайҙыр бит?

— Башҡа торлаҡтары юҡмы икән былар ҙың? — тине инде уңыштан төңөлә башлаған Нуштаев.

— Яр аҫтында мунсалары бар, ҡорот аласлай торған ылаштары ла шунда. — Терентий эйәге менән шишмә яғына ымланы.

— Аҙыҡ һаҡлар баҙҙары ла барҙыр, бәлки?

— Бар. Тик улары гелән бикле була.

— Алыҫмы? Әйҙә, юлды күрһәт.

Өркөт[143] ҡояш яҡтыһы төшмәгән ышыҡ, һалҡын урынға йәшереп эшләнгән ине. Өҫтөнә осраҡлы ғына барып сыҡмаһаң, ҡапылғара абайларлыҡ та түгел үҙен. Етмәһә, индеге ян-яҡлап эре гөлйемеш ҡыуаҡлығы менән уратып алынған. Ышыҡ өсөн махсус ултыртып ҡуйғандар тиерһең.

— Ит-майҙарын ошонда һаҡлайҙар, — тип шыбырланы Терентий.

— Эсенә инеп булмаймы?

— Уйлама ла, нығытып төҙөлгән.

Ҡыяҡтары ҡаужып ҡыуара башлаған оҙон күрән араһына боҫоп күҙәтә башланылар. Ошо мәл шишмә буйынан тимер сылбыр сылтырағаны ишетелеп ҡалды. Ике урыҫ бер-береһенә ҡарашып алды ла ергә нығыраҡ һеңеште. Шул әҙере селтер шишмә бөгөлөндә үҫкән йыуан ҡарағас төбөнән берәү ҡалҡынды ла, ҡулдарын тегеләй-былай һелтәштереп, тәнен яҙҙы. Күренеп тора: байтаҡтан бирле талсығып ошонда ултырғандыр. Ҡулдары беләҙекләп бығауланған, ә бығау оҙон сылбыр менән ҡарағасҡа беркетелгән. Күп көттөрмәй, теге әҙәм йөҙө менән боҫоп ятыусылар яғына бороддо. Ул... Миргородский ине.

***

Тик ятып сыҙамаған Тимашев, ғәҙәтенсә, бер төркөм хауасын эйәртеп, йәнә Һаҡмарбашҡа юлланды. Йәйектүбә яғынан килгән һыбайлыларҙы әллә ҡайҙан уҡ күреп ҡалған малайҙар бар ауылға яр һалырға тотондо:

— Караттар килә, караттар! Йәшенегеҙ!

---

[141] *Ҡыршан — боланут (Иван-чай).*
[142] *Тәғәнле — шикле.*
[143] *Өркөт — ер баҙ.*

Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә кем ҡайҙа өлгөрә, шунда боҫоп бөттө. Хәҙер инде, унда-бында сүпләнеп йөрөгән тауыҡтарҙы һанамағанда, урамда башҡа йән эйәһе ҡалманы. Бүтән саҡта ят кешегә кемуҙарҙан абалап ҡаршы сыҡҡан эттәргә тиклем тынып ҡалған. Килеүселәрҙең кем икәнлеген, күрәһең, улар ҙа һиҙә...

— Ҡолтой олатай! Караттар килә, өйөңә йәшенә һал! — Шуҡ малайҙарҙың береһе ҡапҡа алдындағы ярҡа эскәмйәлә ултырған ҡартҡа ҡысҡырҙы.

— Килһә килә инде, улым. Улар йөрөй инде ул. Минең ялмауыҙҙан өркөп ҡасыр ваҡытым үткән. — Шул арала йөҙө ҡараңғыланып киткән ҡарт ҡалтыранған ҡулдары менән сал һаҡалын һыйпаштырып ҡуйҙы. — Иҫкәртеүең өсөн рәхмәт, балам. Бар, үҙең йәшеренә һал. Күҙҙәренә салынма ул килмешәктәрҙең. Мине, һикһән йәшлек һуҡыр бабайҙы, ни эшләтерҙәр тиһең. – Ҡолтой ҡарт һыбай төркөм килгән яҡҡа төҫһөҙ күҙҙәрен төбәне. Томана күҙҙәр күрмәһә лә, һиҙгер ҡолаҡтар ат тояғы тауышын әллә ҡайҙан ишетә ине.

— Уларға ышаныс юҡ. Ин өйөңә, — тип ныҡышты малай.

— Ҡасып ҡайҙа барайым мин? — Бабай үҙенекен һөйләне.

Үҙһүҙле олатайын еңеп булмаҫын аңлаған малай артабан тороп йүгерҙе һәм, түҙемһеҙләнеп көтөп торған иптәштәренә ҡушылып, тыҡрыҡҡа инеп юғалды.

Ярһыған Тимашев, әҙәм заты күренмәгән, бәләкәс кенә усаҡ өйҙәре тәртипһеҙ урынлашҡанлыҡтан кәкре-бөкрө урам ишараты борғоланып ятҡан аулаҡ ауылға килеп ингәс тә, тегеләй-былай ҡаранып торҙо. Шунда уҡ күҙенә эйәге менән таяҡ осона терәлгән килеш көмөрәйә биреп ултырған Ҡолтой ҡарт салынды. Деһерләшеп ер һелкеткән күмәк һыбайлы күгүләнде тапап-иҙгесләп уҙҙы ла, туҙан ойоҫҡотоп, ҡарт янына килеп эркелде. Туптырлашҡан тояҡ тауыштарының үҙенә яҡынлашыуын тойоп алған бабай күңелһеҙ һөйләшеүгә әҙерләнде. Шулай ҙа караттарҙың ҡыласаҡ эше әлегә уның башына ла инеп сыҡмай ине...

Ҡурҡытыу-янау менән бер ни ҙә сығара алмаясағын яҡшы белгән Тимашев тәү башта йомшағыраҡ мөғәмәлә итергә ҡарар ҡылды. Эйе, урындағы халыҡты өркөтөп кенә еңеп булмаясағын подполковник әкренләп төшөнә башлағайны.

— Һаумы, дед! — тигән булды ул яғымлы ғына. Атынан төшөп, янына килде. — Ҡайҙа булып бөткән ул ауыл халҡы, ә?

— Арыу әле. — Ҡолтой йылмайғандай итте, ә Өстөкәй уның һүҙҙәрен тәржемә ҡылып, урыҫсаға ауҙарҙы. — Барыһы ла эштә, уландар, ҡышҡылыҡҡа әҙерләнәләр. Өйҙә ята торған мәлме...

— Ә һин нишләп бындаһың?

— Минең өсөн инде бөксәнләр ваҡыт уҙған. Ашау — байҙан, үлем — Хоҙайҙан, тип ултырған көн.

— Беҙҙе йәйләүегеҙгә алып бар әле, бабай. — Тәкәббер Тимашев уратып-суратып тороуҙы кәрәкһеҙ тапты. Ә Ҡолтой ҡарттың алсаҡ йөҙөнән күләгә үтеп китте. — Маннаһыҙ[144] ҡалдырмам, — тип өҫтәне ҡарттың өндәшмәй ултырғанын күргән подполковник. – Төшөнәһеңдер?

— Улым, хужаңдың һүҙҙәрен дөрөҫ тылмаҫ[145] ҡылдыңмы? — тип һораны Ҡолтой ҡарт көтмәгәндә. — Ысынлап, йәйләүгә апар, тинеме шул?

— Эйе, бабай, ишеткәнең хәниф[146]. — Өстөкәй һағая төштө.

---

[144] *Маннаһыҙ — "хаҡында тормам" мәғәнәһендә.*
[145] *Тылмаҫ — тәржемә.*
[146] *Хәниф — хаҡ, дөрөҫ.*

— Тимәк, палкауникка ҡушсы[147] булырға тейешмен?

— Эйе, юл күрһәтеп барырға.

— Ни юғалттығыҙ һуң унда?

— Старшинаны күрергә ине. — Тимашев хәйләләште. — Килерһең, тип саҡырғайны, юлды белмәйбеҙ...

Тимашевтың күрәләтә алдашып торғанын һиҙгән Ҡолтой ҡарт уйсанланып ултырҙы, тулҡынланыуҙан хатта һаҡалы дерелдәп ҡуйҙы.

— Мин дә белмәйем бит әле ул тарафтарға илткән һуҡмаҡты, уландар, — тип көрһөндө ул.

Ошо яуапты алдан көткән Тимашевтың, сырайы һытылып, ауыҙы мыҫҡыллы ҡыйшайҙы. Ул көсәнеп көлгән булды һәм тауышын күтәрә төшөп өндәште:

— Һаҡалың сал булһа ла, үҙең алдаҡ икәнһең, ҡартлас. Ошо йәшкә ет тә, имеш, йәйләүеңдең ҡайҙалығын белмә. Кем ышанһын инде быға?!

— Мин, улым, күрмәйем бит.

Тимашев ҡарттың күҙҙәренә текләп ҡараны һәм шунда ғына уның тома һуҡыр икәнлеген аңғарҙы. Ике күҙ ҙә, бызырайып, бер нөктәгә төбәлгәндәр ҙә ҡатып ҡалғандар. Ул хатта ытырғанып ҡуйҙы, әммә алдына алғанын ҡуйманы.

— Һиңә, дед, күреүҙең хәжәте юҡ. Йомшаҡ кырандаска ултырып ҡына беҙгә юл өйрәтә барһаң, шул еткән, — тип хушкүңелләнеп китте.

— Күрмәгәс, ҡалайтып өйрәтәйем мин? — Ҡолтой ҡарт башын һантыйға һалып матаашты. — Тома һуҡыр ҡулауыҙ[148] була тиме?

Әлеге һүҙҙәр Тимашевтың йәнен ныҡ көйҙөрҙө. Ошо кибеп бөткән бүкәндең, асыҡтан-асыҡ ялған һөйләүе етмәгән, үҙенән аҫтыртын көлөп ултырыуын яҡшы аңланы ул. Бер аяғым менән ҡәбер ситенә баҫып торам тимәй, ә, ҡәһәрең! Был ни тигән халыҡ булып сыҡты һуң әле...

— Алып барһаң, ике арғымаҡҡа ҡушып йөҙ һум бирәм. —Асыуын көскә тыйып торған Тимашев йәнә йәпәтәйләнгән булды.

Ҡолтой ҡарттың ҡатып ҡалған сырайында был юлы ла бер үҙгәреш күренмәне.

— Юҡ, булмай, — тине ул тыныс ҡына. — Әйттем бит, белмәйем юлды. Ун арғымаҡ бүләк итһәң дә, булдыра алмам.

Шартлар сиккә еткән Тимашев, киҙәнә биреп, бар көсөнә үҙенән күпкә оло кешенең йөҙөнә сәпәне.

— Сволочь! — тип яман екеренде лә, быума тотҡан кешеләй, ҡалтыранып китте. — Әле аҙ ҡырғанбыҙ икән үҙегеҙҙе! Һаман булһа аҡылға ултырта алмағанбыҙ.

Индек алдына тәкмәс атып барып төшкән Ҡолтой ҡарт, һушын йыйғандай бер аҙ ятҡандан һуң, мүкәйләп, көскә аяғына тороп баҫты. Күҙҙәренә ҡан һауған әфисәргә тура текләп:

— Кем ысвулыш бит әле, һикһән йыл ошо ерҙә ғүмер кисереп бер бөжәккә лә зыяным теймәгән минме, әллә олатаң тейеш кешегә ҡул күтәреп, йәберзоломға һалған һинме, — тине лә, ҡан ҡатыш итеп, Тимашевтың көл төҫлө битенә төкөрҙө. — Йөҙөңдө күрмәһәм дә, әйтә алам: ҡоторған эттән дә ҡурҡынысыраҡһың һин. Төкөрәм шул бысраҡ томшоғоңа! Тфү!

---

[147] *Ҡушсы — оҙата барыусы.*

[148] *Ҡулауыҙ — юлбашсы.*

Сығырынан сыҡҡан Тимашев йәнә киҙәнде, тик был юлы һуғырға өлгөрә алмай ҡалды. Кемдеңдер хәтәр ҡаты ҡулы көтмәгәндә уның беләгенән бөрөп алды. Оторо енләнеп киткән подполковник, бер ни аңламайса, артына боролоп ҡараны. Унда, ҡыҫыҡ күҙҙәрен уҫал ялтыратып, йөҙбашы Барсын тора ине. Бына һиңә Тимашевҡа тоғролоҡҡа ант килтергән ҡалмыҡ егете!

— Подполковник, ил ағаһы тейешле өлкән кешегә ҡул күтәреү түгел, ауыр һүҙ әйтеүе оло гонаһ, — тине ул тыныс ҡына. — Был – алама ырым. Уның аҙағы насар бөтөүе ихтимал.

— Төкөрҙөм мин һинең ырымыңа! Ебәр, инәңде... — Тимашев екеренде.

— Беҙҙә утағаны йәберләмәйҙәр, хөрмәт итәләр...

— Ах һин, йылан! Мә, ал эҙләгәнеңде! — Тимашев инде Барсынға киҙәнде. Әммә сос жуңғар уның йоҙроғон һауала уҡ йылғыр ғына эләктереп алды ла, ҡулын шытырлатып, артҡа ҡайырҙы.

— Ебәр! Ырғаҡҡа элдерәм, сволочь!

— Тыныслан, подполковник, беҙгә яугирҙар ҡарап тора.

— Кәрәгегеҙ бар ине, дала ялмандары!

— Шулаймы? — тип йылмайғандай итте Барсын, тыныслыҡ һаҡлап: — Моғаһәдәне[149] өҙөлгән тип иҫәпләһәк тә була, әләйһәң?..

Ҡапыл терт итеп ҡалған Тимашев өндәшмәне.

— Нисек уйлайһың, подполковник? — Сардар ныҡышыуын белде. — Ҡайтып китергә буламы беҙгә?

Әлеге һүҙҙәр Тимашевҡа башынан аша боҙло һыу һипкәндәй тәьҫир итте. Әгәр ҙә ки ҡалмыҡтар, килешеүҙе өҙөп, үҙ яҡтарына ҡайтып китә торған булһа, ул — подполковник Тимашев, дан, дәрәжә, шөһрәт көҫәп йөрөгән алпауыт — күрәләтә хурлыҡҡа ҡаласаҡ! Өмөтлө үә ымһындырғыс киләсәк урынына, ялтырауыҡ погондарыңдан яҙып, хәбесханаға[150] эләгеүең дә бар. Эйе, бик ихтимал.

Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә ошоларҙы уйлап өлгөргән Тимашев, ҡәһәрле ҡалмыҡтың түбәнһеткес ҡыланышы нисек кенә намыҫына теймәһен, тешен ҡыҫып, тыйылырға мәжбүр булды. Тыйылды һәм, бәғзеләре ҡылыстарын яланғасландырып, икенселәре һөңгөләрен бер-береһенә төбәп ҡара-ҡаршы уҡталған казактар менән ҡалмыҡ яугирҙарының араһына инде. Шул рәүешле, урам уртаһында ҡан ҡойоп, яғалашырға етешкән ҡоралы арсыйын[151] айырҙы. Быны күреп, кем яғына ауырға белмәй аптырашып торған татарҙар еңел һуланы. Казактар араһында суҡынып алыусылар ҙа күренеп ҡалды.

Тимашев ауыҙ-мороно ҡанға туҙғып алдында торған һуҡыр ҡарт менән һүҙ көрәштереүҙең файҙаһыҙ икәнлеген, ниһайәт, аңланы.

— Был ҡәҙәре лә арҡыры булыр икән шайтан тоҡомо! — Әллә башҡортто, әллә ҡалмыҡтарҙы һүгә-һүгә аяғын өҙәңгеләне лә, еңел генә һикереп, эйәргә ултырҙы: — Ярай, күрһәткегеҙ килмәһә, юлды үҙебеҙ табырбыҙ. Тик быныһы үҙегеҙгә ҡиммәтерәккә төшөр! Ай-һай, ҡиммәт түләрһегеҙ. Быныһын вәғәҙә итә алам.— Ул, ҡапаҡ яуҙыра-яуҙыра, атының башын шаҡара тартты.

— Самалап ҡара, эшем эйәһе. — Ҡолтой ҡарт уның зитына тейеүен белде. — Уралды артылыуы – йомро юлдан, ҡырын ятып семәрле көймәлә килеү, тип уйлайһыңдыр.

*[149]Моғаһәдә — килешеү, договор.*
*[150]Хәбесхана — төрмә, зиндан.*
*[151]Ҡоралы арсый — ҡоралланған һаҡсы төркөмө.*

Тылмас ҡарттың һуңғы һүҙҙәрен аҙағынаса тәржемә итеп торманы. Хәйер, Тимашев та башҡаса ныҡышманы.

Һыбайлы казактар бушап ҡалған ауыл урамы буйлап тегеләй-былай сабып уҙҙы, әммә Урал төпкөлөнә юл күрһәтә алғандай әҙәмде тап итә алманылар. Старшина, имеш, үҙ эштәре менән сығып киткән. Уның ҡайҙа һәм ни артынан йөрөгәнлеген бер кем белмәй ҙә, күрмәй ҙә. Баҡһаң, старшина үҙ эштәре хаҡында башҡаларға асыла һалып бармай икән...

Аптырауға ҡалған Тимашев ҙур булмаған хауасын әйҙәне лә серле йәйләүҙе үҙе эҙләп ҡарарға булды. Аҙым һайын тап булған ҡурҡыныслы бысҡылдар менән ваҡ шишмәләрҙе шаптырлатып кисә-кисә, һырт артынан һырт артыла торғас, башта шөйлә йомро ғына күренгән оло юл, әкренләп һүрәнләнә барып, бер аҙҙан бөтөнләй юҡҡа сыҡты ла ҡуйҙы. Хауасҡа сараһыҙҙан кире ҡайырылырға тура килде. Шулай бер нисә тапҡыр ҡабатланды. Ә юлһыҙ ерҙән самалап тура тартырға Тимашевтың йөрәге етмәне. Белмәгән-күрмәгән тарафтарҙа ысынлап аҙашып китеүе анһат ҡына ул.

Иртә менән ҡуҙғалған һыбайлылар аттарын аҡ күбеккә төшөрҙө, үҙҙәре лә, арманһыҙ булып көнө буйына бушҡа йөрөгәндән һуң, кисләтеп кенә әйләнеп ҡайттылар. Теүәл бер көндө әрәмгә үткәргән ҡара бауыр Тимашев, тыштан һыр бирмәгән булһа ла, бар ғәм алдында ҡолпаһын[152] ныҡ ҡаҡшатҡан Барсынға ҡарата асыуын күңеленең бер мөйөшөнә йәшереп ҡуйҙы.

Тимашевтың писарын уйламағанда-көтмәгәндә шулай анһат ҡына табып алыуы Куприянды кинәт йөрәкһетеп ебәрҙе. Әммә табыуы – ярты эш, нисек итеп ошо хаҡта шым ғына Тимашевҡа еткерергә? Сәбәләнеп-ҡабаланырға ярамағанлығы аңлашыла: ашығып эште боҙоп ҡуйыуың бар. Подполковник шымсыһы икәнлегеңде белә ҡалған хәлдә, ауыл халҡы аяп тормаясаҡ. Хәйер, тиң күреп һыйындырған кешеләр генә түгел, үҙен айырылмаç ҡушағаға һанап, йәнәш йөрөп яткан аскернә, йолҡош Селивановтың да уйында әллә ниҙәр барҙыр әле. Ситтәргә түгел, үҙ нәçеленә ышаныуы ҡыйын бынауы болғауыр заманда.

Исем өсөн ҡуйынына биш-алты йомарлам күгәргән ҡаты ҡорот тығып алған Куприян ҡәҙерле баҙҙарына ҡайтып еткәнсе ошо хаҡта баш ватты. Шул сәбәпле, һөйләшеүенең дә бер рәте булманы. Юлдашының һүҙҙәрен йә аңламай ҡалып, ҡабатлап һорай, йә бөтөнләй ишетмәй яуапһыҙ ҡалдыра. Һүҙгә әүәç Куприяндың шулай ҡапыл ғына үҙгәреп китеүе Терентийҙы ғәжәпләндерһә лә, әлегә ул өндәшмәй тороуҙы хуп күрҙе. Юлдашындағы сәйер үҙгәреш уны ныҡ һағайтты.

Өңдәренә етеп, йән аçрарлыҡ тамаҡ ялғағандан һуң, үлтереп йоҡо баçа башланы. Артыҡ күп йөрөүҙән ифрат талсыҡҡан тән ял һорай. Күләгә урында кибеп, хуш еçен шул килеш һаҡлаған күрән өçтөнә ауырға саҡ өлгөрҙөләр, күҙҙәре ирекһеҙҙән йомола ла башланы.

— Куприян, ошо халыҡты яманлаһаң да, мәлендә улар һине бәләнән йолоп ҡалған түгелме? Шыҡһыҙ ауыр көндәрҙә ҡуйынына һыйындырып, үҙеңә таҡатоҡа тәғәме менән уртаҡлашҡан. Ә бөгөн килеп, һин шуларҙың ҡышҡылыҡҡа тип әҙерләгән ризыҡтарына һөмһөҙ рәүештә бысраҡ ҡулыңды һуҙҙың. — Терентий көтмәгәндә өңдәшен шаңҡытты.

[152] *Ҡолпа — абруй.*

— Шунан? — Тегеһенең ҡалын тауышы гөрөлдәп китте. – Быны менән нимә әйтмәксе булаң?

— Шунанмы? Шунан һуң ниндәй әҙәм тиергә һине? — Битараф ҡыланған Терентий юрый иҫнәгән булды. — Әйт әле миңә шуны.

Иптәшенең килделе-киттеле һүҙҙәренән ҡапыл ғына йоҡоһо осҡан Куприян мәрәкәләгәнде аңламаны.

— Ә үҙең һуң? Үҙең урлашманыңмы? — тине уҫал итеп.

— Мине ғәфү итергә була, сөнки береһенең дә күргәне юҡ. Мин дә уларҙы шыпа белмәйем. Ә һине барыһы ла таный, хатта үҙ иткән булаларҙыр әле...

— Туҡта, туҡта! Ҡапыл ғына ни булды үҙеңә, Селиванов? — Куприян тамам аптырауға ҡалды. – Һүҙҙәреңдең мәғәнәһе юҡ та баһаң.

— Һиңә нисектер, Куприян, ә миңә оят. Ифрат оят!

— Астан үлгең килмәһә, оятты йәшереп тораһың инде ул, дуҫ, — тип мығырҙаны Куприян. — Юғиһә, быны ише ҡырағай урманда ятҡан көйө күрәләтә аяғыңды һоноуы ла оҙаҡ түгел.

— Ай-һай, бер аслыҡ ҡына йөрөтәме икән һине, Куприян? Бик икеле... — Был юлы Селивановтың тауышы етди яңғыраны. – Әллә мәйтәм...

— Нимә тинең?! — Көтмәгәндә тырнаҡ аҫтына шырау ҡаҙалған кешеләй һиҫкәнеп киткән Нуштаев тороп ултырҙы ла ҡараңғы-юҡҡа ҡараштары менән Терентийҙы эҙләне. — Бәйләнмә әле миңә!

— Бая, сылбырға ултыртылған ерән әҙәмде күргәс тә, төҫөң ҡасты. Хатта ағарынып киттең түгелме?

— Уныһын ҡайҙан алдың тағы? — Был юлы Куприянды аңғармаҫтан ҡорт саҡтымы ни! Шулай ҙа ирең һаман һыр бирмәгән булды. — Күҙеңә яңылыш күренгәндер. Ныҡ асыҡҡанда күҙ алдында шулай һәр төрлө сүрәттәр пәйҙә була башлай бит ул.

— Йөҙөңдән шәйләнем...

— Юҡты һөйләп башымды ҡатырып ятма, зинһар! — Куприян Терентийҙы тупаҫ бүлдерҙе.

— Йә ярай, тыныслан, дуҫ, — тип хихылданы Терентий. — Шаярттым ғына. Күңелеңә ауыр алма.

— Шаярткан берәү. Тинтәкһең һин, шаяртыуың да тинтәктәрсә. — Куприян ризаһыҙлыҡ белдерҙе.

— Хоҙай нисек яралтҡан. — Терентий тәмле итеп иҫнәп алды ла икенсе ҡабырғаһына әйләнеп ятты. — Йоҡлайыҡ булмаһа, Куприян. Иртәгә байрам түгел.

— Был телең һиңә оҙаҡ йәшәргә бирерме икән, Селиванов. Нисек уйлайһың? — Көтөлмәгән һөйләшеүҙән бөтөнләй йоҡоһо ҡасҡан Куприяндың тауышында ҡапаҡлау ғәләмәте ишетелеп ҡалды.

— Әйттем бит, шаярттым, тип. Нимәһенә сыпраңлайһың?

— Бынан ары уйнап һөйләһәң дә, уйлап һөйлә. — Куприяндың баҫыла төшкән тауышында яһалма йомшаҡлыҡ тойған Селиванов өндәшмәй ҡалыуҙы хуп күрҙе. Әммә Терентийҙың алда әйткән һүҙҙәре тейешле маҡсатына еткән ине. Ҡапылғара һеркелдәгән Куприяндың тыныслығы бөттө. Ул тегеләй-былай әйләнеп-тулғанды һәм йоҡлап китә алмай оҙаҡ аҙапланды.

Шаярткан булып ҡыланһа ла, артығыраҡты ысҡындырғанын һиҙеп алған Терентий ҙа һағая төштө. Ошо хәсис йән менән уға әллә күпме йәнәш йоҡлап, көн итәһе бар бит әле. Куприяндың үҙен-үҙе тотошо ысынлап оҡшаманы уға, шуға күрә уйламайыраҡ әйткәненә үкенә биреп ҡуйҙы. Үтә тәғәнле ҡылана

шул бөгөн юлдашы. Тәү ҡарауға бер ҡатлыраҡ күренгән Куприяндың тиген кеше түгеллеге инде асыҡ ине.

Ҡараңғы баҙҙағы икәү, яҡын тумарлыҡта тамаҡ йыртҡан аһәңһеҙ тартай тауышы менән ҡуйы таллыҡта өҙгөләнгән былбыл ауазына ҡолаҡ һала-һала, йоҡлағанға һалышҡан булып, таңға тиклем бер-береһенән шикләнеп ятты. Йөрәктәре кинәт ҡабынған урыҫтарҙың береһе икенсеһенең тиҙерәк әүен баҙарына китеүен көттө. Шул рәүешле һәр икеһе лә, ойоп китмәҫкә тырышып, иртәнге йоҡоға баш бирмәй ҡырталашты.

Керпек тә ҡаҡмаған Куприян шым ғына ҡалҡынды ла әлеге тауыштарға ҡолаҡ һалып ултырҙы. Сәйерерәк тә, мәғәнәһеҙ ҙә күренгән әшнәһенең тигеҙ һулышы уны тынысландырғандай булды. “Йоҡланы шикелле, мәңгелек мәрткә киткер”, — тип уйлап ҡуйған Нуштаев оло һаҡлыҡ менән сығыу яғына ҡуҙғалды. Ҡыу күрәндең ҡыштырлауы уны шып туҡтарға мәжбүр итте. Туҡтаны ла йәнә бер талай тыңлап торҙо. Терентий мыңғыр-мыңғыр әйләнеп ятты ла тынды.

Үҙенсә Селивановҡа һиҙҙермәй генә өңдән сыҡҡан Куприян күкрәк тултырып тын алды. Шулай ҙа һуҙылып торорға ваҡыт юҡ, был тирәнән яҡтыра башламаҫ элек китеп ҡалыу кәрәк. Ул, ҡабалан баҫып, Йәйектүбә тауына ҡарай атланы. Артыҡ күҙҙәргә салынмай ғына барып еткәндә... Бәлки, кире килергә лә кәрәк булыр әле. Тегендә нисек ҡушырҙар...

Куприян тумар менән ҡапланған соҡор-саҡырлы Һаҡмар үҙәне буйлап әлә-гә-йығыла күп ара ла үтергә өлгөрмәне, ҡапыл:

— Туҡта, әҙәм аҡтығы! — тип тамаҡ ярып ҡысҡырған тауышҡа тертләп ҡатып ҡалды һәм әкрен генә боролоп ҡараны. Иртәнге шыйыҡ томанды йырып, уның артынан, ҡулдарын болғай-болғай, Терентий йүгерә ине. — Туҡта, тием, ҡәбәхәт! — Шәп йүгереүҙән тыны ҡыҫылып, тыш-пыш килгән Терентийҙың асыҡ-зәңгәр күҙҙәре ут булып яна, ә ҡиәфәте ҡорбанына ташланырға йыйынған януармы ни! Бер мәлгә юғалып ҡалған Куприян шөрләй биреп ҡуйҙы хатта: — Ҡайҙарға йыйындың былай таңдан, ә, дорогой? — тине ул мәғәнәле итеп.

Ҡапыл нимә тип яуап бирергә белмәгән Куприян этенеп-төртөндө:

— Мин... ни... ана... эс бора.

— Ялғанлама, юха! Дөрөҫөн әйт! — тип ярһыны Терентий.

— Тыныс ҡына йоҡлап ятһаң ни була, дуҫ? — Бер аҙ тынысланып, үҙен ҡулға алырға өлгөргән Куприян уҫал йылмайҙы. — Һиңә лә, миңә лә шулай яҡшыраҡ булыр ине...

— Әллә тегеләрҙе һатырға уйланың? — Селиванов баш бармағы менән Уралтау яғына күрһәтеп ажарланды. — Өмөтләнмә лә, барыбер юл ҡуймам!

— Ба! Кемде һатайым мин? Кәрәктәре бар ине. — Куприяндың ҡыланышы күрәләтә яһалма килеп сыҡты. — Әйтәм бит, йомош менән китеп барам. Ә һин бар, йоҡла.

Куприянға, әле бая ғына үҙенә ҡушаға һаналып, шырлыҡ менән ҡапланған тау-таш араһында юл күрһәтә йөрөгән Селивановтың тере ҡалырға тейеш түгеллеге асыҡ аңлашылды. Ҡараңғы-юҡҡа күҙҙәренә тексәйеп, юлына арҡыры төшкән, кәүҙәгә үҙенән күпкә ҡайтышыраҡ, ҡаҡса, кәгез, әммә иҫ киткес еңмеш әҙәмгә үртәлеп торҙо, гүйә, ҡарашы менән өтөп алырға теләне.

— Их, Селиванов, Селиванов, төнәп кенә ятһаң, һинән дә бәхетлерәк кеше булмаҫ ине, ә. Минең телем — минең бәләм, тиҙәрме әле? — Нуштаев яман көләмһерәне. — Тәкәтте ҡороттоң да баһаң...

— Дөрөҫ, йоҡлап ятһам, һинең өсөн яҡшы булыр ине, ә кемдер өсөн...

— Туҡта, лауылдама! Әйҙә, анауы ышыҡҡа инеп, тыныс ҡына һөйләшәйек. — Куприян Терентийҙы Һаҡмар бөгөлөнөң ҡалын таллығына табан өҫтәрәне. Шул рәүешле Терентийҙы, яшыҡ беләгенән тотоп, елтерәтә-елтерәтә оло ятыу янына алып килде. — Бына ошонда ғауғалашмай ғына аңлашайыҡ.

— Әйт, кемде һәм ни өсөн һатырға китеп бараһың? — Әҙәм арҡырыһы Селиванов ҡулын тартып алды. — Һинең менән уртаҡ һүҙем дә, эшем дә юҡ минең! Һин… һин – һатлыҡ йән! Шымсы, ҡотҡосо! Йә, түгел тип ҡара!

— Бына хәҙер! — Куприян, уны-быны уйламай торған Терентийҙың тарамыш муйынынан эләктерә һалып, күмәгәйенә баш бармаҡтарын батырҙы. Боғаҙы быуылған Терентий “ыҡ” итергә өлгөрмәй ҡалды.

Килбәтһеҙ йыуан, ғәләмәт көслө бармаҡтар ҡорҡолдайына бата барған һайын, Терентийҙың күҙҙәре нығыраҡ аҡайҙы, йөҙө буҙарып, хәле мөшкөләйҙе. Тиҙ арала ул бөтөнләй ҡаршылыҡ күрһәтә алмаҫ хәлгә етте лә тынып ҡалды. Куприян шунда ғына тимер ҡыҫҡыс ише бармаҡтарын бушатты. Тегеһенең килбәтһеҙ бәлжеп төшкән кәүҙәһе ҡаҡ ергә лырҡ итеп ҡалды. Йәнен алыусыһы, уның барлау тамырын ҡапшап ҡарағандан һуң: “Дөмөккән, яртаҡыл”, — тигән һығымта яһаны. Йәнһеҙ кәүҙә менән артабан ни эшләргә белмәй торғандан һуң, ҡорбанын яғаһынан һөйрәп, тәрән ятыуға ырғытты:

— Шамбылар быйыл һимеҙерәк булыр. — Уҫал йылмайып, теш араһынан серт төкөрөп ҡуйҙы: — Тик тормаған телдә бәлә бар...

Нуштаев ышанысл ы аҙымдар менән артабан атланы.

...Һаҡмарҙың өтөп алыр һалҡын һыуы Терентийҙың инде туҡтаған йөрәген ҡабаттан талпынып тибә башларға мәжбүр итте. Куприян яңылышты. Һаҡмар Ғазраил булманы, ә, киреһенсә, үлеп барған тәнгә, туҡтап ҡалған ҡәлбкә яңы көс өрҙө. Инде йәнгә талашып, аяҡ-ҡулы ҡарыша башлаған Терентий, һалҡын һыуға ҡапыл сумыуҙан, шунда уҡ иҫенә килде. Килде лә, башын ҡалҡыта биргән көйө, күкрәк тултырып тын алды һәм... йылғаға нисек килеп эләгеүен хәтерләргә тырышты.

Терентий, кейеменән һыу субырлатып, һөҙәк ярға сыҡҡас, муйылға тотоноп хәл йыйҙы. Уға көс менән бергә әкренләп иҫ тә ҡайта ине. Ҡапыл өркөттәше хәтеренә төштө: “Куприян!” Ул асыулы ярһыуҙан хатта өшөүен дә онотто. Куприяндың теге үҙе һөйләгән сиреүгә ошаҡ еткермәккә йүгергәнлегенә хәҙер шик ҡалманы.

“Башҡорттар үҙ еренә рөхсәтһеҙ килеп ингән кешене тотоп алһалар, утта терeләй өтөп ашай ҙа ҡуялар”, — тип ҡурҡытҡандарын ишеткәне бар Терентийҙың, ул ошоға ышана биреп тә ҡуя ине. Ләкин әлеге мәлдә был турала уйлап, икеләнеп торорға ваҡыт юҡ. Урлашып та, башҡа хәрәм юл менән дә күпме генә зыян килтермәһен, үҙе әлеге халыҡтан ошоғаса бер йәбер ҙә күргәне булманы. Ҡыҫҡаһы, үҙ башыңды аяп торор саҡ түгел! Ауыл халҡын иҫкәртергә кәрәк! Иҫкәртергә һәм тиҙерәк күтәрергә! Юғиһә, һуң булып ҡуйыуы ихтимал. Ауылды ҡыйратып вайран итһәләр, йәйләүҙәгеләрен ҡырып һалырҙар.

Күҙалланған шау-шыу менән ҡотолғоһоҙ фажиғәнең төп сәбәпсеһе теге, сынйырға ултыртылған ерән әҙәм икәнлегенә асыҡ төшөнгән Терентий, аҫтыртын Куприянды эйәртеп, юлды өйрәтә барыуына үкенеп бөтә алманы. Һәр кемдең эсен ярып та, күңелендә ни ятҡанлығын тыштан ғына ҡарап та белеп булмай шул. Үҙе кеүек үк бер ярпы, тип ҡабул иткәйне бит уны. Яҙа-йоҙа йылы һүҙ менән йылтырауыҡ мөғәмәләгә, нишләптер, тиҙ генә ышанды ла ҡуйҙы.

Терентий, бар тәүәккәллеген туплап, ауылдың иң осондағы яңғыҙ иҫке өйҙөң бәләкәс кенә ҡарындыҡ тәҙрәһен ҡыптырлатты.

— Кем анда? — Эстән ҡарлыҡҡан мөсһөҙ тауыш ишетелде.

— Хужа кеше! Мин Селиванов тигән уҙаман булам. — Тауышын күтәрмәй генә һөйләшкән Терентий тыныс булырға тырышты. — Миңә берәй түрәгеҙ кәрәк ине. Бына-бына афәт сығырға тора...

— Ниндәй афәт тағы? Ни һөйләйһең һин, мосафир? — Тәпәш ишектән эйелә биреп Ҡолтой ҡарт килеп сыҡты. Ил буйлап күп йөрөгәнлектән урыҫ телен ярайһы уҡ яҡшы үҙләштергән бабай, күрмәгән күҙҙәрен бәзерәйтеп бер килке торғандан һуң: — Кем һин? — тип ҡабатлап ҡыҙыҡһынды.

— Мин – урманда йәшеренеп йөрөгән бер ҡаҫҡын...

— Ҡаҫҡындар менән хәҙер мир тулған. — Ҡолтой Терентийға әйтеп бөтөрөргә ирек бирмәне. — Әле ауылда берәүһе йөрөп ята...

— Ана шул мәлғүн шымсы булып сыҡты! Ғәскәрҙе әйҙәп, карателдәргә йәйләүегеҙҙең ҡайҙалығын өйрәтә бармаҡсы!

— Һин урыҫмы? — тине Ҡолтой көтмәгәндә.

— Эйе. — Терентий аптырай төштө.

— Бая берегеҙҙең "игелеге"н күрҙем инде, шуның өсөн мин һиңә нишләп ышанырға тейешмен?

— Аңла, әле ул осраҡ түгел, дед! Был юлы йә йәшәү, йә үлем мәсьәләһе хәл ителә! Ауыл халҡының яҙмышы беҙ икәүҙең ҡулында.

— Йәйектүбә башындағы хаиндарҙы әйтәһеңдер. — Ҡолтой ҡарт, аҙ ғына уйланып торғандан һуң, ыңғайлай бирҙе.

— Эйе, эйе, һеҙҙән алыҫ түгел! Давай, күтәрәйек халыҡты!

— Халыҡты күтәреү әлегә кәрәкмәҫ, ә старшинаның өйөн өйрәтәм, — тип ризалашты ҡарт.

— Ашығырға кәрәк, бабай! Ашығырға!

— Теге остан өсөнсө йортҡа бар. Ул үҙе хәл итер.

— Спасибо, милый человек!

Биксәнтәй оҙаҡ көттөрмәне. Деһерләтеп ҡапҡа шаҡыуға ҡабаланып килеп тә сыҡты. Сыҡты ла Терентийҙың беренсе һүҙҙәренән үк барыһына ла төшөнөп алды. Башынан: "Шилма Куприяндың тиген әҙәм түгел икәнлеген һиҙгәйнем бит инде", — тигән үкенесле уй үтте. Тәүге һөйләшкәндә үк ниндәйҙер аңлайышһыҙ шом-хәүеф бөркөлә ине унан. Әммә үткән эш өсөн илап торор мәл түгел, йәһәтерәк ҡуҙғалырға кәрәк. Ашығырға! Ә быныһы һуң, старшина алдында өтәләнеп торғаны, ниндәйерәк кеше? Тегенең ише түгелме? Юҡ, оҡшамаған. Быныһы асыҡ-ярыҡ күренә. Эсендәге тышында һымаҡ. Әйткәндәре лә ысын йөрәктән кеүек, ҡыланышы ла яһалмаға оҡшамаған... Иң мөһиме: Сатраның ҡайҙалығын беләм, ти. Мәгәр тәғәнле, боҙоҡ әҙәм икән, ул быныһын алдан асып һалмаҫ ине...

— Һыбай йөрөгәнең бармы? — тип ҡыҙыҡһынды Биксәнтәй.

— А как же! Егерме йылдан ашыу һуҡа егеп ер һөрҙөм, оҙон күкрәк арба менән ағас...

— Ана эйәр, ә ат теге һарайҙа тора. Тиҙ бул!

— Икәү генә барабыҙмы ни, старшина?

— Әлегә башҡаларҙы ҡуҙғытмай торайыҡ. Бәлки... — Башлағанын әйтеп бөтөрмәгән Биксәнтәй, ҡайын ороһонан юнып эшләнгән эйәрен йөкмәп, ат аҙбары яғына йүнәлде. — Ҡапылыраҡ ҡуҙғалайыҡ.

— Әллә инде миңә ышанып етмәйһең?..

— Тәү күргән һәр кешегә тулыһынса ышаныуы ҡыйын бөгөн, — тип Биксәнтәй урыҫты бүлдерҙе.

— Эйе, уныһы ла хаҡ. — Атын эйәрләй һалған Терентий һыбай атланды: — Старшина, мин... хужамды дөмөктөрөп ҡастым.

— Һинән алдағы бер эшем эйәһе лә шулай тигәйне...

— Тағы Куприянды әйтәһеңме? Төптө ялған! Ултырҡкан һеҙҙе. Бер ниндәй ҙә ҡасҡын түгел, ә батша офицерының шымсыһы ул.

— Йә ярай, телеңә һалышып торма, ваҡыт тар. — Биксәнтәй ҙә атына менде. — Киттек! Кем икәнлегеңде юлда күрһәтерһең. Ышанысты аҡлаһаң – ауыҙыңа бал да май, ә инде хөсөтләшеп, һатырға маташаһың икән, ахырын үҙең беләһең.

Ни яҡты, ни ҡараңғы мәл. Урман эсенән үткән беленер-беленмәҫ һуҡмаҡтан ике һыбайлы сабып бара. Юҡ, сапмай улар, осалар ғына! Ярһып ҡуршылдашҡан арғымаҡтары аҡ күбеккә төшкән. Һыбайлыларҙың да, аттарының да күҙҙәренә аҡ-ҡара күренмәй. Яланғас ҡулдарға, сикәләргә һуғылған ботаҡ остарының әсеттереп һыҙырыуына ла иғтибар итмәй, үксәләре менән бөйөрҙәрен төйгөсләй-төйгөсләй, менгеләрен ҡыуалар ғына. Башта Терентийҙы һынабыраҡ барһа ла, уның ихласлығын күргән Биксәнтәй бер аҙҙан тынıслана төштө.

Аттарҙы тамам хәлдән тайҙырып, Сатра асығына еткәндә буйтым яҡтырғайны инде. Әүәл Биксәнтәй Әхмәтйәнде тапты.

— Барыһын да йый! Тиҙ генә! — тине ул, өтәләнеп.

— Ни булды, Биксәнтәй ағай? — Урынһыҙға бер ваҡытта ла ҡабаланмаҫ, тыныс холоҡло байҙың көтмәгәндә ҡырҡа үҙгәреп китеүенә хайран ҡалған Әхмәтйән уның шулай иртә менән килеп етеүенең тиктәҫкә түгел икәнлеген шунда уҡ һиҙеп алды.

— Аҙаҡ белерһең! Ғауамды йый, тинем бит! — Старшина Юламанов ғүмерендә беренсегә кешегә тауыш күтәреп өндәште.

Ҡатын-ҡыҙ менән бала-сағаға урманға, ышыҡ урынға, китеп торорға ҡушылды, тирмә-сатырҙарҙа ирҙәр генә ҡалырға тейеш. Тимашевтың уйында ни барын кем белә...

Күҙ алдында ағарынып киткән Миргородскийҙы баҙҙан сығарып, ҡулдарына бығау һалдылар ҙа оҙон сылбырға эләктерҙеләр.

— Яманйылға тамағындағы тәрән үҙәккә апарығыҙ. — Быныһын Биксәнтәй Аҡсура менән Байғазыға бойорҙо. — Ҡустылар, һеҙгә, ышанып, иң яуаплы эш тапшырыла. Ҡарағыҙ уны, ысҡындыра ҡалһағыҙ, бөтә уйланылғанды харап итерһегеҙ.

— Мин барайым, бай ағай. — Әхмәтйән алғараҡ сыҡты.

— Юҡ, һиңә башҡа эш бар, — тип өҙә һуҡты старшина.

— Ә беҙгә ҡасанға тиклем унда булырға? — Сынйыр осон тотоп алған Аҡсура әллә кем булып китте.

— Үҙем барып әйтмәй тороп, бер яҡҡа ла китмәйһегеҙ ҙә бер кемгә ышанмайһығыҙ! Аңлашыламы?

— Аңлашыла.

— Оторо һаҡ ҡыланығыҙ, егеттәр, ысҡындырып ебәрә күрмәгеҙ вафаһыҙҙы. — Биксәнтәй йәнә бер ҡат киҫәтеүҙе кәрәк тапты. — Наибын аманат итеп тотҡанды белә ҡалһа, Тимашев беребеҙҙе лә аяп тормаҫ.

Әлеге һөйләшеүҙе бары дүрт кеше генә ишетте. Миргородскийҙы ҡайҙа алып киткәнлекте лә тик улар ғына белә.

Писарҙы нукталы тай ише етәкләп алған Аксура менән Байғазы күҙҙән юғалыуға, Биксәнтәй, ауыҙ эсенән генә доға укып, битен һыпырҙы.

— Быларын таңашка[153] куй ҙа яңыларын эйәрлә! — Ул, тирләгән аттарға күрһәтеп, Әхмәтйәнгә фарман бирҙе.

— Нисәүҙе эйәрләйем?

— Өсәүҙе. Иң шәптәрен!

Әхмәтйән уһылдашып, һаман тын һуккан арғымактарҙы лапаҫ аҫтындағы күләгә урынға индерҙе, аркалары һыуынғанса тип, эйәрҙәрен һалдырмай торҙо. Баҙлап килгән эйәр аҫтын капыл һалкын һуғыуҙан аттарҙың һырт буйына шеш сығыуы ихтимал. Быныһын ғына өлкән көтөүсегә өйрәтеп тороу кәрәкмәй. Ошондай киҫкен мәлдә лә башкорттоң шулай аттарын кайғыртыуы Терентийҙы ғәжәпкә калдырҙы.

Саңдыйорт саңдауына еткәс, Биксәнтәй, атынан төшөп, Әхмәтйәнде бер ситкәрәк әйҙәне.

— Хәҙер Бәләкәй йылға башындағы карағайлыкка барығыҙ ҙа шау-шыу баҫылғансы шунда тороп тороғоҙ, — тине. Шунан, колағына эйелә бирер: — Абай бул, — тип бышылданы.

Терентий башкорттарҙың шыбырлашыуын, әлбиттә, ишетте, шулай ҙа өндәшмәй калыуҙы кәрәкле тапты.

— Тирләгән аттарҙы күреү менән, караттар барыһын да шул әҙере аңлар, шуның өсөн әлегә артык күҙгә салынмай тороуығыҙ хәйер. — Биксәнтәй Әхмәтйән менән Терентийға ныклап тағы бер әйтте. — Аңлайһыңмы, ызнакум? — тип урыҫка айырым өндәште.

Аңламай буламы Терентий. Шымсы Куприян өсөн ул бит хәҙер үлгән! Осрашкан хәлдә бөтөнөһө харап буласак: ниәтләгән эш тә, ауыл да.

Тәғәйен урынға еткәс, боҫорашып торған аттарҙың баштарын өҫкә күтәрә биреп бәйләнеләр ҙә һыуындырырға куйҙылар.

— Танышайык булмаһа, егет, — тип алсак йылмайҙы урыҫ. — Мин – Терентий булам.

— Әхмәтйән. — Соғол егет уң кулын һуҙҙы.

— Ғүмер бакый ат өҫтөндәһегеҙ, нисек итеп түҙәһегеҙҙер, м-да, — Терентий бот төптәрен ыуғыланы, сүгеп-сүгеп алды. — Һыҙламаған урын юк, брат.

— Эйе, эйәр нык һуға ул. Һыбай йөрөргә лә күнегеү кәрәк. Ничаво, өйрәнерһең.

— Эйе, күптәнән эйәрҙә йөрөгән юк ине, онотолоп та бара, — көскә яҙылған Терентий тегеләй-былай йөрөштөрөп алды.

Әхмәтйән башкаса өндәшмәне, саукаға һөйәлгән килеш, күҙҙәрен кыҫа биреп, үҙ уйҙарына бирелде.

— Ахметка, ә һин беләһеңме, ошо ығы-зығының сәбәпсеһе мин бит, — тине Терентий көтмәгәндә.

— Нисек һин?

— Эйе, мин, һантый!

— Аңламайым...

— Үҙем дә белмәҫтән, бер хаинға һеҙҙең йәйләү юлын күрһәттем, алйот! — Терентий асырғанды. — Тик алама уй менән эшләмәнем быны. Унның шымсы икәнлеген дә белмәнем. Бына тәре!

Ни өсөн Биксәнтәй ағаһының ошо кафырҙан күҙ яҙлыктырмаҫка кушыуы

[153]*Таңашка куйыу — тирләп кыҙған атты һыуындырыу.*

сәбәбен Әхмәтйән әле килеп тулыһынса төшөндө. Тимәк, урыҫҡа ышанып етмәй.

— Йәйләү урыны – Сатрабыҙ — изге урын. Ул ергә бер килмешәктең дә аяғы баҫырға тейеш түгеллеге хаҡында беләһеңме? — тип ҡыҙыҡһынды Әхмәтйән, бер талай шым ултырғас.

— Уныһын да белмәнем.

— Үҙең нисек барып тарының унда?

— Осраҡлы ғына. Ҡағы яҡтарынан ҡасып барышлай...

— Ә был юлы нимә ҡаранығыҙ?

— Тамаҡ тамуҡҡа илтә, тигәндәй...

— Аңлашылды! — Әхмәтйән урыҫты бүлдерҙе. — Урлашырға, тимәк.

— Шулайыраҡ килеп сыға инде...

— Йә ярай, Терентий, — Әхмәтйән дуҫтарса өндәште. — Үткәнде кире ҡайтарып булмаҫ, был яғына абайыраҡ ҡылан, алдыңды-артыңды ҡарап йөрө. Куприян ише таҫма телдәр, шөһрәт менән аҡса хаҡына әсәһен һатыр әҙәм аҡтыҡтары тулып ята бөгөн.

— Һин нисек уйлайһың, Ахметка, старшина миңә ауылда бөтөнләйгә ҡалырға рөхсәт итерме?

Әхмәтйән аныҡ ҡына яуап бирмәне, Терентийҙың асыҡ-зәңгәр күҙҙәренә ҡарап:

— Һиңә хәҙер караттар менән Куприян күҙенә салынырға ярамай, ошоноһон ғына әйтә алам, ә ҡалғанын белмәйем, — тип ҡуйҙы. — Артабанғы яҙмышыңды халыҡ хәл итер.

— Аңлашыла. — Терентий ауыр көрһөндө.

Өйөнә ҡабалан-ҡарһалан ҡайтып ингән Биксәнтәй, лапаҫ аҫтына инеп, исем өсөн салғы сүкергә тотондо. Ҡулы һәлмәк сүкеште бер күтәрә, бер төшөрә, күҙҙәре ике тимер араһында ҡалыуҙан иҙелеп, йоҡара барған ҡоросто күҙәтә, ә уйҙары әллә ҡайҙарҙа. Башында мең төрлө фекер сыуала старшинаның: "...Тимашев ярҙамсыһын аманатҡа алып дөрөҫ эшләнеме ул? Сиреүҙе, ярай, бер аҙға булһа ла тотҡарлар, ә ҡоһоро халыҡ иңенә төшмәҫме? Нимә килеп сығыр әлеге хәүеф тулы эшенән? Терентий ысынлап та ышаныслы әҙәмме? Әллә Куприян һымаҡ?.. Миргородскийҙың Сатрала икәнлеген ҡайҙан, кем аша белеп ҡалған ул? Ғөмүмән, Сатраның үҙен нисек тапҡан? Ошо ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә төҙәтә алмаҫлыҡ хата аҙым яһаманымы Биксәнтәй? Ул – утаға. Әлеге мәлдә уны хужа итеп һайлап ҡуйған Түңгәүер әммәте ҡорт-ырыу яҙмышын уға ышанып тапшырған. Тимәк, олоҫтоң киләсәге тулыһынса уның ҡулында..."

Биксәнтәйҙе береһенән-береһе шомлораҡ фараздар солғап ала. Түшке менән бәрелешкән сүкеш сыңын ҡолағы ишетмәй, тапала барған салғыны күҙҙәре күрмәй...

Шул рәүешле уйҙар ҡосағына сумып ултырған старшина кинәт һиҫкәнеп китте: ҡапҡа шаҡыйҙар түгелме һуң?! Бына ул хәл иткес мәлдәрҙең береһе! Биксәнтәйҙең үҙ-үҙен тотошонан, нисегерәк һөйләшеүенән күп нәмә торасаҡ хәҙер. Дошман алдында һалҡын ҡанлылыҡ һаҡлап, үҙен лайыҡлы тота алырмы ул? Һынатып ҡуймаҫмы? Һынатмаҫҡа тырышыр. Ырыу бәҫен төшөрөү килешмәҫ...

Ҡапҡаны емереп килеүселәргә һарыуы ныҡ ҡайнаһа ла, бая уйлағандарын иҫтә тотҡан Биксәнтәй тыныс булырға тырышты. Артыҡ өтәләнмәй генә урынынан тороп, арҡыры ағас һалынған ҡапҡа янына килде. Яһалма етдилек менән:

— Кем йөрөй анда эш бүлдереп? — тигән булды. — Бер тынғы юҡ...

— Тынғылыҡты хәбесханала табырһың, старшина! — Тыштан Тимашевтың тауышы ишетелде. — Ас ҡапҡаңды, йә иһә...

Ошо екһеткес тауыштан инде биҙә башлап, сырайы һытылған Биксәнтәй, бәйләнсек себендән ҡотолорға теләгәндәй, ҡулын һелтәп ҡуйҙы:

— Йә иһә нимә булыр?

— Хөкүмәт хеҙмәткәрен аманат итеп тотоусыға ни булырын үҙең самалайһыңдыр, бунтовщик! — Яртылаш асылырға өлгөргән ҡапҡа аша ҡарап кинәйәле йылмайған Тимашевтың ҡып-ҡыҙыл сырайында сикһеҙ ҡәнәғәтлелек сағыла. Һәләк ҡәнәғәт йөҙҙә йәшертен мыҫҡыллау ҙа, асыҡтан-асыҡ тантана итеү ҙә күренеп ҡала. Биксәнтәйҙең ошо һөмһөҙ томшоҡҡа лаҫҡылдата төкөргөһө килде, әммә ләкин хистәргә бирелеп торор мәл түгел. Әлегә ул яңғыҙы, ул көсһөҙ, уның бурысы — ваҡытты һуҙыу һәм дә армайҙарға бәйләнер сәбәп табырға юл ҡуймау. Ә бының өсөн иҫ киткес тыныслыҡ һаҡлай, ташып килгән хәтһеҙ хистәргә баш була белеү кәрәк.

— Үҙең алып киләһеңме минең наибты, әллә юлды күрһәтәһеңме? — Тимашев йәнә Биксәнтәйгә уҡталды.

— Ниндәй хеҙмәткәр? Ниндәй наиб ти ул? — Биксәнтәй аңламағанға һалышты. — Асығыраҡ һөйлә, подполковник.

Алдында торған ғәләмәт үҙһүҙле старшина менән тел сарлашыуҙың файҙаһыҙға ваҡыт әрәм итеү икәнлеген күргән Тимашевтың яһалма яҡты сырайы кинәт ҡараңғыланып, тауышы ҡырҡа үҙгәрҙе.

— Йыйын! Киттек йәйләүгә! — тип дорфа ғына бойорҙо ул.

— Әлегә йәйләүҙә минең йомошом юҡ.

— Һинеке булмаһа, беҙҙеке бар! — Старшинаның яһалма тыныслығына йәне үртәлә башлаған Тимашев, үҙен-үҙе тота алмайса, аҡырып ебәрҙе.

— Булғас, бәй, үҙең генә бар.

Сығырынан сығып, шартлар сиккә еткән подполковник ҡамсыһы менән Биксәнтәйгә киҙәнде. Ә тегеһе ҡымшанманы ла. Утлы нәфрәт сәскән йәшкелт күҙҙәр менән хәтәр ҡаты ҡараштан ҡаушап ҡалған Тимашев күтәрелгән ҡулын әкрен генә кире төшөрҙө. Эйе, Биксәнтәйҙең ҡарашында ябай әҙәми зат ҡаршы тора алмаҫлыҡ, хатта рухыңды ҡаҡшатыр ниндәйҙер кирәмәтле көс бар ине. Подполковник бит ошоно тәү тапҡыр килгәнендә үк тойғайны. Әле бына йән тетрәткес үткер ҡарашты тағы бер һынап ҡараны. Күҙ быуып, арбау тигәндәре ошо буламы әллә?..

Тимашев шымтайып ҡалған һыбайлыларына бороллдо ла, былай ҙа сығып килгән күҙҙәрен оторо аҡайтып:

— Күрәһегеҙме, старшина ғәйебен танып, Александр Иннокентьевичты үҙ ирке менән ҡайтарып бирергә теләмәй, — тине. Элекке олпат тауышы хәҙер, ни сәбәптәндер, сыйылдап ишетелде. Алан-йолан ҡаранып дауам итте: — Былай булғас, үҙебеҙгә эҙләп табырға тура килер. Әммә, белегеҙ, старшинаға был икеләтә ҡимматҡа төшәсәк.

Ҡапаҡ көсөнә өмөт бағлаған Тимашев күҙ ҡырыйы менән генә Биксәнтәйҙе күҙәтте. Ә уныһының йөҙөндәге бер ҡыл да тартылманы.

—Мәгәр аманат миндә булмаһа?

—Табырбыҙ! Алдыңа килтереп баҫтырырбыҙ! — тине Тимашев еңеүсе ҡиәфәтендә.

—Тапһағыҙ ни... булдырып ҡарағыҙ.

—Тағы бер киҫәтәм, Бикчентай, үҙебеҙ табып алған хәлдә һиңә бик ҡыйынға тура килер, ә инде үҙең иҡрар итһәң...

Тимашев, әйтерен әйтеп бөтөрмәй, тынып ҡалды, Биксәнтәй ҙә башҡаса өндәшмәне. Сабырлығы ҡаҡшаған өтөк подполковник аҡырына-баҡырына хауасын алға әйҙәне.

Биксәнтәй был мәлдә ҡарашы менән Куприянды эҙләп ҡараһа ла, уныһы һыбайлы төркөм араһында күренмәне. Старшина күңелендә Терентийҙың тоғролоғона ҡарата шик ярала биреп ҡуйҙы. Икеһе лә ҡотҡосомо әллә? Бынаһы бар хаслыҡты Куприян-Килдеғолға япһарып, үҙе ышаныс яуларға уйлаймы әллә? Шулай булмағанда, ҡайҙа Куприян? Терентийҙың әйтеүе буйынса, ул бит әтрәткә юл күрһәтеп барырға тейеш. Унһыҙ Тимашев йәйләүҙе таба алмаясаҡ...

Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә Биксәнтәйҙең башынан ҡырҡ төрлө уй үтте. Шулай ҙа бер һорауға ла аныҡ ҡына яуап таба алманы.

Язалау отряды сараһыҙҙан кире боролдо. Туҙан күтәреп уҙған атлы төркөмдө кәкре таяғына таянған Ҡолтой ҡарт һуҡыр ҡарашы менән оҙатып ҡалды. “Бына килде лә түгелме һуң теге саҡ, Әхмәтйәнгә әйткән хәтәр көндәр. Ир-аттың өлөшөнә төшкән көмөштән ауыҙ итер мәл етте. Аҫыл заттың һыналыр мәле”, — тип уйланды ул, йөҙөн ҡыуан елгә ҡаршы ҡуйып. Ошо замандың ҡасандыр бер килерен алдан фаразланы, юҡ, белде бит ул, әммә шул тиклем үк тиҙ булыр, тип уйламағайны. Эйе, ғәмәлдең яҡшыһы һағындырып ҡына килһә лә, аламаһы көттөрмәй ҙә, ялындырмай ҙа...

## V. Афәт

*...Башҡорт илкәйҙәрен утҡа тотҡас,*
*Алтынланды уның яурыны.*

(Халыҡ йыры “Тәфтиләү”)

Тимашев тағы бер йәйге оҙон көндө әрәмгә үткәреүенә оторо енләнеп, йонсоған әтрәте менән ҡараңғы төшөр алдынан ғына Һаҡмарбашҡа әйләнеп ҡайтты. Йөнтәҫ ҡаштары иләмһеҙ йәмерәйгән, былай ҙа ҡыҙыл йөҙө ныҡ бешкән ҡоңғорт-көрән сейә төҫөнә инеп, сырайы һытылған. Күҙҙәре асыулы нәфрәт сәсә, түңәрәк-келән сикәләре буйлап саң ҡатыш бысраҡ тир аға. Ярһыуҙан былайыраҡ, көсһеҙләнектән төшөнкөләккә бирелеп, аҡылдан яҙыр сиккә еткән подполковник, өҫтәүенә, быума тотҡан кешеләй, туҡтауһыҙ ҡалтырана. Уңышһыҙ булыры алдан уҡ билдәле сәфәренең бар ғәйебен Биксәнтәйгә япһарып, йәнә уға ҡаныҡты.

— Ну, старшина, ут менән шаяраһың шаярыуын! — тип төкөрөгөн сәсте. — Был һиңә... боком выйдет!

— Нисәнсе тапҡыр әйтәм инде, палкауник, һеҙҙең кешегеҙ миндә юҡ. Ышанмағасың, үҙеңә үпкәлә. – Тимашевтың Миргородскийҙы таба алмайса буш ҡул йөрөп ҡайтыуын уның һөйләшеүенән үк төшөнөп алған Биксәнтәйҙең күңеле үрсеп, эстән генә тантана итте.

— Юҡ, т... тимәк? — Бер ағарынып, бер буҙарған Тимашевтың хатта теле тотлоға башланы.

— Юҡ.— Биксәнтәй тыштан тыныс күренһә лә, күңел ептәре өҙөлөр сиккә етеп тартылған.

— Яҡшылыҡ менән һуңғы тапҡыр һорайым: ҡайҙа минең писарь?!

— Мин уны ҡайҙан белергә тейеш?— Старшина һорауға һорау менән яуап бирҙе.

— Бикчентай!—Тимашев кинәт үҙгәреп киткән һымаҡ булды.— Һин Һөйәнтүз (Саянтүз. – **ред.**) ауылы хаҡында ишеткәнең бармы?

— Тәфтиләү үртәгәнме?

— Тевкелев... Беләһең, тимәк. — Тимашев асыҡ мыҫҡыл менән ауыҙын салышайтты. — Белгәс һуң, тарих ҡабатланыр, тип ҡурҡмайһыңмы?

Подполковниктың тел төбөн шунда уҡ төшөнөп алған Биксәнтәй аптыранды, шулай ҙа бирешергә теләмәне.

— Ә һин воевода Сергеев тураһында хәбәрҙарһыңмы?— тине аҫтыртын кинәйә менән. — Саввичтың* яман эшен дауам итеп, уның яҙмышын ҡабатларға йыйынмайһыңдыр бит?

— Мин һине аңланым. Һин дә мине аңланың, старшина. Ләкин наибымды табып килтермәһәгеҙ, бер нәмә алдында ла туҡтап ҡаласаҡ түгелмен! Ҡапаҡлама!

— Ҡапаҡлау – ҡурҡаҡтар эше, палкауник, ә мин һинән ҡурҡмайым.

— Старшина, — тине Тимашев, ни әйтергә белмәй торғандан һуң. — Конфедераттарға ҡаршы һуғыш алдынан, изге Ҡөрьәнегеҙҙе үбә-үбә Бөйөк батшабикәбеҙгә ант килтереп, һуңғы һулышыңа ҡәҙәр тоғро булырға һүҙ бирҙең. Хәҙер килеп, шул антыңа ҡаршы бараһың. Тимәк, антыңды боҙоп, оло гонаһ ҡылаһың булып сыға түгелме?

— Ваше превосходительство. — Старшина Юламанов та рәсми тонға күсте. — Әбей батша алдында баш ороп, Ҡәләм Шәриф үпһәм, ул антымды һиңә бирмәгәнмен, шуның өсөн һинең алдыңда теҙ сүгеп, яуап тоторға ла йыйынмайым.

— Мин – императрица-әсәбеҙҙең бер вәкиле.

— Эйе, вәкиле, ә йәлләд түгел.

— Йәлләд булырға, һеҙгә ни зыяным тейгән?

—Анауы тәҡәбиле ғәскәр туплап, өгөт-нәсихәт уҡыр өсөн йөрөп ятмайһыңдыр, шәт.

— Ошо ҡылығың менән һин империяға асыҡтан-асыҡ хыянат итәһең! — Тимашевтың түҙемлеге йәнә ҡаҡшай башланы. — Бел: быны аҙағы үҙең өсөн генә түгел, бөтә ауыл халҡы өсөн дә насар тамамланыр!

— Беҙҙә үҙ халҡыңды ҡурсаларға була яҡлап сығыу хыянат һаналмай, ваше превосходительство, ә бына үс алыу маҡсатында карательный әтрәт менән йөрөп, илең халҡын йәберһетеү...

— Тешеңде ыржайтма, башҡорт! Минең иң яҡын кешемде аманатҡа алып, сиреүҙе артабан хәрәкәт итеүҙән ваз кисерергә ниәтләүеңде белмәй тиһеңме?! Ворҙар менән разбойниктарға ҡаршы барыусы ғәскәргә күрәләтә ҡамасау ҡылыу – үҙе оло хыянат!

— Наибыңдың юғалыуында ни өсөн нәҡ мине ғәйепләйһең һуң, палкауник?

— Әлегә быны иҫбатларлыҡ кире ҡаҡкыһыҙ дәлилем юҡ, шуның өсөн дә шашынаһың, старшина! — Тимашев, осҡонланып киткән күҙҙәрен ҡыҫа төшөп, зәһәр ҡарашын Биксәнтәйгә төбәне, уртаға бөкләнгән ҡамсыһы менән хром итегенең ҡунысына шапылдата һуғып ҡуйҙы. — Мәгәр ғәйебеңде үҙең таныһаң...

— Иҡрар[157] итә алмайым.

— Тимәк, ғәйебеңде үҙ ихтыярың менән танырға теләмәйһең?

---

**Саввич — һүҙ 1704 — 1711 йылдарҙағы башҡорт ихтилалдарына сәбәпсе булған, шул осорҙағы вәхшилектәре өсөн Петр Беренсенең бойороғо буйынса ҡулға алынып, Ҡаҙан ҡалаһы халҡы алдында аҫып ҡуйыуға хөкөм ителгән Өфө воеводаһы Сергеев Александр Саввич тураһында бара.*

*[157]Иҡрар — дөрөҫләү, раҫлау.*

— Юҡ минең ғәйебем.

Мыҫҡыллы көләмһөрәй биреп ҡуйған Тимашев ҡулын түш кеҫәһенә тыҡты ла ялтырауыҡ көмөш сылбырлы бәләкәй генә тәре килтереп сығарҙы. Йәнһеҙ ботты[158] Биксәнтәйҙең күҙе алдына яҡынайтып? тегеләй-былай бәүелтте.

— Бының нимә икәнлеген беләһеңме? — тине ҡәнәғәт ҡиәфәттә.

— Маңлайығыҙҙы иҙәнгә ора-ора көн дә табынған тәрегеҙ түгелме? — Биксәнтәй был юлы ла юғалып ҡалманы.

— Ә хәҙер әйт: нисек итеп ул тәре һинең йәйләүеңә барып сыҡҡан?

Биксәнтәйҙең мейеһен: “Былар йәйләүҙе тапҡандар, күрәһең!” — тигән ҡурҡыныс уй ярып үтте. Изге йортоңа кафыр аяғы баҫмаһын, ырыҫ китер, тип ҡат-ҡат ҡабатлар ине мәрхүм атаһы. Биксәнтәй, тимәк, атай васыятын тота алманы, изгеләрҙән изге ерҙе хас дошмандан тапатты. Тимәк, Терентий ҙа алдашмай: Куприян-Килдеғол,– ысынлап та, һатлыҡ йән, шымсы! Нисегерәк яҡшатланып борғаланған була бит әле, хәсис. Тимашевҡа юлды күрһәткән дә, үҙе – белмәмеш тә күрмәмеш, ситтән генә ҡарап тора. Ҡоҡосо икәнлеген әлегә асҡыһы килмәй, алдағыны ҡайғырта. Уның хыялы – ярпы сүрәтендә ҡыланып, һаман беҙҙең арала йөрөү. Булдыра алмаҫһың, яһил! Аҫтыртын дошманға ҡаршы Биксәнтәй үҙ ысулы менән эш итәсәк...

— Йә, ниңә өндәшмәйһең? — Тимашев старшинаның буталсыҡ уйҙарын бүлдерҙе. — Әйтер һүҙең юҡмы әллә?

— Бар. — Биксәнтәй ғәмһеҙ күренергә тырышты. — Куприяндыҡы төшөп ҡалғандыр.

Бындайын инде һис көтмәгән Тимашев аптырап киткән булды:

— Ниндәй Ку... Куприян тағы?

—Күренә ине шунда бер ҡаҫҡын урыҫ мужигы, — тине Биксәнтәй, иҫе китмәгән кешеләй. — Хужаһынан йәшеренеп йөрөйөм, тиме...

“Хужаһын үлтереп ҡасҡан”, — тип ысҡындырыуҙан ул саҡҡа тыйылып ҡалды. Юғиһә, енәйәтсене ҡанатың аҫтына алғанһың, тип бәйләнер өсөн йәнә бер сәбәп була ине.

— Ҡойроҡ болғама, Бикчентай! —Иҫен йыйырға өлгөргән Тимашев асылына ҡайтты. – Ох, юҡ менән булаһың!

— Болғамайым, йөрөгәнде йөрөй тиһең инде.

— Әле ҡайҙа ул?

— Уныһын һеҙҙән һорарға кәрәк.

— Ну төлкө! Ну ҡыян! Шулай ҙа яуабың ышандырмай.

— Ә мин ышандырырға тырышып та тормайым.

— Бәлки, башҡорттар ҙа тәре йөрөтә башлағандарҙыр? — Тимашев асыҡтан-асыҡ кәмһетеүгә күсте. – Ошондай көмөшөн, ә?

— Тимер-томор, ағас-таш боттарға табыныуҙан Хоҙай үҙе һаҡлаһын! Беҙҙең Аллабыҙ берәү генә! — Биксәнтәй башын күтәрә төштө, — мосолман кешеһе һәр төрлө йәнһеҙ әйбергә баш ормай, үҙенең Аллаһына ғына ышана һәм бары уға ғына иман килтерә.

— Ә был?

— Уның һымағы һеҙҙең һәр берегеҙҙең муйынында.

— Эйе, һәр ҡайһыбыҙҙың муйынында тәре бар! Ләкин һәр беребеҙҙеке лә былай түгел. Белгең килһә, был – алтын ҡатыш саф көмөш, һәм был – минең

[158] *Бот — һын, идол.*

ярҙамсым Александр Иннокентьевичтыҡы. Йәнһеҙ әйбер нисек итеп, ҡайһы юл менән йәһәннәм төпкөлөндәге ҡарағас аҫтына барып ятҡан?

— Уныһын шымсыңдан һора. — Биксәнтәй асыҡтан-асыҡ һөмһөҙләккә күсте. Килеп тыуған сетерекле хәлдән башҡаса сығыу юлы юҡ та ине шикелле. — Ә мин бер нисек тә аңлата алмайым. Биғәйбә.

— Шымсы?! — Кәрттәре тулыһынса асыҡ икәнлеген шундуҡ төшөнөп алған Тимашевтың күҙҙәре уйнап китте: — Тимәк, һинеңсә, мин шымсы ебәреп ятам?

— Тап шулай, әфәндем. Әммә ул яңылышҡан, наибың беҙҙә юҡ.

— Тел сарларға һәләк оҫта икәнһең, старшина!

— Һинән ҡалышмаҫҡа тырышып ятҡан көн, подполковник.

Биксәнтәй үҙенең шулай күп һөйләй алыуына әле килеп үҙе аптыраһа, йәпле һүҙе табылып тороуына тағы ғәжәп ҡала.

— Түҙеп торғоһоҙ әҙәм икәнһең! — Теш араһынан ыҫылдаған Тимашевтың сабыр һандығы һайыға барыуы күренеп тора. Ул ҡалтыранған ҡулдары менән кеҫәһен ҡапшап, керләнә башлаған ҙур ҡулъяулыҡ сығарҙы ла ялтас башын һөрттө. — Ҡасҡынды минең шымсыға һанайһыңмы?

— Шулай һанайым һәм уны алыштырырға тәҡдим итәм. Эшкинмәгән кешенең арабыҙҙа берәй низағ сығарыуы бар.

— Үтә хаттинлаша башланың.

— Мин тура ҡарап, дөрөҫөн әйтәм. Үҙең мәжбүр итәһең.

Тимашев башҡаса өндәшмәне. Сөнки артабан һүҙ көрәштереү мәғәнәһеҙ ине.

Ҡайтып барышлай Тимашевтың мейеһен: "Әллә Иван Сергеевич шылдырып маташамы?" — тигән шикле уй бырауланы. Уның эше ҡомағайға вәғәҙә ителгән бүләкте ниндәй юл менән ҡулға төшөрһә лә барыбер түгелме ни? Ә тәре?.. Әлеге шул көмөш тәре!.. Мәгәр Миргородский ысынлап та ҡырағайҙар ҡулында булмай сыҡһа? Әллә артабан китергә лә барырғамы? Ә намыҫ? Офицер һүҙе, вәғәҙә? Подполковник погондары менән алтын ялатылған эполеттарҙы шулай уҡ лайыҡһыҙ рәүештә тағып йөрөймө икән ул?! Бер наҙан башҡорт мужигын да еңә алманы ла баһаң. Еңә лә, аҡылға ла ултырта алманы...

Лагерға ҡайтып еткәнсе ошоноң ише һорауҙар йөҙәтеп, Тимашевтың башын ҡатырҙы. Сатырына ингәс тә, ул ярым иҫерек Куприяндың яғаһынан алды:

— Әҙәм аҡтығы! Алдыңды-артыңды ҡараңҡырап йөрөһәң ни була?! — тип ярһып һелкетте. – Бөтә эште харап иттең, эт!

— Ни булған, Иван Лаврентьевич? — Быңдайын һис көтмәгән Нуштаев ҡойолоп төштө.

— Минең кешем икәнлегеңде старшина ҡайҙан белә? — Тимашев Куприянды һеңгәҙәтеп, шаҡ ҡатырҙы. — Ике яҡлы уйын уйнайһыңмы әллә, әүермән?!

— Белмәй ул, ваше превосходительство! Быңың булыуы мөмкин түгел. Быңа тәре!

— У-ух, йәнә шул тәре! — Артабан инде үҙен-үҙе тотоп тора алмаған Тимашев, һелтәй биреп, Куприянды ер иҙәнгә йыға һуҡты.

— Һеҙ нимә? — Тегеһе ҡырҡылған иренен баҫҡан көйө ҡан төкөрҙө. — Ҡулығыҙҙы тыйыуығыҙҙы һорайым!

— Нимә-ә? — Асыуынан тилергән Тимашев Куприянды типкесләргә тотонадо. — Бәдбәхет! Алдамаҡсы булдыңмы?! Кемде?! Минеме?! Кәйкәнләмә! Бел: һин миңә ғүмер ахырыңаса бурыслыһың!

— Төптө яңылышаһығыҙ, Иван Лаврентьевич! — Бысраҡ иҙәндә мүкәйләгән Нуштаев, сатрап, алдында теҙ сүкте. — Алдашмайым. Алдашһам, ошо урында ҡәһәр һуҡһын, юҡ, ер йотһон...

— Йә һин, йә старшина мине төп башына ултыртырға маташа! — Тимашев, йоҙроғон төйнәп, йәнә Нуштаевҡа уҡталды. — Ике йөҙлөләнһәң, йәнеңде алам, хайуан!

— Һин... Һеҙ нимә, подполковник әфәнде, мине бер ҡара зат менән сағыштырмаһағыҙ...

Әлеге һүҙҙәр Тимашевты кинәт баҫылта төштө.

— Ҡара зат, имеш... Ҡайҙа һуң Александр Иннокентьевич? — тине ул, йыш-йыш тын алып. — Күрҙем, тигәйнең бит.

— Күрҙем! Үҙ күҙҙәрем менән күрҙем! Бына тәр...— Нуштаев тотлоғоп ҡалды. — Бы... бына һеҙҙе күргән кеүек! Ҡулдарына бығау һалынған килеш ҡарағас төбөндә ултыра ине!

— Ултырғас, ҡайҙа булған ул?! Ер тишегенә инеп китмәгәндер бит?

— Һис башҡа һыймай, Иван Лаврентьевич. Берәйһе иҫкәрттеме икән әллә?

— Нисек?! Бер үҙең булдыңмы унда? — Тимашев, ниҙер һиҙенә башлаған һымаҡ, тертләп китте. — Әллә...

Ә ҡобараһы осҡан Куприян ыҡ-мыҡ килде:

— Юлды та... таба алмаҫтай булғайным, ваше прев...

— Ах һин, асыҡ ауыҙ! Эшкинмәгән! Башҡа береһен дә бутайһы булма был эшкә, тип иҫкәртмәнемме?! — Тимашевтың асыуы йәнә ахыр сиккә етте. Ул мамыҡ мендәре аҫтына йәшерелгән пистолетын сығарып, Куприяндың маңлайына терәне. — Атып үлтерәм, бәдбәхет! Булғаныңдан булмағаның...

— Подполковник әфәнде, йөрөп ҡайтҡас та юҡ иттем мин ул әҙәмде. — Дер ҡалтыраған Куприян тубыҡлана төштө.

— Кем ине ул ҡара зат?

— Ҡасҡын. Үҙебеҙҙең заттан. Ҡағы яҡтарынан килеп сыҡтым, тине. Был тирәне яҡшы белә ине...

— Политический түгел инеме?

— Оҡшамағайны.

— Тимәк, уголовник булған. — Йомшара төшкән Тимашев пистолет көбәген Куприяндың маңлайынан алды. — Ә һин уны нисек... тегеләй?..

— Һыуға батырып тонсоҡторҙом. Йәнһеҙ кәүҙәһе ятыуҙа ҡалды.

— Иван Сергеевич, ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла белмәйем мин һиңә. Һинең файҙаға, ярай, бына ошо һөйләй. Ә ҡалғаны...— Тимашев оҙон сылбырлы көмөш тәрене сығарҙы. – Ошо булмағандамы...

— Үҙемдең һис баш етмәй, Иван Лаврентьевич.

— Уйлайым-уйлайым да тағы шикләнеп ҡуям: ике яҡлы уйын уйнамайһыңмы икән?

— Һеҙ нимә, ваше превосходительство? Гонаһтан ҡурҡығыҙ...

— Минең гонаһым юҡ, ә бына һинеке... — Подполковник Нуштаевҡа һынамсыл ҡараш ташланы: — Кем иҫкәрткән ул сағында варварҙарҙы? Әйт миңә!

“Терентий хаҡында асылып хата эшләнемме әллә?” — тип үкенде Куприян, әммә һуң ине. Һүҙ турғай түгел, ауыҙыңдан бер ысҡынһа...

— Бармаҡ осондай тәрене урманға ташлап китеүе ҡыйын эш түгел. Иван Сергеевич, ә бына шул тәрене әҙәм муйынынан ысҡындырып алыуы... Һиҙҙермәй генә...

Куприяндың күҙҙәре аҡайҙы:

— Һеҙ... нимәгә төрттөрәһегеҙ?

— Нәҡ һин уйлаған нәмәгә.

— Нахаҡ бәлә яғырға уйлайһығыҙ, Иван Лаврентьевич! Нахаҡ!— Куприян аяғына баҫты. — Рәнйетәһегеҙ... Нисек итеп башығыҙға килде шундай уй?! О, боже!

— Төнгөлөккә ҡуна ҡайтмай, бисәһе алдында аҡланып маташҡан уйнаш ише ҡыланма! — тип аҡырҙы Тимашев. — Ҡайҙа, улай булғас, һин күреп ҡалған Миргородский?! Беҙҙең йәйләүгә барырҙы кем белгән? Ундағыларҙы кем иҫкәрткән? Бына ошоларға яуап бир, шәп булғасың!

Тимашев байтаҡ ваҡыт нотоҡ уҡығандан һуң ғына баҫылды. Ә уға ҡаршы һүҙ әйтеүҙең фәтүәһеҙ икәнлегенә әкренләп төшөнә барған Куприян бөтөнләй өндәшмәҫ булды.

— Бына нимә, дорогой, — тине ғәҙәти хәленә ҡайтҡан подполковник. — Һиңә әлегә бер кемдең дә күҙенә салынмай тороу кәрәк булыр. Шуныһы ғәжәп: үҙебеҙҙекеләр һинең кемлегеңде белмәй, ә старшина һиҙенә. Уяулыҡты юғалтмау лазым.

— Хәҙер миңә нишләргә?

— Көн яҡтыһында ошо сатырҙа боҫоп ят.

— Ә Александр Иннокентьевич ысынлап та йәйләүҙә бит! — тип асырғанды Тимашевтың бер ни тиклем йомшарыуын тойоп алған Куприян. — Бына һеҙҙе күргән кеүек күрҙем уны! Һис хаталанмайым.

— Шунын өсөн ҡараңғы төшкәс тә йәйләүгә йәнә юллан. — Тимашев бышылдауға күсте. — Миргородскийҙың ҡайҙалығын асыҡла. Иҫеңдән сығарма: һиңә аҙ аҡса вәғәҙә ителмәгән. Эшең килеп сыҡмаған хәлдә бүләк эләкмәҫ. Өҫтәүенә... Бәлки, алдағы яҙмышың нәҡ ошо төндә хәл ителәлер, Иван Сергеевич, кем белә...

Һәләкәткә дусар ителгән кешеләй бойоғоп киткән Куприян сараһыҙҙан баш һелкте. Был юлы ул алдашманы, ул барыһына яҡшы төшөндө. Вәғәҙә ителгән бүләктәренә төкөрҙө лә, һуң булып ҡуймаҫ элек тип, сығып киткән еренән ҡайҙалыр ғәйеп булды.

Наибының юғалыуы етмәгән, Нуштаев та һыуға төшкәндәй юҡҡа сыҡҡандан һуң Тимашев яман туҙынды. Үҙенең һуңғы осорҙағы барлыҡ уңышһыҙлыҡтарында, бигерәк тә уңмаған юлында, тик Һаҡмарбаш кешеләрен, айырата старшина Юламановты, ғәйепле һананы. Бына-бына килеп ҡуныр бәхет ҡошоноң ҡулдан ысҡына, шундайын да хыялланған карьераһының емерелә барыуын бар булмышы менән тойған подполковник артабан нишләргә белмәй юғалып ҡалды. Түшенә көмөш ордендар тағылған алтын эполетлы генерал кителе кейеп, икһеҙ-сикһеҙ башҡорт ерҙәре менән меңәрләгән крепостной өҫтөнән хужалыҡ итә-итә юғары ҡатлам кешеһенә әүерелергә яҙмағанмы ни уға шулай уҡ?! Мәгәр, Белорет заводына етә алмаған хәлдә, быының шулай булыры көн кеүек асыҡ. Ә инде Александр Иннокентьевич та табылмаһа... Быныһының ниндәй эҙемтәләргә килтереүен уйлауы ла ҡурҡыныс. Яҡын туғанының Тимашев ғәйебе менән һәләк булыуын генерал ғәфү итә алмаясаҡ. Их, һин, булдыҡһыҙ Иван Сергеевич! Аҙаш! Ниңә һиңә ышандым икән? Бер ниндәй шик булмаһын өсөн, башҡорттар араһына ике ай алдан ебәрҙем бит. Буш ҡыуыҡ булып сыҡтың түгелме һуң, Нуштаев?! Ә башта нисек кәпәренеп йөрөгән инең. Ажар кеше һымаҡ күренһәң дә, тәүге һынауҙы тота алманың, ебеп төштөң. Тфү! Һатлыҡ йән! Юлымда тағы осраһаңмы...

Ауыр уйҙарҙан эсе бошҡан Тимашев үҙен ҡайҙа ҡуйырға белмәй өҙгөләнде. "Башҡаса инде юҡ артынан ҡыуып йөрөлмәҫ,— тип фекер төйнәп ятты ул сатырында яңғыҙ ҡалғанында. — Икенсе төрлө эш иткәндә... Ә нисегерәк? Нисекме?! Иң тәүҙә ошо ҡәһәрле ауылдан үс алыу кәрәк булыр. Мотлаҡ үс алырға, ҡон ҡайтарырға!"

— Есаул Боюновты минең янға! — Сатыр ишегенә башын тыҡҡан Тимашев һөрән һалды. — Срочно!

Һағауылда йоҡомһорап киткән казак, тертләп, атамандың сатырын ҡарауыллаған иптәшенә ҡысҡырҙы:

— Есаулды подполковник янына! Срочно!

Тырышлыҡ менән ныҒытып уйлап ҡараһаң, һәр сетерекле хәлдән дә сығыу юлы булалыр ул. Тимашев та, бына, бер әмәлен тапты, буғай...

— Саҡырттайныңмы, подполковник? — Ата күркә шикелле дорфа ҡиәфәттә Ефим килеп инде. Инде лә, рөхсәтһеҙ-ниһеҙ шағыр-шоғор килгән ултырғысҡа ултырып, бер аяғын икенсеһенең өҫтөнә һалды: — Шул тиклем ҡабалан ниндәй эш килеп сыҡты тағы? Ҡасандан бирле тик ятҡанды... — тип асыҡтан-асыҡ төрттөрөп алырға ла тартынманы.

— Етди булайыҡ, атаман, тәләкәләшеп торор саҡ түгел. — Ҡырыҫ Тимашев Ефимды бүлдерҙе. — Ваҡыт үтә, ә беҙ күҙгә күренгәндәй бер эш тә ҡыйратҡаныбыҙ юҡ. Хөкүмәт аҡсаһын, Рәсәй паегын бушҡа серетеп ятабыҙ, Аҡһыу яҡтарына һаман барып етә алмайбыҙ...

— Ошо таҡыр түбә башында сатыр ҡороп, ял итеп ятыр өсөн сыҡҡанбыҙҙыр, тип уйлаһам әле... — Ефим мыҫҡыллы йылмайҙы.

— Тағы бер иҫкәртәм, атаман! — Асыуы ҡабара барған подполковник урынһыҙ шаяртып маташҡан сардары алдына килеп баҫты ла яман итеп ыҫылданы: — Ишетәһеңме, ҡаты ҡолаҡ, бер-беребеҙҙе кәмһетеп, ваҡыт әрәм итмәйек, тим...

— Улай икән... — Эштең ысынлап та етди икәнлегенә шунда ғына төшөнөп алған атаман, аяғүрә баҫып, һынын турайтты: — Тыңлайым һеҙҙе, подполковник!

— Бына шулай кәрәк. — Тимашевтың буҙарынған йөҙөндә ҡәнәғәтлек билдәләре сағылып китте. Ҙур еңеү яулаған кешеләй тамаҡ ҡырып алғас, ул дауам итте: — Һиңә аңлатып ваҡыт сарыф итеүҙең кәрәге юҡтыр, тип уйлайым, есаул. Урындағы халыҡтың, бигерәк тә старшиналарының, беҙгә ҡарата мөнәсәбәте нисегерәк икәнлеген үҙең күреп тораһың.

— Так точно-с, ваше превосходительство, мөнәсәбәт шәптән түгел. Килмешәктәрҙе кем яратһын...

Тимашев, терт итеп ҡалһа ла, Ефимдың һуңғы һүҙҙәренә иғтибар итмәгән кеше булды.

— Шуның өсөн беҙ, Аҡһыу яҡтарына юлланыр алдынан, наҙандарҙың эҙләгәндәрен биреп китергә тейеш, — тип һөйләнде.

— Нисек итеп, әфәндем? — Есаулдың ҡаштары һикергән ыңғайға мыйығы ла һелкенеп ҡуйҙы. — Төптө тыныс халыҡты...

— Ояларын пыран-заран туҙҙырырға кәрәк! Туҙҙырырға! Юҡ итергә! Ишетәһеңме?!

— Сәбәбе күренмәй ҙә баһаң, подполковник. Генерал, ерле-юҡҡа бәйләнеп, башҡорттарҙы үҙебеҙгә ҡаршы ҡуйыуҙы ҡәтғи тыйҙы бит. — Ефим күҙҙәрен селт-селт йомоп ҡуйҙы. — Белә ҡалһа, баштан һыйпамаҫ. Александр Саввич яҙмышы...

— Нимә, шөр ебәрҙеңме?! — Тотанағын юғалта башлаған Тимашев аҡырып ебәрҙе. — Йолҡош старшинаның һүҙен һөйләп тораһың бында! Әллә ҡасанғы Саввичты иҫкә төшөрөп, мине өркөтә алмаҫһығыҙ! Сәбәбе юҡ, имеш! Ә Миргородский? Ә ғәскәрҙең тотҡарланыуы?

— Александр Иннокентьевич әле табылмаған, уның менән ни булғаны билдәһеҙ. — Ғәҙәттә тиҙ тоҡанып барыусан Ефим был юлы тыныс булырға тырышты. — Башҡорттарҙың этлеге, тип әйтергә нигеҙ юҡ. Йә, кем иҫбат итә ала ошоно?

— Аңла, иҫбатлап тороу өсөн ваҡыт тар. Беҙгә йылдамыраҡ ҡуҙғалыу кәрәк! — Тимашев йоҙроғон төйнәп, есаулдың күҙ алдында уйнатты. — Аҫтыртын старшинаның боҙоҡ эше икәнлеген былай ҙа беләм мин! Мин уны үтә күрәм. Ул, ысынлап та, ҡара зат!

— Шулай ҙа ауылға һөжүм башлар өсөн етди сәбәп булырға тейеш.

— Улай икән, сәбәбен табырбыҙ. — Сардарының, ниһайәт, ыҡҡа килә башлауын күргән подполковник, һыуынып, ирәйә бирҙе.

— Ниндәйерәк? Белергә мөмкинме?

— Әлбиттә, дорогой, һин дә белмәгәс... Ни өсөн тигәндә, һин яһайһың ул сәбәпте, есаул. Һин, мой бравый атаман! — Подполковник казактың һалпы яғына һалам ҡыҫтырып ебәреүҙе лә кәрәк тапты.

— Яһалма сәбәп? Кемгә хәжәт ул? Ни өсөн?

— Маҡсатҡа ирешер өсөн...

— Ә намыҫ? Офицер намыҫы? — Ефим Тимашевты тупаҫ бүлдерҙе.

— Юғары һүҙҙәрҙе әлегә онотоп торайыҡ, есаул, һуғыш бара. Йә беҙ уларҙы, йә улар беҙҙе — шуны иҫеңдән сығарма. Алыш ҡорбанһыҙ булмай...

Ефим, сәйерһенеп торғандан һуң:

— Аңлап етмәйем мин һине, подполковник, — тип ҡуйҙы. — Сиреү алдында үҙеңде бер төрлө тотаһың, ә икәүҙән-икәү ҡалған саҡта бөтөнләй башҡаға әйләнәһең дә ҡуяһың.

— Ике йөҙлө, тип әйтмәксеһеңме? — Тимашев көлөмһөрәне. — Килеп тыуған хәлгә нисек тә яраҡлашаһың инде ул, дорогой. Йәғни...

Боюнов Иван Лаврентьевичтың нимәгә һуҡтырғанын аңлап етмәне.

— Ярай, казак, һүҙемдең айышына төшөнә алмағаныңды күрәм. — Тимашев атамандың яурынынан ҡосаҡланы. — Хоҙай насип итеп, берәй иркенләп сәхрәләрҙә ултырырға тура килһә, аңлатырмын. Ә әлегә беҙҙең бурыс – башҡорттарға бәйләнер һылтау табыу хаҡына, арабыҙҙан берәүебеҙҙе ҡорбан итеү...

Боюновтың ике күҙе шар булды.

Тимашев ошо урында ҡот осҡос боҙоҡ ниәтен тулыһынса асып һалды. Аҙағы хөрт тамамланыу менән янаған аҡылһыҙ, ҡара мәкергә Ефим башта теше-тырнағы менән ҡаршылашты. Шулай ҙа Тимашев аумаҡай атаманды тиҙ арала үҙ яғына ауҙара алды. Хыялдағы алтын тауҙар, күрәһең, уға ныҡ тәьҫир итте.

— Ефим Потапыч! — Тимашев, әңгәмә ахырында булһа ла, тәү тапҡыр атаманға ололап өндәште. — Үҙең аңлайһыңдыр, был һөйләшеү икебеҙҙең арала ҡалырға тейеш.

Көн икенсе яртыһына ауышҡанда офоҡ ситенән күренеп ҡалған аҡһыл-бөҙрә болоттар кискә ҡарай бер тирәләй уҡмашып, ҡапыл күтәрелгән киҫкен ел ыңғайына көнбайыш ҡотопҡа табан ағылды. Урындағы халыҡ бындай мәлде, тиреҫтән алды, ти. Һәм ошолай итһә, көндәр оҙайлы йонсоуға тарта.

Ҡараңғы төшөүгә, ысынлап та, һалҡынайтып, сирҡандырғыс ваҡ ямғыр

быҫҡаҡларға тотондо. Былай ҙа талағы ташып йөрөгән Тимашевтың кәйефе бөтөнләй боҙолдо. “Көҙҙөң яҡынлашыуы ошомо икән ни?!” — тип бошоноп, ул ауыр уйҙарға бирелде. Бошонмаҫлыҡмы, хәтһеҙ ваҡытын әрәм итеп, ҡәһәрле түбә башында ҡасандан бер файҙаһыҙға тора! Бигерәк тә үҙһүҙле старшинаға йәне көйә. Хәйер, бер старшина ғынамы, ҡайһыһын алһаң да, шул инде уларҙың. Ерҙәре икһеҙ-сикһеҙ булыуға ҡарамаҫтан, ярай әле, үҙҙәре күп түгел. Күрмәгәненде күрһәтерҙәр ине. Баш бирмәҫ башҡортто әлегә бары урыҫ ҡоралы ғына тотоп тора. Үҙенән йөҙ, мең тапҡырға ғәйрәтлерәк Рәсәйгә бирешмәй, ерем-һыуым тип ҡасандан айҡаша. Бер көйҙөрһәң, айһай яман бит ул башҡорт! Тимашев быны үҙ тәжрибәһенән белә. Бәхеткә күрә, араларында ҡурҡыу белмәҫ етәксе табылмай тора... Әлегә. Табыла ҡалһа, империяны ҡан ҡалтыратырҙар ине. Дөрөҫ, уларҙың да араһында маҡтағанға май ише иреп, малға алданып йөрөгәндәре лә юҡ түгел. Күрә белһәң, һирәкләп булһа ла, ундайҙары ла табыла. Ана шуларын асыҡлап, үҙ яғыбыҙға ауҙарыу сараһын ҡарарға, араларында хөсөт таратып, берҙәмлектәрен ҡаҡшатырға кәрәк. Иң һуңында, илдәрен бүлгесләгәндән аҙаҡ, ырыуҙарын берберенән айырып, халыҡты тарҡатырға. Айырым-айырым килеш тулап ҡараһындар унан...

Тимашевтың татлы уйҙарын бүлдереп, сатыр ябыуы асылыуға, тыштан ныҡ ҡына һыуланып, күшеккән Боюнов килеп инде. Подполковник, уның мәлһеҙ бимазалап йөрөүенә ризаһыҙлыҡ белдергән һымаҡ, һөҙөп ҡараны. Асыуын йәшереп тормайса:

— Кеше күҙенә салынып, был мәлдә нимә ҡарап йөрөйһөң? — тип мыжырға тотондо, — таң алдынан, тинем бит мин һиңә.

— Борсолмағыҙ, мине бер кем дә күрмәне.

— Ә һағауыл?

— Һағауыл да шәйләмәй ҡалды, Иван Лаврентьевич. Тик үтенәм: бөгөнгә уға өндәшмәй тороғоҙ.

— Күренмәй үтеүең, әлбиттә, яҡшы, ә һаҡсының ауыҙын асып тороуы – бер ҡалыпҡа ла һыймаған эш, есаул. — Тимашев урынынан ҡалҡынды ла көйрәп быҫҡый башлаған сыраны алмаштырҙы: — Йә, тағы нимә?

— Ваше превосходительство, мин әйтәм, әллә теге мәсьәләне икенсе төрлөрәк хәл итәйекме?

Тимашевтың әле генә яҡтыра башлаған сырайы күҙ алдында ҡабаттан боҙолдо.

— Нимә?! — тине ул, ишетмәй ҡалған кеше һымаҡ. Казактың күҙҙәренә инә яҙып уҫал ыҫылданы: — Йөрәк етмәйме ни, маҡтаулы атаман?! Һинең өрәй икәнлегеңде белә инем, әммә был тиклемдер, тип уйламағайным.

Тимашевтың һүҙҙәре Ефимдың намыҫына тейҙе, ул, ҡорт саҡҡандай, тертләп китте:

— Өрәйлек менән айыҡ аҡыл араһында айырма бар. Ҙур айырма, хөрмәтле подполковник. Өстөкәй – дошман түгел, үҙебеҙҙең кеше. Беҙгә ышанып сәфәр сыҡҡан. Ә беҙ...

—Ҡабатлап әйтәм: һуғыш ҡорбанһыҙ булмай.

Ефимка өндәшмәй, бер нөктәгә төбәлеп торҙо.

— Уның ҡарауы... — Тимашев ҡапыл тантаналы тонға күсте. — Еңеүҙән һуң дан, шөһрәт, байлыҡ! Күҙ алдына килтерәһеңме?! Ундайын һинең ғүмереңдә лә күргәнең юҡ.

Ҡайҙа һуҡтырырға белә, ҡәһәрең. Нәфсел атаманының шөһрәт менән аҡса алдында көсһөҙ икәнлеген яҡшы тоя.

Уйға батып байтаҡ торғандан һуң, Ефим телгә килде:

— Ярай, әләйһәң. Тәүәккәлләнек...

— С богом. — Тимашев сардарын суҡындырып алды.

Ефим төн ҡараңғылығына инеп сумыуға, сатыр эсе тынып ҡалды. Беше туҡымаға бәрелеп ҡыптырлаған эс бошорғос ямғыр тауышы Тимашевтың былай ҙа тынысһыҙ күңелендә аңлайышһыҙ шом уята ла, әллә ҡасан булып үткән ваҡиғаларҙы иҫкә төшөрөп, вайымһыҙ үткәндәргә алып ҡайта. Үҙенә урын тапмаған подполковник тулҡынланыуҙан ярһыған халәтен, дарҫлап типкән йөрәген баҫыр өсөн тегеләй-былай йөрөштөрә. Үҙ кешеһенең йәнен ҡыйырға йөрьәт итеп дөрөҫ эшләнеме ул? Юрыҡлаған ниәте мәсхәрә менән барып осланмаҫмы? Әҙәм көлкөһөнә ҡалыуҙан үҙең һаҡла, йә Хоҙа!..

Ҡайҙандыр ек табып өҫтәл өҫтөнә йәйелгән харитаға тама башлаған ямғыр һыуы уның көйөнөүҙәрен арттырҙы ғына.

Биксәнтәй икенде намаҙын тамамлауға, кемдер ҡаты итеп ҡапҡа дөбөрләтте. Старшина әүәл тәҙрәнән тышҡа күҙ атты. Ҡапҡа алдында бер төркөм һыбайлыны күреп, уның кәйефе ҡырылды. Тимашевты шәйләп: "Тағы ниндәй этлек уйлап килде икән был хаин?" — тип йәне үртәлде. Сарығын эләктереп, көртөйөн арҡаһына һалды ла, дәрәжәһен төшөрмәй генә, һәлмәк баҫып ихата алдына сыҡты.

Төн буйына яуған ямғырҙан шешенгән ерҙе уя баҫҡан ярһыу аттар ластырҙатып батҡаҡ иҙә. Нык ярһығандар. Хужалары, күрәһең, ҡабаланып килгәндәр. Арттарына ут ҡаба башланымы әллә?

— Йоҡо һимертәһеңме, старшина? — тип ҡысҡырҙы подполковник, иҫәнлек-һаулыҡ һорашып тормай.

— Ғәмһеҙ кеше генә көпә-көндөҙ йоҡлап ята ул. — Биксәнтәй үҙен вайымһыҙ тоторға тырышты. — Йә, ни йомош?

— Әллә белмәйһең дә?.. — Тимашев эре тештәрен ыржайтты. Йылмайыуы уҫал килеп сыҡты.

— Әлегә белмәйемдер. — Ғәҙәттән тыш ниҙер булғанлығын бар булмышы менән һиҙеп алған старшина эстән генә билдәһеҙ, әммә етди һынауға әҙерләнде.

— Һин бында бисәңдең йомшаҡ ерен ҡосоп ятҡанында ҡырағайҙарың Рәсәй һалдаты ғүмерен ҡыя. — Ифрат ҡәнәғәт Тимашев эйәренән төштө лә, ирәйтә баҫып, Биксәнтәй алдына килде. – Быныһына нимә тиерһең?

— Нисек?! — Биксәнтәй шаҡ ҡатты.

— Нисек итеп кеше йәнен алырға өйрәтәһе юҡ инде һеҙгә, — тип мыҫҡыллы төрттөрҙө Тимашев.

— Подполковник, асығыраҡ һөйлә. — Биксәнтәйҙең һарыуы ҡайнай башланы.

— Сардарҙы үлтергәндәр.

Ҡапылғара баҙап ҡалған старшина үҙен тиҙ ҡулға алды. Ҡаты итеп:

— Ҡасан? Кемде? — тине лә Тимашевтың күҙҙәренә тура ҡараны. Өтөп ҡараны.

— Өҫтөкәйҙе. Бөгөн төндә. – Тегеһе хатта баҙап китте.

— Ә ни сәбәптән уны мотлаҡ беҙҙән күрәһегеҙ?

Тимашев, һонолоп, йәнәшәһендә торған казактың ҡулынан бөркөт ҡаурыйлы уҡты алды.

— Һинеңсә, ошо кемдеке?

— Эйе, беҙҙең уҡ. Бындай ҡаурыйлы бөркөт тик беҙҙең тирәлә генә оя ҡора. — Үҙ тимерлегендә һуғылған таныш ҡырма менән Уралда үҫкән йөҙйәшәр ҡарағай трансаһынан юнылған уҡты шунда уҡ танып алған Биксәнтәйҙең эсендә ниҙер өҙөлөп төшкәндәй булды: раҫмы икән әлеге ҡот осҡос ғәйепләү? Әллә уйҙырмамы?

— Ҡыҙашым юҡ, ти инең...

— Башағы элек, ҡыҙаш тотоуға рөхсәт бар заманда, һуғылған. — Биксәнтәй уҡты әйләндергеләп ҡараны.

— Ярай, уныһы шулай ҙа булһын, ти, ә нисек итеп ул Өстөкәйҙең арҡаһына барып ҡаҙалды икән? Ошоноһо сәйер түгелме?

Биксәнтәйҙең зирәк аҡылы был юлы ла һынатманы. Яңы юнылған, тап-таҙа уҡҡа ҡарап шул әҙере барыһына ла төшөндө ул.

— Подполковник, әҡлимдең[159] нисек икәнлеген үҙең күреп тораһың.

— Көн торошоноң ни ҡыҫылышы бар бында?

—Туранан-тура, подполковник. —Биксәнтәй мәғәнәле йылмая бирҙе. — Бөгөнгө төн күҙгә төртһәң күренмәҫлек ҡараңғы булды. Алыҫ аранан Өстөкәйҙең арҡаһына тейҙереүе икеле. Ә яҡын барырлыҡ түгел, үҙең беләһең — һағауылдар...

Бына быныһын, ысынлап та, нисектер уйлап еткермәгән дә баһаң Тимашев. Нисек итеп яҙа фекерләне һуң ул — ҡарт төлкө?! Ашығыуы шул ҡәҙәре булдымы, әллә, олоғайып, фекере тарҡаулана барамы?

Подполковниктың албырғап ҡалғанын күргән Биксәнтәй рух күтәренкелеге менән дауам итте:

— Сей иткә ҡаҙалған уҡты, ғәҙәттә, анһат ҡына һурып алып булмай, уның башағы мотлаҡ тороп ҡалыусан. Унан, тере тәнде йырып ингән уҡта аҙ ғына булһа ла ҡан таптары ҡалырға тейешле...

Күҙгә ҡарап хаҡты һөйләп тик тора ла баһаң был! Тамам наһырына тейҙе бит, ә! Ошо бер телгә бөткән тиҫкәрене лә еңә алмасы әле!

— Хватит! — тип тамаҡ ярҙы дорфа подполковник. —Мин бында һеҙҙең уҡты тикшерер өсөн килмәгәнмен! Йә хәҙер үк енәйәтсене табып килтерәһең, йә үҙеңә яуап тоторға тура киләсәк. Шәп мәхкәмәсе булып ҡыланма! — Тимашев уҡты һыпыра тартып алды.

— Ҡыланырға уйлағаным да юҡ, ваше превосходительство, — тине Биксәнтәй тыныс ҡына. — Әммә ауылдаштарымдың, улар йөҙөндә халҡымдың да, намыҫын яҡлап ҡалырға бурыслымын. Нахаҡ яла яғырға юл ҡуймам. Мине шуның өсөн һайлап ҡуйғандар...

— Тел сарлауҙан туҡтайһыңмы һин, юҡмы?!

— Ғәҙеллек өҫкә сыҡҡандан һуң ғына. Әлеге һүҙҙәреңдә мантик ишетмәйем, подполковник. Минеңсә, бысраҡ үәсүәсә һатаһың, үтә тәғәнле һөйләйһең. Күренеп тора: әйткәндәреңә үҙең дә ышанмайһың, сөнки һүҙҙәреңдең күбеһе ялған. Кемдер бит ҡурсаларға тейеш гонаһһыҙ әһелде шундайҙарҙан...

Быныһы инде бигерәк! Сығырынан сыҡҡан Тимашев, уның яғаһынан алып, төкөрөк сәсте:

— Бына нимә, йолҡош! Иртәгә таң менән йәнә киләм. Әгәр ҙә мәгәр Өстөкәйҙең башына етеүсе ошо урында баҫып тормаһамы... — Быумалы кешеләй ҡалтыранып киткән Тимашев ҡамсы һабы менән аяҡ аҫтына төртөп күрһәтте. — Үҙеңә үпкәлә!

---

[159] *Әҡлим — климат.*

Ахырҙа, һүҙ бөттө тигәндәй, ҡырҡа боролоп, аяғын өҙәңгеләне. Аҙ һанлы төркөм, күләүектәрҙе шаптырлатып, күҙҙән юғалды.

Хәл иткес көндәр еткәнен һиҙгән Биксәнтәй ашығыс рәүештә Батырханды саҡырып алды.

— Ҡорҙаш, — тип ҡабаланмай ғына һүҙ башланы ул. Ҡапылда ығы-зығы тыуҙырып, әлегә бер ни белмәгән кешеләрҙе ҡурҡытмаҫ өсөн, вайымһыҙ ҡиәфәттә, сабыр төҫ һаҡларға тырышты: — Тимашев беҙҙе үҙенең сардарын һәләк итеүҙә ғәйепләй. Нисек тә низағ сығарыр һылтау эҙләй ине, ниһайәт, тапты. Ауылды ҡорал көсө менән ҡурсып ҡалып булмаясаҡ – быныһы асыҡ. Ә халыҡты ҡотҡарырға кәрәк. Нимә тәҡдим итерһең?

Бер мәлгә ауыр тынлыҡ урынлашты.

— Тегене ҡайтарып биргәндә?.. — Һунарсы Миргородскийҙы күҙ уңында тотто.

— Юҡ, нимә-нимә, ә быныһы булмай! — Биксәнтәй хатта уйланып та торманы. — Ул ахыр сиктә генә...

— Былай ҙа сиктең ахырына килеп терәлгәнбеҙ түгелме һуң?

— Һәр хәлдә Салауат менән Бүгәс батша алып барған көрәш менән сағыштырып булмай. Үҙемдә бер фекер тыуып тора ла ул. Барып сыҡһа...

— Йә. — Батырхан ихтыярһыҙ эйелгән башын күтәрә һалды.

— Эҙ яҙлыҡтырырға кәрәк беҙгә. Йәйләүҙәге кешене йәшертен рәүештә башҡа урынға күсерергә кәрәк. Кисекмәҫтән. Бөгөн үк! Иманым камил, ул суҡынмыш дуңғыҙҙар бер нәмә алдында ла туҡтап ҡалмаясаҡ.

— Аңлашыла.

— Аңлашылһа, эште бүлешәйек, Батырхан. Йәйләүҙәгеләр – һинең ҡарамаҡта, ә ауылдағыларҙы үҙ өҫтөмә алам.

— Нисек? Ауылда бит күллө ҡарт-ҡоро, бала-саға. Уларын алып китмәйбеҙме ни?

— Өлгөрмәҫбеҙ. Мин, ярай, хәлгә ҡарап эш итермен, ә һин хәҙер үк Сатраға ос. Һәммәһен әйҙә лә, иң кәрәкле мөлкәтте генә алып, Ирәндек яҡтарына китә башла.

— Ҡайһы тирәгә?

— Теге мәл күрһәтеп торған түбәләсте онотмағанһыңдыр?

— Ул урын бигерәк яҡын да...

— Уның ҡарауы, ул тирәне эҙләү илбаҫарҙарҙың башына ла инеп сыҡмаҫ. Күреп кенә ҡалмаһалар, былай һис таба алмаясаҡтар.

— Эйе, һаҡмарҙы кискән мәлдә күҙҙәренә салыныуыбыҙ ихтимал.

— Ә Ҡәнифә юлы буйлап киткәндә?..

— Юҡ, унда темеҫкенеп йөрөгән караттар күп.

— Әләйһәң, ҡайһы юлдан?

— Туранан-тура тартып, юлһыҙ ерҙән. — Биксәнтәй шунда уҡ ҡорҙашының йөҙө ҡараңғыланып киткәнен күрҙе. Эйе, анауындай ғәмде эйәртеп төн ҡараңғылығында Урал төпкөлдәренән түтә сығыуы еңелдән булмаҫ. Яңғыҙ сағында бер хәл... — Юғиһә, Тимашев, йәйләү халҡының ғәйеп булыуын белеп ҡалғас та, юл саты һайын дозор ҡуясаҡ.

— Эйе шул, аныһын уйламайым да әле мин.

— Хәтерендәлер, бынан биш-алты йыл самаһы элек бер йырып үткеһеҙ ғәжәп сытырлы йылға буйынан мышы ҡыуып төшкәйнек.

Эйе, Батырхандың һунарсылау дәүерендә сытырлы йылғалар күп осраны. Шуларҙың ҡайһыһы булыр икән, тип ул маңлайын ыуып торҙо.

— Шырлығынан үтеп сыға алмай ярты көнөбөҙҙө үткәрҙек. Ана шул тирәнән самала. Урмандан ныҡ шөрләгән урыҫ уның һымаҡ ерҙәргә тығыла һалып бармай, үҙең беләһең.

— Иҫкә төштө. Ярай, үлмәһәк, нисек тә барып сығырбыҙ.

– Үлмәһәк, тинеңме? — Биксәнтәй серле йылмая бирҙе. — Әрәсә[160] менән әйттең бит әле, әй…

— Нимәһен тағы?

— Исемһеҙ йылғаға уйламаҫтан шәп атама таптың, түгелме?

— Үлмәһәкме?

— Шулай, шишмә был яғына Үлмәһәк булһын. — Биксәнтәй ҡорҙашының яурынына ҡулын һалды. — Шулай ҙа һаҡ бул, Батырхан, кәрәкмәгәнгә ыуаланма ла, артығын ауанланма ла. Барыһы ла хәҙер тик һинән тора. Һинең ҡулда – кешеләр яҙмышы. Күп кешеләрҙең.

— Бар хәлсә тырышырбыҙ, Биксәнтәй.

— Һәр саҡ иҫеңдә тот: теләһә ниндәй йырткыстан былайыраҡ дошман менән яғалашабыҙ. Тимашев төлкөнән хәйләкәр, сүл бүреһе ише аяуһыҙ. Бәләкәй генә хатаның да күҙ асып йомғансы һәммәһен юҡҡа сығарыуы бар. Абай йөрө, бар өмөт һиндә. — Ныҡ йөрәкһеп киткән Биксәнтәй ҡат-ҡат әйтте. — Миңә яуыздарҙың күҙ алдында булыу кәрәк. Мин күренмәһәм, шунда уҡ эҙләй башлаясаҡтар. Ә былай күпмелер ваҡыт отабыҙ.

— Писарь менән ни булыр? — тип ҡыҙыҡһынды Батырхан. — Үҙебеҙ менән алмайбыҙҙыр бит?

— Әлегә Һәүәнәкташ ҡаяһы аҫтындағы һунарсы өйөндә торор. Ике кешене ҡарауылға ҡалдырһаң, шул еткән. Ҡара уны, уяуыраҡтарын һайла.

— Шылмаҫмы?

— Шылып ҡайҙа барһын? Уларҙың заты урманға ҡыуһаң да ҡасмай. Киткән хәлдә лә барып сыға алмаҫ.

— Быныһын дөрөҫ әйттең. Күпме йөрөп тә, үҙем белеп бөтә алмайым Уралыбыҙҙы. Һа-ай, кемдер өсөн – зауҡы, ә дошман өсөн бер ҡайғы бит ул Уралтау!

Батырхан, Сатраға барғас та, ышаныслы ике егет оҙатыуында Миргородскийҙы бүреләр ояһы – Һәүәнәкташ тарафтарына олаҡтырҙы. Үҙе, йүгермәндәп йөрөп йәйләүҙе ашығыс аяҡҡа баҫтырғандан һуң, аҙағы ни менән бөтөрө лә билдәһеҙ, хәүеф-хәтәр тулы сәфәргә әйҙәне. Афәттең ниндәйе янағанлығын аңлап алған кешеләрҙең береһе-бер ризаһыҙлыҡ белдермәне. Барыһы ла, артыҡ төпсөнөп тормай ғына, еңелдән булмаған юлға әҙерләнде. Йәйләүҙә тәртипһеҙ ығы-зығы менән баҙап ҡалыу тигән нәмә күҙәтелмәне.

Һаҡмарбаш кешеләренә дошманға һиҙҙермәй генә, оҙон ылау булып, бер төн эсендә аҙ ҙа түгел, күп тә түгел — илле саҡрым самаһы ара үтергә кәрәк ине. Тәүәккәлләгән – таш ярған, ҡаҡ арбала ҡаҡлығып барыуҙан бер килендең көнө етмәҫ элек бәпәйләүен иҫәпкә алмағанда, тәғәйен урынға мажараһыҙ ғына барып еттеләр. Был тирәне биш бармағындай белгән Батырхан ҡулы аҫтында шырлыҡ-һаҙлыҡтарҙы артыҡ мәшәкәтһеҙ үттеләр, көҙгә тартым һайығып ҡалған Һаҡмарҙы ла имен-аман ғына кистеләр, ышыҡ-фәләне булмаған оло асыҡтар ҙа артта ҡалды. Ылау артынан эйәреп килгән мал-тыуар араһында ла юғалтыуҙар булманы. Киреһенсә, дүнәжен байтал ҡолонлап, табунсыларҙы ҡыуандырҙы. Беренсе ыуыҙын имеҙгәс тә, ҡолондо арбаға һалып

[160]*Әрәсә — мәғәнәле, урынлы.*

алдылыр. Малайға – Сәфәр, айғыр ҡолонсаҡҡа Юлтай тип исем ҡушырға ҡарар ителде. Һунарсы Батырхан туҡталырға ҡушып ҡул ишараһы яһағанда, тамам яҡтырғайны инде. Шулай итеп, был төндә, Хоҙай әмере менән, бәлә-ҡаза һаҡмарбаштарҙы урап үтте.

Биксәнтәй байҙың ҡасандыр күҙ төшөргән төйәге иҫ китмәле матур ҙа, һәләк уңайлы ла булып сыҡты. Ахыры, Хаҡ Тәғәлә уны йәйләү урыны итеп махсус рәүештә үҙе барлыҡҡа килтергән.

Күҙ алдында асылған күренештән әҫәрләнеп тә, тулҡынлана биреп тә атлаған Батырхан исемһеҙ тауҙың түбәһенә менеп баҫты. Түбә ситтән ҡарағанда тәпәш кенә һымаҡ тойолһа ла, үҙенә күрә түгел икән, ярайһы уҡ бейек булып сыҡты. Көн бите текә, яланғас, ә һөҙәк шимал[161] яғы күркәм, һирәк ҡайынлыҡ менән ҡапланған. Ирәндек теҙмәһе бынан алыҫ түгел. Ана, уның ошо тирәләге, таштарына шанлы тарих яҙылған иң дан тауҙарының береһе — Һаңғала бөтөнләй яҡында ғына айырым күкрәк кереп тора. Йәнәшәһендә матурлығы менән маһайып ятҡан Муйынсаҡтау. Уныһынан арыраҡ, күгелйем монар эсендә, ослайып бейек ҡая күренә. Күсем ташы тип атала ул. Ә Ирәндек һыртының болоттарға ашҡан ғорур ҡаялары – Тағанташ менән Ҡоҙғонташ был урындан күренмәй. Уларын мәғрур тауҙар диуары үҙ ышығына алған.

Ирәндектең яҡын булыуы, әлбиттә, хөртөрәк: мөстән елғыуарҙарҙың иҫ итмәҫтән килеп баҫыуы ихтимал. Хәйер, улары, бер-беребеҙгә мәғәнәһеҙ барымталарҙы туҡтатайыҡ, тип ҡалғандар бит, бәлки, һүҙҙәрендә торорҙар.

Батырхан ошо тирәгә оло йәм биреп ятҡан мөһабәт Һаңғала тауына йәнә ҡараш ташланы. Һаңғаланы бер күргән кешелә, үҙенә бер төрлө тулҡынландырғыс тәьҫораттарға ҡушылып, юғары риғәйәт[162] тойғолары уяна. Үҙ ғүмерендә байтаҡты башынан үткәреп, күпте кисергән Батырхан да сал тарих уйылып ҡалған тауға, тәү тапҡыр күргәндәй, оҙаҡ ҡына текләп торҙо. Төньяҡ бите ғәжәп текә был тауҙың ҡаршы яҡ итәге һөҙәк тә, ағасһыҙ ҙа. Күккә олғашҡан ҡыразы, һыуыҡ ҡотоп елдәренән тәбиғи ышыҡ булғанлыҡтан, тирмә ҡороп йәйләп ятыу өсөн ифрат уңайлы. Ана шунда һанһыҙ төмәне менән ҡасандыр Батый хан ятҡан, имеш. Ҡайҙан килеп юлыҡҡан тиһең?! Ошонан тороп ул баш бирмәҫ башҡорттарға ҡаршы яу менән етәкселек иткән. Башҡорттоң кем икәнлеген башта белмәгәндер. Шунлыҡтан ғәскәрен аҙ ҡырҙырмаған. Белгән булһа, урап ҡына үтер ине лә бит... Ә күптән түгел ошо уҡ тауҙа бөйөк Ҡараһаҡал, Ҡөрьән үбеп, халҡына тоғролоҡҡа ант килтергән. Түбәнең Хан ҡалаһы тигән атамаһы шул мәлдәрҙән ҡалған да инде. Тик аҡрынлап үҙгәрә барып, урындағы ҡәүем һөйләшендә Һаңғалаға әйләнгән.

Батырхандың башында ҡапыл шәп фекер тыуҙы: "Ҡыҙыҡ, ер аяғы ер башы ерҙән килгән башкиҫәр илбаҫарҙы һаман булһа онота алмайбыҙ, Ҡараһаҡал исемен дә хәтеребеҙгә һеңдереп, мәңгеләштереп ҡуйғанбыҙ. Ә ниңә ошо исемһеҙ тауға, аҡһаҡал һанап, бөтә ырыу ихтирам иткән утағабыҙ Биксәнтәй ҡорҙаштың исемен бирмәҫкә? Биксәнтәй тауы! Ниндәй шәп яңғырай, ә! Әлбиттә, үҙе риза булһа. Юғиһә, кәрәккән-кәрәкмәгәнгә дан сығарырға яратмай торған..."

— Батыр аға-а-а-ай!

Илһамланып киткән Батырхандың татлы уйҙарын бүлдереп, түбәндә кемдер ҡысҡырҙы. Ә, Ғәлимйән икән.

---

[161]*Шимал — төньяҡ.*
[162]*Риғәйәт — ихтирам итеү, ғорурлыҡ менән һоҡланып ҡарау.*

— Йә, ни бар тағы? — тине һунарсы.

— Батырхан ағай, тирмә, утлыҡ, башҡа күр-ер урындарын үҙең күрһәтмәһәң булмаҫтыр ул.

Батырхан китеп барышлай: "Ғүмер баҡый ошолар менән ҡаңғырған Биксәнтәйгә Хоҙай түҙем бирһен, — тип уйлап ҡуйҙы. — Шулай ҙа башлыҡтарына ҡарата ифрат рәхимле шул беҙҙең әһел. Күндәм халыҡ башлыҡһыҙ артыҡ аҙым яһарға ла ҡыймай. Әллә тартынамы? Ошонан, Ғәлимйән һынлы Ғәлимйән тирмә менән утлыҡ урыны һайлай алмаҫ кешеме? Әлбиттә, һайлай ала. Ул яҡтан миңә ҡарағанда күпкә оҫтараҡ та, сымырыраҡ та. Ә юҡ, мотлаҡ ағай кешегә әйтеп, уның ҡолпаһын күтәрергә кәрәк. Сөнки ул өлкәнерәк, тәжрибәлерәк. Ошо булмаймы ни үҙеңдән олораҡтарға ҡарата хөрмәт үә илтифат тигән нәмә?"

Тауҙың ҡапма-ҡаршы яҡ битләүҙәренән баш алған ике шишмә, икеһе ике ҡотопҡа ҡарап ағып китһәләр ҙә, күпмелер үткәс, Күгиҙел йылғаһына ҡойоп, бергә ҡушылалар.

Батырхан күрәм[163] урыны итеп көн бите сағылындағы инеште һайланы. Уйһыу ерҙең үләне лә мул, ышыҡ та. Өҫтәүенә, бынан Һаңғала, Муйынсаҡтау, Ирәндек, Ҡыпсаҡ тарафтарының башҡа ерҙәре лә ус төбөндәгеләй күренеп тора.

Күмәкләшеп кәңәш-төңәш ҡорғандан аҙаҡ, тирмәләрҙе ошонда ҡуйырға ҡарар ителде. Дөм-ҡара йомшаҡ тупраҡлы, һуты сырҡып ятҡан ергә тәүге кирәгәләр ҡағылды. Һауын бейәләр өсөн ялан кәртәне лә ошо тирәгә ҡорорға булдылар. Яңы урынға күнегеп алғансы күҙ алдында торһон малҡайҙар. Оҙон төн буйына юлһыҙ-ниһеҙ ерҙәрҙән ҡаҡ арбаларҙа ҡаҡлығып килеп, һуңынан урынлашыу мәшәҡәттәре менән ҡаңғырыуҙан ахыр сиккә етеп арыған ҡатынҡыҙ, бөгөнгә бейәләрҙе һауып тормаҫтан, ҡолондарына имеҙергә килеште. Юл аҙабы — гүр ғазабы: алыҫ юлдан йонсоған ҡолондарға ла бер байрам булһын.

Әшәк урындары шырлыҡ араһында әҙерләнде. Уңайһыҙыраҡ, әлбиттә, уның ҡарауы, ҡурҡынысһыҙ, төнгө ут яҡтыһын берәү ҙә күрмәйәсәк. Хәйер, Батырхан көндөҙҙәрен бөтөнләй ут яғырға ҡушманы. Төтөн сығарырға ярамай, күҙгә үткер әҙәмдәр әллә ҡайҙан шәйләп ҡаласаҡ. Шуның өсөн барлыҡ бешеренеү-төшөрөнөүҙе һәр кем ҡараңғы төн бар донъяны үҙ ҡосағына алғас ҡына ҡыуаҡтар ышығында башҡарып ҡалырға тейешле.

Асыуынан шартлар сиккә еткән Тимашев йәйләүгә тәү килгәнендә үк уны пыран-заран килтереп ташламағанына үкенде. Ҡайҙан белеп ҡалғандар ҙа ҡай арала шылып өлгөргәндәр тиһең. Йылғырҙар, состар, шайтан алғырҙары! Киткән йүнәлештәрен самалағандай бер эҙ ҡалдырмағандар бит әле. Көн оҙоно шул тирәлә темеҫкенеп ҡараһалар ҙа, еп осон эләктергәндәй тәғәнле билдә таба алманылар. Әле буш ҡул менән ҡайтып килеүҙәре. Йонсоуҙары шул ҡәҙәре: әтрәттә берәү бер һүҙ өндәшмәй.

Йәмерәйгән Тимашев та шым килә. Һөйләшергә теләге лә, кәйефе лә юҡ. Бер үҙенә генә билдәле уй-хистәргә сумып, атында талғын сайҡала барған сиреү башлығы көтмәгәндә:

— Атаман Боюнов! — тип һөрән һалды.

— Мин бында, подполковник! — Уныһы ҡайҙандыр, ҡуйы сауҡалыҡ араһынан, килеп сыҡты.

[163] *Күрәм — тораҡ, лагерь урыны.*

— Аҙашып кит шунан.— Тимашев уны шелтәләгәндәй итте.
— Бер шикле һуҡмаҡҡа юлыҡҡан һымаҡ инем...
— Ҡуй, аҙапланма, барыбер таба алмаҫһың. Уларға йәшеренергә бында һәр ағасы, һәр ташы, хатта һәр үләне булышлыҡ итә һымаҡ. Ә шул уҡ мәлдә әлегеләрҙең бөтөнөһө һинең менән миңә ҡаршы. Ҡайһы тарафҡа китеп олаҡҡаныңды үҙең дә абайламай ҡалырһың... Нишләтәбеҙ инде быларҙы, ә? Яҡшылыҡ менән әйткәнде ҡабул ҡылманылар, — тип бошондо.
— Ни ҡылһағыҙ ҙа һеҙҙән тора. — Атаман килешле генә ярамһаҡланып алды.
— Бер уй бар ҙа ул... – Подполковник, фекер төйнәгәндәй, бер талай һүҙһеҙ барҙы. — Ауылда ҡалғандарын тотоп һарайға бикләп, алмашҡа Миргородскийҙы таптырғанда, тием. Ул асыҡ ауыҙҙы алдыбыҙға килтереп баҫтырмайса береһен дә сығармай торор инек...
—Унда йыйын ҡарт-ҡоро ла бала-саға, бисәләр генә бит әле.
— Булһа һуң?!
— Килешеп етерме?..
— Минең ниәтте оҡшатмайһың икән, Миргородскийҙы табып килтер!
— Башбаштаҡлыҡта ғәйепләмәҫтәрме, тип әйтмәксе инем.
— Сетерекле хәл килеп сыҡҡан осраҡта миңә ситуацияға ҡарап эш итергә ҡушылды. Ҡырағайҙарҙың үҙ алымын ҡулланғанда, тә-әк, Александр Иннокентьевичты шунда уҡ табып килтерәсәктәр.
— Ә теге ҡыҫыҡ күҙҙәр ни тиер? — Ефим баш бармағы менән Барсын яғына ишара яһаны.
— Уларҙан кем һорап тора! Беҙ ҡайҙа, улар ҙа шунда булырға, беҙ ни ҡылабыҙ, улар ҙа шуны башҡарырға тейешле.
— Тейеш тә ул...
— Тағы нимә, атаман?! Шул алама ғәҙәтеңдән һаман арына алмайһың. Һәр ваҡыт эшкә арҡыры төшәһең. — Тимашев мәмәйләнеп килгән Ефимды бешеп ташланы.
— Икеләнеүем шуның өсөн, хөрмәтле подполковник: ҡыҫыҡ күҙ ҡыҫыҡ күҙгә ҡаршы бара булырмы икән?
— Салауат менән Кинйәләренә ҡаршы сыҡҡанды, былары нимә ул?..
— Уныһы башҡа осраҡ. Бөтөнләй башҡа. Боласы – христианмы ул, мосолманмы, әллә борҡанмы — һәр ваҡыт боласы булып ҡала. Уны мөмкин булған барлыҡ саралар менән ауыҙлыҡларға тырышырға һәм тейешле язаһын бирергә кәрәк. Ә әлеге осраҡта — ҡоралһыҙ, тыныс халыҡ, өҫтәүенә, мөсһөҙҙәр.
— Борсолма, атаман, мин бит улар менән ҡорал тотоп алышырға тимәйем. Ниәтем – башҡорттарҙы ҡурҡытыр өсөн бер нисәһен аманат итеп алыу. Бары шул ғына. Үҙҙәре һымаҡ...
— Шунан, алдыҡ, ти, бикләнек тә, ти. — Ефим ризалаша башлағандай һөйләнеп ҡуйҙы. — Ә Миргородский табылмаһа? Артабан ни булыр?
— Артабан күҙ күрер.— Тегеһенең һис иҫе китмәне. — Әүәл береһен башҡарып сығайыҡ әле.

Тимашев иллеләп кешеһен лагерға күҙ-колаҡ булып тороу өсөн ҡалдырҙы ла, яман ниәтен тормошҡа ашырыу маҡсатында, иртәгәһенә үк Һаҡмарбашҡа юлланды. Күп тә үтмәҫтән, алты йөҙ самаһы яугирҙан торған ғәскәр ауылды уратып, тирә-яҡтан ҡыҫымға алды. Тығыҙ ҡулса аша ҡуян да сығып ҡасырлыҡ түгел ине.

Ауылда ҡалғандарҙың ҡайһыһын ҡурҡытып, ҡайһыһын эткесләй-төрткөсләй, ҡай берҙәрен хатта һөйрәкләп Биксәнтәй бай өйө алдына йыйҙылар. Оло

кешеләр илбаҫарҙарға ҡарғыш яуҙырһа, балалар зыу килеп илашты, ә сабыйҙарын ҡосаҡтарына алып сеңләшкән әсәйҙәр бәләкәстәрен яуыздарҙан ҡурсалап ҡалырға маташты.

...Карателдәр күҙенә салынмаҫ өсөн мәғәрәһендә ҡаты ҡорот кимереп ятҡан Терентий, хәжәте ҡыҫтай башлауға, йәһәтләп тышҡа сыҡты. Ауыл яғынан ишетелгән аянысл ауаздар бында ла килеп етә ине. Ҡасҡын, уны-быны уйлап та тормаҫтан, шунда ашыҡты. Ағаслыҡ ҡырына етәрәк урамда өймәкләшкән халыҡты, ауылды ҡамап торған ҡоралл һыбайлылар менән багинетлы казактарҙы күреп, күрән эсендәге еүеш ергә һуҙылып төшә һалды ла, шыуыша барып, ҡулайыраҡ урындан күҙәтә башланы. Ауылда булып ятҡан ығы-зығылы хәлдәрҙең айышына төшөнөр өсөн күп аҡыл кәрәкмәй ине. Эш асылы Терентийҙың да аңына шунда уҡ барып етте. Бер ғәйепһеҙ кешеләрҙе харап итергә йыйына бит!

Ҡыяҡлы үләнде йыра-йыра ҡулдарын йәрәхәтләп бөткән Терентий урман ҡарап кире яҡҡа мүкәйләне лә ағаслыҡҡа инеү менән, тороп йүгерҙе. Ҡайҙа барғанын ул үҙе лә белмәй ине, шикелле. Барған ыңғайға, милләттәштәренең ҡанһыҙ вәхшилеге менән оятһыҙ ҡылығына ғәрләнеп, күҙ йәштәренә ирек бирҙе. Уларҙың аҡылға һыймаҫ йәзитлеген күрмәҫ, Һаҡмарбаш кешеләренең ғазап тулы ялбарыу мәҡәмен[164] ишетмәҫ өсөн, алыҫҡараҡ китеп ҡалырға тырышып йүгерҙе лә йүгерҙе.

...Әллә ни бәләкәйҙән һаналмаған Һаҡмарбаш ауылынан ни бары илле-алтмышлаған кеше йыя алдылар. Ни күрһәк тә бергә күрербеҙ тип, мөмкинселек булһа ла ҡасып китмәгән Биксәнтәй старшина улар араһында ҡалды.

— Ха, Бикчентай! Һин дә бындамы ни, ғали йәнәптәре? Көтмәгәйнем... — Мыҫҡыллы төрттөрөп, яһалма йылмайған Тимашев уның ҡаршыһына килеп баҫты. — Ҡойроҡто һыртҡа һалғанһыңдыр, тиһәм...

— Ҡурҡыныс мәлдә һинең ише ҡотһоҙ сүл бүреһе генә балаларын ташлап ҡаса, ә беҙҙә үндай ғәҙәт юҡ.

— Кәпәренмә, арҡыры башҡорт! Тиҙ йыуашайтырмын мин һине. Йыуашайтырмын да айыссыҡ[165] һалып та ҡуйырмын! Үҙеңде лә юҡ өҫтөнә, төбө-тамыры менән ҡортоңдо ҡоротормон!

— Башҡортто ауыҙлыҡлап маташҡан ялмауыҙҙар күп булды ул...

— Молчать! Бунтовщик! — Тимашев Биксәнтәйҙең сикәһенә йоҙроҡлап һуҡты. Уныһы, сайҡалып китһә лә, аяғында нығ торҙо. — Минең сардарҙы кем үлтерҙе?! Минең наиб ҡайҙа?! Ошо ике һорауға яуап таба алмаһаң, үҙең ише йолҡоштарыңа ҡушып, алама ауылыңдың көлөн күккә осорам! Берегеҙҙе лә аяп тороу юҡ! Бел: мин шаяртмайым.

Биксәнтәй, күҙҙәрен яман аҡайтып, Тимашевҡа ҡарап торҙо ла оло кинәнес менән уның ҡыуарған йөҙөнә ҡан ҡатыш төкөрҙө.

— Йыйын ғажиздарҙы рәһен алып алышты отмаҡсыһыңмы, ҡатил тоҡомо! — тине, тешен ҡыҫып.

— Ах, эт! — Тамам ҡотороноп киткән подполковник ҡылысын шыйлатып ҡынынан һурҙы ла баш осона күтәрҙе. – Этҡә – эт үлеме!

Шул мәлдә көтөлмәгән хәл булды: тимер сыңын ишетеп алған Ҡолтой, тәүәккәллек менән икеһенең араһына баҫып, Биксәнтәйҙе үҙенең үтә кәгез кәүҙәһе менән ышыҡланы.

---

*[164] Мәҡәм — тауыш, ауаз.*
*[165] Айыссыҡ — ауыҙлыҡлау.*

— Мине тураҡла, йәзит! — тине ул, айбарланып.

—Һин ҡарт ишәккә лә сират етер! Кит аяҡ аҫтынан! — Ярһыу Тимашев бабайҙы бар көсөнә төртөп ебәрҙе. Уныһы, тәкмәсләп, бысраҡ ергә барып төштө.

— Кәрһеҙ үә ҡоралһыҙ ҡарт-ҡоро, бисәләр менән айҡашырға маһир икәнһең, подполковник әфәнде.— Биксәнтәй, уның оторо йәненә тейеп, һаман тәләкәләүен белде. — Шәп булғасың, Бүгәс батшаға ҡаршы сыҡ, ҡара йөҙ! Йөрәгең етһә...

— Һуңғы тапҡыр яҡшылыҡ менән һорайым: ҡайҙа олаҡтырҙың Миргородскийҙы?! — Тимашев, ҡылыс һабын ҡыҫып, йылан ише ыҫылданы. — Йәнеңде алам, Уралтау шайтаны!

— Һай, ҡаҙарылдың да баһаң! Үҙ наибыңа үҙең баш була алмағанды...

Алдында ғорур ҡиәфәт менән ҡарағас төпһә ише ҡымшанмай ҙа баҫып торған, әжәл ҡаршыһында бөгөлөп төшмәҫ бөркөт ҡарашлы сая башҡорт иренең самаһыҙ тапҡырлығына һушы китеүҙән ҡапылғара өнһөҙ ҡалған подполковник бер талай уға текләп торҙо. Был әҙәмде бер ҡурҡытыу менән генә алдырып булмаясағына әле килеп тамам инанды, шикелле, ул. Биксәнтәй байҙың ат аранына күрһәтте лә:

— Барыһын да анауы һарайға индереп ябырға!— тип сыйылдап ебәрҙе. Ҡот осҡос фарман шул рәүешле тыуҙы.

— Балаларҙы ламы, ваше превосходительство? — Ефим подполковник алдына һығынды.

— Береһен дә ҡалдырмаҫҡа! Уларҙың бары ла бер иш...

Ҡурҡыштарынан ҡалтыранышып, ҡобаралары осҡан кешеләр сар ҙа сор илаша башланы. Әзмәүер казактар яр һалып ҡысҡырған кешеләрҙе эткесләйтөрткөсләй йыуан бүрәнәләрҙән нығын ырып эшләнгән ҙур һарай яғына алып киттеләр.

“Күпме көс сарыф итеп, күпме тир түгеп төҙөгән аран үҙем менән ауылдаштарым өсөн тамуҡ соҡоро булырмы икән ни шулай уҡ? — тип уйланы Биксәнтәй, төркөм ыңғайына барышлай. — Мин инде, ярай, ҡулым менән башҡарған эште иңем менән күтәрәм, ә бына ҡалғандар... Тамсы ла ғәйептәре юҡ көйөнә... Әллә ошо урында сиселергә лә ҡуйырғамы?.. Юҡ, әлегә ярамай, һуңғы мәлгә тиклем өндәшмәгәс өндәшмәҫкә!” Шулай итеп, ихатаһына барып еткәнсе үҙ-үҙе менән көрәшкән Биксәнтәй, башҡаса сараһы ҡалмағанда ғына урланған писарь серен асырға, тигән ҡәтғи ҡарарға килде. Ә Тимашев, халыҡты оло һарайға индереп япҡандан һуң:

— Бөгөнгә йәнегеҙҙе йәһәннәмгә осормай торам! — тип ҡысҡырынды: — Уйланыр өсөн тағы бер төн бирәм. Иртәнге көн, ҡояш сығыуға, Миргородскийҙың ҡайҙалығын, йәнә лә Өстөкәйҙе үлтереүсенең исемен атаусы табылмаһа... — Подполковник, һүҙҙәренең кешеләргә нисек тәьҫир итеүен көткәндәй туҡтап торғандан һуң, дауам итте: — Мейесегеҙ артындағы тараҡандар һымаҡ ҡырылырһығыҙ. Быныһын вәғәҙә итә алам. – Тимашев үҙенең әйткәндәренән һәләк ҡәнәғәт ҡалды.

Ауыр ишектәр шығырлап ябылыуға, уларына арҡыры ағастар һалынды. Ярым ҡараңғы һарай эсенән аянңыслы сыр-сыу, өҙләкһеҙ илау-һыҡтау, башҡа һәр төрлө ауаздар ишетелеп торҙо.

— Сабыйҙарыбыҙҙың ни гонаһы бар, йәзиттәр?!

— Тоҡомоғоҙ ҡороғор армайҙар!

— Тәфтиләүҙәр кире ҡайттымы әллә, ярраббым?!

— Ҡәһәр генә һуҡманы бит үҙегеҙҙе!

Эштең олоға китә барыуын күргән Барсын:

— Подполковник әфәнде, тере килеш яндырып үлтереү – әҙнәптең[166] ҙурҙарҙан да ҙуры һанала беҙҙә, — тип аҡылын юйған Тимашевҡа ҡаршы төшмәк булғайны ла, тегеһе ишетергә лә теләмәне.

— А-а! Төкөрҙөм мин һеҙҙең хөрәфәтегеҙ менән бергә исламығыҙға ла, борҡанығыҙға ла! — тип ҡул һелтәп ебәрҙе.

Ошонан аҙаҡ инде аңшайышып торған казактар ҙа хәүефкә ҡалды: ни һөйләгәнен үҙе лә белмәй башланы түгелме башлыҡтары? Дини ерлектәге ҡапма-ҡаршылыҡ бер ваҡытта ла йүнлегә килтергәне юҡ. Быныһын барыһы ла яҡшы аңлай. Мин – христиан, һин – Мөхәммәт балаһы, ә ул – Будда, ти башлаһаң...

Ошо саҡ, һис көтмәгәндә, кемдеңдер тамаҡ ярып ҡысҡырғаны, яҡынлаша килеүсе ат тояғы тауышы ишетелде. Шул әҙере Йәйәктүбә яғынан үҙен дә, менгеһен дә аямай йән-фарманға сапҡан татар егете күренде. Ул, ҡулын болғай-болғай:

— Хыянат! Хыянат! — тип туҡтауһыҙ һөрән һала ине.

Ата күркә ҡиәфәтендә ҡуҡырая биреп торған Тимашевтың йөрәге жыу итте: һиҙеп ҡалдылармы әллә ҡырын ғәмәлен? Ул сағында эш харап.

Яр һалған сапҡынсының килеп етеүен көтөп, бөтәһе лә ҡатып ҡалды: ни тигән хыянат булыуы мөмкин?

Ҡарғалы татарҙарының көсө ташып торған яңы сардары – тәбәнәк кенә йыуантыҡ кәүҙәле, киң яурынлы, ҡара һаҡал менән шундай уҡ ҡара мыйыҡлы Сепкәй айырата һағайҙы. Сапҡын уның тәңгәленә етеүгә, аҡ күбеккә төшкән арғымағы, үрәпсеп китеп, арт һынына ултырҙы. Уны көскә туҡтатҡан егет, теҙгенен ҡулынан ысҡындырып тормаҫтан ғына, ергә һикереп төштө лә, әйләнә-тирәһендәгеләрҙән шикләнгәндәй уҫал ҡарап торған башлыҡтарына эйелә биреп, ҡолағына бышылданы:

— Сепкәй сардар, хыянат!

— Тыныслан, яугир! — тине ҡырыҫ Сепкәй.— Ашыҡмай ғына, асыҡ итеп һөйлә. Ниндәй хыянат ул?

Яугир, ауыҙ күтәреп барыһы алдында һөйләп тороу килешкән эш булырмы икән тигән шикелле, алан-йолан ҡаранып алды.

— Икеләнмә, һөйлә. Үҙебеҙҙекеләрҙән сер булырға тейеш түгел беҙҙең. — Уның баҙап торғанын күргән Сепкәй ярҙамға ашыҡты.

— Мөхтәрәм ағай-эне! Хөрмәтле сардар! Өстөкәйҙе... Беҙҙең Өстөкәйҙе... истәктәр... үлтермәгән булып сыға! Юҡ, улар түгел!

Тамаша ҡылып хайран тороусылар геү итеп ҡалды. Уларға йөҙ бора һалған Сепкәй билдәле ҡул ишараһы яһаны ла:

— Тыныс булығыҙ, туғандар, тыңлап бөтәйек! — тип ҡысҡырҙы. — Дауам ит.

— Мәңгелек йортҡа оҙатыр алдынан ғосол ҡойондорорға тип мәйетте сисендергәйнек...— Егет ошо урында йәнә тотлоғоп ҡалды.

— Йә, шунан?!— Сепкәй инде түҙемһеҙләнә башланы.

— ...Арҡаһында бер ниндәй ҙә я...яраһы юҡ.— Йәш кеше, тулҡынланыуҙан, һаман ыҡ-мыҡ килде. — Йө... йөрәк аҫтына бысаҡ ҡ... ҡаҙағандар...

---

[166]*Әҙнәп — ауыр гонаһ.*

Эйе, быныһы инде Ефимдың ғәфү итмәҫлек хатаһы ине. Мосолман әһелдәренең мәрхүмде һуңғы юлға оҙатыр алдынан шәрә килеш йыуындырып-пакландырғанын, күрәһең, ул белмәгән. Белһә лә әллә, кейемен һалдырып тормаҫтан ғына, шул көйө ер ҡуйынына тығыр ҙа ҡуйырҙар, тип өмөтләнгәндер. Ни тиһәң дә, һуғыш бара. Тимашев та, унының-быныһын һорашып тормаҫтан, Өстөкәйҙең арҡаһына уҡ менән атҡандар, тине лә ҡуйҙы. Әллә нишләп алдан кәңәшләшмәнеләр шул. Алйотҡа аҡыл һуң төшә... Хәҙер нимә тип аҡланырға?

Күҙҙәре таҫырайып киткән Тимашев ашарҙай булып Ефимға ҡараны. "Эште, йәнәһе, үҙең болғаның, үҙеңә яуап тоторға!"

— Һин, яугир, ни һөйләгәнеңде үҙең беләһеңме? — Атаман Боюнов, еңмешләнеп, йәш татарға ҡаҙарынырға уйланы.

— Есаул әфәнде, кәрәкмәй. Саҡ ҡына сабыр итегеҙ.— Сепкәй уны туҡтата һалды ла, ҡабат егеткә боролоп: — Ә һин бысаҡ менән сәнселгәнен ҡайҙан белә алдың?— тип ҡыҙыҡһынды.

— Сепкәй абый, бысаҡ менән уҡ ҡырмаһы ҡалдырған йәрәхәтте генә айырабыҙ былай, — тине уныһы, һис икеләнмәйенсә.

Күҙ ҡабаҡтары яман ҡапсайып киткән Сепкәй, керпек сәнсеп, Тимашевҡа төбәлде. Тегеһе инде, ауыр ҡарашты күтәрә алмайса:

— Нимә тексәйәһең? Әллә мине шик аҫтына ҡуймаҡсыһыңмы?— тип йөҙөн сырылтты.

— Әлегә бер кемде лә шик аҫтына ҡуйырға йыйынмайымсы...— Татар башлығы көлөмһөрәне, — ни сәбәптән ҡапыл ғына һеркелдәп киттегеҙ, подполковник?

— Шулай булғас, ниңәһенә ашарҙай булып ҡарайһың?

— Бер һорау тыуып тора әле миндә,— тине Сепкәй кинәйә менән.

— Йырпысыҡланма, тураһын әйт! — Тимашев үртәлә башланы.

— Тураһын әйтәм: кем ҡулы күтәрелде икән ошо вәхшилеккә, ваше превосходительство?

— Башҡорттарҙан башҡа кем булһын...

— Ярай, уныһына бәйле йәнә бер һорау... Арҡаға төбәлгән уҡ нисек итеп күкрәккә ҡаҙала ул?

— Һин нимә, Батый тоҡомо! — Ҡыҙрас Ефим, түҙмәй, әтәсләнеп һүҙгә ҡыҫылды. — Командирҙан допрос алмаҡсыһыңмы әллә?!

— Ефимка, ҡамасауламай тор әле! — тип ҡырт киҫте ҡурҡыу белмәҫ ныҡыш Сепкәй. — Кәмһетергә лә тырышып торма. Бел: һинең дә, минең дә дәрәжә бер кимәлдә.

— Подполковникты мыҫҡыл итмәксеһең дә баһаң! — Казак башлығы оторо ҡыҙҙы.

— Әгәр шулай икән, ғәфү үтенәм. — Татар уң ҡулын күкрәгенә ҡуйҙы. — Шулай ҙа тәғәнле эште аҙағынаса асыҡлау кәрәк. Йәгеҙ, подполковник, беҙ яуап көтәбеҙ.

— Молчать! — Тимашев, ошонан башҡа һүҙ белмәгәндәй, йәнә туҙынып киткән кеше булды, әммә осоноуы күрәләтә яһалма килеп сыҡты. — Үҙеңдән юғары чиндан һорау алырға кем хоҡуҡ биргән һиңә?

— Тағы бер ҡабатлайым. — Татар башлығы тауышын күтәрмәҫкә тырышты, — был һорау алыу түгел, бары тик хәҡиҡәтте асыҡлау ғына.

— Ниндәй хәҡиҡәт, ахмаҡ?! Өстөкәйегеҙҙең йәнен ҡыйғандармы, ҡыйғандар, тағы ни кәрәк һиңә, ә?!

— Ваше превосходительство, әле генә һеҙ уҡты, сардарыбыҙҙың арҡаһына ҡаҙалған, тинегеҙ...

—Бәлки, башҡа еренә лә ҡаҙалған булғандыр... Ҡараңғы-юҡҡа яңылышыуы ҡыйын түгел... — Тимашевтың кинәт ағарынған йөҙөндә борсолоу ғәләмәте сағылып үтте, — тоғро яуҙашыңды тиктомалға юғалтыуы еңел эшме?..

— Ике йөҙләләнмәгеҙ, подполковник, дөрөҫөн әйтегеҙ!

— Дөрөҫөн?! Нимәнең? — Тимашев инде башын тинтәккә һалып маташты.

— Кем үлтерҙе Өстөкәйҙе? — Сепкәй был юлы маңлайға тура бәреп һораны.

— Ни һөйләйһең һин, һөмһөҙ татар?! — Ажарланып, тыйыла алмайса Сепкәйгә уҡталған Ефим ялт-йолт ҡылыс уйнатты.

Һөйләшеүселәрҙе ярым ҡулсаға алып торған казактар уның өлгөһөнә эйәрҙе, ә татар менән ҡалмыҡ яугирҙары, бөтәһе бер булып, ятағандарын[167] яланғасландырҙы. Хәҙер бәләкәй генә яңылышлыҡ менән һаҡһыҙ хәрәкәт тә етә ине: ике сиреү араһында кисекмәҫтән ҡан ҡойош башланасаҡ. Подполковник өсөн был — үлемгә тиң һәләкәт! Ошоно асыҡ аңлаған Тимашев йәнә хәйләгә күсә һалды. Йылмаяҡланып:

— Ярай, улай икән, әйтәйем, — тигән булды. — Өстөкәйҙе мин күкрәгенә бысаҡ ҡаҙалған килеш таптым, әммә бының кем эше булыуын әйтә алмайым. Шул башҡорттарҙан башҡа берәү ҙә түгелдер, тип уйлайым. Ошоноһона бер шигем дә юҡ.

— Уйлайым? Был яуап түгел, әфәндем. Бөркөт ҡаурыйлы уҡ күрһәтеп, уларға ҡарата беҙҙең асыуҙы күпсетмәк булдығыҙ инде.

— Башыма ла инеп сыҡманы... Бына тәре.

— Нимәһенә шул өтөктәр алдында малайҙар һымаҡ яуап тотаһың әле, подполковник? — Ефим тамам сығырынан сыҡты.— Арт һабаҡтарын уҡытайыҡ та, все.

— Туҡта?! — Ҡобараһы ныҡ осоуҙан сырайында ҡан әҫәре ҡалмаған Тимашев ҡысҡырып ебәрҙе. — Үҙ-ара низағлашып, бер-беребеҙгә ҡырғын һалыр өсөн килдекме беҙ бында?! Аҡылығыҙға килегеҙ, яугирҙар! Үҙегеҙҙе ҡулға алығыҙ!

Барыһы ла таш һын булып ҡатып ҡалды. Шылт иткән дә тауыш ишетелмәгән тынлыҡты боҙоп, әүәл Сепкәй телгә килде:

— Кем ҡыйҙы Өстөкәйҙең ғүмерен? Асыл, подполковник, шунһыҙ килешеү булмаясаҡ! — Ул инде "һин"гә күсте. — Беҙгә тик дөрөҫлөк кәрәк.

— Таңғы ҡарауыл алмашынған мәлдә... тирмәһе алдында үлтерелгән килеш табылды, тип торам бит.

— Ялған! Был Миргородский өсөн үс алыу маҡсатында һеҙ ойошторған хөсөт! Бары шул ғына! — Сепкәйҙең, ниһайәт, түҙемлеге бөттө. — Башҡорттар менән үҙ-ара яғалаштырып, беҙҙе уларға ҡарата аяуһыҙыраҡ булһын өсөн нәҡ Өстөкәйҙе һайлағанһығыҙ. Бар хикмәт ошонда, подполковник! Әммә ялғанығыҙ барып сыҡмаҫ! Протест белдереп, һеҙҙең менән төҙөлгән моғаһәдәне ошо сәғәттән өҙәбеҙ!

Йөҙгә бәреп әйтелгән раҫ һүҙҙәрҙән шаңҡып ҡалған Тимашев бер ни

[167] *Ятаған — кәкре ҡылыс.*

өндәшә алманы. Ефимдың да башҡаса тауыш-тыны сыҡманы. Барыһы шым булды ла ҡуйҙы.

Ҡоралының ҡаҡшамаҫ ҡеүәте менән маһайып йөрөгән подполковниктың “оло” сиреүе шул көндө үк йөҙ етмеш кешегә кәмене. Асыуҙары сикһеҙ ҡабарған Ҡарғалы татарҙары тиҙ арала йыйналдылар ҙа үҙ яҡтарына ҡайтты ла киттеләр. Тимашев уларҙы тел менән хыянатсыл ҡурҡаҡлыҡта ғәйепләп маташһа ла, туҡтатырлыҡ бер ни ҙә ҡыла алманы. Шулай ҙа ике тиҫтәнән ашыу “верный” татар үҙ теләктәре менән сиреүҙә ҡалды.

Йәйектүбәнең шимал яҡ итәгендә, өйкөм сауҡалыҡҡа һыйынып үҫкән муйыл ҡыуағы ситендә, ярым ай уйылған шыма ташлы, күмер ише сөм-ҡара тупрағы әллә ҡайҙан күҙгә ташланып торған яңғыҙ ҡәбер ятып ҡалды. Өстөкәйҙең ҡәбере.

Ефим, ғәҙәтенсә, яртаҡылланып: “Һепереп һалайыҡ дезертирҙарҙы!” — тип осоноп ҡараһа ла, Тимашев мәғәнәһеҙ ҡырылышҡа юл ҡуйырға баҙнат итмәне. Күрәһең, күҙаллап булмаҫлыҡ эҙемтәләрҙән шөрләне.

Тимашев төнгө һағауылға яҡшы ҡоралланған егерме казакты зинданһарай янында ҡалдырҙы ла отрядтың төп өлөшөн лагерға ҡарай борҙо. Яҡшы ҡоралланған ике тиҫтә казакка ҡаршы килгәндәй көстөң был тирәлә әлегә булыу мөмкинлеген күҙ алдына ла килтерә алманы ул. Старшиналары бикле, йәйләүҙәге барлы-юҡлы ир-ат йәһәннәм төбөнә ҡасып бөткән. Ҡасан урап ҡайта улары. Ҡайтһа әле...

...Ят урманда яңғыҙы ҡалған Терентий тегеләй сапты, былай йүгереп ҡараны, әммә ярҙам ҡулы һонорҙай тере йән тап итә алманы. Башына тотҡондарҙы азат иткәндәй йүнле фекер ҙә килмәне.

Айғураланып таң беленә башлағанда аран эсенән өҙлөкһөҙ ишетелгән һыҡтау-һыҙланыу ауаздары бер мәлгә тынып ҡалған һымаҡ булды. Тотҡондарҙың күпселеге, яҙмыштарына буйһоноппмы, бер-береһен йылытырға теләгәндәй һырығышып, таңғы йоҡоға ҡаршы торор көс таба алмайса, серемгә китте. Шулай татлы була ул таңғы йоҡо. Хәйер, әжәле алдынан да әҙәми затты йоҡо нығ баҫа, тиҙәр...

Һаҡмар үҙәненә быға тиклем күрелгәне булмаған ғәжәп ҡуйы томан төштө. Уны хатта ҡояш нурҙары ла йырып үтә алмай. Шуға күрә шәместең ҡалҡҡанмы-юҡмы икәнлеген дә самаларлыҡ түгел.

Таң һарыһы беленеүгә Һаҡмарбаштан алыҫ булмаған Бәләкәй йылғаның һөҙәк ярына килеп ултырған Терентий сараһыҙҙан башын ҡосаҡлап иланы. Иртәнге һалҡында шулай дуға бөгөп ултыра торғас, Ҡөҙрәтколға һаҙлығы яғынан кеше һөйләше ишетелеп ҡалғандай булды. Йөрәге уйнап киткән Терентий эйелгән башын күтәрә һалды ла, көсөргәнеп, шул яҡҡа ҡараны. Әммә бер нәмә лә күрә алманы. Теге тауыштар ҙа тынып ҡалды кеүек. “Ҡолағыма салынғандыр, шәт, — тип уйланды ул. — Бара торғас, әллә алышына ла башланым инде?..”

Юҡ! Баяғы тауыштар уның ҡолағына салынмаған! Ана, кемдәрҙер шыпырт ҡына һөйләшә. Мөңгөрләшеүҙәр был юлы яҡынраҡ ишетелде. “Йәйләүҙәгеләр килә!” — Терентийҙың иң әүәл башына һуҡҡан уй ошо булды. Мыҙылып тормайса ҡаршы йүгерергә кәрәк! Тәүҙә ҡарауыл хаҡында иҫкәртергә, унан ярҙамға әйҙәргә! Әлегә, бәлки, һуң түгелдер...

Бар иғтибарын туплаған Терентий йәнә һағайып торҙо. Казактар түгел – быныһы асыҡ. Ашыҡмай ғына һөйләшкән ирҙәр теле уның өсөн ят. Мәгәр кателдәр булып сыҡһа? “Верный“ҙар булыуы ла мөмкин… Тауышҡа ҡаршы атлай биргән ҡасҡын икеләнеүҙән туҡтап ҡалды ла, бер ғауым уйланып торғандан һуң, ахырҙа, тәүәккәлләргә ҡарар итте: ни булһа шул булыр. Тегеләй ҙә, былай ҙа барыбер бер үлем...

Әмәлгә ҡалғандай, артыҡ өн сығармаҫҡа тырышып, бер-береһенә һирәк-һаяҡ ҡына һүҙ ҡуша килеүселәр ҡулдарына ослo һайҙалар, һәлмәк киҫтәндәр менән оҙон һуйылдар, башҡа васита[168] тотҡан, иңбаштарына ҡалъян-ҡорман аҫып алған һыбайлы башҡорт төркөмө булып сыҡты.

Төн пәрейе кеүек ҡапыл пәйҙә булған көнйәлә урыҫты башта ҡотҡосоға һанап, ышанманы улар. Әсенеп ут йотҡан Терентий һыбайлылар алдында тубыҡлана төштө лә:

— Ышанығыҙ, туғандар! — тип ялбарырға тотондо. — Тегендә, ауылда, нәҫелдәштәрегеҙҙе һәләкәт көтә. Ҡотҡарырға кәрәк уларҙы. Тиҙерәк булырға кәрәк!

— Ниндәй ауыл ул? — тип ҡыҙыҡһынды алдан килгән һыбайлы.

— Һаҡмарбаш  ауылы! Старшиналары – Бикчентай бей.

Биксәнтәй исемен ишеткән яугирҙар бер-береһенә ҡарашып ҡуйҙы.

— Ә беҙ Бөрйән олоҫонан, — тине төркөм башлығы. — Тап шул Биксәнтәй Юламановтың саҡырыуы буйынса килә инек, юлдан яҙлыҡтыҡ. Томан бигерәк көслө бит...

— Ашығырға кәрәк! — Терентий, түҙемһеҙләнеп, тыпырсынды. — Аманат итеп алынған ҡарт-ҡоро менән бала-саға ат һарайында бикле ултыра. Юламанов та улар менән.

— Һағауыл көслөмө? — Ҡара мыйығы һыҙылып торған урта йәштәрҙәге һомғол кәүҙәле башлыҡтың күҙҙәре янып китте.

— Байтаҡ ҡына. Һарайҙы ике тиҫтә самаһы казак һаҡлай.

— Әйҙә, күрһәт юлды...

Күҙ асып йомған арала юҡ ителгән ҡарауыл, иҫенә килеп, мылтыҡтан атырға өлгөрмәй ҙә ҡалды. Тышта ишетелеп ҡалған сәйер ығы-зығы ҡатыш ыңһыр үлем алды ауаздарына һиҫкәнеп уянған тотҡондар, йоҡо аралаш, әүәл ни булып ятҡанын аңлай алмай аптырашты, һуңынан көтмәгәндә асылып киткән ишеккә ҡарап шаҡ ҡатты: ошомо әллә ғүмерҙәренең һуңғы минуттары?!

— Ҡурҡмағыҙ, ағай-эне, беҙ бөрйәндәр булабыҙ.— Әтрәт башлығы аңшайышып тороусылар менән йылы мөғәмәлә итте. — Бынан тиҙ генә сыға һалығыҙ ҙа урманға ҡасығыҙ! Ни ҡәҙәре алыҫыраҡ китеп өлгөрһәгеҙ, шул тиклем яҡшыраҡ.

— Ә үҙегеҙ артабан нишләргә йыйынаһығыҙ? — Һарайҙан иң һуңғы булып килеп сыҡҡан Биксәнтәй тегегә һынамсыл ҡараш ташланы.

— Беҙ, абзый, алышырға килгәнбеҙ.

— Нисә кеше?

— Йөҙ илле һыбайлы.

— Әҙ. Тегеләрҙә алты йөҙ илле ҡылыс,— тине Биксәнтәй, Йәйектүбә яғына ымлап. — Тиҙ арала ҡамап аласаҡтар.

---

[168]Васита — ҡорал.

— Ә һеҙ кем булаһығыҙ әле?— тип ҡыҙыҡһынды башлыҡ.

— Мин ошо ырыу старшинаһы Биксәнтәй Юламанов булам. Әлегә дошман менән йөҙгә-йөҙ осрашмай торорға кәңәш итәм. Ул күпкә күслөрәк һәм яҡшы ҡоралланған. Тәүҙә уйлашып алыу кәрәк.

Атынан төшә һалған егет Биксәнтәйгә ҡул биреп күреште:

— Мине, ағай, Иҙелбәк тиҙәр. Бөрйән сиреүе башлығымын.

— Бик ваҡытлы килеп сыҡтығыҙ, ҡустым. — Биксәнтәй Иҙелбәкте ҡупайтып алды. — Аҙ ғына һуңлаған булһағыҙ...

— Әйҙәгеҙ, юл ыңғайы һөйләшеп-кәңәшләшербеҙ. — Биксәнтәй менән Иҙелбәк тау-урмандарға ҡарап йүнәлгән халыҡ төркөмө артынан ыңғайланы. Ҡапыл ғына рух күтәренкелеге кисергән сиреү уларға эйәрҙе.

Кемдеңдер ҡушаҡ атына менеп алған Биксәнтәй, йөрәкһей биреп, өҙөлгән һүҙен ялғаны.

— Миндә ике йөҙҙән ашыу ир-егет яу сабырға әҙер. Бына-бына Һаҡмар түбәненән ҡыпсаҡтар, Ҡырҡты яҡтарынан тамъян күршеләр килеп етергә тейеш. Өҙөп кенә әйтмәһәләр ҙә, үсәргән туғандарға ла өмөт бағлайым. Килмешәктәрҙе, торған ерҙәренән ҡуҙғалып китергә лә ирек бирмәй, дыу килтереп туҡмарбыҙ, Алла бирһә.

Ошоғаса һүҙгә ҡыҫтырылмай килгән Терентий көтмәгәндә:

— Бикчентай, карателдәрҙе 650 ҡылыс тинеңме? — тип сәйер генә һорай ҡуйҙы.

— Эйе. Ә ниңә?

— Ә шуның өсөн, старшина: улар хәҙер дүрт йөҙ етмеш тирәһе ҡалды.

— Нисек аңларға һине, Тереғол? — тип ғәжәпһенде старшина.

—Ҡарғалылар, протест йөҙөнән, кире ҡайырылды бит бая. Сотниктарының һәләкәтендә казактарҙы ғәйепле һанап, ара өҙҙөләр...

Бик аҫтында ултырған Биксәнтәй ошо хәлдәр хаҡында, әлбиттә, хәбәрҙар түгел ине. Писарь Миргородский менән бәйле юрыҡлауының үҙ емештәрен бирә башлауына, үтә хәүефле булыуға ҡарамаҫтан, әлеге аҙымының дөрөҫлөгөнә эстән генә ҡыуанып, йылмая биреп ҡуйҙы: ана ла баһаң, тәүәккәлләгән – таш йотҡан...

— Иҙелбәк ҡустым, былай булғастын, беҙҙең эштәр һәүетемсә еңеләйә түгелме, ә? Ҡаршы яҡтың хәле күпкә хөртәйгән дә баһаң!

Үлемесле бәләнән ниндәйҙер мөғжизә арҡаһында ғына йолоп алынған Һаҡмарбаш ауылы халҡы Бөрйән ырыуы яугирҙары менән берлектә әкренләп Уралтауға артылды. Ҡушаҡ аттар байтаҡ ҡына булыуының да файҙаһы теймәй ҡалманы. Ололарҙы, хәлһеҙерәктәрҙе шуларға икешәрләп-өсәрләп менгәштерҙеләр. Был, үҙ сиратында, хәрәкәт итеүҙе лә һиҙелерлек тиҙләтте. Ҙур-ҙур асыҡтарҙы һәм оло туғайҙарҙы имен-аман үткәндән һуң, ағаслыҡ араһындағы ысыҡлы үләндә һүләм һаҡма ҡалдыра барып уҙған төркөм тиҙ арала эт менән эҙләһәң дә эҙенә төшә алмаҫлыҡ төпкөлдәргә китеп юғалды.

...Әле күптән түгел шығрым тулы арандың ҡараңғы мөйөшөндә мыштым ғына берәү ултыра. Ул – ауылдың мәртәбәле ағаларының иң мәртәбәлеһе һаналған Ҡолтой ҡарт. Бабай бая, тотҡондар сыға башлағас та: "Күрмәгән күҙҙәрем, эшкинмәгән аяҡтарым менән артыҡ оронсоҡ өҫтөнә мәшәҡәт өҫтәп, кеше ыҙалатып йөрөгәнсе, ултырайым да ҡалайым. Донъя тип әхирәттең үҙенән, әхирәте хаҡына фанилыҡтан ваз кисеп, кешеләр иңенә артыҡ йөк булып

төшәһем юҡ инде, — тигән ҡәтғи ҡарарға килде. — Ҡаужып бөткән ҡартты ни эшләтерҙәр тиһең?”

Этеш-төртөш араһында иһә уның бармы-юҡмы икәнлеген абайлаусы ла булманы. Ни өсөн тигәндә, ҡарттың шул рәүешле үҙ теләге менән дошман ҡулына тороп ҡалыры бер кемдең дә башына инеп сыҡманы.

...Фреймандың иң сос казактары араһынан һайлап алынған ике тиҫтә кешелек һағауылға ныҡ ышанған Тимашев иртәгәһен Һаҡмарбашҡа һуң ғына килде. Томан бер аҙ шыйыҡая төшһә лә, ысыҡ әле шул көйө. Подполковник ҡырып һалынған һаҡсылар менән шарран асыҡ ишектәргә ҡарап, үҙ күҙҙәренә үҙе ышанмағандай, шаҡ ҡатып торҙо. Йөрәге сәнсеп, тыны ҡыҫылыуҙан ағарынып китте. Күкрәгән тотҡан килеш ул:

— Бер нәмәгә ҡарамай эҙләп табырға! Барыһын да дөмөктөрөргә! –тип көскә фарман сығара алды.

Ашыҡ-бошоҡ кәңәш ҡорғандан һуң, арсыйын янында ҡалдырҙы ла төп ғәскәрҙе эҙ юлламаҡҡа оҙатты. Әммә шырлыҡта йөрөп күнекмәгән казактар беленер-беленмәҫ ятҡан һаҡманы тиҙ үк яҙлыҡтырҙы ла буш ҡул менән кире әйләнеп ҡайтырға мәжбүр булды. Быға аҡ шаршау булып эленеп торған томан да булышлыҡ итмәй ҡалманы.

— Тә-әк, ҡасып ҡотолорға уйланығыҙ инде! — тип ғыжылданы Тимашев, Уралтау яғына уҫал ҡараш ташлап. — Булдыра алмаҫһығыҙ, ҡырағайҙар! Ух, урман кейектәре! Барыбер үс алам мин һеҙҙән, барыбер ҡон ҡайтарам! Йәшеренеп әллә ҡайҙа бара алмаҫһығыҙ. – Уның һүҙҙәрендә дәһшәтле кенә менән сикһеҙ күрә алмаусанлыҡ ишетелһә, йөҙөндә екһенеү билгеләре сағыла. Ҡанға һыуһаған подполковник үлем көҫәй.

— Ваше превосходительство, бына берәүҙәрен эләктерҙек! — Мылтыҡлы әзмәүер ап-аҡ башлы ҡартты елтерәтеп алып килде. Ул Ҡолтой ине. Түбәтәй кейгән кәгезде Тимашев алдына баҫтырҙылар.

— Ә-ә, иҫке таныш! — Подполковник, яҡынын осратып ҡыуанғандай ҡыланып, яһалма сөсөләнде. — Шәпме, бабайка! Нишләп былай бер үҙең генә? Ҡалғандар ҡайҙа?

— Кемдәрҙе әйтәһең, түрә? — Ҡолтой юрый аптырап киткән булды.

—Үҙең менән бергә һарайға бикләнгән ауылдаштарыңды әйтәм инде.

— Бер урында ла бикле ултырманым мин, — тине Ҡолтой ҡарт. — Әле бына үҙ өйөмдән килә ятыуым.

— Дөрөҫтө һөйләйме ул? — Тимашев теге әзмәүергә бороолдо.

— Өйөнән таптыҡ былай...

— Өйөндә ятҡан хәлдә лә анауы тиклем ғәмдең ҡайһы тарафҡа юлланғанын белмәй ҙә, күрмәй ҙә ҡалыуы мөмкин түгел, — тип һүҙгә ҡушылды өтөк Ефим.

— Мин дә нәҡ шулай уйлайым, бабайка. — Аҫтыртын көлөмһөрәгән Тимашев Ефимға күҙ ҡыҫты. — Әйт тә ҡуй: ауылдаштарың ҡайһы яҡҡа китте? Юлды күрһәтһәң, тағы ла һәйбәтерәк булыр...

— Әйтһәң, үҙеңде ебәрербеҙ, хатта бүләк бирербеҙ. Әйтмәһәң...

— Ҡайҙан беләйем мин, уландар, — тине Ҡолтой ҡыйыу тәүәккәллек менән. Уның тауышында ҡурҡыу ҙа, ялбарыу ҙа юҡ ине. — Күрмәгәстен, әйтә лә алмайым шул.

— Һуҡыр күпте күрә, — тип ҡуйҙы Тимашев кинәйә менән. — Йәшәгең килһә, күрерһең дә, белерһең дә...

— Бәй, күрмәгәнде күрмәнем, тиһең инде.

— Шулаймы? — Подполковниктың тауышы ҡырҡа үҙгәрҙе. — Был һинең һуңғы һүҙеңме, ҡартлас?

Ҡолтой йәнә яуап бирмәне.

— Ярай, ебәрегеҙ аҡылдан яҙған тинтәкте! Өйөнә ҡайтып китһен әйҙә... — Был юлы хәйләле Тимашевтың тауышында йәшертен мәкер ишетелеп ҡалды.

Алға эйелә биреп, йышылып бөткән ялтырауыҡ таяғына таянған Ҡолтой, тәнтерәкләп, урам буйлап китте. Ошолай анһат ҡына ҡотолоуының берәй әтнәкәһе килеп сығырын ул бар булмышы менән тойоп өлгөргәйне. Шулай ҙа, ни булһа шул булыр тип, сыйырсыҡ ояһындай ғына өйөнә ҡайтырға ҡарар итте. Ҡолтой ҡарт күпмелер ара үтеүгә, күҙҙәренә ҡан һауған подполковник Тимашев:

— Бөтә ауылға үрт һалырға! — тигән ҡот осҡос фарман бирҙе. — Был ҡәһәрле ауылды нигеҙенә ҡәҙәр юҡ итергә!

— Һин нимә, подполковник, ысынлап әйтәһеңме? Әллә...— Ишеткәненән баҙап ҡалған Барсындың ҡыҫыҡ күҙҙәре ҙурайып китте.

— Шаяртып тормаға мин һиңә кем?! Бойороҡто үтә! — Тимашев екеренеүен белде. — Әйткәнде үтә!

— Ваше превосходительство, бәлки, ҡабаланмай торорғалыр, ә? Ябай кешеләрҙең ни ғәйебе бар? — Барсын төкөрөгөн сәскән подполковниктың мәғәнәһеҙ бойороғон көсөнән сығарыуына ышана ине һымаҡ. — Әбей батшаның, тыныс ауылдарға ҡағылмаҫҡа, тейешһеҙгә халыҡты рәнйетмәҫкә, тигән ҡәтғи күрһәтмәһен боҙабыҙ түгелме?

— Ҡайҙа ул Әбей батшаң? Күреп торамы беҙҙе?! — Тимашев уғата тиҫкәреләнеп китте. — Тел сарлағансы, әйтелгәнде башҡар!

— Әгәр башҡармаһам? — Барсындың былай ҙа соғол сырайы ныҒыраҡ ҡырыҫланып, ҡарашы тәкәбберләнде.

— Приказды үтәмәҫкә хаҡың юҡ!

— Хаҡым булмаһа, намыҫым бар!

— Ярай, намыҫың бысраныуҙан ҡурҡаһың икән, ҡушылғанды казактар эшләр, ә һин ялпыларың менән ситтән генә ҡарап тор!

Тешен туктауһыҙ шығырлатып, уртын сәйнәгән подполковниктың, бер нәмә алдында ла туҡталып ҡалырға йыйынмайса, мәрхәмәтһеҙ ниәтен тормошҡа ашырырға маташыуына инде тамам инанған Барсын, яугирҙарына борола һалып:

— Теге ҡартты өйөнән сығарырға кәрәк! — тип ҡысҡырҙы.

Шул әҙере ике ҡалмыҡ егете, ҡабаланып, Ҡолтой ихатаһына инеп китте. Бабай иһә, күпме генә өгөтләп маташмаһындар, өйөнән сыҡманы, аяҡ терәп баш тартты ла ҡуйҙы.

— Әһә, өңөн һаҡлап ҡалырға маташа, ҡарт төлкө. — Тимашевтың күңеле үрсене. — Барып сыҡмаҫ! Алама йортоңа ҡушылып үҙеңдең дә көлөң күккә осор!

Ҡалмыҡ һыбайлылары, тын алырға ла онотоп, һушһыҙ ҡалды: нисек инде кеше һынлы кешене, Хоҙай бәндәһен, тере килеш яндырмаҡ кәрәк?! Был бит, аҙ ғына булһа ла иманы бар әҙәм өсөн аҡылға һыймаҫ эш өҫтөнә, мәңге юйып

булмаҫ гонаһ! Ғүмерҙе Хаҡ Тәғәлә бүләк иткән һәм бары тик ул ғына тартып алырға хоҡуҡлы. Хатта бәләкәй генә бөжәкте лә ут ғазаптарына һалырға ярамай. Ике һүҙенең береһе һайын “бог”ын иҫкә төшөргән Тимашев ошоно ғына аңламаймы икән ни?..

Ярһыу Барсын түҙмәне, Ҡолтой ҡарттың аҡбалсыҡ һылап ағартылған торлағына үҙе килеп инде. Инде лә бормалы тәрән һырҙар йәмһеҙләгән йөҙөн ҡибла тарафтарына йүнәлтеп, вайымһыҙ ҡиәфәт менән доғаларын уҡый-уҡый тәсбих тартҡан бабай янына, урындыҡ ситенә, ултырҙы. Үҙенә иғтибар ҙа итмәгән ҡартҡа инәлгәндәй:

— Олатай, әйҙә, сыға һалайыҡ, юғиһә яндырып үлтерәләр, — тине. Урыҫ менән башҡорт телен вата-емерә әйтелгән һүҙҙәрҙе Ҡолтой яҡшы төшөндө. Ҡалмыҡҡа боролоп тормаҫтан ғына:

— Динен һатып, Хоҙай бәндәһе әҙәм ҡанын ҡоя йөрөгән мөртәт менән һөйләшеп тороуы ерәнес. Сыҡ бынан! — Бабай ҡаҡ таяғы менән Барсынға тондороуҙан көскә тыйылып ҡалды. – Минең һеҙҙең менән уртаҡлашыр нәмәм юҡ!

— Мин... Беҙ бит Пугачев тигән дәһри яуызға ҡаршы китеп барабыҙ...

— Ә Бүгәстең беренсе ярҙамсыһы кем, шуны беләһеңме?

— Юҡ, белмәйемсе...

—Уның уң ҡулы —Юлай уғлы Салауат булыр.— Ҡолтой ҡарт ғорур ҡиәфәттә күкрәген кирә бирҙе. — Үҙе саф башҡорт! Ул илем-ерем, халҡым тип ғүмерен бирергә әҙер, ә һеҙ...

— Шулай ҙа өйҙән сығырға тура килер, уғата[169] ...

— Миндә эшең булмаһын, борҡан заты! Әйттем – бөттө! — Ҡулын һелтәп ебәргән бабай, ҡалмыҡты бүлдереп, ҡырт киҫте.— Бысраҡ аяғың менән еребеҙҙе тапап йөрөмә! Әйттем бит, кит бынан!

— Тереләй янаһың да баһа, ағай!

— Ҡыйыҡһыҙ ҡалһам, минең өсөн былай ҙа йәшәү юҡ! Мең ғазап эсендә туңып үлгәнсе, тәтөнгә сәсәп йән биреүең биш артыҡ.

— Юҡ, мин һине был көйө ҡалдырмайым, — Барсын Ҡолтойҙоң ҡулынан тотто.

— Яҡшатланып маташма, һатлыҡ! — тип ҡырт киҫте ҡарт, үҙен үҙе таный-май. — Ялағайҙарға ҡалған көнөбөҙ юҡ, шөкөр. Сыҡ минең өйөмдән!

Аҡһаҡалдарға бәләкәй сағынан ихтирам менән ҡарап өйрәнгән ҡалмыҡ егетенә сығып китеүҙән башҡа сара ҡалманы. Йөҙ башлыҡтарының ҡаушауҙан йәмерәйгән сырайын күргәс тә эштең хөрт икәнлегенә төшөнгән яугирҙар, барыһы бер булып, баштарын эйҙеләр.

— Бошонмағыҙ, егеттәр, оло кешене йәбергә бирәсәгебеҙ юҡ, донъяһын уратып торабыҙ ҙа казактарҙы яҡын ебәрмәйбеҙ! — Бөтә ихтыяр көсөн туплаған Барсын яугирҙарына мөрәжәғәт итте.

— Һе, улар күмәк. Мылтыҡтары бар... — Араларынан бер йәш ирекәй ҡурҡа төштө.

— Мылтыҡҡа тотонорға ҡыймаҫтар, — тип тынысландырҙы уны башлыҡтары. Шул арала хәрәкәткә килгән ҡалмыҡ һыбайлылары өйҙө уртаға ала һалды ла түңәрәк яһап торҙо.

“Килде бит, әй, йәшәйеш! Кемдең кемгә ҡаршы барғанлығын һис аңлай

[169]*Уғата — өлкән кеше, ағай.*

алмаҫһың. — Ҡола ҡашҡаға атланған Барсын уйҙарға бирелде. — Борҡан да борҡан, тип ҡабатлаған Тимаш, төрлөсә мыҫҡыл итеп, динеңде мәсхәрәләй, ә һин уға яҡшатланып йөрөгән булаһың. Асылда унның ҡалдығына өмөт итәһең. Үҙебеҙ кеүек үк ярпыларға ҡаршы барабыҙ, тип ниҙәр генә күрмәйбеҙ. Бынауы кәрһеҙ генә башҡорт ҡартына ҡәҙәре нисек ажарланып тора! Эйе, иленә баҫып ингәнде кем яратһын да һөмһөҙ рәүештә ерен-һыуын тапағанды кем өнәһен? Ошонан истәк ҡорал тотоп беҙгә ябырылһын әле... Ай-һай, оҡшар инеме икән? Бара торғас, ниндәй көнгә төштөк бит, ә! Остоҡ зыяны теймәгән, бер ғәйепһеҙ ҡарт-ҡоро менән сабыйҙарҙың, хатта ҡатын-ҡыҙҙың торлағын тиктомалға үртәп йөрөсәле! Аллаларына мөкиббән киткән мосолмандарҙың беҙҙе күрә алмай башлағандарына аптырарлыҡмы ошонан һуң? Эйе, Әбей батша араны болғай ғына. Ә беҙ шуны һаман булһа аңлай алмайбыҙ. Унның мәкер тулы буш вәғәҙәләренә ышанған булып, уға эйәрәбеҙ ҙә, үҙебеҙҙең ишеләрҙе йәберләп, өҫтөбөҙгә бөтмәҫ ҡарғыш алабыҙ. Былай әҙәм көлдөрөп йөрөгәнсе, теге мәл, поляктар менән һуғышта, баш һалғаның артығыраҡ булыр ине. Ҡайҙан килеп тарыны шул Тимашевҡа? Ни тигәнсе ҡәһәрле килешеүен төҙөнө?! Мәғәнәһеҙ подполковниктан эт урынына талана-талана кәмһетелеп йөрөгәнсе, бөгөн үк был тирәнән башты алып сығып китергә кәрәк. Ана, ошоно беҙҙән алданыраҡ төшөнөп алған татарҙар бөгөнгө бысраҡ эштә ҡатнашыуҙан ҡотолдолар ҙа баһаң. Хәҙер уларҙың, исмаһам, выжданы тыныс. Бая ҡарт телгә алған Салауат та, ахыры, тиген кеше түгел. Һуңғы осорҙа унның хаҡында йыш ишетергә тура килә. Насар әҙәмдең исемен халыҡ йыш ҡабатламаҫ ине...“

— Барсынай! Өйҙәрҙе яндыра башланылар! — Яугирҙарҙың береһе яр һалыуға, сардар эйелгән башын ҡалҡытты. Унның күҙ алдында унда ла, бында ла борхоп күтелгән һоро төтөн бағаналары күренде. Тирә-йүнгә тын алғыһыҙ көйөк еҫе таралды. Эйәһеҙ ҡалған эттәр олорға тотондо, ҡауырыйҙарына ут ҡабып сорҡолдашҡан тауыҡтар янғындың тиҙерәк таралыуына булышлыҡ итте. Күрән өҫтөнән ҡоро тиреҫ менән ябылған ҡыйыҡһыҙ өйҙәр шырпы ҡабындай тоҡанып китә лә деүләп яна башлай. Бар нәмәне ялмап, юлында осрағанды әкиәт дейеүеләй көл-күмергә әйләндерә барған ялҡын телдәре, ялпылдап, юғарыға күтәрелә. Көлтә-көлтә булып осҡан осҡондар, ҡайнар ағым ыңғайына ойоҫҡоп, һауала уйнай. Улар ел ыңғайына барып төшкән урындарҙа яңы ут сығанаҡтары хасил була. Афәттең иң ҡот осҡосонан ҡасып ҡотолоуы мөмкин түгел һымаҡ.

Бер мәлде ялҡынлы ғәрәсәт өйөрмәһе эсенән ҡулдарына ҡара төтөн урғылтып дөрләгән сыраҡтар тотҡан атлы казактар килеп сыҡты. Хас та зәҡҡүм[170] өҫтәп сәкер[171] дөрләтеүсе тамуҡ хеҙмәткәрҙәре! Янған ҡаралты еҫе менән зәһәр төтөнгә иҫереп, булып ятҡан мәхшәр шауҡымына бирелеүҙән һаман ҡотороna барған һыбайлылар, зыҡ ҡубып, берҙән-бер янмай ултырған Ҡолтой ҡарт өйөнә ябырылды. Йортто уратып торған ҡалмыҡтар, уларҙың юлын быуып, бар хәлдәренсә үткәрмәҫкә маташты. Ошоно күрә һалып ҡалған Тимашев шунда уҡ сабып килеп етте лә, Барсынға тишә ҡарап:

— Алып кит йолҡоштарыңды! Минекеләргә юл бир! — тип аҡырҙы.

— Оят түгелме, подполковник? — Был юлы Барсын һис ҡаушаманы,

[170]*Зәҡҡүм — тамуҡ ағасы.*
[171]*Сәкер — тамуҡ уты.*

сигенергә лә уйламаны. — Бындай түбәнселеккә барырҙы белмәнем... Хурлыҡ бит! Әҙәм көлкөһө!

— Намыҫың ғазаплай икән, кит бынан! Ана, лагерға ҡайт! Шунда ботоңдо күтәреп ятып тор!

— Лагерға беҙ бергәләп ҡайтырбыҙ. Ҡайтырбыҙ ҙа бөтөнләйгә сығып китербеҙ.

— Һин дә моғаһәдәне юҡҡа сығарырға уйлайһыңмы әллә?

— Эйе, килешеүгә уйламаҫтан ҡул ҡуйғаныма үкенеп бөтә алмайым.

— Дөрөҫөн әйт, язы заты, шөрләнем, тиең. — Һаһылдап көлгән Тимашевҡа башҡа казактар ҡушылды.

— Эйе, йәшермәйем, шөрләнем. — Барсын уларға өтөп ҡараны, — әммә ләкин баш күтәргән башҡорттан түгел, ә һеҙҙең боҙоҡлоҡ менән һеҙҙең этлектән, аҡылға һыймаҫ бысраҡ эшегеҙҙән шөрләнем. Йыртҡыс та улай ҡыланмаҫ, билләһи!

— Бынығы ла ҡойроҡто һыртҡа һалырға самалаймы әллә? — Һөмһөрө ҡойолған Тимашев янына Ефим килеп етте. — Фарманыңды бир, подполковник, хәҙер үк йыуашландырабыҙ үҙҙәрен. Кем менән эш иткәндәрен белмәһәләр әле.

— Кәрәкмәй! — Тимашев ҡул ишараһы менән уны тыйҙы. — Китһендәр, ышаныслыҙ дуҫҡа ҡарағанда ышаныслы дошман һәйбәтерәк.

— Һеҙме ни дуҫ? — Барсын ауыҙын салышайтты. — Һеҙҙең һымаҡ ҡойтолар менән юлға сыҡһаң, балтаң биленңдә булһын, тип башҡорт тиккә әйтмәй икән. Үҙәгенә үткәреүегеҙ, күрәһең, шул хәтлелер...

— Ах һин, дала ҡамғағы! Сәйнәшеп тора, етмәһә! — Ефим тумалаҡ башлы һәлмәк киҫтән менән Барсынға киҙәнде, әммә һуғырға өлгөрмәне. Ҡара янған сырайын ҡурҡыныс сирылтҡан көйө, ул, бөлдөргөһөнә һәленеп төшкән киҫтәнле ҡулын күтәргән килеш, бер аҙға ғына ҡатып ҡалды ла, кинәт быуынһыҙланып, эйәренән шыуып төштө. Йөҙтүбән ятҡан казактың арҡаһына... тәлдермәс[172] ҡаҙалған ине. Ошо көтөлмәгән боролоштан ҡото алынған Тимашев ялтйолт тирә-яғына ҡаранды. Уға сираттағы уҡ үҙенең арҡаһына килеп ҡаҙалыр төҫлө тойолдо. Сардарҙарының күҙ алдында үлемесле яраланғанын күргән казактар ҙа, аптырашып, бер килке өнһөҙ торҙо. Ахырҙа, иҫтәрен йыйып, сыраларын ташланылар ҙа мылтыҡҡа тотондолар.

Уны-быны аңлап өлгөргәнсе шарт-шорт мылтыҡ тауыштары яңғырап китеүгә, бер нисә ҡалмыҡтың йәнһеҙ кәүҙәһе ергә ауҙы. Ошоғаса мылтыҡ шауын ишеткәне булмаған аттар ҡапыл өркөп китте. Шул арала сыуалыш башланды, һәм казак эшем эйәләре менән ҡалмыҡтар ҡайнашып, бергә буталды. Үткер осло тәлдермәс тейеүҙән яраланып аҡырышҡан казактар күренде. Берәүҙәре, аяғынан өҙәңгегә эләгеп, йән-фарманға сапҡан атына һөйрәлә, уның сепрәк ише бәлйерәп төшкән кәүҙәһен сабып барышлай биленләгән аты типкеләй, унда ла, бында ла алып барып һуҡтыра. Алыш ҡомарына бирелгән казак стрелоктары туҡтамай атыуҙарын белде. Улар осорған йәҙрәләр, ҡалмыҡтар менән бер рәттән, үҙҙәренекеләргә лә байтаҡ зыян килтерҙе. Ахырҙа ҡылысҡа тотондолар. Ләкин көстәр тигеҙ түгел ине. Һан яғынан күпкә ишлерәк казактар тиҙ арала ҡалмыҡтарҙы ҡыҫырыҡлай башлауға, тегеләре тырымтырағай ҡасырға тотондо.

---

[172] Тәлдермәс — ҡаурыйһыҙ уҡ.

Ҡалмыҡтар ян-яҡҡа туҙҙырылып юл асылыу менән, әлегә имен торған берҙән-бер ҡураны ла ялҡын ялмап алды. Шулай итеп, иң аҙаҡта Ҡолтой ҡарт өйө ялбырап яна башланы. Ә Тимашев тантаналы төҫ менән һигеҙенсе тиҫтәне ҡыуған өй хужаһының бына-бына һөрән һалып килеп сығырын көттө. Килеп сығыр ҙа, уның алдына теҙләнә төшөп, баш орор, тип өмөтләнде. Әммә ҡойон булып ҡоторонған ут өйөрмәһе араһында бер кем күренмәне лә, бер өн дә ишетелмәне...

Һаҡмарбаш менән эшен бөтөргән Тимашев лагерға ашыҡты. Аҙ һанлы әтрәт һаҡлаған лагерға иҫән ҡалған ҡалмыҡтарҙың тупланып һөжүм итеүе мөмкин. Әммә ҡалмыҡтарҙа һөжүм ҡайғыһы юҡ ине. Уларҙың ниәте – кәрәк-яраҡ ат-ужаларын йыйнай һалып, йәһәтләп юлға сығыу. Шуның өсөн ҡаңғырыҡта казактарҙың яҡынлашыуын абайламай ҡалдылар. Байтаҡ ҡына юғалтыуҙарға дусар ителеүҙән яртылаш һирәп, нығ ҡыйратылған төркөм ҡуҙғалып китеүгә, Тимашевтың тамаҡ ярып ҡысҡырғаны ишетелде:

— Батарея! Картечью, по изменникам — пли!

Ер һелкетеп туптар гөрһөлдәүгә яҡын-тирә ҡапыл ҡүкһел төтөнгә күмелде. Әсе дары төтөнө тамаҡтарға ултырҙы, күҙҙәрҙе яман ҡырҡты. Биш туп көбәгенән урғылған ҡурғаш ямғыры йәнә бихисап ҡалмыҡты ҡырып һалды. Иҫән ҡалғандары, ат ҡабырғаларын ҡыҙғанмайса үксәләре менән төйгөсләй-төйгөсләй, ҡасып ҡотола алды.

Ҡан еҫенә иҫергән казактар, ятып ҡалған ҡалмыҡтарҙы әйләндергеләп ҡарап, тереләрен һуйып сыҡты. Ауыр яралы аттарҙы атып үлтерҙеләр.

***

Ауылдаштарын ышаныслы урынға ваҡытлыса ҡалдырып торған Биксәнтәй, Бөрйән яугирҙарын эйәртеп, Һаҡмарбашҡа килде. Әммә һуң ине. Яһил Тимашевтан теләһә ниндәй мәкерлек көткән булһа ла, бындайы старшинаның башына ла инеп сыҡмағайны. Күргәндәренә ышанмағандай оҙаҡ ҡарап торҙо ул. Мейестәре генә һерәйешеп ҡалып, нигеҙ бүрәнәләре төтәп ятҡан ауыл урынына тетрәнмәйенсә ҡарау мөмкин түгел ине. Ағаларының кисереш-тәрен аңлаған яугирҙарҙың береһе бер һүҙ өндәшергә ҡыйманы. Күҙ алдарында асылған ҡот осҡос күренешкә барыһының һушы киткән. Аҡылға һыйыр эшме: етеп килгән ҡыш алдынан торор торлағың менән бар ауылыңды үртәп, нигеҙенә ҡәҙәр юҡ итһендәр әле! Ошондай мәкерлек менән вәхшилеккә нисек итеп ҡулдары күтәрелде икән әҙәм аҡтыҡтарының?!

Башы әйләнеп китеүҙән сайҡалып ҡуйған Биксәнтәйҙең тамағына ҡаты төйөр тығылды. Үҙе лә һиҙмәҫтән ҡылыс һабын ҡапшаны:

— Ярай, килмешәк, ут менән әүәл үҙең уйнай башланың, — тип тешен ҡыҫты.— Һиңә лә бер яуап тотор мәл етер, ул сағында ҡарарбыҙ — кем-кемде...

Яугирҙар, унда-бында аунашып ятҡан мәйеттәрҙе йыйып, казактарҙы бер соҡорға, ҡалмыҡтарҙы икенсеһенә күмделәр ҙә төн ышығында яңы йәйләүгә юл тоттолар. Биксәнтәй үҙ артынан бөрйәндәрҙе лә әйҙәне. Иртәгәһенә унлаған ылау менән барып, карателдәрҙән йәшеренеп ятҡан халыҡты алып килделәр. Сапҡын ебәреүгә Ҡыпсаҡ иленән ике йөҙгә яҡын яугир килеп етте. Күрәһең, һөйләшелгән буйынса, алдан әҙерләнеп торғандар. Шулай итеп, старшина Юламанов ҡулында биш йөҙҙән ашыу кешенән торған һуғышсан әтрәт тупланды. Белеп етәкселек иткәндә, ул да ярайһы уҡ етди көс ине. Һәр

хәлдә, яҡшы ҡоралланған булыуҙарына ҡарамаҫтан, өс йөҙ илле казакка буйтым ҡаршы торорлоҡ.

— Бер ҙә насар түгел! — тине Биксәнтәй, дөйөм ҡор алдына баҫып. — Өҫтәүенә, беҙгә төн ҡараңғылығы булышлыҡ итәсәк һәм үҙ төйәгебеҙ ярҙамға килер, иншалла. Ҡаршы яҡ төнөн йөрөргә яратмай, урынды ла яҡшылап белмәй. Бына ошоларҙы файҙаланғанда уңырбыҙ. Яһилдарға ҡарата сикһеҙ нәфрәт тойғоһо ла яугирҙарыбыҙға көс-кеүәт үә ҡыйыулыҡ өҫтәмәй ҡалмаҫ. Шулай итеп, иртәгә ҡараңғы төшөүгә изге жиһатты башлайбыҙ. Быcраҡ уйлы әҙәмдәр эҙләгәндәрен ошонда тапһындар. Беҙҙең дә үҙ-үҙебеҙҙе яҡларлыҡ ҡына көсөбөҙ ҙә, һәләтебеҙ ҙә бар икәнлеген белһендәр был яғына. Ҡасып ҡотолоп тере ҡала алғандары, һабаҡ итеп, икенселәренә һөйләһен. Был яғына, һөмһөҙләнеп, еребеҙ менән төйәгебеҙгә морон тығыр алдынан уйланырлыҡ булһын. Йә Хоҙай, үҙеңдән ярҙам көтәм.

...Һаҡмарбашты яндырған төндө таңға тиклем керпек тә ҡаҡмаған Тимашев та, уның ҡуштандары ла, сикһеҙ асыулы старшина арттарынан яу менән килер, тип һағайышып көттө. Көноҙон һыбай сабып йонсоған ғәскәр бөтөнләй ял итмәне.

Ә инде башҡорттар иртәгәһен көндөҙ ҙә күренмәгәс, подполковник аптырауға ҡалды. «Ҡурҡты Бикчентай, баҙнат итмәне. Яу сабырға ла бит йөрәк кәрәк. Буйһонорға теләмәгәндәрҙе ана шулай аҡылға ултырталар!» — тип күкрәк кирҙе. Маһайыуын маһайҙы, шулай ҙа ян-яҡҡа төбәп ултыртылған туптарын урындарынан алдырманы, уяулыҡты кәметмәҫкә бойорҙо. Шул рәүешле көндөҙөн дә ғәскәргә йүнле ял эләкмәне. Эште боҙған подполковник хатта ҡалмыҡтар ҡулынан һәләк булған казактарҙы ерләр өсөн кеше ебәрергә лә шикләнде. Аңғармаҫтан юлда баҫыуҙары бар, тип ҡуҙғалып китергә лә көҙөкләнде. Әммә йәлсемәгер түбә башында мәңгелеккә ҡалып булмай. Шуның өсөн дә Тимашев, ошо төндө мажараһыҙ ғына имен-аман үткәреп ебәрһәләр, яҙмыштарын Христос ҡулына тапшырып, Иҙелбаш йүнәлешендә карательный походты дауам итергә, тигән ҡарарға килде. Иртәнге көн ваҡыт сарыф итмәҫ өсөн барлыҡ кәрәк-яраҡтарҙы бөгөндән төйнәп ҡуйырға, артабан барырлыҡ хәлдәре булмаған мәжрүхтәрҙе[173] кире оҙатыуға бер нисә ылау әҙерләргә бойороҡ бирҙе.

Был мәлдә Һаҡмарбаш тарафтарына өс һыбайлы ашыға ине. Үҙҙәре менән улар ҡыуанысλы хәбәр алып килә. Уҫа биҫтәһе янында Бүгәс ғәскәре Әбей батша әрмеһен ҡыйратып ташлаған икән! Ошо хәбәрҙе ишеткән яугирҙарҙың бермә-бер кәйефе яҡшырып, рухтары күтәрелде лә китте. Улар хәҙер ауылдарын үртәп, үҙҙәрен торлаҡтан мәхрүм иткән армайҙарға утлы дауыл булып ябырылырға әҙер. Фарманы ғына булһын.

*(Аҙағы киләһе һанда.)*

---

[173] *Мәжрүх — яралы.*

Наил
ҒӘЙЕТБАЙ

# БӘХЕТ СЕРЕ

ЭССЕ

## Кире тойғолар

Һәр кем белә: кеше үҙ ауырыуын үҙе яһай. Әммә ауырыу һаулыҡты һаҡлай белмәү арҡаһында ғына килмәй. Үҙ һаулығын күҙ ҡараһы кеүек һаҡлаған кеше лә көтмәгәндә ауырып китә. Билдәле актер Савелий Крамаров хаҡында уҡырға тура килде. Ул һаулығын һаҡлау өсөн бик тырышҡан, әммә алтмыш йәшендә ҡапыл ҡаты ауырыуға һабышҡан һәм аптыраған: “Ниңә ауырыйым, мин бит араҡы эсмәйем, тәмәке тартмайым, дөрөҫ туҡланам, сынығам, гимнастика яһайым, ниңә үләм?” Ысынлап та – ниңә?

Бөтә сәбәп – кешенең эске кисерештәрендә. Беҙ кемдер хаҡында насар уйлайбыҙ, ә ул уй организмыбыҙҙың бер нөктәһен ашай. Дошмандарыбыҙға яуызлыҡ эшләйбеҙ,  тип уйлайбыҙ, ә беҙ үҙебеҙгә соҡор ҡаҙыйбыҙ.

Кире тойғо һәр ваҡыт тәнебеҙҙең ҡайһылыр өлөшөнән энергияны ситкә ебәрә, һәм шул энергия етешмәгән урын, йәғни ағза ауырыуға һабыша.

Ә кире тойғоларҙан ҡотолоп буламы? Була, әммә бик ауыр. Сөнки һиҙеү ойгандары (күҙ, ҡолаҡ, ашҡаҙан, енси ағза) беҙҙе матди донъяға ныҡ бәйләгән, шуның арҡаһында ҡайғырырға, асыуланырға мәжбүр итә. Шулай ҙа унан арыныу мөмкин. Руханиҙар белә: матди донъя кешенең күңеленә, йәненә бәйле түгел, унан айырым тора. Шуға әҙәм балаһы матди донъяға артыҡ иғтибар итмәҫкә, ә гел генә үҙенең күңелен күҙәтергә, уны таҙартырға, унда даими рәүештә ыңғай тойғолар тоторға бурыслы.

Был донъяла кеше яңғыҙ бит ул. Уның үҙенән башҡа бер кем юҡ. Шуға ла кеше матди донъя тураһында түгел, ә һәр саҡ үҙенең күңеле, йәне хаҡында уйларға тейеш. Быны аңлауы ауырҙыр, бәлки, әммә мөмкин. Уға нисек өлгәшергә?

## Ҡыуаныу

“Кире тойғолар” исемле мәҡәләлә, ауырыуҙарҙы кире тойғолар тыуҙыра, тинек. Ә һуңғылары матди донъяға артыҡ иғтибар биреүҙән килеп сыға. Шуға даими рәүештә кешегә реаль донъянан арынып торорға, уны онотторға кәрәк.

---

*Аҙағы. Башы 1-се һанда.*

Бының иң төп ысулы – медитация. Әммә уға өлгәшеү өсөн юғары рухи кимәл кәрәк. Быны һәр кем эшләй алмай.

Икенсе урында – намаҙ, доға уҡыу тора. Ғалимдар тикшереүенсә, доға уҡығанда кешенең мейеһе аңлы мәлендә лә тулыһынса реаль тормоштан ситләшә, тормош мәшәҡәттәренән ҡотола. Шулай итеп аңындағы ауырыуҙың образын юя һәм, иң ғәжәбе, тәнендәге ауырыуҙарҙы бөтөрә.

Рухи яҡтан иң түбән кешеләргә реаль тормоштан, матди донъянан ваҡытлыса арынып тороу мөмкинлеге – ул иҫереү. Әйткәндәй, статистика буйынса, Рәсәйҙә бөтөнләй араҡы эсмәүсе ирҙәр самаһын белеп иҫерткес эсемлектәр эсеүселәргә ҡарағанда биш йыл ярымға аҙыраҡ йәшәй.

Илаған саҡта ла кеше “медитация” яһай, рухи яҡтан таҙарына. Йыш илағанға ла ҡатындар ирҙәргә ҡарағанда оҙағыраҡ йәшәй.

Күреүегеҙсә, матди донъянан арыныу ниндәйҙер көс талап итә. Шулай ҙа һәр саҡ медитация хәлендә булыуҙың еңел ысулы бар.

Аллаһы Тәғәлә кешене һәр ваҡыт ҡыуанып йәшәһен өсөн яратҡан. Матди донъяны уға ярҙам биреү, рәхәтләнеү өсөн биргән. Әҙәм балаһының уны ысынға алмауына, уға алданмауына өмөтләнгән. Әммә кеше, рухи донъяны онотоп, алдатҡыс матди донъяны ысынға ала башлаған, шул арҡала, ҡыуаныуын ташлап, борсолорға, ҡайғырырға тотонған.

Ә кеше ҡыуанып йәшәргә тейеш. Ә ҡыуаныу өсөн сәбәптәр иҫ киткес күп. Һин күрә, ишетә алыуыңа, атлап барыуыңа, ямғыр яуыуына, ҡоштар һайрауына ҡыуанырға тейешһең.

Ҡыуаныу тойғоһо – Аллаһы Тәғәләгә ул биргән ризыҡтар, мөмкинселектәр өсөн, ул яратҡан камил тормош өсөн рәхмәт әйтеү, йәғни шул уҡ доға уҡыу, шул уҡ медитация.

Ҡыуаныу – йәшәүҙең маҡсаты, тормоштоң үҙе. Даими ҡыуанып йәшәү күп ауырыуҙарҙан ҡотҡара.

## *Дарвин теорияһы*

Яңыраҡ бөтә донъяла Дарвин теорияһының сираттағы юбилейын байрам иттеләр. Шул уҡ ваҡытта инде быуаттан ашыу бәхәс бара: дөрөҫмө Дарвин теорияһы, юҡмы?

Дарвин теорияһы бер яғы менән хаҡлы, ти ғалимдар, ул йәнле донъяның барлыҡҡа килеү эҙмә-эҙлеген дөрөҫ әйтеп биргән: тәүҙә микробтар, шунан амебалар, әкренләп балыҡтар, ҡоштар барлыҡҡа килгән, аҙаҡ – маймылдар һәм иң юғары нөктәлә – кешеләр тыуған. Әммә Дарвиндың хатаһы шунда: бар йән эйәһе әкренләп икенсеһенә әйләнгән, иң һуңынан маймыл кешегә әүерелгән, тиеүендә. Бер йән эйәһе лә икенсеһенә әйләнә алмай. Улар был донъяға нисек яратылған, шул көйө ҡала. Маймыл да бер ҡасан да кеше булып китмәгән һәм китмәйәсәк.

Донъяны Аллаһы Тәғәлә яратҡан. Һәм ул, тормош шарттарына яраҡлаштырып, тәүҙә амебаларҙы донъяға килтергән, һуңғараҡ – балыҡтарҙы, ҡоштарҙы. Һуңғы осор маймылдарҙы хасил иткән, иң аҙаҡтан кешеләрҙе яратҡан. Һис тә бер йән эйәһе икенсеһенә әүерелмәгән.

Иң үкенеслеһе: Дарвин теорияһы “донъяны Аллаһы Тәғәлә яратмаған, ул үҙенән-үҙе барлыҡҡа килгән” ти. Был фекер кешелекте имандан айырҙы, шулай итеп, уның рухын һындырҙы, этикаһын түбән тәгәрәтте. Һөҙөмтәлә әҙәм балаларының күпләп Аллаға ышаныуҙан баш тартыуы башланды, атеистик хәрәкәттәрҙе барлыҡҡа килтерҙе. Был, үҙ нәүбәтендә, XIX быуат аҙағында һәм XX быуатта төрлө социаль катастрофалар тыуҙырҙы – революциялар, донъя һуғыштары,

террористик акттар ғәҙәти күренешкә әүерелде. Сөнки быҒаса, донъяны Аллаһы Тәғәлә яратҡан һәм беҙ уның изге ҡағиҙәләре буйынса йәшәйбеҙ, уға буйһонабыҙ, тигән кешеләр, Дарвин теорияһы барлыҡҡа килгәндән һуң, бар йән эйәһе бер ниндәй ҡағиҙәгә буйһонорға тейеш түгел, ул бит тәбиғәт тарафынан осраҡлы рәүештә яратылған, тимәк, ни теләһәң шуны эшләргә ярай, тип төрлө яуызлыҡтарға юл бирә башланы. Тәбиғәт ҡануны, хайуандар ҡануны буйынса йәшәү, йәғни кем көслө – шул донъяға хужа, тиеүе талаш-үлтереште, ҡан ҡойошто ғәҙәти ваҡиғаға әйләндерҙе. Шулай итеп, кешелек упҡын ситенә килеп баҫты.

Нимә эшләргә һуң бөгөн Дарвин теорияһы менән? Бөйөк ғалимдың “йән эйәләре донъяға эҙмә-эҙлекле килгән“ тиеүен рәсми рәүештә дөрөҫ тип ҡабул итергә, әммә уларҙың һис тә бер-береһенән үҫеп сыҡмауын, быны фәҡәт Аллаһы Тәғәлә ижады икәнен танырға, бар халыҡтарға аңлатырға кәрәк. Шул осраҡта ғына бөтә кешелек йәнә рухилыҡҡа, сафлыҡҡа, изгелеккә, йәғни Аллаһы Тәғәләгә әйләнеп ҡайтыр.

## *Ғаилә*

Кешенең тормош маҡсаттарының иң мөһиме – ғаилә ҡороп, бала-саға үҫтереп бәхетле йәшәү. Быны өсөн ғаилә эсендәге мөнәсәбәттәрҙе, тәбиғәт биргән йүнәлештән сығып, дөрөҫ ойоштороу мотлаҡ.

Ҡатын-ҡыҙға Аллаһы Тәғәлә ғәжәйеп функция биргән: балаға уҙыу, уны туғыҙ ай эсендә ескәй күҙәнәктән кешегә әүерелдереп тыуҙырыу. Был – иҫ киткес, хайран ҡалырлыҡ мөғжизә. Тәбиғәт тарафынан әсәгә баланы имеҙеү, тәрбиәләү һәләте лә бирелгән. Ошоларҙан сығып, ҡатын-ҡыҙ, әгәр ғаиләне ҡуласа тип күҙ алдына килтерһәк, шул ҡуласаны, йәғни ғаиләне эс яҡтан һаҡларға бурыслы, икенсе төрлө әйткәндә, балалар табып, уларҙы ашатырға, тәрбиәләргә, ғаилә эштәренең еңелдәрен, ҡулынан килгәнен башҡарырға тейеш.

Ир затына Аллаһы Тәғәлә аҙыраҡ мөмкинселектәр биргән. Шуға күрә ул ғаиләлә ауырыраҡ, тупаҫыраҡ эштәр башҡарырға бурыслы, йәғни ғаиләһен, теге ҡуласаны, тыш яҡтан һаҡларға тейеш. Быға йәшәргә урын, ризыҡ, кейем табыу, тышҡы ҡыйынлыҡтарҙан һаҡлау инә. Ир-ат бала таба алмай, уларға ваҡ эштәрҙе еренә еткереп эшләү һәләте лә бирелмәгән. Шуға уларға тәбиғәт биргән йүнәлештә хеҙмәт итеү сауаплы. Ҡатын-ҡыҙға ла, балаларын онотоп йәки кешегә тәрбиәләргә биреп, күп аҡса табыу, карьера яһау менән мауығырға ярамай. Был уларҙы бәхетһеҙ генә итә. Әйткәндәй, ҙур карьера яһаған ҡатын-ҡыҙ йыш ҡына, ышаныслы тормош иптәше булһа, уға таянып, бала ҡарап ҡына йәшәргә хыялланыуы хаҡында әйтә.

Шулай итеп, ир һәм ҡатын Аллаһы Тәғәлә тарафынан төрлө итеп яратылған, уларҙың тормошта бурысы ныҡ айырыла, әммә улар үҙҙәренә тәғәйенләнгән функцияны теүәл үтәп, бер-береһен ҡабатламайынса, байытып ҡына камиллыҡҡа өлгәшә.

Ҡыҙғаныска ҡаршы, ҡатын-ҡыҙ менән ир-ат араһында, XX быуатта тыуған “тигеҙ хоҡуҡлылыҡ” тигән уйҙырма арҡаһында, әсә кеше менән ата кешенең функциялары буталды. Был ғаилә институтын ҡаҡшатты, айырылыуҙарҙы, етем һәм ҡарауһыҙ балаларҙы күбәйтте.

Донъяға бөгөнгө ҡараш нисек кенә буталһа ла, тормош ғаилә алдына ниндәй генә ауырлыҡтар ҡуйһа ла, тормош ҡыйынлыҡтарын еңеп, үҙ ғаиләһендә ир ҙә, ҡатын да Аллаһы Тәғәлә тарафынан тәғәйенләнгән бурыстарын еренә еткереп үтәргә тейеш. Шул саҡта ғына улар бәхетле. Шул саҡта ғына дәүләт уңа.

## *Дөрөҫ ғаилә*

Ир менән ҡатын бер-береһенән ныҡ айырыла. Уларҙың маҡсаттары төрлө, организмдары төрлө, шуға улар – ике төрлө йән эйәләре. Быны һәр саҡ хәтерҙә тоторға кәрәк.

Ир-ат менән ҡатын-ҡыҙ тигеҙ, тигән фекер төптө хата ул. Әммә беҙҙә күптәнән бирле ошо уйҙырма йәшәй. Тигеҙлек теорияһына ышанып, ҡатын-ҡыҙ Аллаһы Тәғәлә биргән үҙ бурысын онота, ирҙәрсә ҡыланырға тотона. Ирҙәр ҙә, Хоҙай ҡушҡанды онотоп, үҙенә төбәлгән функцияларҙы эшләүҙән баш тарта.

Ир менән ҡатын тәбиғәтенә бындай хата ҡараш йәмғиәттә, тәбиғәттә дисгармония тыуҙыра. Ҡатындар бала табыуҙан баш тарта йәки бер-икене генә тыуҙыра, ирҙәр өйләнергә теләмәй, өйләнгән хәлдә лә ғаиләһенә ризыҡ табырға, йәшәргә урын әҙерләргә булдыра алмай. Был балаларҙың аҙ тыуыуына килтерә, тыуғандары ла күп саҡта йә атаһыҙ, йә әсәһеҙ тәрбиәләнә, күбеһе үкһеҙ етем ҡалып, балалар йортонда, хатта урамда үҫә. Яңғыҙаҡ ирҙәр һәм ҡатындар күбәйә, дөрөҫ ҡоролмаған ғаиләләр күпләп барлыҡҡа килә. “Дөрөҫ ғаилә ниндәй булырға тейеш?” тигән һорауға яуап бирерҙән алда шуны әйтәйек.

Үрҙә телгә алынған дисгармонияны бөтөрөү эшенә, беренсенән, йәмғиәттең үҙенә тотоноу зарур. Бының өсөн, беренсе сиратта, дәүләт йәш ғаиләләргә ярҙам итеүҙе төп маҡсаты итеп алырға бурыслы. Йәғни йәш ғаиләләргә күп итеп ятаҡтар һәм бәләкәй метражлы фатирҙар төҙөргә кәрәк. Ул саҡта йәшәр мөйөшө булған йәш егет менән ҡыҙ өйләнешеүҙән ҡасмаҫ. Бөгөнгө көндә улар күп осраҡта ана шул фатирһыҙлыҡ арҡаһында өйләнешә алмай, балаларын етем итә йәки балалар тыуҙырыу йортонда баш тарта. Аҙаҡ хөкүмәт етем балаларҙы тәрбиәләүгә аҡса түгә, ә шул балаларҙың ата-әсәһенә ятаҡ төҙөп биреү, өйләнешергә мөмкинселек тыуҙырыу күпкә арзаныраҡҡа төшөр ине.

Икенсенән, беҙҙең йәмғиәттә ғаилә институтының абруйы бик түбән. Уны, һис шикһеҙ, үҫтерергә кәрәк. Кеше эштә лә, йәмәғәт бурыстарын башҡарғанда ла ғаиләләге тулы бәхетте тоя алмаясаҡ. Ошо фекерҙе мәктәп йылдарынан уҡ балаларға төшөндөрөү, аңдарына һеңдереү мотлаҡ.

Ғаилә дөрөҫ төҙөлһөн һәм үҫешһен өсөн уның бар ағзалары ла Аллаһы Тәғәлә тарафынан бирелгән бурыстарын еренә еткереп башҡарырға тейеш. Йәғни ҡатын кеше ғаиләһен эстән ҡурсалай: бала таба, үҫтерә, тәрбиәләй, ә ир-ат тыштан һаҡлай: ризыҡ таба, йәшәргә урын әҙерләй һ.б.

Әгәр ҙә ошо принцип һаҡланһа һәм уларға тәүге ҡыйынлыҡтарҙы еңергә дәүләт ярҙам итһә, ғаиләнең абруйы күтәреләсәк, тимәк, етемдәр кәмейәсәк, бәхетлеләр күбәйәсәк.

Хоҙай алдындағы төп бурыстарын үтәгән ҡатын менән ир генә тормошта ҡәнәғәтлек һәм күңел тыныслығы таба, йәғни дөрөҫ ғаилә ҡора, ысын мәғәнәһендә бәхетле була.

## *Дан*

Йәш саҡта кешенең һиҙеү ағзалары көслө була, ул әҙәм балаһының аңы менән тулыһынса етәкселек итә. Ана шуға ла күҙ күргән, ҡолаҡ ишеткән нәмә, йәғни матди донъя йәш кеше өсөн йәшәү мәғәнәһенә әүерелә, ә рух өсөн аҙыҡ әлегә артҡы планда ҡала. Ә күҙ менән ҡолаҡты ҡыуандырған нәмәнең иң тәүгеһе – дан. Ошо сәбәпле, йәш саҡта һәр кем данға ынтыла ла инде. Ысынлап та, дан булһа, йәш егет менән йәш ҡыҙ тиңдәштәренең һоҡланыуын йәки көнләшеүен күрә, йәғни үҙен еңеүсе итеп тоя. Ә был хис уның күҙен һәм ҡолағын ләззәтләй. Әгәр йәш кеше һәләте, оҫталығы, белеме менән дан яулай алмаһа, ул ҡиәфәте,

кейеме йәки сәйер тәртибе менән башҡаларҙың иғтибарын үҙенә йәлеп итергә, тимәк, бәләкәй генә булһа ла дан яуларға тырыша.

Шуныһы ҡыҙыҡ: һәр кемгә ниндәйҙер кимәлдә дан тойоу, иғтибар үҙәгендә булыу ихтыяжы һалынған. Әгәр кеше йәш сағында кәрәкле миҡдарҙа дан татымаһа, олоғайғас шул теләген ҡәнәғәтләндерергә маташа, башҡаларҙың уны маҡтауын теләй. Шуға ла юбилейҙар үткәрә башлай, табын түренә ултырып үҙен маҡтата, шулай итеп йәшерәк сағында алып еткермәгән ихтыяжын ҡәнәғәтләндерә. Ә бына данды ваҡытында бер аҙ татыған кешелә бындай теләк көслө булмай.

Эйе, әҙәм балаһы урта йәштәрҙә дандың кешегә маһайыусанлығынды ҡәнәғәтләндереүҙән башҡа бөтөнләй кәрәкмәгәнлеген аңлай. Дөрөҫө, “дан” тип көсөңдө, ваҡытыңды сарыф итеүҙең буш нәмә икәнлегенә төшөнә.

Шуныһы ҡыҙыҡ: дан өсөн бар көсөн һалған әҙәм, ғәҙәттә, теләгенә ирешә, әммә ошо арҡала тормошоноң башҡа яғы зыян күрә, йәғни бындай кеше, нигеҙҙә, ғаилә бәхетенән мәхрүм була. Сөнки “дан” тип сапҡан әҙәмдең ғаиләһенә, балаларына иғтибар бүлергә ваҡыты ла, хәле лә ҡалмай. Ана шуға ла һәр кем һайларға тейеш: ғаилә бәхетеме, әллә данмы?

Әммә шуны аңларға кәрәк: дан – ул кешенең үҙе, дөрөҫө, уның маһайыусанлығы уйлап сығарған ялтыр уйынсыҡ ҡына, ә һәйбәт ғаилә ҡороп, балалар үҫтереү – Аллаһы Тәғәлә тарафынан әҙәм затына бирелгән оло бүләк, изге маҡсат һәм тормош мәғәнәһе.

## *Дөрөҫ ял итеү*

Телевидениеның “Йәйге ял ойоштороу” тигән тапшырыуында ҡатнашырға тура килгәйне. Туристик бюро етәксеһе диңгеҙ буйына ял итергә өгөтләй башлағас, ауылдан бер ҡатын шылтыратып: “Бик барып ял итер инек тә, өс һыйырыбыҙҙы, һарыҡ-кәзәләребеҙҙе, илле сутый ерҙәге йәшелсәне нисек ташлап китәһең? Бесән дә әҙерләргә кәрәк. Ауыл кешеһенә ял юҡ инде ул”, – тигәйне. Бюро етәксеһе ни тиергә белмәй аптырап ҡалғас, мин яуап бирергә булдым.

Теге ҡатындың үҙенә лә, иренә лә илле йәш икән, балалары күптән үҙ аллы булып, ҡалала йәшәп ята. “Икәү генә ҡалғас, ниңә ул тиклем донъя көтәһегеҙ?” – тигән һорауыма: “Балаларға ярҙам итәбеҙ”, – тип яуапланы теге ҡатын. Ә балалары күптән үҙ аллы.

Ҡатындың һүҙҙәрендә ял итеү төшөнсәһен аңламау ята. Әгәр ошо ҡатын путевка алып, бер айға диңгеҙ буйына китһә лә, бындай ҡарашы менән ялы ял булмаясаҡ. Сөнки ул мал-тыуарын уйлап, ҡош-ҡортон ҡайғыртып көнө-төнө өҙгөләнәсәк һәм ялының аҙағын да көтмәй ҡайтып китәсәк.

Әлбиттә, туристик бюролар кешеләрҙең башын ҡаңғыртып, һәр кемде йәшәгән төйәгенән айырып, сит ерҙәргә ял итергә ебәрергә өлгәшә һәм ни тиклем күберәк әҙәм балаһын алыҫ тарафтарға юлландыра алһа, шул тиклем байый. Кешеләргә ошо алдаҡсы өгөт-нәсихәткә бирелмәҫкә, ә “ял итеү” төшөнсәһен дөрөҫ аңларға өйрәнергә кәрәк.

Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ял итеү – аяҡты күтәреп диванда телевизор ҡарау йәки диңгеҙ буйында ҡорһағыңды ҡыҙҙырыу, тип аңлай күптәр. Кешенең тәне тик ятыу йәки тик тороу өсөн яратылмаған. Шуға ла ул һәр саҡ хәрәкәт итә һәм ошо ваҡытта ғына рәхәтлек, ләззәт кисерә. Ә һәр хәрәкәт – үҙенә күрә хеҙмәт ул. Эштең шундай сифаты бар: билдәле бер күләмдә ул ҡыуаныс килтерә, ял кеүек ҡабул ителә, шул күләмдән артып китһә, ялҡыта башлай, хәлдән тайҙыра. Шуға ла һәр эште яратып, шатланып, күңелеңә рәхәтлек, тәнеңә ләззәт биргән күләмдә генә башҡарырға кәрәк. Әгәр һин бәрәңге ултырта икәнһең, ҡыуанып, йырлап йөрөрлөк хәлдә генә тырыш. Шул саҡта һиңә был хеҙмәт – ял. Йырлағың

килмәй икән – шунда уҡ был эште ташла. Сөнки эштең артығы һиңә кәрәкмәй, ул һиңә ял түгел, ә ыҙаға, ауыр йөккә әүерелә.

Өс һыйыр тотҡанда, илле сутый йәшелсә үҫтергәндә йырлағың килмәй икән – кәмет бөтәһен дә, шатланып ҡарарлыҡ кимәлгә тиклем төшөр. Өй-йорт эштәрен йырлап, шаярып-көлөп, ҡыуанып башҡара алһаң, ул һиңә үҙе ял итеүгә, ҡыуанысҡа, бәхеткә әүерелә. Ул саҡта инде һиңә күп аҡса түгеп Ҡара диңгеҙ буйына барыу бөтөнләй кәрәкмәй, санаторий эргәндә булып сыға.

Әйткәндәй, был һүҙҙәр профессия, эш урыны һайлауға ла ҡағыла. Күңелең ятмаған эштән, коллективтан тиҙерәк ҡас, ул һиңә күңел тынысһыҙлығы, һөҙөмтәлә ауырыу килтерәсәк. Ә йөрәгең үҙ иткән, шатланып, йырлап эшләрҙәй һөнәрҙе, эш урынын һайлаһаң, ул һиңә ҡыуаныс килтерәсәк. Бындай саҡта хеҙмәт үҙе доғаға, намаҙға әүерелә, кешене ауырыуҙарҙан ҡотҡара, шатлыҡ һәм бәхет килтерә.

## *Күҙ*

Кешенең рухи кимәле күңеленең тыныслығы ниндәй хәлдә булыуынан һәм һиҙеү ағзаларын тыйыусы көсөнән тора.

Кешенең иң көслө һиҙеү ағзаһы – күҙ. Йыш ҡына күҙ кешенең булмышы, аңы менән етәкселек итә башлай, һәм әҙәм балаһы ни тиклем рухи яҡтан түбәнерәк кимәлдә була, күҙ шул тиклем уға хужа булып ала, йәғни төрлө нәмә менән ҡыҙыҡтыра, нисек тә шул әйберҙе ҡулға төшөрөргә өндәргә тотона.

Күҙҙең көсө бигерәк тә балаларҙа баҙыҡ күренә, күҙ уларҙың аңын тулыһынса тиерлек томалай.

Беҙ йыш ҡына шундай күренешкә тарығаныбыҙ бар: бала, магазинда уйынсыҡ машина күрһә, бар донъяһын онотоп, ата-әсәһенән уны алыуҙы  талап итә башлай. Өлкән кеше уйынсыҡтың буш, алдаҡлыс икәнлеген белә, балаһына шуны аңлатырға маташа, әммә теге тыңларға ла теләмәй, илай, үҙенекен итә. Оло кеше баланың шундай бер ҡатлы булыуына көлөп ҡарай.

Әммә өлкән кеше үҙе лә йыш ҡына донъялағы күп нәмәнең алдаҡлыс, буш икәнлеген аңламай, уны ҡулына төшөрөргә тырыша, быға бар көсөн, тормошон һала.

Мәҫәлән, машинаны ғына алайыҡ. Һәр кемгә мәғлүм: машинаның төп маҡсаты – бер урындан икенсе урынға күсеү әмәле. Шулай булғас, ул ни тиклем арзан булһа, шуныһы һәйбәтерәк бит. Әммә күп кешеләр, бер-береһенән уҙҙырырға маташып, машинаның  һаман ҡыйбатырағын, дәрәжәлерәген алырға тырыша, шуға бар көсөн, яҙмышын бирә, шул сәбәпле хәүефләнә, ҡайғыра. Юғары рухи кимәлдәгеләр әҙәм балаларының ошондай бер ҡатлылығына көлөп ҡарай.

Сөнки матди донъяға артыҡ йәбешеү кешелә борсолоу, ҡурҡыу тыуҙыра, ә был ауырыуға илтә. Матди донъя арҡаһында борсолоу өсөн бер сәбәп тә юҡ бит. Кеше булғанына ризалыҡ белдерергә тейеш. Әммә күп кеше быны аңламай. Уны аңлау өсөн һиҙеү ағзаларын сикләргә кәрәк. Тик һиҙеү ағзаларын көсләп тыйыу ҙа дөрөҫ түгел. Бының депрессияға, ауырыуға килтереүе бар. Фәҡәт күңелеңде тынысландырырға өйрәнеү кәрәк. Быны инанысыңды үҙгәртеүҙән башлау мотлаҡ.

## *Инаныс*

Инаныс – ул кешенең тормошҡа ҡарашы, йәшәү рәүеше хаҡында күңел төбөндәге фекере.

Кешенең инанысы нисек, ул шулай йәшәй.

Әгәр һинең алдыңда берәй ауыр проблема торһа, уны хәл итер өсөн иң алда инанысты үҙгәртергә кәрәк. Эйе, ниҙер эшләргә йәки тәртибегеҙҙе, ҡылығығыҙҙы үҙгәртергә түгел, ә инанысты үҙгәртеү мотлаҡ. Шул саҡ проблема

үҙенән-үҙе юҡҡа сыға. Инанысты үҙгәртһәгеҙ, тәртибегеҙ ҙә үҙгәрер. Иғтибар иткәнегеҙ барҙыр: башҡа кешенең тәртибен үҙгәртеү өсөн әллә нимәләр эшләргә мөмкин, әммә ул барыбер үҙгәрмәйәсәк. Сөнки кешенең ҡылығын үҙгәртеү өсөн иң алда унының инанысын үҙгәртеү кәрәк.

Инанысты ике юл менән үҙгәртеп була: йә булғанын киңәйтеү, йә уны тулыһынса яңынан төҙөү. Әммә тулыһынса киренән төҙөү уғата ауыр. Ә бына булғанын киңәйтеү, булғанына таянып уны яңы үргә күтәреү еңелерәк.

Үрҙә беҙ кеше күҙе хаҡында һүҙ алып барҙыҡ. Башҡаның әйберенә ҡыҙығыр, көнләшер, кемделер уҙҙырыр, тартып алырҙай нәмәне күреү өсөн бирелмәгән күҙ кешегә, ә Аллаһы Тәғәлә яратҡан донъя менән һоҡланыу, уны күреп шатланыу өсөн бирелгән. Ғөмүмән, донъя кешегә ҡыйынлыҡ килтереү өсөн түгел, ә ярҙам итеү өсөн яратылған.

Донъяла кеше өсөн бөтәһе лә бар. Унда ниҙер етешмәй, тиеүсенең күҙе яңылыш күрә, йәғни инанысы дөрөҫ түгел.

Донъяла Һиңә ҡамасаулаусы бер кем юҡ. Әгәр кемдер һиңә ҡаршы, ти икәнһең, һинең йәнә инанысың яңылыш, тимәк, уны үҙгәртергә кәрәк. Инанысыңды үҙгәртһәң, дошмандарың да юҡҡа сығыр.

## *Төп ҡағиҙә*

Яңы йыл төнөндә бер танышым беҙгә теләк әйтте: “Бәхетле булығыҙ – нимә теләйһегеҙ, шуға өлгәшегеҙ!” Ул беҙгә бәхет теләне кеүек. Әммә, төптән уйлаһаң, ул беҙгә, киреһенсә, бәхетһеҙ булыу ысулын күрһәтте. Сөнки кеше, үҙенә ниҙер етешмәй, бәхет өсөн ниҙер эшләргә кәрәк, тип уйлай икән – ул инде бәхетһеҙ.

Ә бәхетле булыу өсөн бер ни ҙә эшләргә кәрәкмәй. Фәҡәт үҙеңдең бәхетле икәнлегеңде аңлау ғына мотлаҡ. Йәғни ошо секундта уҡ бәхетле бул һәм бәхетле кешесә йәшәй башла.

Бәхет – нимәгә булһа ла өлгәшеү-өлгәшмәүҙә түгел. Кеше йәшәй икән – ул инде бәхетле. Тирә-яҡты күреү йә иһә ҡулыңа кәрәк ала алыу йәки ни ҙә булһа эшләп тороу – былар бөтәһе лә оло шатлыҡ. Эшләү процесы менән, йәшәү процесы менән ҡыуана белгән кеше һәр саҡ бәхетле, ә инде эшенең, йәшәүенең һөҙөмтәһе өсөн йәшәүсе кеше – бәхетһеҙ. Бәхеттең төп формулаһы ошо.

Әҙәпһеҙлеккә һанамағыҙ, әйткәндәремә иң баҙыҡ миҫал итеп енси мөнәсәбәт ваҡытындағы тойғоларҙы килтерер инем. Секс ваҡытында кеше үткәнде лә, киләсәкте лә уйламай, ниндәйҙер һөҙөмтәгә лә ынтылмай, фәҡәт ләззәтләнә, шуға ла йәшәүенең иң татлы мәлен кисерә, шуға ла ул ошо мәлдә бәхетле. Маҡсат өсөн – бала яһайым тип – секс менән шөғөлләнеүсе – бәхетһеҙ.

Ғәҙәти тормошта ла ана шулай: йәшәүҙең үҙе, һәр хәрәкәтебеҙ, һәр күргән нәмәбеҙ – үҙе оло ҡыуаныс. Ошоно төшөнгән әҙәм балаһына бәхет килә. Кеше бәхетлегә әйләнә. Сөнки ул тормоштоң иң төп ҡағиҙәһен аңлай: бәхетле булыу өсөн бер ни эшләргә кәрәкмәй, сөнки кеше һәр саҡ бәхетле.

## *Намаҙ*

Кеше йыш ҡына ни менән шөғөлләнергә белмәй аптырай. Бигерәк тә ҡала кешеһе. Эштән ҡайта, ә өйҙә эш юҡ. Аптырағас, ул гәзит уҡый, телевизор ҡарай, йә иһә кухняға инә лә, асыҡмаһа ла, сәй эсергә, ашарға тотона. Ул да булмаһа, таныштары менән йыйылышып юҡ-бар хаҡында һөйләшә, ғәйбәт һата, башҡаларҙы, хөкүмәтте, бар донъяны һүгә. Икенселәр, ни эшләргә белмәгәс, дуҫтарын саҡырып араҡы эсергә тотона, был процедураны “һөйләшеп ултырыу” тигән матур һүҙ менән атай.

Ошондай күренештәр мине уйға һалды.

Миңә элегерәк намаҙҙың тышҡы процедураһы оҡшап етмәй ине. Ниңә биш тапҡыр, мотлаҡ рәүештә уны уҡырға, мин бит доғаларҙы эстән генә көнө буйы уҡып йөрөй алам? Дөйөм алғанда, уҡылған доғаларымдың күләме биш намаҙҙан да артып китә лә баһа, тип уйлай инем. Етмәһә, ураған һайын тәһәрәт алыуҙар, әҙерләнеүҙәр, уңайлы урын эҙләүҙәр... Мәшәҡәте бик күп бит намаҙҙың...

Әммә хәҙер намаҙҙы ни өсөн биш тапҡыр уҡырға, уға яҡшылап әҙерләнергә кәрәклеген аңлағандай булдым.

Элек тә, хәҙер ҙә тәүлек эсендә кешенең буш ваҡыты килеп сыға. Шул осорҙа ул бик үк яҡшы булмаған эштәр менән шөғөлләнә – яман һүҙҙәр һөйләй, кире уйҙар уйлай. Ә негатив һүҙҙәр һәм уйҙар кешегә насар ваҡиғалар, ситуациялар тартып килтерә  һәм кеше бәхетһеҙгә әүерелә.

Ана шуға ла биш тапҡыр намаҙ уҡыу уйлап сығарылған да инде. Кешенең саҡ ҡына буш ваҡыты килеп сығып, ул насар һүҙҙәр һөйләй, кире уйҙар уйлай башлауы була, сираттағы намаҙ ваҡыты килеп тә етә. Уның өсөн ныҡлап әҙерләнергә, урынын табырға кәрәк. Был байтаҡ ваҡытты ала. Ә намаҙ изге, таҙа процесс булғас, был осорҙағы кешенең маҡсаты, тимәк, күңеле таҙара һәм изгегә әүерелә. Шулай итеп, кешегә насар һүҙ һөйләргә, насар уй уйларға ваҡыт аҙ ҡала, ә был уны ниндәйҙер кимәлдә кире ваҡиғаларҙан ҡотҡара, һаҡлай.

Бына шунда намаҙҙың тышҡы мәғәнәһе, маҡсаты. Ә уның эске маҡсаты, төп файҙаһы тураһында, шулай уҡ намаҙ ваҡытында кеше менән, уның тәне һәм күңеле менән ниҙәр булыуы, ни өсөн ауырыуҙарҙың юҡҡа сығыуы хаҡында киләһе мәҡәләлә һөйләрбеҙ.

## Намаҙ-2

Үрҙәге мәҡәләлә беҙ намаҙҙың тышҡы маҡсаты һәм уның кешегә ыңғай йоғонтоһо хаҡында һүҙ алып барғайныҡ. Был юлы намаҙҙың эске мәғәнәһе тураһында һөйләшмәксебеҙ.

Һәр кемгә мәғлүм: донъя күҙгә күренгән нәмәләрҙән генә тормай. Мәҫәлән, магнит, радио, гравитация һ.б. тулҡындарҙы беҙ күрмәйбеҙ, әммә уларҙың барлығын беләбеҙ, һиҙәбеҙ. Ғөмүмән, әҙәм балаһының күҙе ғаләмдәге процестарҙың бер процентын да күрмәй. Күҙ, төнгө юлсының ҡулындағы фонарь кеүек, юҡ-барға барып бәрелмәҫ, әләгеп йығылмаҫ өсөн генә бирелгән кешегә.

Күҙ матди донъяға ингән тулҡындарҙы ла күрмәгәс, йоҡа даирәне ҡайҙан тойомлаһын инде! Ә йоҡа ғаләм иҫ киткес ҙур һәм ул бар донъя менән, шул иҫәптән матди тәбиғәт менән, етәкселек итә.

Доға, намаҙ уҡығанда кеше, үҙе лә һиҙмәйенсә, белмәйенсә, ана шул йоҡа донъя менән бәйләнешкә инә.

Кешенең мейеһе өс хәлдә була. Уяу көйө, еңелсә йоҡолағы һәм тәрән йоҡолағы рәүешендә. Әммә, ғалимдар әйтеүенсә, дүртенсе осраҡ та бар икән – ул доға, намаҙ уҡыған мәлдә тыуа: кеше уяу, бөтәһен дә күрә, аңлай, ә мейеһе тулыһынса тиерлек эшләүҙән туҡтай. Ғәҙәттә, өс-дүрт айлыҡ балаларҙың мейеһе генә ошондай хәлдә була.

Ғалимдар раҫлауынса, мейенең ана шундай хәлгә инә алыуы арҡаһында доға уҡығандан һуң кешегә еңел булып ҡала, ҡаты ауырыуҙарҙың симптомдары юғала.

Мейенең яңы тыуған баланыҡы хәленә инеп алыуы уғата кәрәкле һәм файҙалы, тип раҫлай ғалимдар, ул бик күп ауырыуҙарҙан ҡотҡара. Юҡҡа ғына дини китаптарҙа “бала кеүек булығыҙ” тип әйтелмәй бит. Мейенең нейрондарҙан торғанын беләбеҙ. Төрлө насар тойғолар һәм уйҙар арҡаһында шул нейрондар араһында яңылыш, кире бәйләнештәр барлыҡҡа килә, ә был тәндә төрлө

ауырыуҙар тыуҙыра. Доға, намаҙ уҡығанда нейрондар араһындағы ана шул дөрөҫ булмаған бәйләнештәр юҡҡа сыға, был ауырыуҙарҙың төп сәбәбен үлтерә һәм кеше һауыға. Иң мөһиме, намаҙ уҡыусы яҙмышын Аллаһы Тәғәлә ҡулына тапшыра һәм ауырыуҙан ҡурҡмай башлай, ә был үҙе үк – һауығыуҙың тәүге аҙымы. Әйткәндәй, яман шеш менән ауырығандарға операция яһағандан һуң Аллаға ышанғандар, намаҙ уҡығандар күпкә оҙағыраҡ йәшәй, тип раҫлай ғалимдар. Америкала доға ярҙамында – шизофренияһан, Кореяла – ҡатын-ҡыҙҙы бала таба алмауҙан, Германияла йөрәк ауырыуҙарынан дауалайҙар, һәм был эксперименттар бөтә ерҙә ыңғай һөҙөмтә бирә.

Иң мөһиме, доға һәм намаҙҙы бөтә күңеленде һалып, ныҡ ышанып, ысын йөрәктән уҡырға ғына кәрәк.

## Тынғыһыҙлыҡ

Минең бер эшһөйәр туғаным бар. Бер ҡасан да тик ултыра белмәй. Тынғыһыҙ, һәр саҡ ниҙер эшләй. Арып китһә, туҡтап тәмәке тартып ала ла йәнә шөғөлләнергә тотона. Иртәнән кискә тиклем нимә менәндер мәшғүл, гәзит-китап уҡырға яратмай, ара-тирә телевизор ҡарап ала. Ҡайһы саҡта арып китһә, араҡы эсә башлай. Бындай мәлдә ул инде ҡулына бер ҡорал алмай. Эскелек уға туҡтарға, сәбәләнмәҫкә, ял итергә мөмкинселек бирә.

Икенсе төрлө кешеләр бар. Улар хеҙмәт менән ул тиклем мауыҡмай, хатта араларында ныҡ ялҡауҙар була. Әммә бындай әҙәм балалары ла тик ултыра белмәй. Улар ҙа сәбәләнә, туҡтауһыҙ нимә менәндер шөғөлләнә: телевизор ҡарай, гәзит уҡый, кроссворд сисә, компьютерҙа уйнай, кем менәндер һөйләшә, һис юғында борсолоп уйлана.

Ғөмүмән, тормошта тик ултыра белеүселәр бик һирәк. Иң бөйөк руханиҙар ғына хәрәкәтһеҙ ҡала ала. Ябай кеше быны булдыра алмай. Дөрөҫө – ул шөғөлһөҙ ҡалырға теләмәй. Ул – тынғыһыҙ.

Бер ни хаҡында уйламайынса тик ултырыу фәҡәт юғары аҡыл эйәләренә генә хас. Бындай шәхестәр тынып ҡалған сағында үҙенең күңеле, йәне менән аралаша, шул саҡта йәшәүҙең, тормоштоң мәғәнәһен аңлай. Әлбиттә, медитация, доға уҡыу – был маҡсатҡа өлгәшеүҙең иң дөрөҫ юлы. Әммә, уларҙы инҡар иткән хәлдә лә, һәр кем көнөнә 15–20 минут булһа ла тып-тын бүлмәлә, сит тауыштар булмаған урында, күҙҙәрен йомоп, бар мускулдарын йомшартып, бер ни хаҡында уйламай, борсолмай ултырып алырға тейеш. Ошо күнегеү менән даими рәүештә шөғөлләнеү кешегә йәшәүҙең мәғәнәһен, тормоштоң маҡсатын аңларға ярҙам итә, күп ауырыуҙарҙан ҡотҡара.

Үҙҙәре туҡтай белмәгәндәргә Аллаһы Тәғәлә ауырыу ебәрә, йәғни тегеләрҙе урынынан ҡыбырлай алмаҫлыҡ итеп түшәккә һалып ҡуя, шулай итеп, ниһайәт, сәбәләнмәҫкә, ә тынысланып, эшһеҙ, шөғөлһөҙ ҡалырға һәм йәне менән аралашырға мөмкинселек бирә.

## Аҡһаҡал халыҡ

Студент саҡта миңә көньяҡтағы бер республикала шахтала практика үтергә тура килде. Шунда ул халыҡ егеттәренең ҡыҙыулығына, уҫаллығына, батырлығына, һәр саҡ үҙ һүҙен һүҙ итергә тырышҡанлығына, бәхәскә керһәң, төкрөктәрен сәсеп үҙенекен иҫбат итә алыуына, сәменә тейһәң, һуғышырға әҙер тороуына, – бер һүҙ менән әйткәндә, үҙ дәрәжәләрен һаҡлай белеүенә һоҡланғайным. Һәм көнләшкәйнем. Ни өсөн беҙ, башҡорттар, шулай түгел икән, тип әсенгәйнем. Ниңә беҙ үтә тынысбыҙ, әсе һүҙ әйтһәләр, түҙәбеҙ, ҡаршы бер ни әйтмәйбеҙ? Шулай итеп үҙ баһабыҙҙы төшөрәбеҙ бит, тип ҡайғырғайным.

Ошо йәһәттән йәш саҡта мин үҙгәреп тә маташтым, үҙемә ҡарата насарыраҡ,

уҫалыраҡ һүҙ ишетһәм, көньяҡ егеттәре кеүек, ҡыҙып киткеләнем, ҡаршы һүҙ әйтеүсене урынына ултыртҡыланым. Ләкин ҡыҙыулыҡ Аллаһы Тәғәлә тарафынан бирелмәгәс, уҫал булып маташыу тиҙ ялҡыта йәки бөтөнләй онотола торғайны, үҙ тәбиғәтем һаман да тыныс булырға, юҡ-барға ҡыҙып бармаҫҡа өндәй ине. Был йәнә уйға һала: “Ниңә беҙ, башҡорттар, шулай икән?”

Әммә... Иғтибар иткәнегеҙ барҙыр: йәш саҡта кеше ҡыҙыу була, юҡ-бар арҡаһында бәхәскә инеп бара, хатта һуғышып та китә. Урта йәштә кеше тыныслана төшә, әммә үтә әүҙемгә әйләнә, бик күпкә дәғүә итә башлай һәм маҡсатына өлгәшеү өсөн, үҙ һүҙен һүҙ итеү өсөн бик тырыша, хәйләшә, хатта юха була, ара-тирә йоҙроҡ күтәреп тә ала.  Олоғайғас ҡына кеше башҡаларҙың фекере лә йәшәргә хаҡлы икәнлеген, үҙенең тормошҡа ҡарашы бүтәндәрҙекенән һис тә өҫтөн түгеллеген аңлай; шуға һәр әйтелгән һүҙгә тыныс ҡарай, дөрөҫө – бөтөнләй бәхәсләшмәй; һәр фекерҙе һәм тормошто нисек бар шулай ҡабул итә, йәғни аҡһаҡалға әүерелә.

Баҡһаң, халыҡтар ҙа кеше кеүек икән. Халыҡтарҙың да йәш сағы, урта йәше, олоғайыуы була икән. Йәш халыҡтар, йәш егеттәр кеүек, ҡыҙыу, уҫал, үҙ позицияһын иҫбат итеү өсөн һуғышырға әҙер тора. Урта йәштәге халыҡтар, ҡырҡты үткән ир-ат һымаҡ, үтә әүҙем, үтә хәйләкәр, бер нәмәгә ҡарамай, үҙ маҡсатына өлгәшергә тырыша. Ә инде оло йәштәге халыҡ, ил ағаларына оҡшап, тыныс, юҡ-барға иғтибар ҙа итмәй, ҡыҙып та бармай, донъяны нисек бар шулай ярата, йәғни аҡһаҡалға әүерелә.

Шулай итеп, мин, үҙ халҡымдың холҡона тағы бер ҡарағас, уның аҡһаҡал йәшенә еткәнлеген аңланым һәм тынысландым: бына ни өсөн башҡорттар донъяға тыныс ҡарай, юҡ-бар өсөн бошоноп бармай икән. Сөнки халҡыбыҙ йәшлек осорон, ғүмерҙең урта мәлен үтеп, оло йәшкә еткән, йәғни ысын аҡһаҡалға әүерелгән.

## *Өй эштәре*

Яңыраҡ ҡатыным ике ҡыҙым, кесе улым менән ауылға китте. Мин яҙышыу ниәте менән өйҙә ҡалдым. Әммә, институтта имтихан тапшырып йөрөгән һәм заводта эшләгән ике улымдың янымда булыуы арҡаһында, көнөнә өс тапҡыр ашарға әҙерләп йөрөп, мин бер юл да яҙа алманым. Уйлап ҡараһаң, өй эштәре күпме ваҡытты, энергияны ала! Юҡҡамы ни өй эшенә ваҡыт таба алмағандар хеҙмәтсе тота. Ә хеҙмәтсеһеҙ ғаиләләр ни эшләй? Бар өй эшен, ғәҙәттә, ҡатын-ҡыҙ башҡара, йәғни хеҙмәтсе ролен үтәй. Улар иртәнән кискә тиклем бала ҡарау, ашарға бешереү, кер йыуыу, өй йыйыштырыуҙан бушай алмай. Һәм бөтмәҫ-төкәнмәҫ ошо өй эштәрен башҡарыусы ҡатын-ҡыҙҙы “хужабикә” тибеҙ, “бер ҡайҙа ла эшләмәй” тибеҙ.

Миңә ҡалһа, хужабикәнең статусына ҡарашты үҙгәртергә кәрәк. Ул башҡарған эштәр һис тә кешенең ниндәйҙер ойошмала хеҙмәт итеүенән айырылмай, хатта ул күпкә ауырыраҡ. Юҡҡамы ни Американың бер нисә штатында шундай закон ҡабул иткәндәр: әгәр ҡатын-ҡыҙ өй хужабикәһе икән, ире уға айына егерме мең доллар тирәһе эш хаҡы түләргә һәм, киләсәктә пенсия алһын өсөн, пенсия фондына аҡса күсерергә тейеш икән. Ә бит беҙҙең күп ҡатын-ҡыҙ, өй эштәрен тулыһынса башҡарыу менән бергә, ниндәйҙер ойошмала, завод-фабрикала ла эшләй. Был инде ҡатын-ҡыҙ иңенә икеләтә йөк ята тигән һүҙ.

Минеңсә, беҙҙә лә өй хужабикәһенең эшен кенәгәгә теркәп, стажын һанап барып, пенсия фондына аҡса күсереп, эш хаҡы түләп, уның абруйын күтәрергә кәрәк. Ә инде ҡайҙалыр эшләп, өй эштәрен дә алып барыусы ҡатын-ҡыҙға ике ерҙә эшләгән кеүек эш хаҡын арттырып түләү сараһын уйлап табыу мотлаҡ. Ул

саҡта хужабикә ҡатындар эшләмәй ятҡан кешеләй түбәнһетелмәç, законлы рәүештә эш хаҡы алыр һәм үҙҙәрен башҡалар кеүек тулы ҡанлы йәмғиәт төҙөүсе итеп тойор ине.

## Маңлайға яҙылғаны

Яңыраҡ ҡырмыçҡалар хаҡында мәҡәлә уҡырға тура килде. Баҡһаң, уларҙың йәмғиәтендә һәр ҡырмыçҡаның үҙ бурысы, үҙ һөнәре бар икән. Ҡайһыһылыр ғүмере буйы һаҡсы була, икенселәре йоморткаларҙы һаҡлай, уларҙан кескәй ҡырмыçҡаларҙың сығыуына ярҙам итә, аҙыҡ ашата, ҡарай, дүртенселәре төҙөлөш менән булаша һ.б. Иң ғәжәбе – улар тыуған саҡта уҡ үҙҙәренең ниндәй эш менән шөғөлләнерен яҡшы белә.

Белеүемсә, бал ҡорттары тормошона ла ошондай күренеш хас.

Ниңә был хаҡта һөйләйем әле? Сөнки ҡырмыçҡалар тураһында уҡығанда мин кешеләр тураһында уйландым. Беҙ ҙә, ҡырмыçҡалар кеүек, ниндәйҙер бер һөнәр өсөн тыумайбыҙмы икән? Шулай булмаһа, ни өсөн кемдер анһат ҡына байып китә? Башҡа берәү, күпме генә тырышһа ла, аҡсаға мантый алмай? Бәғзеләр иç киткес моңло тауыш менән йырлай, икенселәр бер көйҙө лә еренә еткереп башҡара алмай? Ни өсөн? Кешенең яҙмышы маңлайына яҙылған, тиеүҙәре ысынмы икән әллә?

Америкала шундай эксперимент үткәргәндәр. Төрлө енәйәт арҡаһында төрмәгә эләккән егерме миллионерҙың бар аҡсаһына конфискация яһап, шул миллиондарҙы бер тин аҡсаһы булмаған ярлыларға өләшеп биргәндәр. Биш йыл үткән. Шул арала миллиондарға хужа булған ярлылар, бар аҡсаларын сарыф итеп, йәнә бер тинһеҙ тороп ҡалған. Ә төрмәнән сыҡҡан “бай”ҙар, ҡулдарында бер доллар ҙа булмаһа ла, ике-өс йылдан йәнә миллионерға әүерелгән. Был – тәүгеләрҙең ярлы булыу өсөн, икенселәрҙең байыу өсөн тыуыуы хаҡында һөйләй түгелме? Дөрөçө, ярлылыҡтан сыға алмағандары ябайыраҡ эштә эшләп, ябайыраҡ йәшәү өсөн донъяға килгәндер, ә байый белеүселәргә Хоҙай Тәғәлә тарафынан олораҡ бурыстар йөкмәтелгәндер. Ә бит байый белмәгән кешегә миллион һум тотторо оло трагедияға килтереүе бар. Сөнки ул шул кимәлдә ни эшләргә тейешлеген белмәй, аҡсаны нисек тотоноуҙы, файҙаланыуҙы аңламай. Ә был ауыр кисерештәргә, тимәк, ауырыуҙарға дусар итә. Ябайыраҡ һөнәрҙе яратҡан кешегә лә ҡапыл юғары вазифаға барып эләгеү – трагедия. Ундай урында әҙәм үҙен дә бөтөрәсәк, башҡаларҙы ла ыҙалатасаҡ.

Хоҙай Тәғәлә тарафынан һиңә бирелгән, һинең маңлайыңа яҙылған урыныңды, һөнәреңде табыу, бурысыңды тойоу, кимәлеңде белеү – донъяла иң оло бәхет. Уны аңлау өсөн үҙ тойғоларыңа иғтибар итергә кәрәк. Әгәр ҙә йыш борсолаһығыҙ икән, һеҙ үҙ кимәлегеҙгә ярашлы ерҙә түгел. (Гел борсолоу, хәүеф тыуҙырған эштән, вазифанан, коллективтан, хатта ғаиләнән кеше мөмкин тиклем тиҙерәк ҡотолорға тейеш.) Ә инде йыш ҡыуанаһығыҙ икән, тимәк, һеҙ үҙ урынығыҙҙы тапҡанһығыҙ. Шул ғына кешегә күңел тыныслығы килтерә, тормоштоң бар матурлығын тойоп, һау-сәләмәт һәм бәхетле йәшәргә мөмкинселек бирә.

## Дөрөç белем

Кеше кәрәгенән артыҡ ашай, бер юлы ике ултырғыста ултыра, ике карауатта ята, ике машинала йөрөй алмай. Кешегә ошо мәлдә ҡайҙа тора, нимәһе бар – шул етә. Уға артығы кәрәкмәй.

Эйе, кешегә бик аҙ кәрәк. Ләкин быны аңлауы ҡыйын. Белемле кеше – рухи, дини яҡтан белемле кеше генә үҙенә бик аҙ кәрәклеген аңлай. Ә кем һуң белемле кеше? Белемле кеше – ул иң алда динде аңлаусы, эзотериканы белеүсе шәхес.

Кемдеңдер фән докторы, академик булыуы ихтимал, әммә динде, эзотериканы аңламауы мөмкин. Ул саҡта был әҙәм – наҙан. Кемдеңдер хәреф танымауы ихтимал, әммә динде, эзотериканы аңлауы мөмкин. Был кеше инде – юғары белемле. Рухи, дини юҫыҡта белемеңдең артыуы үҙенән-үҙе һиңә тормошта күпмегә өмөтләнеүҙе аңлата, һинең теләктәреңде сикләй, талаптарыңды кәметә. Юҡ, яңылыш әйттем – сикләмәй, кәметмәй, ә дөрөҫ йәшәргә, йәғни кәрәклеген генә алырға өйрәтә, булғаны менән риза булыу юлынан илтә.

Белемһеҙ кеше бер ҡасан да үҙенә күпме кәрәклеген аңламай, шуға күрә һәр саҡ күберәк эләктерергә, артығын йыйырға маташа. Ә артыҡ нәмә кешене лә, тәбиғәтте лә боҙа, харап итә.

Бер үҫемлек тә ямғырһыҙ үҫә алмай. Әммә үтә ямғырлы йылды игене лә, бәрәңгеһе лә серей башлай. Йәки бүреләрҙе алайыҡ. Улар, урмандағы емтектәрҙе ашап, тәбиғәт санитары ролен үтәй. Ләкин кәрәгенән артыҡ үрсеп китһәләр, емтектәр етмәү сәбәпле, бүреләр ауылдарға килә башлай, ҡош-ҡортҡа, хатта кешегә һөжүм итәләр. Артыҡ нәмә һәр саҡ зыян.

Бөтә ризыҡ – дауа, бар ризыҡ – ағыу, тиҙәр. Барыһы ла үлсәмдән тора. Кәрәклесә генә ашаһаң, бөтә ризыҡ – дауа, артығын ашаһаң, бар ризыҡ – ағыу. Донъялағы бар әйбер шулай. Еткәнен генә алһаң – ул һиңә файҙа, артығын алһаң – ул һиңә зыян. Беләһегеҙме икән, байҙар араһында наркомандар, эскеселәр, үҙ-үҙен үлтереүселәр ярлыларға ҡарағанда сағыштырмаса күберәк. Был – хаттин ашыуҙан.

Кеше һәр саҡ күберәкте теләй, тиҙәр. Юҡ, фәҡәт белемһеҙҙәр, наҙандар күберәкте көҫәй, булғаны менән ҡәнәғәт түгел. Ә белемле артығынан баш тарта белә. Сөнки кешегә булғаны етә. Быны фәҡәт белемлеләр белә, рухи белемлеләр, дөрөҫ белемлеләр белә.

Ә дөрөҫ белем эзотерика, дини китаптар аша килә.

## *Цивилизация*

Беҙ бөгөн тормошобоҙҙо цивилизацияһыҙ күҙ алдына ла килтерә алмайбыҙ. Цивилизация беҙгә электр уты, телевизор, автомобиль, самолет һ.б. бирҙе. Шул арҡала тәүлек әйләнәһенә яҡтылыҡта йәшәйбеҙ, Ер шарында булып торған бар ваҡиға хаҡында шунда уҡ беләбеҙ, теләһә ниндәй урынға тиҙ генә барып етә алабыҙ. Ләкин... Беҙгә кәрәкме улар? Мәҫәлән, яҡтылыҡты алайыҡ. Йәйен ҡояш – 17 сәғәт, ҡышын 7 сәғәт күк йөҙөндә балҡый. Ошо яҡты ваҡыт әҙәм балаһы өсөн баштан ашҡан. Әммә кеше ҡояш менән бергә тормай, яҡты мәлдең күп өлөшөн йоҡлап үткәрә лә, көн эсендә эшләр эшен эшләп бөтмәгәс, ҡараңғылыҡта электр уты ҡулланырға мәжбүр була.

Ер йөҙөндәге телевизор, радио һөйләгән ваҡиғаларҙы белеү беҙгә кәрәкме? Уларҙың күбеһенең кире эмоцияға бәйле булыуы (катастрофа, үлтереш, шартлау һ.б.) тыңлаусыға бик насар тәьҫир итә, психикаһын, һаулығын ҡаҡшата. Ә бына автомобилһеҙ, самолетһыҙ йәшәү мөмкин түгел, тиерһегеҙ. Бер мәл миңә уҡымышлы ғына кешеләр йыл һайын 21 июлдә Арҡайымда ғәжәйеп төн булыуы хаҡында хәбәр итте һәм минең шуға ҡарата фекеремде белеште. “Ниңә Арҡайымда ғына ундай төн була һәм фәҡәт 21 июлдә генә?” – тип һораным. Таныштарым быны Арҡайымдың изге урын булыуы һәм 21 июль төнөнөң бик шифалы төн икәнлеген үҙҙәренсә аңлатты. Минең быға һис ҡаршылығым юҡ. Әммә шуны белергә кәрәк: Аллаһы Тәғәлә Ер шарының бөтә урынын изге итеп, ваҡыттың бөтә төндәрен генә түгел, көн әйләнәһенә, йыл буйына һәр секундын, һәр сәғәтен шифалы итеп яратҡан. Кеше өсөн ошо мәлдә ул ҡайҙа тора – шул урын уның өсөн изге. Һин ҡайһы ваҡытта йәшәйһең – шул осор һиңә игелекле.

Бөтәһе лә әҙәм балаһының үҙенән тора. Әгәр ул ошо урын менән, ошо ваҡыт менән риза түгел икән, уға башҡа бер урын да, бер ваҡыт та ҡыуаныс йәки һаулыҡ килтермәйәсәк. Тимәк, автомобилгә, самолетҡа ултырып бәхет һәм сәләмәтлек эҙләп икенсе ергә елеү, осоу – файҙаһыҙ.

Шулай булғас, матур тормош ҡороу өсөн автомобилдең дә, самолеттың да һис кәрәге юҡ. Аллаһы Тәғәлә йәшәү өсөн әҙәм балаһының эргәһенә бөтәһен дә биргән, уны ситтән эҙләү кәрәкмәй. Кешеләрҙең янындағын күрмәүе, булғаны менән риза булмауы цивилизацияны барлыҡҡа килтергән дә инде. Ә цивилизация, үҙ сиратында, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, кешелектең йәшәү шарттарын үлемесле хәлгә әйләндерә бара, йәғни Ер шарының үҙен упҡынға этә. Мәҫәлән, бер яҡтан, Ерҙең ҡанын (нефтте) һурып, уны эстән ҡоротһа, икенсенән, шул нефтте яндырып, атмосфераға ҡот осҡос зыян килтерә, өсөнсөнән, кислород бүлеүсе ағастарҙы рәхимһеҙ рәүештә ҡырҡа, дүртенсенән, һыуҙарҙы ҡорота, ағыулай һ.б.

Былар ни өсөн эшләнә? Кешегә тамсы ла кәрәкмәгән мәғлүмәт биреү (телевизор, радио, гәзит), әҙәми затты торған урынынан һис тә артыҡ булмаған икенсе ергә алып барыу (автомобиль, самолет), яҡты осорҙоң күп өлөшөн йоҡлап үткәргәндән һуң ҡараңғы төндө яҡтыртыу (электр уты) өсөн... Ләкин быларҙың береһе лә – тимәк, цивилизацияның үҙе лә – кешелеккә кәрәк түгел.

Әммә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, хәҙер инде цивилизациянан ҡотолоуы ауыр. Сөнки кешелек бөгөн таяҡ тығылған ҡырмыҫҡа иләүенә әүерелгән. Ул мыжғый, сәбәләнә, тимер атҡа атланып туҡтауһыҙ ҡайҙалыр саба. Был мәшхәрҙе туҡтатыу мөмкин түгел. Бахыр әҙәм балаһының башы ҡаңғырған. Ул бер ни аңламай, ҡайҙа һәм нисек йәшәргә белмәй, ҡайһылай итеп һаулығын һаҡларға кәрәклегенә төшөнмәй.

Былдай мәлдә һәр кем, туҡтап ҡалып, уйланырға тейеш. Ни өсөн йәшәйһең һин, сәбәләнеп нимә эҙләйһең? Бөтә донъянды онотоп, бер ерҙән икенсе урынға ниңә сабаһың? Туҡта. Тыныслан. Тирә-яғыңа яҡшылап ҡара. Эҙләгәнең бит эргәңдә. Ошо ваҡыт һин торған ер иң изге, һин әле йәшәгән мәл иң сауаплы. Сөнки Ерҙең бөтә урыны изге, ваҡыттың һәр мәле шифалы.

## *Шарапова*

Мария Шарапованы белмәгән кеше юҡтыр. Ул – донъяла иң көслө теннисистларҙың береһе. Байлығы 30 миллион долларҙан ашыу. Һомғол буйлы, сибәр, йәш. Әле кейәүҙә түгел. Кемде һайлар икән Мария үҙенә кейәү итеп? Йәки кем уға өйләнергә риза булыр? Был һорауға яуап табыуы еңелдән түгел. Марияның трагедияһы ана шунда ла инде. Бай егет уға өйләнергә теләрме? Ирекле йәшәргә өйрәнгән көслө холоҡло ҡыҙҙан ғаиләһе өсөн йәшәрлек ҡатын яһауы мөмкин түгел. Ул, ғаиләһен уйламай, һаман кеше араһында булырға ынтылаcаҡ, ирегеттәрҙе туҡтауһыҙ үҙенә ғашиҡ иттерергә тырышасаҡ. Ғүмер буйы, бар көсөн һалып, дан ҡошоноң ҡойроғона йәбешәсәк. Ундай ҡатынға ғаилә менән ир кәрәкмәгән, файҙаһыҙ йөк булып тойоласаҡ. Бай егеткә кәрәкме ни ундай ҡатын? Юҡ, әлбиттә. Үҙенә ғашиҡ булмаған, ирен, ғаиләһен яратҡан, улар өсөн ғүмерен ҡорбан итергә әҙер, ярлыраҡ ҡыҙҙы һайлаясаҡ бай егет.

Бәлки, Марияға ярлы егет өйләнергә риза булыр? Тик үҙ-үҙен хөрмәт иткән ир-ат, ярлы булһа ла, Мария менән ғаилә ҡорорға теләрме? Бай ҡатын бит, үрҙә әйтеүебеҙсә, ғүмер буйы дан уртаһында булырға ынтыла, ире уға комплект өсөн генә кәрәк. (Йәмғиәттә ирһеҙ ҡатындарҙың абруйы репутацияһы ирле ҡатындарҙыҡына ҡарағанда күпкә түбән.) Былдай ҡатынға ире ялсы, йомошсо ролен үтәйәсәк. Ә инде ул башын күтәрә башлаһа: “Һин бит хәйерсе инең! Мин һине кеше иттем!” – тигән кәмһетеүле һүҙҙәрҙе даими рәүештә ишетәсәк. Тора-бара

был егеттең исемен онотасаҡтар, уны “Шарапованың ире” тип кенә атаясаҡтар. Үҙен шәхес тип һанамаған “сепрәк” егет кенә, йә иһә Марияның ҡайҙа, кем менән йөрөгәненә төкөрөп ҡараған битараф ир генә бындай хәлдә йәшәргә риза буласаҡ.

Бөтә бай ҡыҙҙарҙың трагедияһы был. Фәҡәт маһайыусанлыҡ тойғоһон үлтереп, тик ир ҡатыны булып, ғаиләһе өсөн генә йәшәргә теләгән бай ҡыҙ ғына үҙенә кейәү табып йәшәп китә ала. Иреккә, данға өйрәнгән, көслө холоҡло Марияның быға көсө, тәрбиәһе, аҡылы етерме?

Ҡыҙғаныс: даны, белеме, вазифаһы менән ғорурланған барса ҡатын-ҡыҙҙарҙы ла ошондай уҡ яҙмыш көтә...

## *Уҡытыусы*

“Башҡортостан” гәзитендә бер актерҙың әңгәмәһен уҡырға тура килде. Йәш сағында ул уғата һәйбәт ағайға тап булған. Шунан һуң уны бер ҡасан да күрмәгән, әммә шул яҡшы кешене һағына, йәнә осрашҡыһы килә икән. Бик тәбиғи теләк. Ләкин был тойғо эргәндәге кешеләрҙең асылын аңлай белмәүҙән килә.

Шундай фекер бар: уҡыусы әҙер булмайынса уға уҡытыусы килмәй. Ысынлап та, һәр кемдең кимәленә таман уҡытыусыһы табылып тора. Уны эҙләргәме йәки көтөп алырғамы? Юҡ, уҡыусыға кәрәкле уҡытыусыны көтөргә лә, эҙләргә лә кәрәкмәй. Ә нимә эшләргә? Иң ғәжәбе шунда: бер ни эшләмәҫкә. Эйе, эйе – бер ни эшләмәҫкә. Ябай кеше генә маҡсатына ирешеү өсөн көс түгә, тырыша, ә аҡыл эйәһенең теләгәне янында тора.

Теге актерға ла ҡасандыр күргән һәйбәт ағайҙы эҙләүҙән баш тартыу дөрөҫ булыр. Янындағылары һәйбәт түгелме ни? Әгәр эргәндәгеләрҙе насар тип һанайһың икән, быға улар ғәйепле түгел, сәбәп һинең үҙеңдә. Бындай ҡараш менән ул актер, теге ағайҙы тапҡан хәлдә лә, унан тиҙ генә күңеле ҡайтасаҡ.

Ә бит һәр кемдең бөтә көсөн, энергияһын һалып, ваҡытын сарыф итеп эҙләгәне – эргәһендә. Актерҙы уратып алған бар кешеләр – көткән “һәйбәт ағайы” ул, йәғни уҡыусының һағынған уҡытыусыһы янында ғына тора. Быны күрергә генә кәрәк.

Беҙҙе “һәйбәт ағайҙар” һәм уҡытыусылар уратып алған. Улар һине нимәгә өйрәтергә теләй – шуны ғына бел. Урам мөйөшөндә ултырған хәйер һораусы ла, ҡыйлыҡта соҡсонған берәҙәк тә... – һинең уҡытыусың. Улар – һинең үҙҙәренә ниндәй мөнәсәбәт күрһәтеүеңде тикшереүсе, йәғни һинең асылыңды асыусы, барса кешеләргә, бөтә күренеш-ваҡиғаларға тыныс һәм изгелек менән ҡарарға өйрәтеүсе уҡытыусы. Һиңә ҡарарға ғына түгел, күрә белергә лә аңлатыусы уҡытыусы.

Шуны бел: һиңә тап булған, яныңа килгән һәр кем – уҡытыусы, был донъяла һиңә уҡытыусынан башҡа бер кем дә осрамай.

## *Совет осоро һәм хәҙерге заман*

Яңыраҡ минең ун алты йәшлек ҡыҙым:

– Атай, совет заманында йәшәүе һәйбәт инеме, әллә хәҙерме? – тигән ғәжәйеп һорау бирҙе.

Ысынлап та, был һорау бик күптәрҙе борсойҙор. Шуға ла, ҡәҙерле уҡыусылар, ҡыҙыма биргән яуабымды һеҙгә һөйләргә булдым.

Аллаһы Тәғәлә кешене төрлө-төрлө итеп яратҡан. Берәү ҡул эштәренә оҫта, кемдеңдер һөйләй башлаһа теле-телгә йоҡмай, өсөнсө кеше – һәләтле рәссам һ.б.

Тормошҡа ҡулайлашыу буйынса ла кешеләр бер-береһенә оҡшамаған.

Кемдер анһат ҡына уңышҡа өлгәшә, аҡса эшләй, байып китә, ә кемдер, күпме генә тырышһа ла, һис тә уңа алмай, ғүмер буйы аҡсаһы етешмәй, аслы-туҡлы йәшәй.

Ниңә улай? Быны Аллаһы Тәғәлә генә белә. Ә ғалимдарҙың раҫлауынса, кешелектең яҡынса биш процентында ғына бизнес менән шөғөлләнеп байып китерлек сифат бар икән. Был сифаттарға эшһөйәрлек, ныҡышмалылыҡ, таһыллыҡ, йылғырлыҡ, хәйләкәрлек, уҫаллыҡ, бәғерһеҙлек һәм башҡа шуның кеүек сифаттар инә. Ә халыҡтың туҡһан биш проценты, күпме генә тырышһа ла, бизнеста уңышҡа өлгәшә алмай, сөнки уларҙа үрҙә һаналған сифаттарҙың күбеһе етешмәй. Мәҫәлән, берәү бик эшһөйәр, әммә бигерәк изге күңелле, икенсе кеше үтә ныҡыш, тик хәйләкәрлек етешмәй һ.б.

Бына ошо бизнес менән шөғөлләнеп тә уңа алмаҫтай әҙәм балалары өсөн совет заманы бик тә уңайлы йәмғиәт ине. Улар дәүләткә тоғро хеҙмәт итә, ваҡытында эш хаҡы ала, сират еткәс, фатирлы була, бушлай дауалана, балаларын аҡса түләмәй уҡыта. Шулай итеп, бик тыныс һәм ҡәнәғәт йәшәне. Ә биш процентты тәшкил иткән йылғыр әҙәмдәргә совет заманы оҡшамай торғайны, сөнки улар үҙҙәрендә оло эштәргә тотонор энергия, көс, хәйлә һиҙә ине, әммә закондар уларҙың ҡулын бәйләне. Фәҡәт ана шундай әҙәмдәрҙең тырышлығы арҡаһында совет дәүләте юҡҡа сыҡты ла инде.

Һәм бына беҙ капиталистик мөнәсәбәттәргә күстек.

Илебеҙҙең биш процентын тәшкил иткән әҙәмдәр, замананың үҙгәреүен тиҙ генә тойоп, шунда уҡ ең һыҙғанып алға ташланды, һәм кемеһе – аҡылы менән, икенселәре – алдашып һәм хәйләләшеп, өсөнсөләр урлап һәм төрлө махинация яһап байып алды. Шулай итеп, һә тигәнсә бар дәүләттең байлығын үҙ ҡулына төшөрҙө. Ә халыҡтың туҡһан биш проценты, үҙҙәренең бизнесҡа яраҡлашмаған холоҡтары арҡаһында, бер тинһеҙ тороп ҡалды. Ил капитализмға күскәс, уларға хәҙер бушлай дауаланыу, балаларын институтҡа индереү, сират менән фатир алыуҙар бөттө.

Ана шуға ла ҡыҙыма былай тип яуап бирҙем:

– Кешеләрҙең күбеһенә совет заманында йәшәү һәйбәт ине. Хәҙерге заман бик аҙҙар өсөн уңайлы.

Ошо ерҙә шундай һорау тыуа: тормош улайға киткәс, халыҡтың туҡһан биш процентын тәшкил иткән кешеләргә, бигерәк тә ауылда йәшәүселәргә, бөгөн нисек йәшәргә?

Был һорауға яуап – киләһе мәҡәләмдә.

## *Эш урыны*

2002 йылғы халыҡ иҫәбен алыуҙың һөҙөмтәләренә күҙ һалһаң, 20-нән алып 50-гә тиклем йәштәге кешеләр араһында Башҡортостан ауылдарында ирҙәр ҡатындарға ҡарағанда 25 меңгә күберәк, ә ҡалаларҙа, киреһенсә, ошо йәштәрҙәге ирҙәр менән сағыштырғанда, ҡатындар 75 меңгә артығыраҡ.

Шул арҡала ауылдарҙа өйләнмәгән ир-ат күп, ә ҡалаларҙа меңәрләгән ҡатын-ҡыҙ ғаилә ҡора алмай интегә. Ҡалала фатирһыҙ, ғаиләһеҙ ыҙалаған утыҙға еткән ҡыҙҙарға минең әйткәнем дә бар: “Ауылға ҡайтып, кейәүгә сығып, балалар табып йәшәгеҙ”. Уларҙан күбеһенсә бер үк яуап ишетәм: “Ауылда эш юҡ”.

Ауылда эш юҡ... Был фекер беҙҙең тормошҡа элеккесә ҡарауыбыҙҙан килә. Совет дәүләте бар кешеләрҙе шәхси милектән айырып, йәмәғәт эшенә егергә тырышҡайны. Ҡалаламы ул, ауылдамы – әҙәм балаһы ҡайҙалыр хеҙмәт итергә тейеш ине. Һәм дәүләт халыҡты эш менән тәьмин дә итә ине.

Бөгөн заман үҙгәрҙе. Тимәк, беҙгә лә психологиябыҙҙы үҙгәртергә кәрәк. Совет заманында көнө буйы эштә булып, балаларға, ғаиләгә, тормош иптәшебеҙгә ваҡыт бирә алмауыбыҙға зарлана инек. Хатта дәүләт хеҙмәтенән ҡайтҡас, өй эштәре шул тиклем күп, уға көсөбөҙ етмәй, тип ҡайғыра торғайныҡ. Бөгөн тормош үҙе һәр кемгә үҙ ғаиләһенә боролоп ҡайтырға ҡуша. Эш юҡ, тибеҙ, ә өй эсендәге бурыстарыбыҙҙы үтәү эш түгелме ни? Хәҙер бит йәмғиәткә хәлебеҙҙе сарыф итмәйенсә, фәҡәт ғаилә өсөн генә йәшәү мөмкинлеге тыуҙы. Беҙ барыбыҙ ҙа ғүмер буйы ошо хаҡта хыяллана инек тәһә.

Әгәр ауыл ерендә тороп, бар көсөбөҙҙө мал тотоуға, йәшелсә үҫтереүгә, шулай итеп ғаиләңде ҡарауға бағышлайһың икән, был бит – бик оло һәм файҙалы хеҙмәт. Дәүләт эшендә һин түккән көсөңдөң ун биш-егерме проценты ғына түләнһә, үҙ хужалығыңда башҡарған эшеңдең йөҙ процент файҙаһын күрәһең бит!

Эйе, хәҙер һәр кемдең эше – үҙ өйөнә, үҙ хужалығына, үҙ ғаиләһе өсөн тырышыуға ҡайтып ҡалырға тейеш. Быны заман ҡуша. Шуға күрә ҡалаға йәбешеп ҡалырға теләгән ҡыҙҙарға (бигерәк тә ауылдан сыҡҡан ҡыҙҙарға) ғаилә ҡора алмай, ҡалаларҙа фатирһыҙ яфаланмаҫҡа (быға, үрҙә әйтеүемсә, статистика ҡаршы), ауылға ҡайтып, кейәүгә сығып, үҙ ғаиләһе, балалары һәм ире өсөн йәшәргә, йәғни үҙ хужалығы өсөн тырышырға кәрәк. Һәр кемдең төп эше үҙ хужалығында, өйөндә булырға тейеш.

Донъяла үҙ ғаиләңдә, үҙ хужалығыңда эшләүҙән дә файҙалы, кәрәкле, ҡыуаныслы һәм изге эш юҡ ул!

## *Уй-2*

Был һүҙемде “Уй-2” тип атаным, сөнки уй хаҡында үрҙә яҙғайным инде. Унда, нигеҙҙә, уйҙың физиологик мәғәнәһен аңлатырға тырыштым. Ә хәҙер уйҙың кеше тормошона, яҙмышына йоғонтоһо хаҡында фекер йөрөтмәксемен.

Беҙ көнө буйы туҡтауһыҙ уйланабыҙ (сөнки уйһыҙ тора алмайбыҙ), кеше уйы, тупаҫ әйткәндә, ике төргә бүленә: негатив һәм позитив, йәғни аламаға һәм һәйбәткә. Иң ғәжәбе шунда: беҙҙең уйҙар һәр саҡ тормошҡа аша. Йәғни бер уй ҙа юғалмай, йыһанға тарала. Таралыу ғына түгел, уй йыһанға үтенес һәм бойороҡ рәүешендә барып етә.

Йыһандың төп ҡағиҙәләре бар. Аллаһы Тәғәлә ҡарап тора һәм насар ҡылыҡ өсөн язалай, тиҙәр. Хоҙай һәр кемде күҙәтмәй, ул ҡанундар уйлап сығара һәм шулар донъя менән етәкселек итә. Мәҫәлән, Хоҙай тарафынан ике әйбер араһында тартыу көсө булдырылған. Шул ҡанун, әгәр балкондан артыҡ ныҡ тышҡа һонолһаң, һине ергә тартып төшөрә. Шуның кеүек, кеше уйының нисек хәрәкәт итергә тейешлеге хаҡында Аллаһы Тәғәлә ҡағиҙә тыуҙырған. Уны ябайлаштырып былай аңлатырға була: кешенең һәр уйын үтенес, теләк рәүешендә ҡабул итергә һәм оҙаҡҡа һуҙмай тормошҡа ашырырға. Һин “донъя – насар, бөтә кешеләр – ҡәбәхәт” тип уй-фекер йөрөтһәң, тормошоң насарлана. Яныңа фәҡәт алама кешеләр килә, һиңә аяҡ сала башлай. Сөнки һин бит уйың менән шуны һораның. Әгәр ҙә “тормош – матур, һәр әҙәм балаһы – фәрештә кеүек” тип фараз итһәң, донъяң матурланыр, эргәңдә фәрештәләй кешеләр тупланыр.

Шулай итеп, донъяңды һинең уйың тыуҙыра. Әгәр сумка тулы аҡса хаҡында туҡтауһыҙ уйлаһаң, уйлау ғына түгел, үҙеңдең сумкаңды асып ебәреп, унда меңәр һумлыҡ ҡағыҙ аҡсалар тулып ятыуын асыҡ итеп күҙ алдына килтерһәң (быны даими рәүештә эшләргә кәрәк һәм аҡсаларҙың нисек һиңә килеп эләгеүен ныҡлап фараз итеү мәжбүр), ул байлыҡ алдыңа килеп ятасаҡ. Был – Аллаһы Тәғәләнең ҡануны.

Ана шуға ла гел яҡшы уйҙа булығыҙ, насарлыҡтар уйламағыҙ. Һәм һеҙгә бәхет тә, байлыҡ та килер. Был ҡанундың дөрөҫлөгөн Ҡөрьән дә, Библия ла һәм башҡа дини китаптар ҙа раҫлай.

## *Донъя тигеҙ*

Донъяла бер әйбер ҙә икенсеһенән өҫтөн түгел. Бөтә нәмәләр ҙә бер-береһенә тигеҙ.

Тауҙар диңгеҙҙән йәмлерәкме? Рауза сәскәһе лилиәнән матурыраҡмы? Һәр береһе үҙенең урынында, һәр ҡайһыһы үҙенсә матур.

Ҙур түрә ябай ҡарауылсынан айырыламы? Юҡ, улар ҙа тигеҙ. Уларҙың йәне лә, тәне лә бер-береһенекенән һис яғы менән дә айырылмай.

Байлыҡтары тигеҙ түгел, тиерһегеҙ. Кешегә ултырыр өсөн бер ултырғыс, йоҡлар өсөн бер карауат, кейер өсөн бер ҡат кейем, ашар өсөн көнөнә бер кило тирәһе ризыҡ етә. Бай кеше, нисек кенә теләһә лә, бер юлы йөҙ ултырғысҡа ултыра, йөҙ карауатта йоҡлай, йөҙ кейем кейә, йөҙ кило ризыҡ ашай алмай. Кешегә артығы кәрәкмәй. Артығын әҙәм балаһы маһайыу, маҡтаныу өсөн генә йыя.

Ҙур түрә, бай кеше сит илгә барып, ундағы тәбиғәт менән, йәнлектәр менән һоҡлана ала, тиерһегеҙ. Азия Африкаға ҡарағанда һәйбәтерәкме? Америка Европанан хозурыраҡмы? Улар барыһы ла бер кимәлдә.

Маймыл ғәжәберәкме, әллә беҙҙең урамда йөрөгән ябай этме? Жираф боландан йәмлерәкме? Улар тигеҙ.

Әгәр кеше баҫып торған ерендәге матурлыҡты күрмәй икән, мөғжизә күрәм тип ҡайҙалыр ынтыла икән, уны ҡайҙа ғына алып барма, барыбер гүзәллекте күрә, тоя алмаясаҡ. Сит ерҙә фотоға төшөп, көнләштереү өсөн уларҙы яҡындарына күрһәтеүгә генә әйләнәсәк сәйәхәте.

Тирә-яғығыҙға ҡарағыҙ. Ниндәй матур ағастар үҫә беҙҙә: ҡайындар, йүкәләр, баландар. Нисек сихырлы шыбырлаша улар. Ябай ғына турғайҙарҙың сутылдашыуын тыңлап ултырғанығыҙ бармы? Күпме бәхет, ҡыуаныс ишетелә уларҙың тауыштарында. Шул шатлыҡ әкренләп һеҙҙең күңелгә күсә.

Эйе, эргәбеҙҙәге донъябыҙ иҫ киткес. Ул Америка, Африка тәбиғәтенән өҫтөн түгел, әммә кәм дә түгел.

Донъялағы бөтә нәмә тигеҙ. Кешеләр ҙә тигеҙ. Бер кем бер кемдән артыҡ түгел. Әгәр һин үҙеңде берәүҙән өҫтөн ҡуяһың икән, һин, киреһенсә, үҙеңде кәмһетәһең һәм ул кеше үҙен һинән өҫтөн ҡуя башлаясаҡ.

“Һиңә тап булған һәр кеше – Хызыр Ильяс”, – ти торғайны миңә ҡартатайым. Йәғни һиңә тап булған һәр кеше фәрештә ул. Һәм һин үҙең дә фәрештә.

## *Тағы ла бәхет хаҡында*

Тормош бәхет өсөн яратылған. Шуға ла кеше һәр саҡ бәхетле. Бәхетһеҙмен, тип уйлау тормошто дөрөҫ аңламауҙан, уға яңылыш баһа биреүҙән килә. Ә бөтә бәхетле осраҡтар беҙ уны ҡасандыр Аллаһы Тәғәләнән һораған өсөн һәм Аллаға рәхмәт әйткән өсөн килә.

Нисек эшләй һуң ул тормош? Аллаһы Тәғәлә шундай ҡанун уйлап сығарған: беҙҙән сыҡҡан, беҙ йыһанға осорған энергия – һүҙҙәр, тойғолар, уйҙар – ниндәй генә булмаһын – киреме, ыңғаймы – кире әйләнеп ҡайта. Шулай итеп, нимә тыуҙырабыҙ, шуны кире алабыҙ. Ул ылыҡтырыу энергияһы тип атала. Һин ни теләйһең, шуның бөтәһен дә тартып килтереү энергияһы. Был ҡанун кешегә бәхетле тормош кисереү өсөн тәғәйенләнгән. Энергия “оҡшаш әйберҙәр –

һүҙҙәр, уйҙар, тойғолар – бер-береһенә тартыла" тигән принцип буйынса эшләй. Беҙ үҙебеҙ теләгән нәмәне генә түгел, үҙебеҙ ҡурҡҡан нәмәләрҙе яныбыҙға тартып килтерәбеҙ. Был механизм туҡтауһыҙ эшләй. Шуға ла һәр саҡ ыңғай тойғолар эсендә йәшәргә кәрәк. Унын иң ябай ысулы – баһа биреүсе уй-тойғоларҙан баш тартыу. Үҙеңде ғәйепләүҙәрен теләмәһәң, бүтәнде ғәйепләмә (не судите – судимы не будете). Был юлға баҫыу өсөн рәхмәт әйтергә өйрәнегеҙ. Бөтәһе өсөн дә Аллаһы Тәғәләгә рәхмәт әйтергә кәрәк. Эйе, бөтәһе өсөн дә. Хатта һиңә оҡшамаған, һин яратмаған нәмәләр, ваҡиғалар өсөн дә.

Рәхмәт әйтеү – күңелде солғап алған шомдан, борсолоуҙан, ҡурҡыуҙан ҡотолоуҙың иң еңел ысулы. Ни генә булһа ла – һиңә оҡшаған хәлме, юҡмы – Аллаһы Тәғәләгә ошолайыраҡ рәхмәт әйт: "Эй, Аллам, бөтә ошо ваҡиғалар өсөн һиңә оло рәхмәт. Мин уларҙы ниңә миңә килгәнлеген белеп тә етмәйем, әммә һинең тарафтан миңә яҡшылыҡ эшләү өсөн ебәрелгәнлеген аңлайым. Шуның өсөн һиңә оло рәхмәт, эй, Аллам!" Шул саҡта күңелде тыныслыҡ, рәхәтлек солғап ала, тойғолар ыңғайға әйләнә.

Минең ҡартатайым, ниндәй генә кире ситуация килеп тыуһа ла: "Аллаһы Тәғәлә шулай ҡушҡандыр. Эй, Аллам, оло рәхмәт!" – ти торғайны. Йәш саҡта мин быға аптырай инем, хәҙер аңлайым, ниндәй дөрөҫ фекер йөрөткән ул!

Нимәгә ҡаршылашаһың, нимә менән алышаһың, һин уны үҙеңә бәйләп тотаһың, уға көс бирәһең. Ҡаршылашма. Шул саҡ кире ваҡиға, көс һинән ыҫҡыныр һәм ташлап китер. Тыныслан. Сөнки һәр кире ваҡиғаны үҙең барлыҡҡа килтергәнһең. Һәр ваҡиғаны ҡабул ит, унан һабаҡ ал. Һәм ул ыңғайға әйләнер.

Бөтә нәмәгә, ваҡиғаларға ыңғай ҡара, ыңғай баһа бир. Әгәр тормошҡа, хатта бик оҡшамаһа ла, ыңғай баһа бирһәң, миңә тәжрибә өсөн ебәрелгән, тиһәң, ул һинең өсөн бәхеткә әүерелер. Ә инде тормошҡа кире баһа таҡһаң, тормошоң да кирегә әйләнер. Бөтәһен дә һин үҙең һайлайһың, үҙең ижад итәһең.

Эйе, тормошоңдо бәхетле итеү фәҡәт үҙеңдән тора. Һинең һүҙҙәреңдән, уйҙарыңдан, тойғоларыңдан.

Уларҙы ыңғайға ғына үҙгәрт һәм һин тормоштоң бәхет өсөн яратылғанын аңларһың, үҙеңдең һәр саҡ бәхетле икәнлегеңде тойорһоң.

Бел: ысынбарлыҡты ижад итеүсе – һин үҙең...

## *Дин*

Һикһәненсе йылдар башында, Мәскәүҙә уҡығанда, миңә урыҫ телендә баҫылған дини журнал күрергә тура килде. Баҡһаң, совет осоронда ла ундай баҫма даими сығарылып килгән икән. Ғәжәпләнеүемдең икенсе сәбәбе шунан ғибәрәт ине: журнал эсендә бер нисә физика фәндәре докторының, академигының дингә ҡағылышлы етди мәҡәләләре баҫылған, шул айҡанлы уларҙың ҡыҫҡаса биографияһы бирелгән. Улар барыһы ла тәү осор, һәр совет кешеһе кеүек, диндән йыраҡ торған. Әммә, физика фәненең төбөнә төшә бара, элементар өлөшсәләрҙе (частица) ныҡлап өйрәнгәс, Аллаға ышанғандар. Был мине аптыратты һәм күңелдә ниндәйҙер тынысһыҙлыҡ тыуҙырҙы. Мин Аллаға ышанмайым... Әллә яңылыш йәшәйемме икән? Бер нисә йыл үткәс, драматургияны яҡшылап аңлау теләгенән, психология фәнен ныҡлап өйрәнергә тура килде. Ошо сәбәпле экстрасенсорика, парапсихология курстарына йөрөнөм. Һәм шул өлкәлә эшләгән, психик көскә эйә булған кешеләрҙең ғаләмдең материаль донъя менән генә сикләнмәүе хаҡында етди фәлсәфә алып барыуҙары, Аллаға ныҡлап ышаныуҙары күңелгә шом һалды. Шулай ҙа, ысынлап та, Алла бармы икән ни?

Ҡөрьән, Библия менән танышып сыҡтым. Ләкин уларҙың икеһен дә

аңламаным. Әкиәт кеүек урындары бар, һис ышанғы килмәй. Шулай ҙа күңелдә ниндәйҙер саҡҡы тоҡанды. Мин рухи донъя тураһында китаптар уҡырға тотондом. Ныҡлап суфыйсылыҡ, кришнаитлыҡ, иудаизм фәндәре менән, медитация, магия, медиум тураһында хеҙмәттәр менән таныша башланым. Хәҙерге ғалимдарҙың кешенең астраль тәненә ҡағылышлы хеҙмәттәренә юлыҡтым, әкренләп хәҙерге физиканың һәм материализмдың нигеҙе булып торған элементар физиканың инешенә барып эләктем.

Бар матди донъя нимәнән тора?

Беҙ, материалистар, мәктәп осоронан уҡ яҡшы беләбеҙ: молекулаларҙан, молекула – атомдарҙан. Оҙаҡ ҡына ваҡыт, атом бүленмәй, ул – материаль донъяның кирбесе, тип килделәр. Хатта атом һүҙе үҙе “бүленмәүсе” тигәнде аңлата. Әммә бер мәл атомдан бәләкәйерәк нәмәләр таптылар. Атом – электрон һәм протондан, ә улары элементар өлөшсәләрҙән (частица) тора икән. Ә ул нимәнән тора? Ары тикшерә башлағандар. Һәм тапҡандар! Ҡайҙандыр көслө энергия килә. Шул энергияның ағымында саҡҡылар кеүек элементар өлөшсәләр тоҡана. Улар инде, белеүегеҙсә, атом булып уҡмаша һәм материаль донъя барлыҡҡа килә.

Ә энергия ҡайҙан килә? Төрлө тиҙлек һәм көс менән (шул тиҙлек менән көс айырмаһы төрлө матдәләр тыуҙыра икән) туҡтауһыҙ килеүсе энергияның сығанағы ҡайҙан? Ғалимдар ары тикшерә башлаған, ләкин энергияның хужаһына барып етә алмағандар. Бының өсөн матди һиҙеү ағзалары түгел, ә рухи ағзалар кәрәклеген аңлаған улар. Әммә туҡтауһыҙ энергия ебәреүсе көс барлығына, уның көсө, тиҙлеге туҡтауһыҙ үҙгәреүенә, тимәк, тере йән эйәһе тарафынан етәкселек ителеүенә инанғандар. Ғалимдарҙың күңеленә ғүмере онотолмаҫлыҡ булып оло, ҡурҡыныс шом һеңгән.

Һәм улар шул энергияның сығанағына, сәбәпсеһенә, йәғни Аллаға ышанғандар. Ысынлап та, юғары интеллектлы шәхестәр, бар бөйөк ғалимдар Аллаға ныҡ ышанған бит. Толстой, Эйнштейн, Менделеев…

Элементар физика фәне менән шөғөлләнгән хәҙерге күп ғалимдар ҙа Аллаға ышана башлай… Айға беренсе булып аяҡ баҫҡан Америка космонавы, ергә ҡайтыу менән, космонавтиканы ташлай һәм дин әһеле булып китә…

Материалист ғалимдар донъяның тәүге сәбәбенә (первопричина) ана шулай ирекһеҙҙән яҡынлашһалар, хәҙерге дини әһелдәр ҙә, дөрөҫөрәге, уларҙың ғалимдары ла, Аллаһы Тәғәлә тарафынан нисек матди донъя, кеше йәненең барлыҡҡа килеүен, диндең ҡайһылай итеп тыуыуын, ниңә уның төрлө-төрлө булыуын асыҡларға тырышалар. Һәм һуңғы осор улар, төрлө дин әһелдәре булһалар ҙа, бер генә дингә йәбешмәйенсә, диндәрҙең айырмаһын тикшерергә, Аллаһы Тәғәлә төшөнсәһенә һуҡыр рәүештә ышанып ҡына ҡалмайынса, уның кем икәнлеген, нисек йәшәү-эшләүен, нисек был һәм теге донъяны төҙөүен өйрәнергә тырышалар. Артабан төрлө дин ғалимдары, бер-береһе менән һис бәйләнеш тотмайынса, ғәжәйеп бер төрлө үк һығымталар яһайҙар. Баҡһаң, бар диндәр ҙә бер үк нәмәне раҫлай икән. Улар барыһы ла Алла барлығына ышанырға, Уға табынырға ҡуша. Мәҫәлән, Христиан һәм Ислам диндәрен генә алайыҡ. Уларҙың бар төшөнсәләре, бар легендалары бер иш. Айырма нимәлә? Ваҡыраҡтарына туҡталып тормайыҡ, төп айырма шунда: христиандар, Бог – троица, тиҙәр. Мөхәммәт пәйғәмбәр уларҙы мәжүсилектә (күп аллалыҡта) ғәйепләй һәм, Алла берәү, тип бара. Әммә ике дин дә донъяның нисек яратылыуына бер төрлө ҡарай.

Аллаһы Тәғәлә (Бог) әйткән һәм донъя барлыҡҡа килгән, ти мосолмандар.

Әйткән. Тимәк, һүҙ булған. Сначала было слово, ти христиандар. Нимә ул һүҙ (слово)? Уға яуап биреүҙән алда кришнаиттарҙы тыңлап ҡарайыҡ.

Улар әйтә: Алланың (Бог, Кришна) энергияһы бик күп, тиҙәр. Беҙҙе иң алда уның материаль һәм рухи энергияһы ҡыҙыҡһындыра. Шул ике энергия материаль һәм рухи донъяны тыуҙыра. Аллаһы Тәғәлә энергия ярҙамында материя яһай. Йәғни “Алла – материаль энергия – материя”. Йәнә “Алла – рухи энергия – рухи донъя”. Аңлайышлыраҡ булһын өсөн, Ҡояшты миҫал итеп алайыҡ. Ҡояш бар, уның нуры бар, нур йылылыҡ тыуҙыра. Йәғни “Ҡояш – нур – йылылыҡ”. Әгәр ҙә гел һуҡырҙар йәшәгән донъяла күҙле пәйғәмбәр тыуып, быларҙы Ҡояштың барлығына ышандырҙы, ти. Улар Ҡояшҡа табына башланы. Икенсе ерҙә һуҡырҙар араһында икенсе күҙле пәйғәмбәр килеп сығып, Ҡояш барлығына, унан нур килеүенә, шул нурҙың йылытыуына инандырҙы, ти. Был һуҡырҙар “Ҡояш – нур – йылылыҡ” тип, ошо өс әйбергә, йәғни троицаға табына башланылар икән, ти. Аҙаҡ ошо айырма арҡаһында ике ҡәбилә араһында ыҙғыш-талаш ҡубасаҡ.

Шулай итеп, христиандарҙың “Бог-отец, Бог-сын, Бог-Святой Дух” тигәндәре түбәндәгенән ғибәрәт. Аллаһы Тәғәлә (Бог-отец) рухи энергияһын (Бог-сын) ебәрә, был энергия кеше йәненә килеп бәрелә лә уның тирәләй, ҡояш нуры кеүек, рухи йылылыҡ тыуҙыра. Ана шул кеше йәнен урап торған рухи йылылыҡты христиандар “Святой Дух” тип атай. Шул рухи йылылыҡ кеше йәне менән етәкселек итә. Ҡояш йылыһы кеүек. Әгәр ҡояш насар йылытһа, беҙ өшөйбөҙ, кейенергә тотонабыҙ; эҫетә башлаһа, сисенәбеҙ. Ә беҙгә теләгәндә – кейенәбеҙ, теләгәндә – сисенәбеҙ кеүек. Ҡояш йылыһы эргәләге бар материаль ғаләмгә етәкселек иткән кеүек (ҡар йәки ямғыр яуҙыра, үҫемлектәр үҫтерә, һауа баҫымын үҙгәртә һ.б.), Аллаһы Тәғәләнең рухи йылыһы (Святой Дух) бар йән эйәһе менән етәкселек итә (кешеләр, хайуандар, үҫемлектәр үҫтерә, планеталарҙы әйләндерә һ.б.) һәм бар ғаләмде үҙ программаһы буйынса алып бара. Шул уҡ рәүештә матди энергия матди донъя менән етәкселек итә. Ә бит мосолмандар һәм башҡа бөтә дин вәкилдәре лә ошо хәҡиҡәтте раҫлай.

Христиандар “Бог-отец, Бог-сын, Бог-Святой Дух” тиҙәр. Кришнаиттар “Кришна – Брахман – Параматма” тиҙәр. Мосолмандар, Аллаһы Тәғәлә ҡушыуы буйынса донъя барлыҡҡа килгән, тиҙәр, йәғни, “Алла – Бойороҡ (һүҙ, энергия) – Донъя”. Хәҙерге дини ғалимдар “Первопричина – энергия – материя” тиҙәр. Материалист ғалимдар “Сығанаҡ – энергия – материя” тиҙәр. Тимәк, христиандар ҙа, кришнаиттар ҙа, мосолмандар ҙа, дини һәм материалист ғалимдар ҙа бер үк нәмәне раҫлай: “Сығанаҡ – Энергия (көс) – Донъя”.

Мин, башта Ҡөрьән, Библияларҙы аңламаным, тигәйнем. Диндә өйрәнә торғас, матди һәм рухи донъяның нимәнән ғибәрәт икәнен төшөнә башлағас, ул китаптарҙы киренән уҡырға тура килде. Һәм был әсбаптарҙың һәр һөйләмендә, һәр легендаларында йәшерен фекергә, символға, метафораға төрөлгән оло мәғәнә, энергия ятыуы асыҡланды. Әммә улар ныҡ йәшерелгән, йышыраҡ ҡаты өгөтләү, хатта ҡурҡытыу рәүешен алған. Барыбер аңламаҫығыҙ, тигәндәй, төпләп төшөндөрөү юҡ, тик янайҙар, шөбһә һалалар. Шуға ла ҡапыл ҡаушап ҡалаһың, төплө фекер туплай алмайһың. Был рухи китаптарҙың ниңә шулай сәйер яҙылыуын аңлар өсөн, ул осорҙағы кешеләрҙе күҙ алдына килтерергә кәрәк. Фән, белем юҡ кимәлендә. Кешеләрҙең интеллекты бик түбән. Улар бар донъяны бик ябай күрә һәм бер ҡатлы аңлай. Шуға ла уларҙы дингә ылыҡтырыу, дөрөҫ йәшәтеү өсөн иҫбатлап тормайынса, фәҡәт өгөтләүсе, янаусы дини дәреслектәр (Ҡөрьән, Библия һ.б.) кәрәк булған.

XIX, XX быуаттарҙа фән төрлө яҡлап бик ныҡ алға китте. Хәҙер мәктәп уҡыусыларының белеме һәм интеллекты урта быуаттың бөйөк ғалимдарына ҡарағанда юғарыраҡ. Тимәк, хәҙерге кешеләргә бер генә фекерҙе лә төпләп

аңлатмайынса, көсләп, ҡурҡытып тағыу мөмкин түгел. Уларҙың юғары интеллекты быны ҡабул итмәйәсәк. Улар тәүҙә аңларға, шунан ышанырға тырыша. XIX, XX быуаттарҙа кешеләрҙең диндән ситләшеүенең төп сәбәбе ана шунда: кешенең интеллекты, фән үҫеше, белем алыу сәбәпле, ныҡ күтәрелә, ә дини китаптар түбән интеллектлы кеше өсөн бер ни аңлатмайынса, фәҡәт агитация рәүешендә яҙылған көйө ҡала. Мин һис тә Ҡөрьән менән Библияны түбәнһетергә, инҡар итергә йыйынмайым. Улар – фәҡәт дәреслек, тием мин. Аллаһы Тәғәлә тарафынан ниндәйҙер бер кимәлдәге кешеләр өсөн бирелгән дәреслек. Ул осорҙағы кешеләр өсөн дини китаптар шулай яҙылырға тейеш булған. Беҙгә бөгөн уларҙағы йәшерен фекерҙәрҙе, символдарҙы, метафораларҙы сисергә, фәнни нигеҙләнгән, аңлайышлы телгә әйләндерергә кәрәк. Йә иһә юғары интеллектлы кешелеккә дин тураһында икенсе дәреслек, аңлатмаларҙы һәм фәнни асыштарҙы киң файҙаланған фәнни дәреслектәр кәрәк. Уны тыуҙырыу өсөн, Ҡөрьән менән Библияла әйтелгәнсә, Ғайса пәйғәмбәрҙең (Христостың) яңынан килеп, рухи донъяны яңыса аңлатҡанын, Яңы Ҡөрьән йәки Библия биргәнен көтөп ятырға ярамай. Беҙҙең донъяға хәҙер ғалимдар менән дин әһелдәренең бер-береһенә яҡынлашыуы, догмаларға йәбешеп ятмауы, фән менән диндең ҡушылыуы, дин менән диндең компромисҡа барыуы, хатта ҡушылыуҙары талап ителә. Ни тиһәң дә, дин дә, фән дә маҡсатҡа өлгәшеү ысулы ғына бит. Ә маҡсат – Оло сәбәпте, Сығанаҡты белеү. Уның принцибын, ҡанундарын аңлау, ҡабул итеү һәм ситкә тайпылмаҫ, яңылыш китмәҫ өсөн шул бөйөк Программа буйынса йәшәү.

Ошо ерҙә “Ниңә дин ҡушҡанса йәшәргә кәрәк һуң?” тигән тәбиғи һорау тыуа. Был һорау быуаттар буйы бөтә кешелекте борсоған һәм борсой. Үҙем теләгәнсә генә йәшәһәм ярамаймы ни?

Инде күп ғалимдар иҫбат итеүенсә, барса матди һәм рухи донъя хаос рәүешендә көн күрмәй, ә Оло программа ҡушҡанса хәрәкәт итә, алға бара, үҫешә. Кешенең рухы ошо мәңгелек Программаға туранан-тура бәйләнгән һәм һәр саҡ нисек йәшәргә кәрәклеген белә. Ә әҙәм балаһының тәне, ҡыҙғаныуға ҡаршы, ваҡытлы матди донъяға йәбешеп һәм алданып, ваҡытлыса әйберҙәр өсөн генә йәшәй башлай. Сөнки кеше тәне үҙенең биш тойоу ағзалары (аҡыл, ашҡаҙан, шулай уҡ күреү, ишетеү һәм енси ағза) тарафынан ауыр сынйырҙар менән матди донъяға бәйләнгән, беркетелгән. Был сынйырҙы өҙөү, йәғни ярһыған ат кеүек ашҡынған ошо ағзаларҙы тыйыу, уларҙы туҡтатыу уғата ауыр. Әммә уларҙы тыя алған саҡта ғына беҙ үҙебеҙ төп мәғәнәбеҙҙе – Йәнебеҙҙе тойоуға өлгәшә алабыҙ. Ундай мөмкинселек, һәләт һәр кемгә бирелмәгәндер. Ләкин законды белмәйенсә закон боҙоусы – барыбер енәйәтсе. Был енәйәт – Оло программанан ситкә тайпылыу, үҙ йәнеңде онотоу, ишетмәү, үлтереү. Шуға ла бит бар рухани китаптар тойоу ағзаларыбыҙҙы бәйләп ҡуйырға тырыша, матди нәмәләргә (байлыҡҡа, данға, нәфрәткә, тәмле ашауға, енси бәйһеҙлеккә һ.б.) йәбешмәҫкә, мәңгелек рухи донъя хаҡында уйларға һәм йәшәргә ҡуша. Был – бик ауыр. Быны аңларға, быға бөтә йөрәгең менән ышанырға кәрәк. Шул саҡта ғына кеше йәне менән дә, тәне менән дә оло бәхет тойғоһо кисерә. Ана шуны халыҡҡа еткереү менән мәшғүл дә инде донъялағы бар дин әһелдәре.

Мин дә мәҡәләләремдә ошо хаҡта һөйләргә тырыштым. Әгәр ошо яҙмаларым йөрәгегеҙҙә рухи осҡон тыуҙыра, Аллаға яҡынайта икән, әгәр күңелегеҙҙә “Дин” тигән Оло фәнде ныҡлап өйрәнеү теләге уята икән, тимәк, һеҙ ҙә, мин дә дөрөҫ юлда, ҡәҙерле дуҫтар.

## “Ағиҙел”дә ҡунаҡта – Ҡалмыҡстан әҙиптәре

**Эрдни ЭЛЬДЫШЕВ,**
**Ҡалмыкстан Республикаһы Яҙыусылар союзы рәйесе**

### Йыр уятҡын беҙҙең дуҫлыҡ

*Боронғо ата-бабаларыбыҙ — ойрат ҡәбиләләре беҙҙең эраның VIII быуатынан бирле тарихҡа билдәле, һуңға-раҡ ошо ҡәбиләләр союзы Сыңғыҙ хан империяһы составына ингән. XIV быуат аҙағында, монголдарҙың хакимлығы бөтө-рөлгәс, ойраттар үҙ аллы биләмәләрҙә йәшәй, 1609 йылдан иһә, Рәсәй дәүләтенә ҡушылып, Волга буйында Ҡалмыҡ хан-лығы ойоштора. Улар уртаҡ Ватан — Рәсәйҙе яҡлап сит ил баҫҡынсыларына ҡаршы ҡыйыу һуғыша. Мәғлүм ки, Емельян Пугачев етәкселегендәге халыҡ күтәрелешендә башҡорт-тар менән бергә ҡалмыҡтар ҙа айбарлы ҡатнаша. Пугачевтың иң яҡын ярандары — башҡорт Салауат Юлаев менән ҡалмыҡ Федор Дербетовтың яҙмышын беҙҙең далалы илдә яҡшы беләләр.*

*Милли әҙәбиәтебеҙҙең үҫеше халыҡ яҙмышынан айырыл-ғыһыҙ. Һәр дәүерҙә ҡалмыҡ әҙиптәре үҙҙәренең ижадында әллә нисәмә быуындың камил образын тыуҙырҙы, халыҡ рухиәтен сағыу кәүҙәләндерҙе. Шиғриәтебеҙ иһә үҙ тамыр-ҙары менән ауыҙ-тел ижадынан һут ала, әкиәттәр, мәҡәл-дәр һәм халыҡ йырҙары менән тығыҙ үрелеп, күңелдәрҙе елкендерә. Ә «Джангар» тигән героик эпосыбыҙ — ул поэзия-быҙ йондоҙо, быуаттарҙан быуаттарға һуҙылған илһамлы йөрәк тибеше.*

*Бөйөк рус шағиры Александр Пушкин ғәзиз ватандашта-рыма байтаҡ шиғырҙарын арнаһа, Николай Гоголь иһә*

*«Ҡалмыҡтар» очеркында, һәр һоҡланғыс күренеш ҡалмыҡтарҙа йыр уята, тип теркәгән.*

*Тәүге шиғри өлгөләр бынан биш-алты быуат элек үк әҙәбиәтебеҙ, рухиәтебеҙ йылъяҙмаһында лайыҡлы урын алған. Беҙ әҙәби телебеҙгә нигеҙ һалыусы, мәшһүр дин әһеле һәм сәйәси эшмәкәр Зай-Пандита (1599 – 1662), революцияға тиклем йәшәгән мәшһүр шағирҙар Шамба Саджирхаев, Ончхан Джиргал, Боован Бадманың исемдәре менән хаҡлы ғорурланһаҡ, Баатр Басангов, Нимгир Манджиев, Санджи Каляев, Антон Амур-Санан кеүек шәхестәрҙе лә фольклорҙан яҙма әҙәбиәтебеҙгә нигеҙ һалыусылар тип иҫәпләйбеҙ.*

*Егерменсе быуат ҡалмыҡ халҡы өсөн аяуһыҙ һынауҙар осоро булды. Беренсе Бөтә донъя һуғышы, Граждандар һуғышы, утыҙынсы йылдарҙағы сәйәси репрессиялар, Бөйөк Ватан һуғышы беҙҙең ныҡлыҡты һәм тоғролоҡто күрһәтте. 1943 йылдың һалҡын декабрендә ҡалмыҡ халҡы, нахаҡ хыянатта ғәйепләнеп, Себер, Алыҫ Көнсығыш һәм Төньяҡ сиктәренә депортацияланды. Шул арҡала милләтебеҙ бихисап аҫыл улдарын һәм ҡыҙҙарын юғалтты. Шәфҡәтһеҙ афәт ижади интеллигенциябыҙҙы ла урап үтмәне. Даван Гаря, Лиджи Карвин, Гаря Шалбуров кеүек талантарыбыҙ әҙәби процестан оҙайлы ваҡытҡа ситләтелде, рәнйетелде.*

*Ҡалмыҡтар 13 йылға һуҙылған һөргөндән йәнтөйәгебеҙгә ҡайтҡас, Давид Кугультинов, Басанг Дорджиев, Лиджа Инджиев, Егор Буджалов, Бося Сангаджиева, Алексей Бадмаев, Морходжа Нармаев, Алексей Балакаев кеүек мәшһүр остаздарыбыҙ ижады киң танылыу яулаша. Әлбиттә, әҙәбиәтебеҙҙең иң оло ҡаҙаныштары егерменсе быуаттың мәшһүр шағиры Давид Кугультинов исеме менән ныҡ бәйле. Давид Кугультинов менән Мостай Кәримдең дуҫлығы ысын мәғәнәһендә ҡалмыҡ һәм башҡорт халыҡтарының туғанлыҡ символы һанала.*

*Эйе, әҙиптәребеҙ заманалар ағышына байтаҡ һуҙ сәнғәте менән баһа бирәсәк даими итә. Был фекерҙе, моғайын, һеҙҙең иғтибарығыҙға тәҡдим ителгән сәсмә әҫәрҙәребеҙ, шиғри шәлкемдәребеҙ ҙә ҡеуәтләр, тип өмөтләнәм һәм, форсаттан файҙаланып, һәммәгеҙгә лә иң яҡшы теләктәр күндерәм.*



**Эрдни**
**ЭЛЬДЫШЕВ,**
Ҡалмыҡстандың халыҡ шағиры

## *Әсә кәңәше*

*Эҫенән көйә, сатнай ер —*
*Баҡсаңды һуғар,*
*Көҙ уңышҡа тейенерһең —*
*Йортҡа ҡот ҡунар.*

*Йонсоу юлсы саңын ҡаға —*
*Сыҡ, атын туғар,*
*Бүлеш тоҙ, икмәгең менән —*
*Йортҡа ҡот ҡунар.*

*Һары таңдан ҡош уянған —*
*Күңелең тулар,*
*Алдарына һин емдәр һип —*
*Йортҡа ҡот ҡунар.*

*Олатайың, өләсәйең*
*Һине мең һынар,*
*Һөтлө сәйеңде хәстәрлә —*
*Йортҡа ҡот ҡунар!*

## *Көҙ*

*Эй, әрһеҙ ел япраҡтарҙы йолҡа*
*Яҡлаусыһыҙ ҡалған ағастарҙан.*
*Көнө килгән елдең —*
*пыр туҙына,*
*Ҡоторонһон —*
*ҡеүәт әле тамырҙарҙа.*

---

*Эльдышев Эрдни Антонович (1959) Ҡалмыҡстандың Йәшкүл ҡасабаһында тыуған. Тиҫтәгә яҡын шиғыр йыйынтыҡтары авторы. Тәржемә менән дә шөғөлләнә. Төбәк-ара, халыҡ-ара премиялар лауреаты.*

*Республиканың Яҙыусылар берлеге идараһы рәйесе.*

*Ботаҡтар һығыла, шығырҙай үҙәк,*
*Олон да ҡарайған ямғырҙан.*
*Әйҙә, енләнһен ел,*
*тамыр ял иткәндә*
*Яҙға тиклем*
*тулаһын*
*ярһыуҙан.*

*Яҙын тамырҙар уяныр,*
*Ботаҡҡа йүгерер һут.*
*Тамырҙар әле көс йыя,*
*Елдәргә әле кәртә юҡ.*

## Һүҙ һәм ҡылыс

*Батырға янаны ҡылыс ҡындан:*
*— Айырырмын башыңды яурыныңдан!*
*— Йомшаҡтарҙан түгел батыр —*
*баҙап ҡалмаҫ:*
*Һыуҙа юғалырлыҡ түгел,*
*утта янмаҫ.*

*Ҡылысын да, кәрәк икән,*
*алыр тартып...*
*Тик ниңәлер*
*һүҙ алдында*
*ҡалды ҡатып.*
*Һүҙ көслөрәк икән ҡылыстарҙан —*
*Оса баштар яҫы яурындарҙан...*

## Дуҫҡа

*Һары һағыштан түҙалмай*
*Килер булһаң яныма,*
*Икеләнмә —*
*байрам булып*
*Сығырмын мин ҡаршыңа.*

*Бәлә менән бармайым тип,*
*Ауырлыҡтар һалмайым тип,*
*Шулай уҡ һин туҡталма!*
*Ғәйеплемен, тип уйлармын —*
*Ҡанатлы Аҡбуҙатыңдың*
*Дағалары ҡупҡанға.*

## Ҡылған моңо

*Сикһеҙ дала. Ҡылған йырлай.*
*Өҙөлөрҙәй ҡыл сыңлай.*
*Ҡошо, еле, үләндәре*
*Дала йөрәген тыңлай.*
*Был моң аша ишетерһең*

*Үткәндәрҙең һағышын.*
*Ата-бабаларың яҙған*
*Был далаға яҙмышын.*

*Ҡылған йырлай,*
*иғтибарла:*
*Сал тарих аса битен.*
*Аңларһың —*
*кисәгең менән*
*Бөгөнөң бит бер бөтөн.*

*Иғтибарла:*
*ниҙән икән*
*Был ҡылғандар салланған,*
*Бейек тау түбәләреләй*
*Имшемәҫкә ағарған.*

*Ҡылған йырлай...*
*Йә, ниндәй моң*
*Уның менән тиңләшер?!.*
*Был моңдо аңлай алғанға*
*Тәңре бәхет өләшер.*

## Бәхәс

*Еңер өсөн генә һеҙҙе*
*Был бәхәсте ҡорманым.*
*Үҙемдекен һүҙ итеүҙе*
*Маҡсат итеп ҡуйманым.*

*Өмөтләндем:*
*тел көрәше*
*Хәҡиҡәтте асыр, тип,*
*Бары тик хәҡиҡәт уты*
*Баш осонда яныр, тип.*

*Беҙ уны һүндермәҫ инек*
*Төкөрөктәрҙе сәсеп,*
*Яҡтылығын башҡаларға*
*Сығыр инек өләшеп.*
*Әммә һеҙ ҡыҙыу бәхәстән*
*Ҡурҡтығыҙ,*
*тайшандығыҙ...*
*Еңелеү хурлығынанмы,*
*Төндәнме*
*айбандығыҙ.*
*Аңланым:*
*һеҙҙең бар ниәт —*
*Хәҡиҡәт түгел икән.*
*Һеҙҙәге «мин-мин»лек сире*
*Ерҙән күктәргә еткән.*

*Олоғара йәшегеҙҙе*
*Һөңгө лә ҡалҡан итеп,*
*Бөтә сиктәрҙе лә үтеп,*
*Ярлау ситенә етеп,*
*Уҙындығыҙ...*
*Ут һүрелде...*
*Усаҡта ҡара күмер.*
*Ә тегендә һорарҙар бит:*
*Нисек йәшәлде ғүмер?*

## Йыр тыуыуы

*Йырым әле өлгөрмәгән тыуып,*
*Әммә миндә йәшәй башлаған ул,*
*Таңғы татлы йоҡоларҙы ҡыуып,*
*Көндө ҡаршыларға атлыға ул.*

*Йырым әле өлгөрмәгән тыуып,*
*Әммә йәшәй ҡыҙҙар ҡарашында,*
*Тулҡынып та яр ҡуйынын йыуып,*
*Юғала ул ҡамыш араһында.*

*Йырым әле өлгөрмәгән тыуып,*
*Әммә яңы көндө ҡаршы ала,*
*Күңелдәргә йәйғор-күпер һуҙып,*
*Болот аша ҡояш булып яна.*

*Йырым әле өлгөрмәгән тыуып,*
*Усағымдың осҡондары кеүек,*
*Берсә һүнә ҡараңғылыҡ ҡосоп,*
*Берсә оса йондоҙҙарҙай бейек.*

*Ыжғыр ҡыштың ауыр бауырында*
*Миңә улар яҙҙы яҡынайтыр,*
*Бурандарҙа көрттәр ярғанымда*
*Йәшел сәхрәләргә алып ҡайтыр —*

*Йырым әле тыуып өлгөрмәгән,*
*Әммә ҡанаттары киң яҙылған!..*

## Әрем

*Бар үҫемлек араһынан миңә*
*Далам күрке —*
*әрем ҡәҙерлерәк.*
*Уның еҫен елдәр килтергәндә*
*Дала иңләп атлығалыр йөрәк.*
*Даламдың ул һуттарынан тыуған,*
*Таңғы ысығында йыуылған.*
*Тәме уның онотоулоҡ түгел,*
*Ер тарихы уға уйылған.*

*Уның төҫө сал даламды биҙәй,*
*Ҡурәм уны алыҫ-алыҫтан.*
*Унда, ахры, быуат-быуат аша*
*Быуын-быуын халҡым ҡауышҡан.*

## Доға мәле

*Доғалар мәле тип,*
*алһыу таңда*
*Ап-аҡ ниәт-уйҙар менән теҙләнегеҙ.*
*Тән сигенеп, көндәр балҡығанда,*
*Яҡшылыҡҡа ғына булһын теләгегеҙ.*

*Һорағыҙ, рухына, тип, әруахтарҙың,*
*Яҡтыртығыҙ хәтерегеҙ ыҙандарын.*
*Йөрәктәрҙең асып ете йоҙаҡтарын,*
*Ҡабатлағыҙ изгеләрен доғаларҙың.*

*Ҡаршыһында тубыҡланып,*
*аҡһаҡалдан*
*Алығыҙ фатихаһын тәҡүәле.*
*Тартынмағыҙ тантаналы ауаздарҙан:*
*Доға мәле —*
*ғәфү үтенеүҙәр мәле...*

## Йәшәйем!

*Яурындарымды баҫҡанда*
*Ҡара-һоро болоттар,*
*Эҙәрлекләгән уйҙарҙан*
*Булмаһа ҡотолоптар;*
*Килеп упҡын эргәһенә*
*Ҡалғас һуңғы бер аҙым,*
*«Был хәлдәрҙә йәшәгәнсә...»*
*... Яңғырарҙыр йырҙарың.*
*Тойоп йылы ҡарашыңды,*
*Ҡулымды һиңә һоноп,*
*Ишетермен тауышыңды:*
*«Ҡояшың килә сығып...»*
*Һиңә генә ышанғанға,*
*Һиңә йөрәк асҡанға —*
*Бысраҡлыҡтар упҡынынан*
*Ашырырһың асманға.*
*Ҡотҡарғанға, арбағанға*
*Һөйөү-тылсымың менән —*
*Күтәреләм ҡояшыма:*
*Мин — йәшәйем! Мин — еңәм!*

**Фәнил КҮЗБӘКОВ** тәржемәләре.



**Владимир**
**НУРОВ,**
*Ҡалмыҡстандың халыҡ шағиры*

## *Барыҫ йылы*

*Барыҫ билдәһендә — тыуған йылым,*
*Бар булмышым уға бәйләнгән.*
*Барыҫ миңә — ҵрнәк ҡыйыулыҡта,*
*Дуҫлыҡ баһаһына әйләнгән.*

*Быуаттарҙан килә инаныуҙар*
*Был оһолло, көслө бесәйгә.*
*Тик ул яҡлар, әгәр Йортоғоҙҙа*
*Хөсөт, ҡаза, сирҙәр көсәйһә.*

*Барыҫ билдәһендә тыуғандарға*
*Ҡаһарманлыҡ хастыр ғүмергә.*
*Намыҫ өсөн улар яуға сығыр,*
*Намыҫ өсөн яуҙа үлерҙәр.*

*Туғанлыҡҡа улар һәр саҡ тоғро.*
*Улар өсөн ғүмер йәл түгел.*
*Аҡылдары — алсаҡ, уйҙары — саф,*
*Барыҫтарҙа — хисле, киң күңел.*

*Улым!*
*Ейәндәрем!*
*Яҡындарым!*
*Ауырлыҡтарҙан һеҙ ҡурҡмағыҙ.*
*Бирешмәгеҙ, Барыҫ балалары!*
*Сәләм менән: барыҫ атағыҙ.*

## *Баласаҡ ҡояшы*

*Гел йәшәргә ине был тормошта*
*Тулып наҙға, тулып шатлыҡҡа.*

---

*Нуров Владимир (1938) Ҡалмыҡ АССР-ның Приютнен районы Ульдючин ауылында тыуған. Ҡалмыҡстандың халыҡ шағиры. "Ҡояшлы ҡоҙоҡ", "Яҡты һын", "Йәшәү тамыры", "Атай йорто", "Йондоҙҙарҙан сағыуыраҡ" һ.б. китаптары менән киң билдәле. Күп шиғырҙары рус теленә тәржемә ителгән, украин, үзбәк, төркмән, тажиҡ, бурят телдәрендә баҫылғаны бар.*

*Ауыр саҡта, көс-ҡеүәттәр өҫтәп,*
*Баласаҡ ҡояшы яҡтырта.*

*Күптән аңланым мин: был ҡояшты*
*Әсәм бүләк иткән ҡәҙерләп.*
*Алтын-көмөш балҡышынан сағыу*
*Әсәм үҫтәлеге хәҙер ҙә.*

*Барлыҡ бүләктәрҙән ҡиммәтерәк*
*Өйгә кергән алма еҫтәре.*
*Көрттәр йырып килгән салт яҙҙарҙы,*
*Күңел байрамдарын иҫләрмен.*

*Әсәм йөҙө — йөрәк түрҙәрендә,*
*Дала киңлегендәй яп-яҡты.*
*Көндәр болотлаһа, иҫкә алам*
*Бала саҡтан ҡалған ҡояшты.*

## *Икенсе әсәм*

*Уға әсәй тиеү гонаһтыр ҙа*
*Үҙ әсәйем иҫән сағында.*
*Шундай яҡын, ғәзиз уҡытыусым —*
*Нисек өндәшәйем тағын да?!*

*Мин аслыҡтан аяҡ һуҙыр мәлдә*
*Ярҙам ҡулы һуҙҙы, һиҙенеп:*
*"Китап-дәфтәрҙәрҙе өйгә тиклем*
*Илтеш әле миңә" , — тине ул.*

*Ә өйөндә, йәнә һылтау табып,*
*Тәмле картуф менән һыйланы.*
*Аслыҡтанмы, яҡын йән тойопмы —*
*Һыйҙан баш тартырға ҡыйманым.*

*Ул бит таныштырҙы Пушкин менән,*
*Шиғриәткә һуҡмаҡ һалдырҙы.*
*Уҡытыусым — рус әсәйем минең —*
*Юлдарымда маяҡ яндырҙы.*



Александр
СОЛОВЬЕВ

# ӘҘӘМ МЕНӘН ҺАУА

## *1. Әҙәм*

*Уң ҡулымдың Тигры менән һәм дә*
*Һулындағы Евфрат араһында,*
*Оло һөйөү батшалығы төҫлө,*
*Урын алғанһың һин, Һауа!*

*Беҙ икебеҙ, ҡушып тәндәребеҙ,*
*Йәндәребеҙ, —*
*Ләззәт татыныҡ.*
*Йылан беҙгә шыбырҙаған һүҙҙән*
*Аңҡый әшәкелек һалҡыны.*

*Тыйылғанды тәмләгәнгә генә,*
*Юҡ, ожмахтан Алла ҡыуманы:*
*Ул бит үҙе һөйөү татыманы,*
*Ни ир кеше, шағир булманы!*

*Шуға ғына ул нәфрәт сәсте,*
*Ғазап тирмәндәрен геүләтте.*
*Ул бит — беҙҙән, беҙҙең ҙур һөйөүҙән,*
*Ләззәттәрҙән беҙҙең көнләште!*

*Уң ҡулымдың Тигры менән һәм дә*
*Һулындағы Евфрат араһында —*
*Бала-саға, ҡыҙҙар, йәштәр, ҡарттар, —*
*Һауа-Әсә тапҡан барыһын да!*

## *2. Һауа*

*Ҡабырғаңдан һинең яралғанмын,*
*Бер яраңмын тәнең өҫтөндә.*
*Мин кисә лә, бөгөн, иртәгә лә*
*Һиңә генә оҡшар төҫөмдә.*

*Мин — емеше һинең аҡылыңдың,*
*Мөғжизә мин, сисмәҫ йомаҡмын.*

---

*Соловьев Александр Анатольевич — билдәле астрофизик, физика-математика фәндәре докторы, шағир, тәржемәсе. "Һибелеп ята йондоҙҙар", "Ер йондоҙнамәһе" исемле китаптар авторы. Ҡалмыҡстандың халыҡ шағирҙары Д. Кугультинов, Э. Эльдышев, С. Каляев, Е. Буджалов, В. Нуров һәм башҡаларҙың әҫәрҙәрен руссаға тәржемә итте һәм итә.*

*Сиселеше бары миндә генә, —*
*Мәңге асылмаҫтай һымаҡмын.*

*Ғазаптарҙа бала табам икән,*
*Ҡурҡыуҙар юҡ һыҙлау, үлемдән.*
*Ҙур Мөхәббәт, ғәфү итә белеү*
*Бөтә булмышыма үрелгән.*

*Шайтан түгел, хатта, Алла үҙе*
*Ошо сифаттарым алалмай.*
*Гонаһтарым, ояттарым өсөн*
*Хөкөмдәргә һис кем һалалмай.*

*Һуңғы һулыш алған саҡта һәр кем*
*Әсәкәйен, үҫләп, саҡыра.*
*Һәр бер балам менән йәнем үлә,*
*Йәнем һыҙып яңа ялҡында.*

*Һыҙланһа ла, ҡабат терелә ул —*
*Ҡуласалар килә теҙелеп.*
*Ер ҡатыны бала таба икән,*
*Һөйөү — йәшәй, Һөйөү — мәңгелек!*

## ***Һөйөү ағасы***

*Һылтау эҙләмәйем шиғыр өсөн,*
*Һүҙҙәр менән генә шаярам.*
*Бер шаҡылдап, берсә ғазапланып,*
*Һөйөү ағасынан иплән кенә*
*Һутлы емештәрҙе ҡайырам.*

*Шул ағастың ботаҡ ышығына*
*Бик һирәкләп килеп һыйынам.*
*Ел-дауылдан өшөп килгәнемдә,*
*Йәнем өҙләккәндә ғазаптарҙан*
*Шул ҡыуышҡа инеп йылынам.*

*Һыйынам да Һөйөү ағасына,*
*Йәшлек йылъяҙмаһын тәҫләйем.*
*Яҡындарҙы, ғәзиз күргәндәрҙе,*
*Мәңге ҡайтмаҫ татлы ул мәлдәрҙе*
*Һағыш ҡатыш наҙлап иҫләйем...*

**Рәмил ЙӘНБӘК тәржемәләре.**



## Алексей **СКАКУНОВ**

### Ҡалмыҡ ҡыҙы

*Нескә ҡыяҡтарҙа янъан*
*Уттай ысыҡ тамсыһымы, —*
*Айҙай яҡты йөҙҙәреңдә*
*Күҙҙәреңдең бар тылсымы...*
*Уларҙа ни ҡабынъанын*
*Аңлап ҡара, һанлап ҡара,*
*Осҡондары йәнде өтөп,*
*Уттай ъына ялмап бара!*
*Йылъа бәүелгәндәй унда,*
*Тулҡын ҡаъып ярҙарына.*
*Йондоҙ эйелгәндәй шул саҡ*
*Ергә, ҡалмыҡ ҡыҙҙарына!*
*Күңелдең нескә ҡылынан*
*Аъылъандай гәлсәр сыңы.*
*Арбалъандай ошо уттан,*
*Һоҡланыуҙан ҡалам тынһыҙ.*
*Томанлы юлда баҙлаъан*
*Балҡышымы алыҫ уттың —*
*Иңбашының һыҙаттары,*
*Татлы ирененең һуты*
*Ала инде, ала һушты!*

### Үлемесле сым

*Бер төркөм һалдат сылбыры, ара һаҡлап теүәл,*
*Ҡомташ буйлап үрмәләнек үргә табан йәйәү.*
*Аҫҡа тәгәрәгән таштың шаңдаҡтары ъына*
*Кемдер бында йөрөгәнен аңъарта ла тына.*
*Мамыҡ кеүек ҡуйы томан тын алышын быуа,*
*Ялҡытҡыс ямъыр тамсыһы беҙҙе арттан ҡыуа.*
*Һалдаттар, шайтанды һүгеп, ынтылалар алъа,*
*Кейгән кейемдәре еүеш, аъыр, һыъып алһа.*

---

*Скакунов Алексей Андреевич (1941) — шағир, Рәсәй Яҙыусылар союзы ағзаһы. Ростов өлкәһе Сальск районы Гигант ҡасабаһында тыуған. Ростов дәүләт университетын тамамлай. Тарих һәм йәмғиәтте өйрәнеү фәндәренән уҡыта. "Көмөш ялдар", "Офоҡ артына ҡарау" һ.б. шиғри йыйынтыҡтар авторы.*

*Элиста ҡалаһында йәшәй.*

*Ҡан тамыры сикәләрҙә тумыртҡалай һуъа.*
*Кемдер алда йыъылдымы, аъас ауып юлъа?*
*Яңъыраны шул саҡ кинәт ауыр, оҙон шартлау.*
*Ҡаны менән һуъарылъан уләндәрҙән яҡлау*
*Эҙләгәндәй ауҙы сержант, эләктереп бауҙы,*
*Шәйләмәйсә томанлыҡта шартлатҡыслы ауҙы.*
*Аһ, Алеха, хәйерһеҙгә яҙмыш ҡушыуы шул.*
*Баһадирҙай, таш ҡосаҡлап, һуҙылып ятты бит ул.*
*Әйтерһең дә, күңелдәге һыҙлауыҡтың утын*
*Саҡматаштар менән һыъып сыъаръандай ул тын.*
*Ҡан көҫәп шарҡылдай шаңдаҡ Ведено янында,*
*Таш ҡосаҡлап ята һалдат. Томан ҡуйы бында...*

## Ҡышҡы иртә

*Бөҙрәләтә бәҫен ерektәрҙең,*
*Юлдарына көмөш һирпә лә.*
*Ергенигә* йәйә зәңгәр кейеҙ*
*Ыуыҙ ъына таңъы иртәлә.*

*Ап-аҡ ҡаръа ерҙе урай торъас,*
*Ауыл көртҡә сума аҙаҡтан.*
*Эт өргәне, йәш ҡар шыъырҙауы...*
*Йорттар йоҡомһорай. Ата таң.*

*Тик әтәстәр генә тыйылалмай —*
*Йыр һуҙалар ҡышҡы иртәлә.*
*Ике ҡалмыҡ ҡыҙы һыуъа сыҡҡан,*
*Тауыштары ҡолаҡ иркәләй.*

*Алыҫ аҙбарҙаъы ҡаҙ уяна,*
*Ҡаңъыр-ҡоңъор ъына тауышы.*
*Башҡалары уъа яуап бирә,*
*Яңъырау килә ҡарҙан шыуышып.*

*Ерек ышыъынан ҡарай ҙа ул*
*Күҙ тултырып зәңгәр тәҙрә аша,*
*Мөрйәләрҙән сыҡҡан төтөн менән*
*Алһыу офоҡтаръа тоташа.*

***

*Был үҙе аҡыл түгелме,*
*Бер рәхмәте Аллаһтың —*
*Яландарҙы уйһыҙ гиҙеү,*
*Киң һулап алыуың тын.*

---

*Ергени — Ҡалмыҡстандағы ҡалҡыулыҡ.

*Мәшәҡәттәрҙе онотоп,*
*Һелтәп барыһына ҡул,*
*Ҡем икәнеңә ҡарамай,*
*Ниндәй дәрәжәлә бул, —*
*Былай ғына, ялан аяҡ,*
*Ынйы кеҫек ысыҡтан*
*Ялан аша атлап уҙыу*
*Ипләп кенә, ашыҡмай.*
*Ҡушылыу бар хисең менән,*
*Уйыңда түгел, ысын.*
*Үҙеңде мөъжизә итеп*
*Тойоуҙа барлыҡ тылсым.*
*Зәңгәрлеккә сумырға ла*
*Һуларға үлән еҫен...*
*Иңкеш, бал ҡорто, ҡуңғыҙҙар*
*Йыр башлар һинең өсөн.*
*Дала турғайын ишетеү,*
*Саңҡыуын күктә бөркөт;*
*Ҡапыл күккә атылыуын*
*Бүҙәнә ҡоштоң өркөп;*
*Монарҙа ҡырҙар ирееүен,*
*Офоҡтоң балланыуын;*
*Дала һылыуы ләләнең*
*Сикәһе алланыуын;*
*Елберҙәүен сал ҡылғандың*
*Таш ҡорғанды уратып;*
*Бормаланып ятҡан юлдар*
*Ятыуын саң борлатып...*
*Даламдың еҫ, тауыштары*
*Яғыла май балындай,*
*Күңелдән йырым урғыла,*
*Күңелдә һис моң тынмай.*
*Донъяла юҡ даламдан да*
*Ҡәҙерле, һөйкөмлөһө.*
*Йәйрәп ята ҡолас йәйеп,*
*Далам — күңел күҙгөһө.*

## Үлемһеҙлек яланы

*Был яландан изге һуғыштан һуң*
*Үтмәгән һис һабан төрәне.*
*Һәр аҙымда бында әсе һыҙлау*
*Семтеп ала кеше йөрәген.*
*Тынлыҡтарға ҡолаҡ һалып торсо:*
*Бер ус тупраҡ һөйләр ни хаҡта?*
*Сәскә булып балҡый был аҡланда*

*Изге яуҙа үлгән һалдаттар.*
*Зәңгәр ҡыңғырауҙар, ҡағып сыңын,*
*Елдәр аша хәбәр һалғаны;*
*Йөҙәрләгән һалдат ҡырҡ өстә*
*Тимер танк аҫтында ҡалғаны;*
*Төп һөжүмдең иғтибарын алып,*
*Дошман көсөн ҡуйып көрсөккә,*
*Йөҙәрләгән һалдат ҡаны менән*
*Һуғарғайны уны ҡырҡ өстә.*
*Тыңһеҙ яуҙа йәне ҡыйылғандың*
*Сәстәреме ошо сал ҡылған?*
*Ғорур ҡарап баҫҡан мәктәр бында*
*Мәңгелек ут булып тоҡанған.*
*Эй ҙә башың, тындар ҡалып тыңла*
*Ер-Әсәнең тәрән хәсрәтен.*
*Шәһиттәрҙең йәне тапҡан тынғы,*
*Шул яуҙарҙың ҡаплап дәһшәтен.*

**Гөлназ ҠОТОЕВА тәржемәләре.**

---



**Николай**
**САНДЖИЕВ**

## *Туған тел*

*Ҡалмыҡ теле. Яғымлы һәм моңло.*
*Күкрәгемә тулған һауалай.*
*Сихри ялҡын кеүек йәнде арбап,*
*Йөрәгемде имләп дауалай.*

*Һөйәм уны йәнем-тәнем менән.*
*Ҡыҫа биреберәк күҙемде,*
*Бойҙай бөртөгөләй сүпләп алам*
*Мәғәнәле һәр бер һүҙеңде.*

*Йөрәгемә һеңер хазинаны*
*Тауҙар аҡтарғандай табамын.*

---

*Санджиев Николай Джамбулович (1956) — шағир, прозаик, культурология фәндәре кандидаты, ҠДУ доценты. Балалар өсөн алты шиғри йыйынтыҡ, ике проза китабы авторы. Рәсәй Яҙыусылар союзының Ҡалмыҡ региональ бүлеге рәйесе, Рәсәй Федерацияһы Яҙыусылар союзы секретары. Ҡалмыҡстан Республикаһының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Монголияның атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.*

*Был һүҙҙәрҙә сикһеҙ ҡөҙрәт ята,*
*Рухы һеңгән ата-бабаның.*

*Яҙмыш, бәлки, сабырлығым өсөн,*
*Атландырып илһам атына,*
*Бүләк итер миңә ҡорос сыңлы,*
*Моңло бер йыр телем хаҡында.*

** *

*Күк йөҙө ҡыҙып,*
*Ҡыҙара бара.*
*Гүйә, офоҡҡа*
*Ҡул һуҙыр ара.*

*Тағы атлайһың,*
*Ул артҡа күсә.*
*Тала аяҡтар,*
*Ышҡыла үксә.*

*Барып етергә*
*Өмөт һүрелмәй.*
*Тик бына юлдың*
*Осо күренмәй...*

*Һин дә, уҡыусым,*
*Уйлап ҡуяһың:*
*«Бик еңел генә*
*Шиғыр ҡояһың».*

*Атлаһаң әгәр*
*Һүҙҙәр эҙенән,*
*Бараң далала,*
*Сарсап эҫенән.*

* * *

*Дуҫым, әгәр ат менергә булһаң,*
*Өҙәңгеңде ҡара яҡшылап.*
*Ныҡ булмаһа улар, сыбыртҡылай,*
*Ятасаҡһың саңда һин тулап.*

* * *

*Ҡороҡ ташлаһаң, шуны бел:*
*Ҡул көсө кәрәк.*
*Тик арбаға ат егергә*
*Кәрәк йомшаҡ  йөрәк.*



## Василий ЧОНГОНОВ

* * *

*Далам минең! Алтын, һары далам,*
*Йәшәй алмам һинһеҙ бер көн дә.*
*Киңлегеңә йәнем ынтылыуын*
*Ауыҙлыҡлау түгел иркемдә.*

*Тирбәлгәндә ҡылған толомдары*
*Йөрәгемдә елен тоямын.*
*Һәм моңло көй ағылғандай була*
*Өйөр баҫҡан саҡта тояғын.*

*Үҙем менән бер ни ҡыла алмам —*
*Мин әсирең булып йәшәйем.*
*Һөйгән далам! Аҡһыл далам минең,*
*Гүйә, һин сал сәсле әсәйем.*

* * *

*Йән өшөмәй мәңгелек ҡарашынан.*
*Мин йәшәйем. Үлдем. Йәшәйем...*
*Мәңге ҡабатланған был сылбырҙа*
*Ҡатнашмаҫҡа етмәй көскәйем.*

*Үткән юлдарымда сәйер бушлыҡ,*
*Йөрәгем саф, донъя бысраҡ.*
*Ҡайһы саҡта сәбәпһеҙгә көләм,*
*Үкһеп илайым мин ҡайһы саҡ.*

*Үҙемде мин аҙашҡандай тоям,*
*Ҡарурманға, гүйә, тарыным.*
*Минең менән һуҡыр күләгә тик,*
*Аһ, унан мин шундай арыным!*

*Ҡасҡым килә ығы-зығыларҙан.*
*Мин далаға килдем.*
*Ә бында*
*Ҡойон шаша, әйтерһең дә, шаман*
*Рух саҡыра барабанында.*

*Һәм мин күрәм. Оноторлоҡ түгел,*
*Күҙ алдымда һаман һаҡлана:*

---

*Чонгонов Василий Баирович (1956) — шағир, тәржемәсе. Рәсәй Яҙыусылар союзы ағзаһы. "Далаларҙан башланам", "Сансарала сағылған йөҙ" һ. б. шиғри йыйынтыҡтар авторы.*

*Боронъоноң батыр яугирҙары*
*Ҡорал алып, атҡа атлана.*

*Улар рухы һис тә ҡурҡыу белмәй,*
*Үткәндәргә шаһит сал ҡылъан.*
*Ҡылыстары йәшен кеүек ялтлай,*
*Йәйә керештәре тартылъан.*

*Дала иңләп йырҙар осоп үтә:*
*— Дан көҫәмәй яугир уландар,*
*Сәскә атһын Ватан. Онотолмаҫ*
*Иле өсөн ҡорбан булъандар.*

*Был йырҙарҙа сикһеҙ ъорурлыҡ бар:*
*Шатлыҡ аъы, ҡайъы ҡараһы.*
*Аъылъанда был йыр, йөрәкһемәй*
*Нисек түҙһен дала балаһы!?*

*Бында ҡалам!..*
*Һинһеҙ йәшәй алмам мин, дала!*
*... Дөйә кеүек тауҙар, каруандай,*
*Мәңгелеккә табан юллана.*

* * *

*Сал сәстәрен ел иркенә ҡуйып,*
*Ниндәй уйъа сумъан ҡуръандар?*
*Бына таъы алыҫ араларъа*
*Һаъыш ебен һуҙа торналар.*

*Тиҙҙән, һары һаъыштаръа манып,*
*Байрам ҡорор ерҙә көҙ айы.*
*Иркен дала буйлап ел йүгерер,*
*Сапҡан кеүек йылъыр һыбайлы.*

*Ә әлегә күктең һалҡын тыны*
*Баҫыу киңлегенә йәйелә.*
*Көҙ һылыуҙың йылмайыуы булып*
*Кипкән үләндәрҙә бәҫ көлә.*

*Мин үҙем дә ошо дала кеүек:*
*Йырын тыңлап киткән торнаның,*
*Ҡуръан ситтәрендә, уйъа сумып,*
*Сал башымды эйеп торамын.*

**Салауат ӘБҮЗӘР тәржемәләре.**



**Валерий**
**ХОТЛИН**

## *Сығанаҡ*

*Өләсәйемә һәм Неизвестныйға*

*Ҡырҡ өс, декабрь... Һуғыш ҡыуалай*
*Йәлләдтәрҙе кире үҙ өңөнә.*
*Ә ҡалмыҡты Себергә һөрәләр,*
*«Күскенсе» тип, тыуған өйөнән.*
*Меңәрләгән ҡараш өнһөҙ һорай:*
*Нимә өсөн?!. Ниндәй гонаһ өсөн?!.*
*Яуап урынына елдәр йолҡа*
*Салғыйҙарҙы... Ҡандыралмай үсен...*
*Бушап ҡалған йорт алдары шыҡһыҙ —*
*Эттәр генә нигеҙ ташламаған;*
*Кешеләргә ышаныстар һүнеп,*
*Бүре булырға ла күп ҡалмаған.*
*«Күскенсе»не көтә билдәһеҙлек,*
*Йырып сығалмаҫлыҡ ҡарурман.*
*Һоро ҡом буранын алыштырыр*
*Еләктәргә үтер ҡар-буран.*
*Ҡырыҫ һаҡсыларҙың ым-ҡарашы*
*«Һатлыҡтар»ҙы телә бысаҡһыҙ.*
*«Һатылғандар» иһә ҡарт-ҡоро ла*
*Бала-саға менән ҡатын-ҡыҙ.*
*Мал вагоны...*
*Ҡаҡ таҡта һәндрәлә,*
*Тәне уттай, йыш-йыш һулай малай.*
*Әсәһенең эҫе күҙ йәшенән*
*Офоҡтарҙы ялҡын теле ялай.*
*Был ялҡынды Тәңре үҙе тойоп,*
*Оҙайтҡандыр сабый ғүмерен.*
*Өйләнер ул алсаҡ рус ҡыҙына, —*
*Барыһын мин аҙаҡ белермен.*

*Минең тамырҙарҙа улар ҡаны —*
*Урыҫ менән ҡалмыҡ ҡатышҡан;*

---

*Хотлин Валерий Германович (1951) Омскиҙа тыуған. Волгоград инженер-төҙөлөш институтын тамамлай. Шиғырҙары, хикәйәләре 1969 йылдан баҫыла. Пьесалар ҙа яҙа. Республиканың Драма һәм комедия театры директоры.*

*Шуғамылыр ике милләт берҙәй*
*Яҡын миңә, яҡын тыумыштан.*

*Теге убаға мин тағы барам, —*
*Хәтерҙәрем минең яңырыр.*
*Барам доғаларҙы ҡабатларға, —*
*Күңел асмандарым асылыр.*

*Ул убала, Неизвестный, һеҙҙең*
*Ижад иткән һынташ ҡалҡына...*
*Нисек бир(ә) алдығыҙ ғазаптарҙы,*
*Һалҡындарҙы төрөп ялҡынға?!.*
*Һеҙ, моғайын, ҡалмыҡ менән бергә*
*Йылытҡанһығыҙҙыр Себерҙе.*
*Унан алда, Сталинградты һаҡлап,*
*Ҡосҡанһығыҙҙыр ул туң ерҙе.*
*Тап шулайҙыр — бергә булғанһығыҙ,*
*Тойғанһығыҙ ҡалмыҡ тойғанды;*
*Халыҡ кисергәнде кисермәйсә*
*Ҡороп булмай былдай ҡурғанды.*

*... Йөрәгемдә ҡарт өләсәйемдең*
*Улы өсөн ялбарыуҙары.*
*Үҙе Себерҙәрҙә ятып ҡалған, —*
*Миндә иһә ут уртлауҙары.*

*Ул ҡурғанға тағы-тағы барам, —*
*Ейәндәрҙе алып янымa.*
*Барам доғаларҙы ҡабатларға,*
*Рухты нығытырға яңынан.*

## Олатайым, арғымағым...

*Арғымаҡлы булдым сабый саҡтан —*
*Олатайым киң күңелле ине.*
*Дөлдөлдө мин мираҫ итеп мендем —*
*Еталманы миңә дала еле.*

*Уларҙы мин мәңгелектер тинем,*
*Олатамды, теге йүгеректе—*
*Төштәремдә һәр саҡ саба инем,*
*Дала иңләп, һынап етеҙлекте.*

*...Себерҙә беҙ ун өс йыл йәшәнек:*
*Юрғам мине күтәп алалманы.*
*Арғымаҡ та, олатайым да юҡ —*
*Йөрәгемә уҡтар ҡаҙалғаны.*

*Тик шулай ҙа айлы төндәремдә*
*Арғымағым килеп ерҙе сапсый—*
*Сабый сафлығына хыянатһыҙ, —*
*Бышҡырыныуынан дуҫлыҡ аңҡый.*

*Осоп ҡына сығам, осоп ҡунам, —*
*Дөлдөлөмдөң һыйпап ебәк ялын,*
*Һәм осабыҙ бергә,*
*олатайға!*
*Аңғартырға уға ил-йорт хәлен...*

*Мин бит һеҙҙе үлемһеҙҙер тинем,*
*Арғымағым, олатайым минең!*
*Һеҙ булғанға донъям — тылсым ине.*
*Һеҙ барһығыҙ!*
*Төндө сығам имен...*

***

*Йөрәгемдә йәшәй Евразия,*
*Тымыҡ Дон һәм сабыр Ҡирүлән...*
*Күктәй зәңгәр, төндәй ҡара күҙҙәр*
*Әсир итте бер ҡат күреүҙән.*

*Эңерҙәрҙә, үткәндәргә ҡайтып,*
*Өйөргәндә йылҡы өйөрөн,*
*Ни йотолмай, ни кире лә сыҡмай*
*Тамағымда тора бер төйөн.*

*... Мин — яугирмын.*
*Ҡаған алғаҫҡыһы!..*
*Дала иңрәй... Уҙа яу-ҡойон...*
*Игеҙәк йән, ике Хоҙай, шайтан*
*Үтәй миндә яҙмыш ҡушыуын.*

*Рязань йыйған тимер дружиналар.*
*Ныҡытманың торам эсендә.*
*Дала яна, уты яҡыная, —*
*Бар(ы)һы бөгөнгөләй иҫемдә:*

*Үҙем менән күҙмә-күҙ ҡалғанмын, —*
*Атҡан уғым күкрәгемде тишә;*
*Ап-аҡ йөҙлө зәңгәр күҙҙе ҡосам, —*
*Ҡараҡайым иһә иҫкә төшә...*

*Яуҙарҙан һуң ете быуат үткән...*
*Ете быуат бер мәл генә икән!*
*Теге төйөр генә һис яҙылмай, —*
*Дала еле ике иҫмәй икән...*

*Бүлгеләнмәй, телгеләнмәй генә*
*Тула һауа иркен һулышыма.*
*Евразия!*
*Һин, бер бөтөн булып,*
*Ингәнһең бит минең булмышыма.*

***

*Прожекторҙар һүнә...*
*Ҡараңғы сәхнәлә*
*Алҡыштарҙың шауы баҫыла.*
*Актерҙар ҙа тыныслана бара —*
*Күңел пәрҙәләре тартыла.*

*Яуыздар ҙа, әүлиәләре лә*
*Бере-береһенә битараф.*
*Тотош ғүмер инде йәшәгәндәр —*
*Шәүләләргә ҡала бар тараф.*

*Тик күҙҙәрҙә генә осҡон яна —*
*Дөрләтерлек тормош усағын:*
*Сәхнәләргә яңынан сыҡһалар,*
*Бысаҡтарға килер бысағың.*

*Ә әлегә арыған йөҙҙәрҙә*
*Йәшәү һүнгән, көлгә күмелгән...*
*Әммә көл аҫтында ҡүҙҙар тере, —*
*Йөрәк уты унда төрөлгән.*

**Фәнил КҮЗБӘКОВ тәржемәләре.**



**Виктор**
**ПАПУЕВ**

## *Элегия*

*Асыҡ ҡына ҡыҙыл был ай,*
*Дәрәжәһен һис сайпылтмай,*
*Алыҫ диңгеҙ аша ҡалҡты,—*
*Ялтлап китте ҡая арты:*
*Тәҡдиренә күнеп кенә,*
*Яҙмышына ҡыумай кенә,*
*Япа-яңғыҙ, моңһоу ҡарап,*
*Диңгеҙ толомдарын тарап.*
*...Тырпайтҡан да тараҡтарын,*
*Тарай ҡая болот ялын,*
*Сиңерткәләр тынып ҡалған,*
*Йырсы ҡоштар йырлап талған,*
*Ҡарағай, шыршы, үләндәр —*
*Ҡараһыу төҫкә кергәндәр.*
*Ай үрмәләй юғарыраҡ,*
*Тулҡындарға ҡаҙап ырғаҡ,*
*Тауҙар мансыла алтынға,*
*Тулҡындар ҡаба ялҡынға.*
*Әкертен ел сәрүиҙе**
*Бәүелтте лә осто үҙе, —*
*Болоттарҙы ҡыуҙы тауҙан,*
*Мин, арбалып, алға уҙам, —*
*Башнянан ҡалған быяла*
*Ялтырай уттай ҡаяла;*
*Диңгеҙ упҡыны зарлана—*
*Тулҡын ырғыта ярҙарға;*
*Ғәйепләй ерҙе нимәгә?*
*Тик ер тын. Йоҡлап киләнә.*

*Сәрүи — кипарис.

*Папуев Виктор Борисович (1950) — шағир, тарихсы, рәссам, журналист, этнограф, карта төшөрөүсе. Новосибирск ҡалаһында тыуған. Ставрополь ауыл хужалығы институтын, Мәскәү дәүләт университетының журналистика факультетын тамамлай. «Ҡаурый һәм ҡылҡәләм менән», «Ай дүңгәләге аҫтында» шиғри йыйынтыҡтары авторы.*

## Ғәзәл

*Йылдарым тирелә, тиҫбенең һиҙәбен тартҡандай,*
*Саллана сәстәрем, аҡтары көндән-көн артҡандай.*

*Ваҡыттың пәрҙәһен хәтерҙән тартҡылап өҙәһең,*
*Үткәндең шәүләһен төш тиеп, ышанмай, һөҙәһең.*

*Иҫемдә сабый саҡ юҡтан-юҡ үпкәләп йәш түккән...*
*Бойомға ашмаған хыялдар йылмая йәшлектән.*

*Яҙмышҡа яҙғаны — нужаны беҙ инде күп күргән,*
*Халҡымдың билкәйе ҡыҫып та быуылған биш ерҙән.*

*Ҡарттарҙың уҡыған доғаһын убамы төпһөҙ күк,*
*Бер киҫәк икмәк тип үтелгән ғүмер — ул үҙе сүп.*

## Беҙ хәкиҡәт эҙләйбеҙ

*Ҡайһы ваҡыт беҙ хәкиҡәт эҙләйбеҙ*
*Йәшерен урындарҙан алыҫтағы,*
*Тәрән фекерҙәрҙән уны эҙләйбеҙ,*
*Төш,*
*Бәхәстән,*
*Уйындан да тағы.*
*Тик йыш ҡына ул хәкиҡәт беҙҙе*
*Үҙе көтөп тора, сығып алдан.*
*Юл яҙлығып ихлас аҙашабыҙ,*
*Дөрөҫлөктө бутап ҡуя ялған.*

***

*Ғазаплайбыҙ үҙебеҙҙе бик йыш әллә?*
*Намыҫыңды йәшерә алмаҫ бер кеҫә лә,—*
*Булмағандай бороп кире уҫал һүҙҙе,*
*Юҡ арҡанды бар тип булмай, алдап күҙҙе.*

**Гөлназ ҠОТОЕВА тәржемәләре.**



## Валентина
## ЛИДЖИЕВА

***

*Эй далам һин минең, даланым,*
*Һинең бер илгәҙәк балаңмын.*
*Ләләләрҙең ипкенен хәтерләп,*
*Мин шиғри юлдарға һаламын.*

*Моңланған, һағыштан һыҙланған*
*Бер ҫкһеҙмен һинән йыраҡта.*
*Хушлашам. Таң менән юлланам.*
*Ләкин һин һәр ваҡыт йөрәктә.*

*Даламды кем ҫҙлгә тиңләгән?*
*Мәңгелек йыр йырлай шишмәләр.*
*Даламда һағышҡа урын юҡ,*
*Зарҙарым шәм һымаҡ һүнәләр.*

*Ҡыуанып, күҙәткә ҡойоноп*
*Күҙәтәм даламдың балҡышын —*
*Әреме лә хатта әрнетмәҫ*
*Тормошҡа ғашиҡ йән алҡышын.*

***

*Әйтмә инде, барыбер, тип,*
*Ҡайҙа ятып үлһәм дә...*
*Ҡараусыһыҙ ҡалған ҡәбер*
*Саҡ беленә үләндә.*

*Киләм уға, рухым туплап.*
*Яҙыу ҙа юҡ, сәскә лә.*
*Ҡара тупраҡ ҡала бары —*
*Ерҙә йәшә, йәшә лә.*

*Ерем, ерем...*
*Балсыҡ ҡына*

---

*Лиджиева Валентина Николаевна (1959) Ҡалмыҡ АССР-ының Элиста ҡалаһында тыуған. 1987 йылда М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институтын тамамлай. Рәсәй Яҙыусылар союзы ағзаһы.*
*Ул — "Ҡойма ямғырға өндәшеү", "Торналар ырыуынан", "Утыҙ рауза" китаптарының авторы.*

*Түгелһеңдер, ҡан-йәш һин.*
*Сит яҡтарҙа ҡалма, тигән*
*Миңә аҫыл кәңәш һин.*

*Исемһеҙ ҙә эҙһеҙ итеп,*
*Айырма Ватанымдан.*
*Ҡисер! Зыярат ҡылыусы*
*Танып алһын тынымдан.*

***

*“Йыһангир” ҙы ярһып уҡығанда*
*Күңелемдә илай думбыра.*
*Тылсым көсө, илаһилыҡ заңы —*
*Көс-ғәйрәткә йәнде тултыра.*

*Аҡыллыраҡ әгәр булғым килһә,*
*Һабаҡ бирә миңә “Йыһангир”.*
*Был юлдарҙы аңлап бөтөр өсөн*
*Ғүмеркәйҙәр тағы, йыһан, бир!*

*Булайымсы аҫыл шул заттан мин,*
*Булайымсы мин дә баһадир...*
*Ҡалмыҡ халҡым!*
*Гүзәл һының һинең —*
*Эпостарҙа йәшәр Йыһангир.*

*Бөйөк китабыңды уҡығанда*
*Биттәремдән күҙ йәшем аҡты.*
*Йыһангирҙың иле — сафлыҡ иле,*
*Эпос иле — ниндәй ул яҡты!*

***

*“Һин Себерҙәнме?” — тиҙәр.*
*Шым ғына әйтәм: “Юҡсы!”*
*Себерҙән — өлкәнерәктәр,*
*Ғәҙел донъяға юлсы.*

*Өлкәнерәктәр — Себерҙән.*
*Мин һуңыраҡ тыуғанмын.*
*“Элистананмын!” тиһәм дә,*
*Мин уларға туғанмын.*

*Ҡысҡырыр инем мин хәҙер:*
*Һеҙҙеке мин! Себерҙән!*

Күңелдәре тулы шәфҡәт,
Йәне тулы миһырбан.

Яуызлыҡты күп күрһә лә,
Уйҙары изгелекле.
Кедр ағасылай ғорур,
Аҡ ҡарҙай игелекле.

Бәләләргә бирешмәҫкә
Һүҙ ҡуйышып хәҙерҙән,
Наҙлы һәм ныҡ булайыҡсы:
Беҙ бит әле — Себерҙән.
Беҙ бит әле — Себерҙән.

---



**Лилия**
**ЩЕГЛОВА**

## *Көҙгө алдында*

*Күршем ҡартая төшкәндәй.*
*Ағайым да бөкрәйә.*
*Мин һаман да элеккесә,*
*Күңел бары көрәйә.*
*Йәшмен әле!*
*Нурын һибә*
*Һөйкөмлө һипкелдәрем.*
*Еңел генә үтеп китәм*
*Һәр көндөң ипкендәрен.*
*Мин үҙемсә йәшәйем тип,*
*Тағы көҙгөгә бағам.*
*Ә ул миңә күҙен ҡыҫа,*
*Ваҡыт әйтә: мин ағам...*

## *Осраҡлыҡ*

*Осраҡлыҡ һаҡта тора:*
*Ҡапыл юлымды бора,*
*Упҡынға ла ырғыта,*
*Тулҡынға ла ултырта.*

---

*Щеглова Лилия Ивановна (1941) — шағирә, тәржемәсе, драматург. Һарытау өлкәһенең Энгельс ҡалаһында тыуған. "Ерҙәге эҙ", "Алдан һиҙенеү", "Көтөү" китаптары авторы. Ҡалмыҡстан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре. Элистала йәшәй.*

*Осраҡлыҡта хикмәт бар,*
*Әллә ниндәй ҡөҙрәт бар.*
*Яҙмыштарҙы яҙыусыла*
*Илаһи бер шөһрәт бар.*
*Тормош ауырлығын һиҙмәй,*
*Иламай ҙа, көлмәй ҙә*
*Йәшәр инем, әгәр белһәм*
*Ни көткәнен биләүҙән?..*
*Ә әлегә, шығыр-шығыр*
*Тәгәрмәстәрен бороп,*
*Серле осраҡлыҡ сәғәте*
*Күҙәтә, өҫтән тороп...*

***

*Көлдәксән тыуғанһың, тиҙәр.*
*Эйе, тыуҙым көлдәксән!*
*Бәлә килһә, түҙә белдем,*
*Атлаһам да сөллектән.*
*Башты эйҙерһә лә донъя,*
*Гел турайып баҫам мин.*
*Иң әсе хәсрәт эсендә*
*Яңы йәнем асам мин.*
*Башым ҡайнай, тала беләк —*
*Эй, ҡотҡар мине, көлдәк!*
*Ҡурҡыныс алдында ҡапыл*
*Бөршәйеп ҡала йөрәк.*
*Ни ҡылһам да — хәйерлегә,*
*Тиеп, тағы ҡуҙғалам.*
*Һүнә яҙған усағыма*
*Мин яңынан ҡуҙ һалам.*

**Тамара ИСҠӘНДӘРИӘ тәржемәләре.**



**Николай
БУРУЛОВ**

# БҮРЕ ҠАПҠАНЫ

### хикәйә

Һалҡын ҡыштарын көнбайышта, зәңгәрһыу ҡар өйөмдәре артында, асыҡ күк йөҙөн киске шәфәҡ балҡыта. Ҡояш тыйылғыһыҙ булып аҫҡа, офоҡ ситенә, тәгәрәгәндән-тәгәрәй, уның ҡара ҡыҙыл үҙәге торған һайын киңерәк була бара, нәҙек оҙон нурҙары күкте һәм тирә-яҡты аймай, тәҙрә быялаларында сағыла. Ләкин был мәлдең ғүмере үтә ҡыҫҡа: яртылаш байыу менән, ҡояш ҡабалан-ҡарһалан күҙҙән юғала. Бөгөн тап шулай булды.

Тәҙрәләре төньяҡҡа ҡараған тәпәш кенә ағас йорттоң айырым бүлмәһе юҡ. Бер урында ашайҙар, йоҡлайҙар... Ингән кешенең күҙенә иң тәүҙә дәү урыҫ мейесе салына. Уның артынан һәм ишектең уң яғынан буй-буй ағас һәндерәләр һуҙылған. Улар өҫтәлде лә, карауатты ла, ултырғыстарҙы ла алмаштыра. Икенселәй, яҡшыраҡ йәшәү мөмкинлеге юҡ. Хужалар ҙа йәшәйештәрен үҙгәртергә әллә ни атлығып бармай.

Өйҙөң төпкө яғында тәҙрәләр уйылмаған. Шунлыҡтан ул мөйөшкә ҡояш нурҙары етмәй – төштән һуң унда дөм-ҡараңғы. Хәйер, өй хужаларының тәҙрәнән тәбиғәт күренештәре менән һоҡланып торорға баштарына ла инеп сыҡмай.

Йорт хужаһы булып алтмыш йәштәрҙәге ир-уҙаман иҫәпләнә. Уртаса буйлы, ҡаҡса, тыныс һәм аҙ һүҙле был кешенең матур һыҙатлы йөҙө ҡатҡыланған көрәнһыу тире менән тышланған төҫлө. Хуш күңеллелеге өсөн өйҙәгеләр араһында ихтирам яулаған ҡарт ул. Бер ҡасан да тауышын күтәрмәҫ, тупаҫ һүҙ әйтмәҫ, уйлап ҡына һөйләр. Тыуған ауылында нисек булһа, бөгөнгө көндә лә шулай – ҡырыҫ Себер уның холҡона насар йоғонто яһамаған. Киреһенсә, элеккегә ҡарағанда ла сосораҡ, етеҙерәк, көслөрәк кеше ул хәҙер. Яңы урында, сит кешеләр араһында йәшәү уны тыныс һәм һалмаҡ тормошонан яҙҙырҙы. Даими рәүештә эске көсөргәнештә йәшәүе арҡаһында хатта элекке сирҙәре лә сигенде кеүек...

*Бурулов Николай Яковлевич (1931) Ҡалмыҡ АССР-ының Лаган районы Цомок ауылында балыҡсы ғаиләһендә тыуа. Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Ҡалмыҡстан Республикаһының халыҡ яҙыусыһы. Бер нисә китап авторы.*

Ҡояш байыу менән ергә шәфәҡ нурҙары таралды. Оҙаҡламай төн етте. Саксык ҡарт эшкә әҙерләнә башланы. Колхоз фермаһының малын тап уға һаҡларға ҡушылғанына сикһеҙ маһая ине. Шунлыҡтан эшенә лә иртәрәк, ферманың көндөҙгө эшселәре ҡайтмаҫ элек үк, бара. Ә бөгөн кис ул эшенә тағы ла иртәрәк китергә тора.

– Бөгөн Тарастың сменаһы... Һуң киләм, тине. Ошо көндәрҙә улы ҡайтып төшәсәк. Үҙе хат яҙып ебәргән. Яраланған...

Саксык үҙе был турала ике көн буйы өҙгөләнеп уйланды. Ҡалмыҡтарҙы Себергә күсергәнгә икенсе йыл китте, ә уның улы һаман һуғышта. Наран бер хатында, яуҙар ил сиктәренән тышта бара, тип яҙған. Яҡташтарының балалары яу ҡырынан берәм-һәрәм ҡайта башлауын ишеткәс, ҡарттың йөҙө ҡарайып китте. Улдары – ут эсендә, ә уларҙы йәнтөйәктәренән ситкә ҡыуғандар... Шунлыҡтан Баерхаға, ҡарсығына, Тарастың улы хаҡында өндәшмәйерәк йөрөгәйне. Улын көтә, ғазаплана, бөтә нәмәне лә йөрәгенә яҡын ала бит ул. Ләкин бөгөн, эшкә ғәҙәттәгенән дә иртәрәк китергә булғанлыҡтан, сәбәбен әйтергә тура килде.

– Ҡайтһындар шул балалар. Улдарҙың һуғыштан ҡайтыуы – шатлыҡ таһа!– тине Саксык, ҡатынын ауыр уйҙан арындырырға теләп.

– Беҙҙең Наран ҡайҙа икән? Күптән хат-хәбәре лә юҡ. Минең улым да ҡайтһын ине... – Ишетелер-ишетелмәҫ кенә, талсығып шыбырланы Баерха. Әйтерһең, һүҙҙәре тамағына төйөр булып ҡата ла, ҡорғаҡһыған ирендәре аша уны теле менән төртөп ебәрә алмай этләнә... Ҡарсығының ҡапыл ҡайғырып киткәнен күргән Саксык уны йыуатырға булды.

– Нисауа... Беҙҙең Наран да үҙе тураһында белгертер, бында ла килеп етер әле. Белекле кешегә беҙҙе табыуы ауыр булмаҫ. Һуғышта бөтә донъяны аҙымлап сыҡҡан кешегә үҙ илендә ата-әсәһен табыу нимә ул... Бөтә балалар ҙа ата-әсәһенә әйләнеп ҡайтһын инде.

– Тарастың улы өйләнгәнме?

– Юҡ, тип әйтә ине Тарас...

– Беҙҙең Наран кеүек кенә икән, күгәрсенкәйем. Йәш... Үҙенән һуң бер кемде лә ҡалдырырға өлгөрмәйенсә ут эсенә ингән. Уның тере көйө һуғыштан ҡайтыуы – ата-әсәһе өсөн шундай ҙур бәхет! Беҙҙең улыбыҙ ҙа һау-сәләмәт көйө ҡайтһын ине! Йөрәккәйем...

– Тарас Тихонович, улым ҡайтҡансы ике-өс ултырғыс яһарға кәрәк, тип һөйләнә ине. Өйҙәрендә стена буйынан һуҙылып киткән һәндерәләрҙән башҡа бер нәмәһе лә юҡ уларҙың да. Бөгөн көн оҙоно ағас менән булғандыр инде. Бер көн эсендә әллә ни ҡыйратып булмай шул...

***

Ҡалмыҡтарҙы ҡаты һыуыҡтар мәлендә Новосибирск өлкәһенә алып килгәндә, улар Осиновка ауылының ҡайҙа урынлашҡанлығын, унда ни рәүешле барып етергә мөмкин икәнлеген күҙ алдына ла килтермәйҙәр ине. Тәүҙә – райүҙәккә, шунан ике ауыл аша – Осиновкаға...

Ҡалмыҡтар яңы төйәктәренә һуңлатып ҡына, ҡараңғыла, егелгән саналарҙа килеп төштөләр. Яңы ауылдаштары, урыҫтар, ҡыҙыҡһынып, уларҙы клуб янында ҡаршы алды. Бүрәнә йортта йыйылы. Быялаһыҙ кәрәсин лампалар залға яҡтылыҡ сәсә. Оҙаҡ ваҡыт юлда булған кешеләр өсөн был ожмахҡа тиң. Барыһы ла йылы мейес янында өйкөмләште.

– Бөгөн ошонда төнәп торорһоғоҙ. Иртәгә йәшәрегеҙгә даими урын табырбыҙ, – тип тауыш бирҙе өйгә килеп ингән бер кеше. Ҡалмыҡтарҙы бында

килтереүсе кешеләр араһында ул юҡ ине. Ауыл түрәһе, буғай. – Хәҙер һеҙгә йылы аш килтерерҙәр. – Ул ҡалмыҡтарға йәлләп ҡараны.

Килеүселәр араһында икәү айырылып тора: Очиров Сангаджи һәм Дачаев Гаря – ҡырҡ йәштәр самаһындағы ир-уҙамандар үтә теремек һәм көслө күренә. Эшкә шәптәрҙер... Башҡалары – оло йәштәгеләр, ҡатын-ҡыҙ, бала-саға. Шул иҫәптән – Саксык Кензеев. Әбейен, ике ҡыҙын, киленен эйәрткән булған. Улы Наран 42-се йылда уҡ йәнтөйәгенән һуғышҡа алынған, ғаиләһе менән ни булғаны тураһында хәбәрҙәр түгелдер, күрәһең. Халыҡтың башына бәлә ишелеп төшкәндә, власть Ҡалмыҡ республикаһын ликвидациялап, кешеләрен Себер буйлап һибеп сыҡҡанда, фронтта ҡан түгеүселәргә был хаҡта нисек хәбәр итергә?

– Элек ҡайҙа эшләнегеҙ? Нимә эшләй беләһегеҙ? – тип тағы һорай яңы ауылдаш.

Үткер Сангаджи Очиров шундуҡ уның янына күсеп ултырҙы.

– Колхозда эшләнем, аҙыҡ-түлек склады мөдире булдым...

Сангаджи белгәненсә, һүҙҙәрҙе боҙа-боҙа яуап бирҙе. Уның һүҙҙе дауам итергә иҫәбе бар ине лә, баяғы кешенең уға ҡарата ҡыҙыҡһыныуы ҡапыл һүнеп, башҡа ҡалмыҡтарға боролдо. Уның күҙе Дачаев Гаряға төштө. Рус телен бөтөнләй белмәгән Гаря, уңайһыҙланып, бер һүҙ ҙә әйтә алманы. Уның бер ниндәй ҙә һөнәре юҡ ине, һуғышҡа тиклем балыҡ кооперативында йөк ташыусы булып эшләне. Тыуған ауылында уны әллә ни ихтирам итеп тә бөтмәйҙәр ине.

– Ҡара эштә йөрөнө ул, төрлө ерҙә... – тип йәнә ҡыҫылды Сангаджи Очиров.

Гаря, уның ни һөйләгәнен аңлаған төҫлө, баш ҡаҡты. Баяғы ир, урынынан ҡуҙғалмайынса, өшөгән балаларын ҡосаҡлап торған бисә-сәсәгә боролорға иткәндәй булды ла ҡапыл мөйөштә төйөнсөктәрен барлап торған ҡартҡа ҡарай бер аҙым яһаны.

– Нисек килеп еттегеҙ, ағай? Өшөмәнегеҙме? Янындағыларығыҙ һеҙҙең ғаиләгеҙме?

– Оҙаҡ барырға тура килде шул, алыҫ... Һыуыҡ, өшөнөк, – тине ҡарт саф урыҫ телендә.

Ҡарттың дөрөҫ һәм грамоталы итеп яуап биргәненә ҡапылғара аптырап киткән ир йәнә һорау бирҙе:

– Ағай, элек эшләп йөрөгәнһеңдер?

– Тыуған ауылымда һуңғы көнгә тиклем эшләнем. Колхозда төрлө йомошҡа йөрөтә инеләр.

– Ниндәй эш күңелегеҙгә яҡын һуң?

– Балта оҫтаһы мин. Мал һарайын иплэй, ат сбруйын, тиренән кәрәк-яраҡ әтмәләштерә, һәнәк-көрәк һаптары яһай торғайным. Йәйен бесән ташый торған арбаларҙы, тәгәрмәстәрҙе йүнәтештерҙем. Минән башҡа ваҡ-төйәк колхоз эшен башҡарырҙай тағы бер нисә ҡарт була торғайны.

– Аңлашылды. Йә ярай, тыныс йоҡо һеҙгә. Ял итегеҙ. Иртәгә һөйләшербеҙ. – Ят кеше ҡалмыҡтарҙы йәнә күҙҙән үткәрҙе. Ҡарашынан был кешенең нимә тураһында уйлауын тоҫмаллау мөмкин түгел ине. Шунан мейестә шарт-шорт янған утындың тауышына бер аҙ ҡолаҡ һалып торҙо ла, тыштан утын ҡосаҡлап ингән ҡатындың ҡолағына ниҙер шыбырлап, сығып та китте.

Был кисте ҡатындар, балалар, ҡарттар оҙон юлға сыҡҡандан бирле тәүге тапҡыр иркенләп ял иттеләр, ҡайнар сәй һемерҙеләр, бәрәңгегә ҡушып икмәк ашанылар. Тамаҡтарын туйҙырғас, күбеһе мейес янына толоптарын, пальтоларын йәйеп, аяҡтарын яҙырға ашыҡты.

Йәнә ишек асылды, һәм өйгә уртаса буйлы, мыҡты кәүҙәле ҡарт килеп инде.

Күҙҙәре ҡуйы ҡаштар араһына йәшеренгән, ике сикә буйлап һуҙылған мыйыҡтар тегенең йөҙөн ҡаплаған, тик тумпыҡ танауы ғына әллә ҡайҙан күренеп, кешенең иғтибарын үҙенә тартып тора. Эйәген тулыһынса йәшереп торған һаҡалы был кешенең йөҙөнә зәһәр усаллыҡ өҫтәгән кеүек. Башында – йөнтәҫ бүрек, өҫтөндә – ҡыҙыл билбаулы тиртун. Ҙур башлы, яҫы битле был әҙәм әкиәттәге баһадирға оҡшап тора ине. Инеү менән ҡартлас үҙенең артынан ишекте ныҡлап тартып ҡуйҙы.

– Нисек килеп еттегеҙ? Хәлдәрегеҙ арыумы?

Кемеһе һуҙылып, кемеһе стенаға һөйәлеп гәп һатып ултырған кешеләр өндәшмәне. Барыһы ла улар менән күптәнге таныштарындай күреп иҫәнләшкән урыҫ ҡартына аптырап ҡараны. Хатта тиктормаҫ Сангаджи ҙа яуап бирергә һүҙ тапманы.

Саксык һаҡалын һыйпап ҡуйҙы:

– Килеп еттек. Кемеһе нисек... Хоҙай ярҙамы менән.

Баһадир мейес янында тәгәрәшеп ятҡан киң утын ярҡаһын һөйрәп сығарҙы ла шунда ҡунаҡланы. Шунан тиртун кеҫәһенән тартып сығарған нәҙек таҫмалы кисетынан йоҙроҡ ҙурлыҡ ҡара төрөпкәһен алды, тәмәкене баш бармағы менән баҫа-баҫа тултырып, төтөн борҡотоп ебәрҙе.

– Ҡайҙарҙан һеҙ?

Бер кем бер ни өндәшмәне. Ҡартлас та, ҡалмыҡтарҙың һорауҙы аңлау-аңламауына төшөнмәһә лә, ҡабатлап һорманы. Уңайһыҙ тынлыҡ урынлашты. Шарт-шорт янған усаҡ ҡына ишетелеп ҡала. Шул саҡ Саксык ҡарт мөйөшөндә ҡыбырлап ҡуйҙы һәм тыныс тауыш менән яуап бирҙе:

– Ҡалмыҡстандан беҙ... Ҡалмыҡ АССР-ынан...

Баһадир шунда уҡ төрөпкәһен ауыҙынан ала һалды ла Саксыкка һирпелеп ҡарап ҡуйҙы. Әллә сит милләт кешеһенең рус телендә яҡшы һөйләшкәненә иҫе китте, әллә Ҡалмыҡстандың ҡайҙа икәнлеген белмәүенә уңайһыҙланды – ҡапыл албырғаны ла ҡуйҙы. Шунан, тәмәке тулы төрөпкәһен ситкәрәк тотоп, һорай ҡуйҙы:

– Ә ҡайҙа ул һеҙҙең Ҡалмыҡстанығыҙ?

– Каспий диңгеҙе... Воолг... – тип таныш һүҙҙәрҙе үҙ телендәге яңғырашына оҡшатыбыраҡ яуап бирҙе Саксык.

Баһадир ултырған ерендә борғоланып ҡуйҙы. Саксык уның ике ҡулын тубығына һалған ыңғайы көләмһерәй биреп ҡуйғанын шәйләне.

– Янында берәй ҡала бармы? – тип йәнә һүҙ ялғаны баһадир.

– Бар, бар... Әәдрхн, – Ҡаланың урыҫса яңғырашын онотоп, Саксык тотлоғоп ҡуйҙы. Бер аҙҙан уның күҙҙәре тоҡанып китте, арҡаһын турайтты. – Астрхн!

Баһадир бер талай өндәшмәй ултырҙы.

– Ә-ә... Аңлашылды... Шунан уҡмы ни? – тине ул аҙаҡтан һәм, төрөпкәһен ауыҙына тығып, башын сайҡаны.

– Расея! Русь! – тине ул тантаналы ҡиәфәттә. – Тимәк, Рәсәйҙән һеҙ.

Өндәшмәҫ ҡалмыҡтар сәйер ҡартҡа аптырап ҡарап ҡуйҙы. Саксык “Расея” һүҙенең мәғәнәһенә төшөнһә лә, уның ниндәй мөнәсәбәттә әйтелгәнен аңғарманы.

Ҡапыл урыҫ ҡарты бүреген сисеп алдына һалды, тиртун яғаһын төҙәткеләне.

– Мин һеҙҙе Ҡаҙағстандан, Ҡырғыҙстандан йә Татарстандан тип торам. Ҡыҙым мейестә төштән алып яғырға тотондо... Уға түрә-ҡара ҡушҡан. Киске ашҡа ҡайтҡанда һеҙҙең турала һөйләне. Урыҫ түгелдәр, тине. Шуға ҡыҙым урынына

мейес ҡарарға, ыңғайына һеҙҙе күрергә килдем. Аңлашыла хәҙер... – Бабай әллә үҙ алдына мығырҙанды, әллә өйҙәгеләргә өндәште – аңлашылманы.

– Ә был ниндәй ауыл? Исеме нисек? – Саксык һүҙҙе ҡайтанан ялғарға булды. Ҡарт бер талай өндәшмәй ултырҙы ла Саксыкка текләп ҡараны.

– Осиновка. Осиновка ауылы. Бында ҡасандыр Осинов фамилиялы кеше йәшәгән. Бик күптән...

– Түрә кеше булғандыр? Беҙҙеңсә – зайсанг...

– Эйе, көслө, ғорур, ҡыйыу булған, тип һөйләйҙәр. Ул беренселәрҙән булып ошонда килә һәм йәшәү өсөн урын-ер һайлай. Беҙҙең кешеләр иң тәүҙә землянкалар ҡаҙа, шунан йылы өйҙәр һалып сыға.

Саксык өндәшмәй генә башын һелкеп тыңлап ултырҙы. Әйтерһең дә, уға быны рус телендә түгел, ә ҡалмыҡса һөйләйҙәр. Барыһы ла шундай яҡын һәм аңлайышлы. “Беҙгә лә землянкалар ҡаҙырға тура киләсәк. Нисек ҡышлайбыҙ юғиһә?” Саксык тағы нимәлер тураһында белергә, һорарға ашыҡты.

– Ауылда кемдәр көн күрә? Рустар, татарҙармы?

– Беҙ йәшәйбеҙ. Электән. Башҡа бер кем юҡ. Чалдондар беҙ. Расеянан. Рустар беҙ. Беҙҙең арала ҡырғыҙҙар ҙа, татарҙар ҙа, ҡаҙаҡтар ҙа юҡ...

Саксык тағы ниҙер әйтергә теләгәйне лә, кәрәкле һүҙ таба алмай, тотлоғоп ҡалды.

– Минең исемем Тарас. Лукин Тарас Тихонович – был исемдәрҙең барыһы ла урыҫса. Атайым Тихон ошонда тыуған. Ата-бабаларыбыҙ иһә йөҙ йыл самаһы элек Расеянан килгәндәр. Беҙҙең тамырҙарыбыҙ, төп йортобоҙ тегендә, көнбайышта. Әүәл шулай һөйләй ине ауыл ҡарттары... – Тарас ҡарт төрөпкәһен һурҙы ла Саксыкка һирпелеп ҡараны.

– Ә һеҙҙең исемегеҙ нисек?

Саксык, уңайһыҙланып, ултырған ерендә борғоланды – ҡалмыҡ исеме баһадирға сәйер яңғырашлы булып тойолмаҫмы?

– Минең исемем Саксык. Кензеев Саксык. Маргишов Кензяның улы...

Тарас, аңлағанын белгертеп, башын һелкеп ҡуйҙы.

– Йә ярар бөгөнгә. Артабан яҡынданыраҡ танышырбыҙ әле. Ауылда йәшәһәгеҙ...

Саксык ҡабаланып эйәк ҡаҡты.

Тарас ауыр кәүҙәһен көскә турайтты ла, мейес ауыҙын асып, йәмкә менән утлы торонбаштарҙы болғатты.

– Һау булып тороғоҙ! – Тарас Тихонович эре аҙымдар менән өйҙән сығып китте.

Иҙәндә ултырған ҡалмыҡтар баһадирҙы өнһөҙ ҡараш менән оҙатып ҡалды.

***

Колхоз конторяһы урынлашҡан иркен бүрәнә йортҡа Сангаджи Очиров, Гаря Дачаев, Саксык Кензеев, һалдаткалар Цаган Бадмаева, Болха Надбитова, Улан Коджаевалар килеп инде. Контора кешеләре араһында кисә кис ҡалмыҡтарҙың тыуған ауылындағы эшмәкәрлеге менән ҡыҙыҡһынған әҙәм дә бар ине. “Ҡыҙыл байраҡ” колхозы рәйесе Григорий Михайлович Синьков ишек төбөндә тороусы ҡалмыҡтарға боролдо. Уның ҡыҙара-бүртеп торған тулы йөҙө балауыҙ яғылған алмаға оҡшаш ине – муйынына тиклем шып-шыма, бер сырышы, йөйө юҡ. Ул, бармаҡтары араһына папиросын ҡыҫтырып, ферма мөдире Демьяновҡа өндәште.

– Йә, Дмитрий Архипыч, кемдәрҙе эшкә алаһығыҙ?

– Ике ирҙе алам. Шуларҙың береһе – ҡарт балта оҫтаһы. Башҡалары – бисә-сәсә лә бала-саға. Уларҙан нимә өмөт итәһең...

Ҡапыл ишек асылды, һәм йылы бүлмәгә ап-аҡ быу дүңгәләктәре атылып килеп инде. Ҡалмыҡтар кисәге ҡартты – Тарас Лукинды таныны.

– Эшләй алырлыҡ ике ирҙе фермаға оҙатырға кәрәк – утын ярырҙар, бесән ташырҙар. Бер һүҙ менән әйткәндә, кәрәгенсә ҡулланығыҙ. – Идара рәйесе папиросын һурҙы ла уйланып ҡына һорай ҡуйҙы: – Ҡайҙа урынлаштырырға... Кирилдың йорто бушмы?

– Унда бер кем дә тормай.

– Өйҙөң ишектәре лә, тәҙрәләре лә бар, тигәйнеләр. Баяғы ике ир ғаиләләре менән шунда урынлашһын. Ике бүлмәле ул – һыйырҙар әле. Башҡалары клубта йәшәп торһон. Уйлашырбыҙ, торлаҡ эҙләрбеҙ...

Конторала тынлыҡ урынлашты.

– Михалыч, көтөп тор... Кәңәш бирәйем тигәйнем, тыңлаһағыҙ... – Ҡапыл яңғырап киткән ҡалын тауыштан барыһы ла һиҫкәнеп ҡуйҙы.

– Тыңлайым, һөйлә.– Синьков ҡарашын Лукинға күсерҙе.

– Минеңсә, кешеләрҙе клубта тоторға ярамай: һыуыҡ, мейесе йылытмай, ашарға әҙерләүе лә яйһыҙ. Бынауындай һыуыкта, ғинуарҙа, ыжғыр буранларҙа нисек торһондар унда?

– Кәңәшең?..– Синьков ҡартластан күҙен алманы.

– Ҡалмыҡтарҙы өй һайын урынлаштырып сығырға кәрәк. Һәр беребеҙ бер ҡалмыҡ ғаиләһен һыйындыра ала бит. Мин Саксык Кензеевты алам.

– Кем ул?– Григорий Михайлович ҡыҙыҡһынып китте.

– Русса арыу һупалаған ҡарт. Минең менән бергә эшләһен дә, йәшәһен дә. Айырым йәшәү урыны табылғансы, тим дә. Эйе, Кузьмичиханың йорто ла бар бит әле. Кескәй генә, уңайлы ғына. Мөйөш-һәйештәрен ямаштырғылап, төҙәтештерергә лә...

Колхозда Тарас Лукинды хөрмәт итәләр. Ҡайһы саҡ колхоз түрәләре уны кәңәш-төңәшкә саҡырғылай. Был юлы иһә уны бер кем дә көтмәгәйне, саҡырмағайны ла. Синьков өҫтәл артына ултырҙы ла башын ҡушҡуллап тотоп уйланып алды. Бүлмәләгеләр йәнә шып-шым булып ҡалды. Һауынсыларҙың бригадиры Мария Алхимова урынынан ҡалҡынды:

– Мал һарайҙарын таҙартырға кәрәк. Һыйырҙарҙы ашатырға-эсерергә, һауырға ла кеше етмәй.

– Ҡалмыҡ ҡатындары араһынан ярҙамсыларҙы үҙең тап та ҡуй, Мариша,– тип тәҡдим итте Демьянов.

– Ҡайҙан ғына беләйем инде мин уларҙы? Кем нимә эшләй алырын алдан әйтеп булмай бит. Үҙегеҙ билдәләгеҙ...

– Ни әйтһәң, шуны башҡарырҙар! Тәғәйен эш кенә ҡуш һин уларға. Тикшер, күҙәт...– Демьянов арыу кәңәш биргән кеше ҡиәфәтендә председателгә боролоп ҡараны.

Синьков, ниһайәт, башын ҡалҡытты ла урынбаҫары Волковты күҙе менән эҙләп тапты.

– Кирилл Никонович, кешеләрҙе өйҙәргә урынлаштыра башлағыҙ. Ҙур булмаған ғаиләләр һыйындырыр әле. Сельсовет алдында, проблеманы хәл итәбеҙ, тигән һүҙебеҙ бар ине бит...

Саксык Кензеев Тарас Тихоновичҡа йәшәргә барманы, сит кешеләрҙе маҙаһыҙларға теләмәне. Шуға күрә Саксык ҡарт һәм тағы бер нисә йәш ҡалмыҡты

Меланья Кузьменконың (уны ауылда Кузьмичиха ҡарсыҡ тип йөрөтәләр) йортона урынлаштырҙылар. Һуғыш йылдарында ул, яңғыҙ йәшәүенә һылтанып, йортон, ауылын ташлап, ҡыҙына күсеп киткәйне. Һөҙөмтәлә кескәй генә йортҡа Саксыктың ҡатыны Баерха, Цаган һәм Шикри исемле ҡыҙҙары, ҡарттың үлгән ағаһының ҡатыны Зиигя, йәнә ике ҡалмыҡ ғаиләһе – йәмғеһе ун кеше урынлашты. Аҙаҡтан, ҡыш урталарына, Зиигя ҡарсыҡтың ҡыҙы һәм уның балалары ла килеп ҡушылғас, оло ғаилә 14 кеше булып китте. Күмәк булһалар ҙа, бер кем дә ҡыҫынҡылыҡҡа зарланманы. Иртән иртүк Саксык мастерскойға ашыға: сана, арба йүнәтә, кисен Лукин менән ҡарауылға бара. Ҡәйенбикәһенең улы Найин колхозда иҫәпсе – һауылған һөттө үлсәй. Йәнә кемдер мал базаһын таҙарта, фермала мал ҡарай... Бер юлы дүрт-биш кеше эшкә сығып китһә, өй иркенәйеп ҡалғандай тойола. Барыһы ла ҙур бер ғаиләләй татыу, риза булып йәшәне. Тик бер генә һыҙланыу берләштерә ине уларҙы: яҡындарын һуғыштан көтөү. Йәнә бер хыял менән йәшәнеләр: ошо стеналарын һөрөм ҡаплаған өйҙә һалдат улдары, аталары, ирҙәре менән осрашыу шатлығын кисереү.

***

Саксыктың тәнтерәкләй-тәнтерәкләй фермаға ғәҙәттәгенән иртәрәк килә ятҡанын күргән Мария Алхимова һөрән һалды:

– Саксык бабай, тәүге корпустағы, Аня Захарованың төркөмөндәге Сыбарҡай быуаҙ. Төнөн абай булығыҙ инде, быҙаулап ҡуйһа...

– Аня урынындамы һуң?

– Эйе. Төнгө дежурға, бәлки, һеҙҙең менән ҡалырмын, ти ине. Сыбарҡайҙың ҡасан быҙауларын кем белә? Ә Аня, йүнле ял күрмәй, иртән эшкә нисек тора? Дөйөм алғанда, үҙегеҙ килешәһегеҙ инде...

– Уның нимәһе бар! Һыйыр быҙаулағанын күргәнебеҙ юҡмы ни? Ҡайтһын өйөнә, ял итһен. Тихоныч килһә, икәү күҙ-ҡолаҡ булырбыҙ әле.

– Йә ярай, өйөнә ҡайтарығыҙ.

Саксык һауынсылар һөттө иҫәпсенән үлсәткән йортҡа инеп, фонарын алды ла һауын һыйырҙары ҡышлаған корпусҡа ашыҡты. Аняны табып, өйөнә ҡайтарып ебәрҙе, Сыбарҡайҙың ҡайҙа торғанын ҡарап ҡуйҙы, колхоз малының алты бинаһын тикшереп сыҡты, ишектәрен ныҡлап япты. Эшен бөтөрөп, мейескә утын яға башлауға Лукин килеп етте.

Хәл-әхүәлде белешкәндән, колхоз малының урынында икәнлеген бер-береһенә хәбәр иткәндән һуң ҡарттар тынып ҡалды. Иҫке фонарь яҡтыһында хәрәкәтһеҙ ултырған Саксык телгә килде.

– Улыңдан хат-хәбәре барҙыр?

– Юҡ... Юлдалыр, күрәһең.

– Юлға сыҡҡан икән– ҡайтыр. – Шулай тине лә Саксык ауыр һулап ҡуйҙы.

– Юлда кеше күп. Яралылар ҙа, сирлеләр ҙә, ғәриптәр ҙә... Һуғыш ваҡытында эвакуацияланғандар ҙа юлда – газеталар шулай тип яҙа.

– Улайһа, ысынлап та юлда кеше мыжғып торалыр инде. Һәр бер станцияла поезды көтөүселәр байтаҡтыр...

– Һеҙҙең һалдаттарҙан берәй хәбәр бармы?

– Барлығын бар ҙа ул. Икәүһенән дә. Тик берәүһе тымды бит бөтөнләй... – Саксык тотлоғоп ҡуйҙы.

– Әйтә инегеҙ шул. Найиндың атаһымы?

– Эйе-эйе. Ҡатынымдың бер туған ағаһы. Күптән бер хәбәре юҡ. Дондағы ҡаты яуҙарҙан һуң һалдаттарҙан хаттар ҙа һирәкләне.

– Улығыҙ яҙамы һуң?

– Шөкөр, яҙа. Хаттары туҡталыбыраҡ торһа, әсәһе үҙенә урын тапмай инде. Уҡына, көтә.

– Очирҙың атаһы ла фронтта, тиҙәр...

– Эйе, беҙҙең кейәү. Тәүге көндәрҙән һуғышта. Хәҙер оло хәрби төҙөлөштә.

– Йәштер?

– Ҡырҡҡа етмәгән әле. Оло улы Очирға ун өс йәш.

...Данлыҡлы һауынсы Анна Захарованың исеме тотош районға яңғырап торҙо. Кейәүгә сығып та өлгөрмәне, ирен һуғышҡа алып киттеләр. Хәҙер ул, ауыр уйҙарҙан ҡотолор өсөн, йөрәген эш менән баҫа. Алдынғы һауынсыға ярҙам итеү маҡсатынан, колхоз түрәләре уның һыйырҙарын махсус контролгә алды. Уға билдәләнгән ун дүрт һыйыр малы таҙа, ҡоро аҙбарҙа көсәйтелгән рационда аҫрала. Уларға бесәнен, эсер һыуын әҙерләп биреп, аҫтарын таҙартып торорға айырым кеше – үсмер Очир билдәләнде. Намра Большаеваның ғаиләһенән кемдер эшләргә тейеш ине – Намра үҙе  был ҡышты сиргә һабышып ауҙы.

Очир эшкә таң һарыһынан килә. Мал һарайын тиҙәктән таҙартып, тейәп, түгеп килгәнсе апаруҡ яҡтыра төшә. Был ваҡытҡа һауынсылар килеп етә.  Утлыҡсаларға бесән һалып сығырға, көс еткеһеҙ силосты ташырға кәрәк. Ул прессланған силосы менән мең бәлә. Үсмер уны балта менән дә сабып ҡарай, ҡулы менән дә һындыра... Төшкөһөн бесән ташырға кәрәк. Саксык, Очирҙы йәлләп, ҡайһы берҙә уға ярҙам иткеләй.

...Ике ҡарттың һәр ҡайыныһы үҙ уйҙарына батып ултыра. Тынлыҡ.

Иртән ҡар яуып, ишек алдарын көрт баҫһа, Саксык ҡайтып китергә ашыҡмай. Очирға ҡар көрәшә, ашыҡмай ғына гәп һата, шунан ғына ҡайтып китә. Тарас Тихонович хәҙер тап ошо хаҡта уйлай.

Әгәр ҙә Очир өйҙә, йәнтөйәгендә йәшәһә, мәктәптә уҡып йөрөгән булыр ине. Башын эйеп, ошо хаҡта фекер йөрөтә Саксык...

***

Саксык, төнөн ойотоп ебәрмәһен өсөн, төшкө аштан һуң ятып серем итә ине. Был мәлдә өйҙәгеләр шыбырлап ҡына һөйләшә, балалар тышҡа оҙатыла – аава ял итергә тейеш.

Ғинуар айының ҡояшлы бер көнө ине. Көрт баҫҡан урам һил. Осиновкаға ҡалмыҡтарҙан алдараҡ килеп төйәкләнгән һәм Саксыктар янына землянка ҡаҙған немка Маргарита ғына быҙауын эйәрткән һәүкәшен ҡыуалай. Теүәл ваҡытта малын көйәнтә аҫҡан килеш һыулауға ҡыуа был ҡатын, ә унан алда урам яңғыратып һыйырын саҡыра: “Хамнита, Хамнита!” Бөгөн, йылғаға төшөп барғанда, Маргарита Тарас Тихоновичты осратты. Лукин Саксыктар торған йортҡа ыңғайлай ине. “Таныш ҡартына бара”, – тип уйлап ҡуйҙы уның артынан ҡарап ҡалған ҡатын.

Ишек алдында зыҡ ҡупҡан балаларға күҙ һалып, Лукин туп-тура өйгә табан атланы.

–  Иҫән-һауҙармы?

Саксык, ҡалын тауыштан һиҫкәнеп, тороп ултырҙы. «Бәй…» – Лукинды күреп ҡалған Саксыктың күҙе дүрт булды.

– Ял итәһегеҙме, Саксык?

– Серем итеп алғайным да…

Саксык, Тарас өсөн урын бушатып, һаҡ ҡына ситкә шылды. Баһадир унда ултырырға иткәйне лә, кире уйлап, ишек төбөнә йәйелгән балаҫҡа барып ҡунаҡланы.

Кескәй генә йортта тимер мейестән йылы бөркөлә. Лукин ялбыр бүркен һалды ла ғәҙәтенсә төрөпкәһенә үрелде. Бер-икене һурғандан һуң, ҡарт урыҫ телгә килде.

– Эш менән килгәйнем…

– Нимә булды? Нимә? – Саксыктың ҡапыл хәле бөттө. Башында бер генә уй: «Бер-бер хәл булдымы?».

Саксыктың ағарып киткән йөҙөн күреп, Лукин тынысландырырға ашыҡты.

– Бер ни ҙә булманы.

– Әллә… улыңдан насар хәбәр килдеме?

Лукин башын сайҡаны:

– Юҡ. Мәле еткәс, ул да ҡайтыр әле.

Саксык тынысланғандай итте.

– Эшкә саҡыраһығыҙмы?

– Эш тип… Эйе, эшкә. – Лукин тәҙрәгә күҙ һалды. – Мин ҡараған үгеҙҙәрҙең береһе зыянланып ҡуйҙы…

– Ҡайҙа, ҡасан? – Саксыктың күҙҙәре маңлайына менде.

– Көндөҙ, мал һуғарғанда.

– О, хяярхен! О, күк аллаһы, Тенгир-Бурхан!

– Бында бер кемдең дә ғәйебе юҡ, Саксык. – Лукин ҡалмыҡ ҡартына аптырап ҡараны.

– Кемделер… – Саксык күҙҙәрен селт-селт йомдо. – Кемделер ғәйепле итәсәктәр бит инде!

– Белмәйем, ишетмәнем. Ҡыҙыҡһынманым да…

Саксык дуҫына текләп ҡараны. «Ниңә килдең икән һуң һин? Өйҙәгеләрең иҫән-һау…»

– Саксык, теге үгеҙҙең итен алырға кәрәк. Ғаиләгеҙ ҙур. Малҡай һау ине. Великан ҡушаматлы үгеҙ генә эште боҙҙо. Йылға шәреһендә һыу эсеп торған йәш үгеҙҙәрҙе күреп ҡалған да береһен үлтергәнсе һөҙгән дә ҡуйған.

Быны ишеткән Саксыкка тағы ҡыйыныраҡ булып китте. Ул хәлһеҙ ҡарашын берсә Баерхаға, берсә Зиигя ҡарсыҡҡа күсерҙе, әйтерһең, яҡындарынан өнһөҙ генә ярҙам, кәңәш һорай.

– Нишләргә инде хәҙер? Бер ҙә белмәйемсе…

– Итен алығыҙ. Ғаиләгеҙ ҙур, ваҡ балаларығыҙ ҙа бар.

– Кем беҙгә рөхсәт итә? Кем бирә?

– Бер кем дә бирмәй. Ләкин ҡурҡырға кәрәкмәй… – Бер аҙ уйланып ултырғас, Лукин ҡарт дауам итте. – Бала саҡта далала зыянланған малдың итен әрәм итмәй торғайнылар. Тиреһен тунайҙар, итен ашайҙар…

Саксык өнһөҙ генә ултыра бирҙе. Ҡарттың юғалып ҡалғанын һиҙеп ҡалған Лукин дауам итте:

– Малҡайҙың итен тотошлайы менән ауыл ситенә алып барып ташларға теләйҙәр. Миңә кәнсәләрҙә был эште төнгә тиклем башҡарырға ҡушылды. Кеше күп ине, Сангаджи Очиров та булды. Ул тиреһен тунарға тәҡдим иткәйне лә, уны бер кем дә тыңламаны.

Өйҙә ауыр тынлыҡ урынлашты. Саксык байтаҡ ваҡыт өндәшмәй ултырҙы.

– Тимәк, шулай… Ҡараңғы төшкәс тә ике йәш егетегеҙҙе алығыҙ ҙа ауыл ситенең урау юлына, Зуев ҡырлаһына барығыҙ. Тик… – Тихон тотлоҡто. – Бер

ҡурҡыныс бар. Иткә ҡапҡан ҡуйырға теләйҙәр. Бүреләр өйөрө «Ҡыҙыл партизан» колхозының һарыҡтарын быуып сыҡҡан. Шуға ла ҡапҡан ҡуялар… Ҡапҡандан һаҡланырға кәрәк. Ай яҡтыһында уны шәйләмәү мөмкин түгел.

Саксык һаман өндәшмәй. Башын аҫҡа эйгән дә ултыра ла ултыра… Һуңынан, байтаҡ ваҡыт үткәс, йәнә телгә килде:

– Рәхмәт, Тарас Тихонович. Һеҙ изге кеше.

– Шунан, бараһығыҙмы ауыл ситенә?

– Барырбыҙ. – Саксыктың тауышы ҡалтыранып китте.

– Бөгөн мин һеҙҙең урынға ҡарауылда булырмын. Ҡабаланмағыҙ.

Лукин иҙәндә ятҡан бейәләйҙәрен үрелеп алды ла урынынан ҡалҡынды.

– Осрашҡанға тиклем. Кисекмәҫтән барығыҙ. Бынан алыҫ түгел ул. Ә балаларға ризыҡ кәрәк. – Тарас киң аҙымдар менән шәп-шәп атлап өйҙән сығып китте.

Урыҫ ҡарты сығып киткәс, Саксык оҙаҡ ҡына һүҙһеҙ ултырҙы. Баерха, рус телен белмәһә лә, ҡартына Тарастың хәүефле эш тәҡдим итеүен күңеле менән һиҙенә ине.

Шул ваҡыт өйгә Намра, Найин улы менән Болха Надбитовалар килеп инде.

Бүлмә шау-шыуға күмелгәс, Саксык, уйҙарынан айныҡҡандай, ултырған еренән талпынды ла әйтеп ҡуйҙы:

– Балаларҙың бәхетенә, бер кеше улар тураһында хәстәрлек күрә…

– Нимә булды? – Телдәр Намра түҙмәне.

– Тарас ниңә килде? – Болха ла һорау бирергә ашыҡты.

– Шаулашмағыҙ әле… Хәҙер барыһын да белерһегеҙ.

Йылмайып, Саксык өйҙәгеләренә Тарастың ниңә килгәнлеген аңлатты.

– Я-а-а! Ниндәй изге күңелле ҡарт! – Намра ҡыуанып китте.

– Тарас беҙгә һәр саҡ  ихлас булды. Осиновкаға килгәндән үк беҙҙең Саксык менән дуҫлашып алды… –  Болха быны әйткәндә бите буйлап тәгәрәшкән күҙ йәштәрен һөрткөләне.

– Йә ярай, – Саксык ултырған еренән торҙо. – Һеҙ, ике әсә, Найин менән Очир ҡараңғы төшкәс минең арттан эйәрерһегеҙ. Әҙерләнегеҙ. Очир ғына эштән һуңлап ҡайтыр инде…

Ҡартлас төҫһөҙ күҙҙәре менән тәҙрә аша зәңгәр күккә баға.

Ҡояш күп тә тормай аҫҡа, офоҡ ситенә, тәгәрәне. Ҡараңғылыҡ ҡуйырғандан-ҡуйыра. Һөрөм менән ҡапланған кескәй генә ҡыҫыҡ йортта ла күҙгә төртһәң дә бер ни күренмәй. Карауатында салҡан ятҡан Саксык ҡапыл һикереп торҙо.

– Бер ҡайҙа ла бармайбыҙ. Мин хәл иттем.

Ҡарсыҡтар һәм  йәшерәк ҡатын-ҡыҙ көтөлмәгәндә әйтелгән һүҙҙәрҙән һиҫкәнеп киттеләр.

– Нишләп? Ни булды?

– Йүнле   ғәмәл түгел был – оят. Улдарыбыҙ фронтта саҡта беҙ үҙебеҙҙең  исемебеҙҙе керһеҙ көйө һаҡларға һәм ҡырын эштәрҙән алыҫ йөрөргә бурыслыбыҙ. Уларҙы таҙа намыҫ һәм юғары абруй менән ҡаршылайыҡ, ҡәрҙәштәр. Хурлыҡһыҙ… Ҡаҙна милкенә ҡул  һуҙырға ярамай. Колхоз малына тейгән бүреләргә ҡапҡан ҡоралар икән, беҙ уларға ҡамасауламаҫбыҙ. Һуңынан беҙҙе ғәйепкә тарттырыуҙары ла мөмкин, тарттырмаһалар ҙа, барыбер уңайһыҙ. Тарас Тихоновичҡа рәхмәт кенә әйтербеҙ ҙә ит артынан бармабыҙ. Мин шулай хәл иттем. Рухты ҡаралаған ҡыланыштарҙан ары булайыҡ…

Барыһы ла өнһөҙ ҡалды. Саксык аңлайышлыраҡ һүҙҙәр табырға тырышты.

– Аслыҡтан ҡырылмайбыҙ бит. Рустар беҙгә картуф үҫтерергә өйрәтте…

Көҙөн яҡшы уңыш йыйҙыҡ. Үлмәҫбеҙ әле. Былай ҙа йәшәүебеҙ ауыр, хәстәребеҙ баштан ашҡан. Күңелебеҙгә гонаһ алмайыҡ…

Бер кем ҡымшанманы. Барыһы ла хөрмәтле ааваның зирәк ҡарарын ҡабул итте.

– Мин эшкә китәм. Һин дә, Найин, эшкә әҙерлән – тиҙҙән киске һауын башланасаҡ. Очир былай ҙа фермала. Болха, һиңә лә фермаға йыйынырға ваҡыт…

***

Иртәгәһенә, көндөң икенсе яртыһында, Саксыкты, Найин Надбитовты һәм Болханы колхоз кәнсәһенә саҡырҙылар.

«Нимә булды икән? Сәйер… Беҙ былай ҙа сит яҡтарға һөрөлгәнбеҙ. Яҡындарыбыҙҙан айырылғанбыҙ, йәнтөйәгебеҙҙән ҡыуылғанбыҙ. Өйөбөҙҙән, хужалығыбыҙҙан яҙғанбыҙ. Нимә кәрәк һуң уларға беҙҙән? Ни эшләтерҙәр икән?» Дүрт ғаиләгә башлыҡ ҡамытын кейгән ҡарттың башында уйҙар өйөрөлдө лә сөйрөлдө.

Кәнсәлә кеше байтаҡ, йәнә барлыҡ түрә-ҡара йыйылған. Шунда уҡ, рәткә теҙелеп, Сангаджи Очиров, Гаря Дачаев, Цаган Бадмаева, Улан Коджаевалар, шулай уҡ бергә һөрөлгән яҡташтары ултырышҡан.

– Ултырығыҙ! – тип екерҙе Синьков.

Саксык эскәмйәнең ситенә ҡунаҡлап та өлгөрмәне, Синьков йәнә тауыш күтәрҙе:

– Кензеев! Быҙау түшкәһен ҡайҙа ҡуйҙың? Бүре ҡапҡанын ҡайҙа йәшерҙегеҙ?

Саксык үрә баҫты ла урынында ҡатып ҡалды. Күҙҙәре ҡараңғыланып, аяҡһыҙ-ҡулһыҙ ҡалғандай хис итте. Мәктәптә «икеле» алған малайише йөҙөнә ҡан һауғанын күреп ҡалған колхоз башлығы өҫтәлгә йоҙроғо менән шап итеп һуҡты:

– Һине төрмәгә ябырға кәрәк! Колхозға зыян килтергән кеше хөкөмгә тартылырға тейеш!

Ҡапыл ишек асылып китте лә, киң аҙымлап, бүлмәгә Лукин ҡарт килеп инде. Баһадир ҡуйы ҡаштар аҫтынан йөҙөндә ҡан әҫәре ҡалмаған Саксыкка һирпелеп ҡараны ла рәйескә боролдо:

– Михалыч! Нимә булды? Ниңә һин бер ғәйепһеҙ кешене яфалайһың?

– Кешеме ни был? Ҡоротҡос! Ҡара дошман! Улар ишеләрҙе тамыры-нийе менән ҡоротторға кәрәк…

– Михалыч, ниңә ҡыҙаһың һин ул тиклем? Ниңә ҡоротторға итәһең һин уны?

– Үгеҙ түшкәһен бүре ҡапҡаны менән ҡуша сәлдергән! Кем? Ул! Ҡарт сволочь!

Тарас Тихонович эре-эре аҙымдар менән түрәнең ҡаршыһына килеп баҫты.

– Һин, йәш кеше, тәүҙә кешенең ғәйеплеме-ғәйепһеҙме икәнлегенә төшөнөргә тейешһең. Шунан һуң ғына язалау тураһында һүҙ ҡуҙғатырға мөмкин. Яңылышыуың да бар бит. Кешеләрҙе урынһыҙға шик-шөбһә менән хурларға ярамай – был хоҡуҡты һиңә әле бер кем дә бирмәгән. – Баһадир ауыр тын алды. – Колхоз малы өсөн йән атҡаныңды беләм. Тик беренсе осраған ғәйеп өйөү ирлек түгел. Бигерәк тә етәксе кеше өсөн.

Барыһы ла шымып ҡалды. Йөҙө ҡып-ҡыҙыл булған Синьков та, ауыҙына һыу уртлағандай, өндәшмәҫкә әйләнде. Һуңынан ғына, бер аҙ аңына килгәс, Синьков үле тынлыҡты боҙорға йөрьәт итте:

– Ниңә һин был сволочты аралайһың әле?

– Араламайым. Мин барыһының да намыҫ һәм ғәҙеллек менән башҡарылыуын ғына теләйем.

– Әйтер һүҙең булһа, йә, әйтеп ҡал! Ҡарап ҡарайыҡ әле, нимә иҫбатларға теләгән булаһың икән? – Синьков йәнә яҫы усы менән ҡаҡ өҫтәлгә шап иттереп һуғып ебәрҙе.

– Белгәнемде – әйтермен. Ләкин тәүҙә, Григорий Михайлович, үтенәм: Хоҙай хаҡына, үҙеңдән күпкә оло кешегә ултырырға мөмкинлек бир.

– Ярай… Кензеев, ултырығыҙ.

Саксыктың шымартылған таш ише ҡырыҫ йөҙөндә бер ниндәй ҙә тойғо сағылманы. Ул күҙ ҡырыйы менән генә стена буйында теҙелешеп ултырыусыларға һирпелде: тишә ҡарағандар кеүек, сәнсә ҡарағандар кеүек…

Дуҫының ниндәй ауыр тойғолар солғанышында торғанын күңеле менән һиҙгән Тарас ауыр атлап ҡарт янына килде лә ҡарттың ҡураныс ҡына яурындарына шыраулы устарын һалды. Ҡалмыҡ уны аңланы булһа кәрәк – ағас кеүек ҡатҡан аяҡтарын көскә бөгөп, эскәмйә ситенә сүгәләне.

– Григорий Михалыч… – Тарас Тихонович йәнә дауам итте. – Саксык өйҙән фермаға, ферманан өйгә кәләп һалыуҙан башҡаны белмәй. Кисә ул миңә өйөнән эшкә тура килде, һәм таңғаса бергә булдыҡ. Беләһең бит – ҡарауылдабыҙ, колхоз малын һаҡлайбыҙ. Мин күрмәгәндә генә нисек ит түшкәһе янына барып килергә өлгөрһөн ул? Йәш түгел…

Синьков түҙмәне, йәнә урынынан һикереп торҙо.

– Ҡапҡан ҡайҙа һуң, улайһа? Иттән бер киҫәк тә ҡалмаған бит. Баш-тояҡтары ғына ятып ҡалған!

Бүлмәләгеләр һиҫкәнеп китте.

– Ниндәй ҡапҡан?

– Бүре ҡапҡаны! Ҙур…

– Ағасҡа тимер сым менән нығытып ҡуйғайныҡ, – тип мәсьәләгә асыҡлыҡ индерергә тырышты колхоз объездчигы Ерохин.

– Ҡапҡанды бүре өсөн ҡуйғас, уның үҙенән һорағыҙ һуң, – тип тоҡос ҡына итеп шаяртып ҡуйҙы Тарас Тихонович. – Буштан-бушҡа ғына шик-шөбһә менән кешене кәмһетергә ярамай.

Синьков ахырҙа, башын да ҡалҡытмай, ҡулын һелтәне.

– Ошоноң менән тамамлайбыҙ. Өйҙәрегеҙгә таралышығыҙ.

***

Сангаджи Очиров ауыл ситендәге кескәй йортона ҡабалана. Уның артынса ваҡ-ваҡ атлап Гаря Дачаев йүгерекләй. Был ике ир ғаиләләре менән бергә 1944 йылдың ғинуарынан алып бер ҡыйыҡ аҫтында көн күрә.

Ирҙәрҙең икеһе лә, шыбыр тир булып ҡыуышып, өй янына килеп етте. Сангаджи ишек тотҡаһына үрелгәйне генә, артынан ҡалмай килгән Гаря бышлығыуынан сәсәп ебәрҙе.

– Әйттем мин һиңә! Барыһын да алмаҫ кәрәк ине…

– Күпме алһаң да, эш үҙгәрмәй инде. – Сангаджи һөйләшеүҙән ҡасырға тырышты.

– Хәҙер нишләргә? Тентеү менән килһәләр, табасаҡтар бит! Итте ҡайҙа йәшерергә? – Гаря паникаға бирелде. – Беҙҙе ҡулға аласаҡтар… Төрмәгә ябасаҡтар!

Гаряның һуңғы һүҙҙәре Сангаджиҙы үртәп ебәрҙе. Ул яҡ-яғына алан-йолан ҡаранып алды ла шыбырлауға күсте:

– Хәҙер Муравьевкаға барам да комендантты күрәм. Бәлки, уны бында килтерә алырмын… Юғиһә беҙҙең эштәр хөрт. Минең сигналым буйынса Синьков бер ни ҙә эшләмәне! Иртән иртүк мин уға матур итеп кенә аңлатҡайным бит: «Ике

ҡарсыҡ, ике ҡатын, ике үҫмер һәм ике ҡыҙ бала, шул иҫәптән кескәй бала-саға – уларҙың барыһы ла ашарға һорай. Ана шулар итте ҡапҡаны-нийе менән алып ҡасҡандарҙыр»… Синьков ышанған һымаҡ ултырып ҡалғайны. Ә хәҙер барыһы ла аҫты-өҫкә килә. Етмәһә, бынауы урыҫ Тарас ҡайһылай яҡлаған була Саксыкты! Ҡабаланырға кәрәк – комендант ҡына беҙҙе ҡотҡара аласаҡ.

Муравьевкала – ауыл Советы. Осиновкала көн күреүсе ҡалмыҡтар артынан ҡараусы комендант Шилкин ошонда йәшәй. Ул барыһын да яҡшы белә ине, бигерәк тә – Сангаджи Очировты. Сангаджи Осиновкала унның ышаныслы кешеһе, шымсыһы ине.

…«Өйөндә генә булһа ярар ине!» – Бер ауылдан икенсеһенә сапҡан Сангаджиҙың башында бер генә уй булды. Уның бәхетенә, Шилкин үҙенең ишек алдында соҡсоноп йөрөй ине.

– Ә, Очиров! Йә-йә… Һөйлә, ниндәй яңылығың бар?

Бер аҙҙан Осиновка ауылының иң ситендә урынлашҡан кескәй йорт янында атҡа егелгән сана туҡтаны. Унан «ҡалмыҡ старостаһы» Сангаджи Очиров менән комендант Шилкин һикереп төштө. Пүнәтәйҙәр итеп Саксыкка күрше йәшәгән Маргарита Гейнц һәм Иван Мельников саҡырылды.

Саксыктың йортонда тентеү оҙаҡ барманы. Өйҙә лә, ишек алдында ла нимәнелер йәшереп ҡуйыу мөмкин түгел – барыһы ла асыҡ, барыһы ла күренә. Тентеүҙең һөҙөмтәһеҙ тамамланғанына асыуы ҡайнаған Шилкин, бер кемгә лә әйләнеп ҡарамай, санаға ултырҙы ла конторағa елдерҙе.

Иртәгәһенә колхоз председателе күрше ауылға, Муравьевкаға, комендант Шилкинға ниңәлер ике үҫмерҙе – Найин Надбитовты һәм Очир Большаевты ебәрҙе.

Ике үҫмер сығып киткән йорт ҡапыл һүнде лә ҡуйҙы. Саксык бер кем менән дә һөйләшмәй. Битараф ҡиәфәттә эшкә бара, эштән ҡайта. Сирле Намра бөтөнләй аяҡтан яҙҙы. Болха Надбитова, фермала бергә эшләгән бисә-сәсәнән йәшереп, күҙ йәштәрен һөртә.

Тарас Тихонович та бер ни ҙә өндәшмәй. Үҫмерҙәр сығып киткән кистән алып бер ауыҙ һүҙ әйтмәгән Тарас, ярты төн ауғас, эҫе мейес янында йылынып, ҡапыл әйтеп ҡуйҙы:

– Сәйер… Бик сәйер… Аптырайым: бүре кешенән аҡыллыраҡ булып сыҡты. Итте лә, ҡапҡанды ла бергә йотҡан януар буламы ни? Һеҙҙең теге ике егет ҡайҙалар икән? Сәйер…

***

Билдәһеҙлектә ике көн үтте. Ә өсөнсө көнөнә, төштән һуң, ике үҫмер ҡапыл өйгә ҡайтып инде. Барыһы ла: ҡарты ла, йәше лә шатлыҡ йәштәрен һөрттө. Өйҙәгеләр малайҙарҙың имен-һау ҡайтыуына ышана алмай йөҙәне. Бәлки, иртәгә уларҙы тағы ла ҡайҙалыр алып китерҙәр, ләкин бөгөнгә барыһы ла бергә.

Ҡапҡанды юғалтҡан көндөң иртәгәһенә объездчик Ерохин түмәләс янындағы эҙҙәрҙе юллай башланы. Төндә яуған ҡар бурҙарҙың эҙҙәрен ҡаплай алмаған. Улар Сангаджи Очировтың баҡсаһына тартыла ине.

...Был ваҡиға тотош ауылды тетрәндерҙе. Бер аҙҙан Сангаджи Очиров үҙенең кәрәк-ярағын, ғаиләһен тейәне лә күрше ауылға, Муравьевкаға, күсенде. Имеш-мимештәр аша уның май заводына ҡарауылсы итеп урынлашҡаны беленде.

**Ләйсән МАРАҠАНОВА тәржемәһе.**



Николай
ИЛЮМЖИНОВ

# МАЗУЛ РУДНИГЫНДА

### ХИКӘЙӘ

*Киткәндәр берәй саҡ ҡайтыр,*
*Ергә күмелгәндәр һис ҡайталмаҫ.*

Ҡалмыҡ мәҡәле.

Ҡыш. Һуғыш осоро. Рәхимһеҙ депортацияның тәүге йылы. Мазул руднигына көслөк менән килтерелгән ҡалмыҡтар йәнә бер һынауға тарыны: йәшен дә, ҡартын да тиф ҡырҙы. Ни хәл итәһең, антисанитария...

Март башындараҡ мин дә ана шул ләғнәтле зәхмәтте йоҡтороп, Ачы дауаханаһына эләктем. Айға яҡын миктәп яттым, табиптарҙың тырышлығы арҡаһында ғына тере ҡалдым. Шуға ла аҡ халатлыларға ғүмер буйы рәхмәтлемен. Улар минән башҡа ла күп ҡалмыҡтарҙы әжәл тырнағынан тартып алды бит.

Һауыҡтым кеүек, мәгәр әҙ генә елгә лә бәүелеп китәм. Йәшлек үҙенекен иткәндер, ике-өс айҙан яйлап әҙәм рәтенә индем.

Тайга тип аталған ҡырыҫ крайҙа йәй уртаһына тиклем һалҡындар төшә. Урындағы кешенән ишеткән дә бар: «Себерҙә ҡыш – һигеҙ ай, ҡалғаны – йәй». Ә беҙ, ҡалмыҡтар, бында ғинуар селләһендә килгәйнек. Тын алыуы ауыр, ҡайҙа ла томан, саҫҡау.

Ана шундай һалҡын көндәрҙең береһендә әсәйем менән күршеләрҙән бәләкәй сана һорап торҙоҡ та, юҡ-бар әйберҙәребеҙҙе тейәп, бәрәңгегә алмаштырыу өсөн күрше ауылға юлландыҡ. Бараһы ауыл рудниктан ете-һигеҙ саҡрымда, Айдашка тигән күлдең арғы ярлауына һыйынған. Көнбайыштан көнсығышҡа – ике, киңлеккә бер километр самаһына һуҙылған. Күленең һыуы сөсө, төбөнән шишмәләр бәреп сыға, тиҙәр. Шулайҙыр, сөнки балығы күп: ул эре суртандар, ул һимеҙ оптолар...

Беҙ ҡалын боҙ менән ҡоршалған күлде аша сығып, Айдашкаға ынтылдыҡ. Ҡояш нурҙары һалҡын һауа аша көскә үтеп сәселә, баш өҫтөндә – аҡ ҡаҙ ҡанатылай көмбәҙ. Тирә-йүндә тынлыҡ, уны бары тик табандарыбыҙ шығырлауы ғына боҙа. Әсәйем йыш ҡына минең йөҙөмә ҡарай: һыуыҡтан танау осом йә сикәләрем ағармаймы? Әгәр ағарҙыниһә, бер ус ҡар йомарлап, тирем ҡыҙарғансы еңелсә генә ышҡый.

Үҙем дә әсәм яғына күҙ һалыштырам. Өшөмәйме? Юл буйынса ул миңә үҙенең

---

*Илюмжинов Николай Доржинович (1929) — Ҡалмыҡстандың күренекле әҙибе. Рәсәй Федерацияһы Яҙыусылар союзы ағзаһы, Республика һуғыш һәм хеҙмәт ветерандары фонды рәйесе. Ҡалмыҡтарҙы депортациялауға (ун өс йылға һуҙылған!) арналған бик күп сәсмә әҫәрҙәр һәм очерктар, шулай уҡ Бөйөк Ватан һуғышына арналған тиҫтәләгән китап авторы.*

бала сағынан иң сағыу иҫтәлектәрен бәйән итте. Әлбиттә, бер тынала ғына һөйләмәне, быны эшләү мөмкин дә түгел ине. Атларға, ара-тирә бейештереп тә алырға кәрәк, әле мин һеҙгә уның хәтирәләрен бер епкә теҙеберәк еткермәксемен.

– Атайым – һинең олатаң – Дон округында иң яҡшы ветфельдшер һаналды. Ярайһы бай йылҡы заводчигына ялланып эшләне, етеш йәшәнек. Ағас өйөбөҙ станицала иң күркәм ине, емеш-еләк баҡсабыҙ ҙур булды. Атайым гелән ҡырҙа, йылҡы көтөүҙәре араһында, беҙ, өс бала, әсәйем менән өйҙә донъя көтәбеҙ. Оло ағайым – Топр, энекәшем Кирсан исемле. Үкенескә, әсәйебеҙ иртә китте, уны ерләгәндә миңә ни бары һигеҙ йәш ине. Тиҙҙән революция тоҡанды, шунан – Граждандар һуғышы. Бер мәл ҡыҙылдар станицаны үртәне. Күп кенә ир-ат, аҡ армияға ҡушылып, Ҡара диңгеҙ яғына олаҡты. Шулай, аҡ ғәскәрҙәр Ставрополь, Кубань киңлектәре аша ла уҙҙы бит.

Ғәскәрҙәр сигенә... Уларға эйәреп, юҡ-бар ҡаралты тейәлгән повозкалар саҡрымдарҙы иңләй. Көпләүле арбаларҙа – ҡатын-ҡыҙ, бала-саға, ҡарт-ҡоро. Ошоноң ише ҡыш ине. Күҙ асҡыһыҙ бурандарҙа ла, арба аҫтына ятып, далала йоҡларға тура килде ҡасаҡтарға. Топр ағайым – 12 генә йәшлек бит әле үҙе – беҙҙе хәстәрләгән була, елдән, ҡарҙан төрләсә ышыҡлай. Көндөҙҙәрен ҡарауылһыҙ каруанға төрлө бандалар һөжүм итте, улар ҡатын-ҡыҙҙың, әбей-һәбейҙең затлы биҙәнеү әйберҙәрен таланы. Бөтә ошо бәләләр өҫтөнә, ҡасаҡтарҙы бында ла ҡот осҡос тиф үләте ҡырҙы. Мәйеттәр Кавказ тауҙарына еткәнсе ҡар аҫтында түшәлеп ҡалды. Иҫәндәребеҙ Новороссийск ҡалаһына көскә-көскә генә барып еттек.

Портта мәхшәр. Аҡ армия ҡалдыҡтары, йәнә Мәскәү, Санкт-Петербург байҙары француз пароходына тейәлә. Күмәктәр үҙҙәре. Бына бер заман сумаҙанлы ҡасаҡтар, тәртип һаҡларға теҙелгән штыклы һалдаттар сафын йырмаслап, трапҡа тығылды. Аттар кешнәй, офицерҙар аҡырыша, ҡатындар сеңләй, бала-саға шыңшый – бөтә тауыштар бергә ҡушылып, яралы йыртҡыс иңрәүен хәтерләтә. Ошондай ығы-зығыла дала кешеләренең бик аҙына ғына карапҡа эләгергә насип булды. Шулар араһынан – атайыма, атайымдың терһәгенә йәбешкән Топр ағайыма. Ә мине, йәнә энем Кирсанды ярһыған халыҡ өйөрө ситкә этәрҙе, трапҡа яҡынайырға ла ирек бирмәне. Ни саҡлы ҡысҡырҙыҡ, күпме иланыҡ – бушҡа ғына.

Бына траптар алынды, якорҙар даһырлап күтәрелде, пароход үҙәк өҙгөс хушлашыу гудогын бирҙе. Кирсан ҡустым менән мин причалда оҙаҡ торҙоҡ. Тоҙло күҙ йәштәрен йотоп... Ҡара нөктә булып кесерәйә-кесерәйә атайым, ағайым ултырған пароход диңгеҙ офоғона инеп юғалды. Кирсан менән мин үкһеҙ етем, ҡараусыһыҙ һәм яҡлаусыһыҙ тороп ҡалдыҡ. Иң ҡыйыны – иртәгә ни булырын һис кем әйтмәй, әйтә лә алмай. Ләкин Бурхан *(буддизмда изге илаһтарҙың береһе –* ***С. Ш.****)* ҡөҙрәте менән беҙ тере ҡалдыҡ, ҡабаттан ғәзиз далабыҙға ҡайтып йығылдыҡ.

Ике йылдан атайым менән ағайым Төркиәнән әйләнеп ҡайттылар. Амнистия буйынса. Әкренләп кенә тормошобоҙ яйланды. Топр итексе кәсебенә оҫтарып алды, ә Кирсан Башантин техникумын бөтөрөп, совхоз зоотехнигы булып китте. Икәүһе лә өйләнде, балалары тыуҙы. Эх... «эх»тәр булмаһасы... 1937-лә «халыҡ дошмандары»н эҙәрлекләү башланды. Нәҡ шул осорҙа күршеләребеҙҙең береһе тейешле органдарға ошаҡлай: «Аҡ эмигрант арабыҙҙа бутала. Ниңә сараһын

күрмәйһегеҙ?» Органдарға шул ошаҡ еткән – атайҙы 58-се статья буйынса алып та китәләр. Соловецк лагерена эләгеп, хәбәрһеҙ юғалды, бахыр. Хәҙер, ана, Топр менән Кирсан да, атайың да ҡәһәр һуҡҡан немец менән алыша. Уларҙы ҡырҡ берҙең йәйендә үк фронтҡа саҡырҙылар. Бына шулай йәшәйбеҙ инде, улыҡайым, Бурхан мәрхәмәте аҫтында...

Әсәйем йөрәкһеп әйтте һуңғы һөйләмен. Шунан, бер килке өнһөҙ атлағас, һорап ҡуйҙы:

– Мине тыңлап ялҡманыңмы әле? Ниңәлер аҙымдарың яйланды?

– Ялҡманым, әсәй. Әлдә һөйләйһең әле, юғиһә, ҡасан белер инем.

– Шулай, улым, һине аслыҡ, һалҡын хаҡындағы уйҙар йонсотмаһын өсөн һөйләйем дәһә. Хәҙер бына ауылға инербеҙ, әйберҙәрҙе бәрәңгегә алыштырып, кире ҡайтыуға сығырбыҙ.

* * *

Айдашка ағас өйҙәре, ҡабыҡлы ҡапҡалары менән ғәҙәти Себер ауылын хәтерләтә. Мөрйәләрҙән ялҡау төтөн төҙ күтәрелә. Төш мәле еткәндерме, урамда кеше-фәлән күренмәй.

Санабыҙҙы һөйрәп, яҡындағы ҡапҡаларҙың береһен шаҡыныҡ, тик берәү ҙә өндәшмәне, ихатаға ла сыҡманы. Икенсе ҡапҡаны туҡылдатабыҙ – шул уҡ хәл. Өсөнсөһөн шаҡыйбыҙ. Һары сәсле ҡыҙыҡай ҡапҡа асылыу менән ҡурҡышынан кире йүгерҙе: «Әсәкәйем, әҙәм ашаусы ҡалмыҡтар йөрөп ята!» Ысынлап та,ҡалмыҡтарҙы Себергә килтергәс, кемдер яман хәбәр тарата. Имеш, ҡалмыҡтар – ҡот осҡос йыртҡыс заттар, һаҡ булығыҙ. Айдашканың күп кешеләре лә был хәбәргә ышанған, күрәһең.

Тере йән бар типтерме, әсәйем баяғы ҡыҙыҡай ҡапҡанан уҡ ҡасып, соланға боҫҡан өйгә яҡынлашып, ҡабат тауыш бирҙе. Тышҡа мыҡты кәүҙәле яланбаш егет килеп сыҡты. Яурынына ҡыҫҡа тун ғына һалғайны, үҙе йылмайып маташа. Беҙгә ҡарап торҙо ла: «Ни йомошоғоҙ бар?» – тип һораны. Әсәйем, тыңламай китеп бармаһын йәш хужа тигәндәй, өндәшә һалды: «Бәрәңгегеҙ булһа, әйбергә алмаштырырға теләгәйнек...» Егеткәй етдиләнде һәм әйтте: «Әйбергә, тиһегеҙме? Улайһа, минең арттан өйгә инегеҙ, нәмәләрегеҙҙе шунда ҡарарбыҙ».

Йәш хужа артынса өйгә инеү менән, утыны ҡуҙланып янған ҙур ауыҙлы рус мейесенән тәнгә лә, йәнгә лә йылы бөркөлгәндәй итте. Мейескә яҡын һикелә ҡарт әбей йылынып ята, эргәһендә бая беҙҙән һырт биреп ҡасҡан һарыбаш ҡыҙыҡай алаҡанлап ултыра. Әсәйем тиҙ генә сумкаһынан атайымдың бер аҙ кейелгән, ләкин килбәтен юғалтмаған хром итектәрен сығарып күрһәтте. Егет итектәрҙе ҡулына алып, һынамсыл ғына ҡарағас: «Ә нисәнсе размер?» – тип белеште.

«Ҡырҡ беренсе», – тигән яуапты ишетеп, егет ниндәйҙер елкенеү менән һөйләнде: «Минең размер... Кейеп ҡарайым әле». Бына ул бйымаһын сисеп, итекте кейҙе лә иҙән буйлап тегеләй-былай йөрөштөрҙө. Әсәйем дә, мин дә, таман бит быға, оҡшатһа ғына ярар ине, тип сабыр ғына баҫып торабыҙ. Ысынлап та, егет итектән ҡәнәғәт ине, бигерәк тә атлағанда шығырлап-шығырлап ҡуйыуын оҡшатты шикелле.

– Иҫән-һау ҡайтһам, һаҡлап ҡына оҙаҡ итеп кейер инем, – тип йылмайҙы егет.

Әсәйем дә мәғәнәле генә һүҙ ҡыҫтырҙы:

– Бурхандан мин шуны теләрмен.

– Яҡшы, – тине егет, алсаҡланып. – Күпме һорайһың?

– Бер тоҡ бәрәңге.

– Яҡшы, – егет ҡабат йылмайҙы, – шул хаҡҡа килешәйек.

Себер кешеләре өйҙәренең иҙән аҫтарына баҙ ҡаҙа һәм бәрәңге-фәләндәрен ҡышҡылыҡҡа шунда һала. Ҡыҙыҡ күреп күҙәтәбеҙ: бына егет биҙрә тотоп бүлмә уртаһына барҙы, тимер ҡулсаһын тартып, дүрткел ҡапҡасты асты ла баҫҡыс буйлап аҫҡа төшөп китте. Бер минут үттеме-юҡмы, бәрәңге тулы биҙрәне өҫкә һондо. Беҙ уны тоҡҡа ауҙарҙыҡ. Тағы, тағы... Тоҡ тулғансы әсәйемә ихлас ярҙамлаштым.

Егет, баҙҙан сыҡҡас, тоҡ ауыҙын ныҡлап бәйләне лә белеште:

– Тоҡто ҡапларлыҡ берәй нәмәгеҙ юҡмы? Юлда бәрәңгенең туңыуы ихтимал.

– Бар, фуфайка һалып алғайныҡ. – Әсәйем икебеҙ өсөн дә яуапланы.

Егет тоҡто фуфайкаға урап, санаға йәтешләп сырманы. Рәхмәт әйтеп, ҡайтырға әҙерләнгәйнек, хужа туҡтарға ҡушты: «Әҙ генә ултырып торoғоҙ. Хәҙер мин сәй яңыртам, юлға үҙегеҙҙе әҙ-мәҙ һыйлап ебәрәйем». Шулай тине лә йәһәт кенә ҡалай сәйнүген эҫе плитәгә ултыртты, йышылмаған өҫтәлгә арлы-бирле ризыҡ теҙергә кереште, ә беҙ шул арала стенаға рамлап эленгән ғаилә фотоларына күҙ һалдыҡ.

...Әллә ҡасанғы, ярайһы һарғайған бер нисә фотола – мыйыҡлы казактар, түштәрендә – Георгий тәреләре. Икенселәрендә – буденовка кейгән ҡыҙылармеецтар, өсөнсөләрендә – фуражкаларын баштарына текә һалған бөгөнгө Ҡыҙыл Армия һалдаттары. Әсәйем ниҙер белешкәс, егет ғорурлыҡ менән: «Рус-япон, Беренсе донъя, Граждандар һуғышы һәм әлеге һуғыш фронттарында ҡатнашҡан атай-олатайҙарым, туғандарыбыҙ», – тип аңлатты.

Сәйнүк тиҙ ҡайнаны. Йәш хужа беҙҙе табынға әйҙүкләне. Көршәктә бөтәүләй бешкән эҫе бәрәңге, эре бөртөклө тоҙ, һөт ҡушылған ҡайнар һыу – бар ғына ризыҡ ошо, мәгәр заманына күрә мул һый. Себер кешеләре ул осор сәйҙе әллә ни ҡулланмағандыр, тим. Ә ҡалмыҡтар үтә сәйхур зат бит. Һәр хәлдә, һыуыкта өшөп-туңып килгән беҙ мәхлүҡтәргә барса ниғмәт ифрат тәмле, ифрат танһыҡ тойолдо.

Тамаҡ ялғап ултырғанда һүҙсән генә егеткәй ана-бына армияға повестка көтөүен әйтте. Өс ағаһы күптән яу яланында, тик береһенән беростоҡ та хәбәр юҡ, имеш, әлегәсә. «Өйҙә Ваня – кинйә ҡустым ҡаласаҡ, – тине йәш хужа, бәрәңгеһен әрсей-әрсей. – Әсәйгә ярҙамсы булыр. Уның һаулығы ҡаҡшаған шул. Эйе, фронтка китәм дә фашистарҙы бешәм, юғиһә, улар халыҡты ныҡ ыҙалата, тип яҙалар ҙаһа гәзиттә».

Әңгәмә барышында әҙәпле егет әсәйемдән беҙҙең кем икәнлекте лә, рудникка нисек юлыҡҡаныбыҙҙы белгәс, ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла теләгәндәй, аратирә ярһып мыңғырҙаны: «Шулай була тиме? Ғаилә башлығы фронтта йөрөй, ә ҡатыны менән балаһы – бында... Ай-һай, ядрена феня». Һуңғы һүҙҙәренең һүгенеүгә яҡын икәнлеген мин йылдар уҙғас ҡына төшөнәсәкмен. «Ярай, нишләмәк кәрәк. Ҡараңғыға ҡалмай, имен-аман ҡайтығыҙ Мазулькаға».

Хушлашып, рәхмәттәр әйтеп тиҙ-тиҙ юлға йыйындыҡ. Йылы бәрәңгеле, һөтлө өйҙән төкөрөк туңырлыҡ һыуыҡҡа һис тә генә сумғы килмәгәне һаман хәтерҙә.

Тәү күргәндә беҙҙән ҡурҡып ҡасҡан ҡыҙыҡайҙың инде тыныс, яғымлы ҡараш менән оҙатҡаны ла онотолмай.

Себер егете баяғыса, яурынына ҡыҫҡа тунын һалып, беҙҙе ҡапҡа алдына уҡ оҙатырға сыҡты ла Мазулға тураҡ юлды өйрәтеп ебәрҙе. Төш ауып бара, шулай ҙа ҡояш нурҙары томанһыу сасҡауҙы ярайһы яҡтырта ине әле. Тын алыуы ауыр. Һәлмәк санаы һөйрәп, һөйләшмәй генә атлайбыҙ, һөйләшһәк, хәл бөтәр һымаҡ.

Кискә табан нығыраҡ һалҡынайтты, атлауыбыҙ ҙа ауырлашты. Мин инәләм, туҡтайыҡ, ял итеп алайыҡ, тим, әсәйем тыя, әйҙә, туҡтарға ярамай, туңып үлербеҙ, ти. Күҙ алдарым ҡараңғыланһа ла, ҡыбырлайым, әсәйҙе тыңламау мөмкин түгел. Ысынлап та, үҙәккә үтмәле һыуыҡта тәүҙә кешене йоҡо баҫҡандай итә, шунан уның ихтыяры һына, аҙағы иһә – боҙ булып ҡатҡан мәйет. Шуға мин әле, олоғайған көнөмдә, ошо хәтәр хәтирәмде әсәйемә рәхмәт яуҙыра-яуҙыра яҙам. Ниндәй аҡыллы, ҡатҡыл рухлы булған ул!

Мазулға төнгә ҡарай көс-хәлгә барып индек. Тик иң ҡыйыны ҡалмыҡтар йәшәгән барак-блиндаждарға етеү булды, сөнки улары тау битләүенә ҡош ояларындай һибелеп урынлашҡайны. Бәғзе бараҡтарҙың туң тәҙрәләренән һуҡыр шәм яҡтыһы баҙлағаны асыҡ шәйләнә. Яҡында ғына кеүек тә бит, әммә үркәскә сана һөйрәп менеүҙәре бөтөнләй быуынһыҙ ҡалдырҙы. Ауа-түнә, имгәкләп тигәндәй, нисектер ғәзиз тойолған шөкәтһеҙ баракка яҡынайҙыҡ.

Төнгө күктә ҡыйғас ай баҙрай. Ҡар өйөмдәре араһынан үҙебеҙҙең лапаҡ барак ишеген туң быйма башы менән типкесләнем. Учур исемле апай хафаланып ҡаршыланы, сутырлығын сыға үҙе.

– Ниңә улай оҙаҡланығыҙ? Таныш булмаған ауылға китеп ни... Бүреләр тамаҡлап ҡуйһа! Йә Хоҙай...

Самаһыҙ арыуҙан сисенерлек тә хәл юҡ. Әсәйем ярҙамлашты. Шунан ул һүрән генә майшәм яҡтыһында блок-секциябыҙҙағы күршеләргә өсәр-дүртәр әрселмәгән бәрәңге бешереп таратты. Катя апайҙың ас балалары быға бик ҡыуанды, Учур апайҙың берҙән-бер ҡыҙыҡайы – Саный – бик сирләшкә ине. Һөйөндө микән, белмәйем, ҡараңғы аралаш һиҙмәнем.

Бер бәрәңгене ашап та бөтмәйсә, өҫтәлгә башымды терәгән килеш йоҡоға сумғанмын. Аҙна-ун көндән Саный, әсәкәйен бөтмәҫ ҡайғыларға һалып, яҡты донъяны ташлап, туң гүргә инде.

...Себерҙә һәр бер ҡалмыҡ рәсми телдә «спецпереселенец» ине. Хәтерҙә, яҙмыш елдәре иркәләмәгән бик күптәр беҙҙең баракта һыйыныр һәм йылыныр мөйөш таба торғайны. Рудниктағы бөтә милләттәштәрем мине «Сулда түтәй улы» тип йөрөттө, сөнки атайым фронтта ине. Ул рудникка 1946 йылдың мартында ғына килде. Сикһеҙ даланан Берлинғаса барып еткән еңеүсе һалдат булып.

Мазул руднигында көнитмешебеҙ нисек тә йән аҫрау, нисек тә бала-сағаның, ҡарт-ҡороноң тамағын туйҙырыу хәсрәте менән уҙҙы. Бынынһы – бер бәлә. Иң ҡыйыны, әйтәгүр, йөрәктәрҙе һағыш уты өттө. Ҡалмыҡстан киңлектәрен юҡһыныу бәғерҙәрҙе гелән, гелән генә телеп торҙо...

**Сабир ШӘРИПОВ тәржемәһе.**



Игорь
ГРИНЬКОВ

# ӘҘӘМИ ШӘҮЛӘЛӘР

ХИКӘЙӘ

Тупаҡ энә осон беләгендәге ҡан тамырына тура килтерергә тырышып, Басан оҙаҡ мәшәҡәтләнде. Туҡтауһыҙ яһалған уколдарҙан ул шул тиклем бешеләнеп ҡатҡан – һис тишерлек түгел. Энә аҫтынан ҡул буйлап юлаҡ-юлаҡ ҡан китеп, иҙәнгә тама. Ауыртыу тоймай ул: әллә өйрәнеп бөттө, әллә көтөлгән тәьҫир тойғоһо ялмап алған мейеһенә ауыртыу тойғоһо барып етмәй. Тырышып-тырмашыуҙарҙан хатта тирләп сыҡты, бармаҡтары ҡалтырана башланы. Ниһайәт, ҡан тамыры эсендәге бушлыҡҡа энәнең беҙҙәй инеп китеүен эске тойомлауы менән генә һиҙеп ҡалды. Өҫтәнерәк ҡулын быуып, теше менән тотоп торған бауҙы бушата бирҙе һәм, шприц-баяндың тоноҡ быялаһы эсендәге бурьяҡ шыйыҡса эсендә ҡан да болғана башлауын күреп,поршенде тигеҙ һәм яй ғына этәрә башланы. Көсөргәнешле ҡиәфәте мәғәнәһеҙ йылмайыу шәрәмәте менән алмашынды.

“Криминаль китап”та Квинтин Тарантиноның был шөғөлө ҡайһылай шәп килеп сыға! Унда һауалыраҡ холоҡло был герой алтын ялатылған шәмсыраҡтың зәңгәр ялҡынында көмөш ҡалаҡта тәүҙә героинды йылыта, шунан ғына ҡаҙай. “Герой”ҙың ҡан тамырҙары ла төйөрөмләнеп, бөлтәйеп тора. Ә бында шул тиклем имәнес, етмәһә, “үҙәк”тәр янып бөткән. Притон-фатирҙың кеше ҡарағыһыҙ торошо ла Тарантино өйө менән сағыштырырлыҡ түгел.

Аҫтыртын, әммә ҡыҙыу рәүештә бөтә донъя буйлап миллионлаған йәштәрҙең аңына һеңдерелә барған “мәҙәни наркоэстетика” төшөнсәһе тураһында Басан белмәй, әлбиттә. Был шаршау артынан тотош быуындарҙың ҡыйратылған яҙмыштары, миллиардлаған долларҙар – үлем менән сауҙа итеүҙән алынған саф табыш ҡайҙан күренһен.

Уф, ниһайәт, килеп сыҡты был! Оҙағыраҡ мәшәҡәтләнергә тура килер һымаҡ ине бит.

Егерме йәшлек Басан ике йыл инде “винт”та – “солутан” тип аталған медицина препаратынан яһалған яһалма наркотикта ултыра. Медицинала “солутан”ды үпкә сирҙәрен дауалағанда ҡулланалар. Уйлап табырға һәләтле наркомандар уны оҙайлы һәм мәшәҡәтле юлдар менән кинәнес алыу сараһына әйләндерергә өйрәнгән. Ябай ғына нәмәләр ҡушып оҙаҡ ҡайнатҡандан һуң, был дарыу “Джеф коктейле” тип аталған полуфабрикатҡа әйләнә. Ул үҙе үк әҙер наркотик һымаҡ. Түҙемһеҙҙәр ошо ерҙә туҡтала. Әммә был әһәмиәтһеҙерәк: “Джеф коктейле” “винт”тың кескәй генә өлөшөн тәшкил итә, уның йоғонтоһо ла ҡыҫҡа ваҡытлы, ул тиклем көслө лә түгел.

---

*Гриньков Игорь Николаевич — һөнәре буйынса юғары категориялы табип. Яҙыусы “Суд медигы очерктары" исемле китаптары, төрлө журналдарҙа сыҡкан криминаль темаға повестары, уймаҡ хикәйәләре менән билдәле. Элиста ҡалаһында йәшәй.*

Дарыуханаларҙан шундай ҡыйынлыҡ менән тапҡан “солутан”ды былай осһоҙ тәләфләү шәп түгел. Әҙерәк түҙемлек күрһәтеп, тағы ла оҙағыраҡ ҡайната бирһәң, бар тәнеңде өтөп алырлыҡ тулы ҡеүәттәге наркотик – “винт” килтереп сығарырға мөмкин.

Басан һәм уның “дуҫтары” фекеренсә, бар тирә-яғыңды йәйғорло төҫтәргә күмеп тап ана шул ут ялмаһын өсөн, ҡайнатыуҙы дауам итергә кәрәк тә инде. Әлбиттә, аҙаҡтан, берәй тәүлектән һуң, матур кәйефең юҡҡа сыға, хәл бөтә, донъяның ҡыҙығы ҡалмай. Шуға өс-дүрт көндән “винт”тың яңы дозаһы һулар һауа кеүек кәрәк була башлай.

Наркотиктарға Басан 16 йәшенән үк өйрәнгәйне. Ул ата-әсәһе, һеңлеһе менән ҡаланың иҫке райондарының береһендә йәшәне. Был “йоҡо ҡапсығы”нда көнбағыш ҡабығы менән тулған соҡор-саҡырлы юлдарҙан, ишектәре ҡайырып алынып, иҙәндәре тәмәке төпсөктәре, буш шешәләр, презервативтар менән тулы подъездарҙан, бер нисә тәүлек әйләнәһенә эшләүсе киосктан башҡа күҙгә күренерлек нәмә юҡ.

Йәштәрҙең күпселеге көн дә бер шөғөлгә сума. Ҡайҙалыр йөрөргә аҡсалары булмағанлыҡтан, үҫмерҙәр кистәрен бер ергә өймәкләшәләр ҙә, йыйылған ваҡ аҡсаға һыра, тәмәке алып, гитара сиртәләр, юҡ-бар гәп һаталар, йыш ҡына һуғыштар ҙа сығып ҡуя.

Басан микрорайондың йәштәр бандаһы ағзаһы ине. Әлбиттә, ябай ғына ағза, әммә бик әүҙем һәм һуғышсан ағза. Бандала тормау ҙа мөмкин түгел. Тәртиплерәк малайҙарҙы йә туҡмайҙар (береһе хатта ғәрип булып ҡалды), йә яһаҡ түләтәләр. Күҙлек кейгән “ботаниктар”, скрипка ҡумтаһы менән йөрөгән йәш һәләттәр үҙҙәрен тыуған райондарында үтә ҡыйын тоя. Ә Басанға үҫмерҙәрҙең енәйәтсел ойошмаһында йөрөү бик оҡшай ине. Был үҙ районыңда яҡланғанлыҡ тойғоһон бирә һәм ниндәйҙер дөйөм эшкә йәлеп ителгәнеңде һиҙҙергән һымаҡ. Әлбиттә, иңгә ҡайһы бер бурыстар ҙа һала ине. Бер һыҙғырыу менән, бар эштәреңде ташлап, йыйылыу урынына сабырға кәрәк, сөнки банданың мәнфәғәте һәр нәмәнән өҫтөн.

Әйтәһе түгел, төркөмдөң нигеҙен аҙғын ғаиләләрҙән йыйылған балалар тәшкил итә, тик үҙ көнөн үҙе күрәм тип көнө-төнө ал-ялһыҙ тир түккән ата-әсәләрҙең ҡарауһыҙ балалары ла килеп эләгә ине бында. Басандың ҡайҙа, ниҙәр ҡылып йөрөүен белеп ҡалған ҡаты ҡуллы, эшһөйәр атаһынан ул йыш туҡмалып торҙо.

Уларҙың бандаһы күрше райондағы шундай уҡ төркөм менән ҡан дошман ине. Шуға күршеләргә көпә-көндөҙ ҙә яңылыш яңғыҙ барып сығыу хәүефле: үлем хәленә еткергәнсе бәргесләп ташлауҙары ихтимал. Йыш ҡына ике банда араһында күмәк һәм аяуһыҙ бәрелештәр булып тора. Ул саҡта велосипед сынйырҙары, таяҡтар, кирбестәр, хатта бысаҡтар ҙа худҡа китә. Һуғыштарҙа ҡаршы яҡҡа ҡарата аяуһыҙлыҡ хөкөм һөрә, һәм алыш бик күңелһеҙ тамамлана. Милиция иһә бындай бәрелештәрҙән һуң берәйһенең үле кәүҙәһе ҡалһа ғына әүҙемләшеп киткән була. Ә былай үҙ-ара айҡашып йәшәгән үҫмерҙәрҙә уларҙың эше юҡ.

Үҙен йомшаҡ һәм аңлы һанаған йәмғиәт, башын дөйәғоштай ҡомға тығып, бындай халыҡты антисоциаль йүнәлештәге йәштәр төркөмдәре тип атай. Ысынлап та, банда тиһәң – бер хәл, ә төркөм тиһәң – хәл икенсерәк. Тәүгеһендә Уголовный кодекс еҫе аңҡый, тимәк, ниндәйҙер саралар күрергә кәрәк. Икенсе осраҡта иһә бер ни ҡылырға кәрәкмәй. Шулай ҙа бындай “төркөмдәр”ҙең енәйәт авторитеттары ҡанаты аҫтында йәшәүе береһенә лә сер түгел. Был

бандаларҙан күбеһе аҙаҡ барыбер шул криминаль донъяға барып юлыға тора. Был өлкәндәрҙең ойошҡан төркөмдәрен өҙлөкһөҙ тулыландырып тороусы сикһеҙ даръя ролен үтәй.

...Наркотиктарға ылығыу ябай ғына башланып китте. Был ваҡытта Басан училищела уҡый ине. Ғәҙәттәге бер йәйге кистә ул емерек беседкала бер төркөм тиңдәштәре менән гәп һатып ултыра ине. Улар янына микрорайонда һәр малайға таныш, улар тарафынан ихтирамлы Очир исемле ир килде.

– "План" тәмләп ҡарағығыҙ килмәйме, егеттәр? Ып-ысыны. Кәйефегеҙ бермәбер күтәреләсәк!

Бындай тәҡдимдән баш тартыу мөмкин түгел ине. Очир һынлы Очир алдында мәмәйлегеңде күрһәтеп, баш тартып тороп булмай ҙа инде. Ул анаша тултырылған, янып торған тәмәкене түңәрәк буйлап ебәрҙе. Басандың кәйефенә шундуҡ, бер-ике һурыуҙан уҡ, тәьҫир итте был зилзилә. Ярым емерек микрорайон төҫтәре сағыуланды, тәҙрәләрҙән яҡты уттар һибелә башланы. Ҡара-һоро емерек биш ҡатлы йорттар ҙа, һындарын үҙгәртеп, быяла һәм ялтырауыҡтарҙан торған, күккә ашҡан манаралы биналарға әйләнде. Аҙаҡтан уның көлгөһө килә башланы: иптәштәренең һәр һүҙе, һәр ҡыланышы шундай көлкөлө булып күренде. Анаша тартҡандан һуң алған кәйеф араҡы эскәндәгенән ҡыҫҡараҡ булды, әммә ул шундай ғәжәйеп һәм ҡабатланмаҫлыҡ, һүҙҙәр менән аңлатып булмаҫлыҡ ине.

Малайҙарҙы бик ентекләп күҙәткән Очир Басандың был хәлен шунда уҡ иғтибарға алды: "Бынан рәт сығасаҡ!" Рәт тигәндә ул, әлбиттә, был малайҙы тиҙ арала ҡулға эйәләштереп буласағын самаланы.

Өйгә ҡайтҡас, Басан ҡомһоҙланып ашарға йәбеште. Ул һыуытҡыста булған барлыҡ ашамлыҡты юҡ итте. Мәҙәниәтле мөхиттәрҙә бындай аппетит "раблезиан" тип атала, ә Басан осрағында ул былайыраҡ аңлатыла: "үлән"дең кире йоғонтоһо.

Очир тағы ла бер нисә тапҡыр малайҙарҙы анаша менән бушлай һыйланы ла был донъяла бер низең дә бушлай бирелмәүен, һәр нәмә өсөн дә түләргә кәрәклеген аңлатты. Ул үҙе лә тауар алыр өсөн шаҡтай сығымдарға бара икән.

Ҡыҫҡа мәлгә килгән күтәренкелек бер нисә сәғәт дауам иткән кәйеф юғарылығына әйләнде. Басан үҙе һымаҡтар менән матраста аунап, аңын был донъянан айырған, тулҡын-тулҡын булып ябырылып, үҙе менән әллә ниндәй ләззәттәр алып килгән ирәүәнлек донъяһына сумды. Унда бөгөнгө лә, кисәге лә, булыр нәмә лә юҡ, Мәңгелектең үҙендә һымаҡ тойҙо ул үҙен. Хәйер, ни икәнен аңларлыҡ хәлдә түгел ине, аңы эшләмәй бит.

Ләкин был Мәңгелектең шәүләһе генә ине. Тиҙҙән ундай тойғолар наркомандар "һыныу" тип атаған кисерештәр менән алмашынды. Бындай әшәкелекте лә Басандың бер ҡасан да үткәргәне булманы. Ҡот осорлоҡ күренештәр, иләүерткес төштәр менән ауыр йоҡо. Көнө буйы бөгөлөп-һығылып, ҡоҫоп һәм эсе китеп сыҡты уның. Ләкин улары ла яйлап баҫылды, һәм Басан ҡайтырға юлланды.

– Ҡайҙа йөрөнөң өс көн буйына? – тип уҫал һораны ла атаһы, улының еңендә кибеп ҡатҡан ҡан табын күреп ҡалды. – Ҡайҙа, ҡулыңды күрһәт әле!

Басан үҙе лә һиҙмәҫтән ҡулын асып күрһәтте. Терһәктә кескәй генә яра янына йәшкелт-күгелйем тап йәйелгән. Атаһы улына ҡулын да күтәрмәне, әрләп тә маташманы – кинәт кенә һығылып төштө. Ауыр итеп ултырғысҡа ултыра төштө лә ғүмерҙә өйҙә тартмаған тәмәкеһен тоҡандырҙы. Тыныс ҡына өндәште:

– Һине берәй һуғышта үлтерһәләр йә төрмәгә илтеп тыҡһалар, яҡшыраҡ булыр ине. Лагерҙан барыһы ла кешелектән сығып ҡайтмай, ҡай саҡта төҙәлеп тә ҡуялар. Ә былар менән һин бөтәһең, улым!

Басан да икеләнә башланы, башында төрлө уйҙар ҡайнаны. Өйҙәгеләрҙе йәлләү тойғоһо, улар алдында ғәйеп күберәк ине барыбер. Ул тип үлә яҙып торҙолар, ә ул ҡул һелтәп кенә ҡараған. Һәр ваҡыт ҡырыҫ, кәрәк саҡта уҫал да була белгән атаһының ҡапыл ебеп төшөүе бигерәк тә ауыр тәьҫир итте. Эстән генә ул тиҙерәк Очирҙан ҡотолорға, был тәжрибәләрҙе бөтөрөргә ниәтләне. “Һынылыш” ваҡытындағы кисерештәре хәтерендә ине әле уның.

Ләкин ике көндән, һеңлеһенең компьютер уйындары системаһын ҡосаҡлап, ул тағы ла Очир янына сапты һәм шул уҡ “притон”ға килеп эләкте. Үткәндәге ләззәтте тағы ла кисереп ҡарау теләге изге хыялдарҙан көслөрәк булып сыҡты. Очир-психолог Басанды дөрөҫ баһалаған икән: ул наркотиктарға ике-өс аҙна эсендә ныҡлап ултырҙы. Шул арала ул былай ҙа фәҡир генә ғаиләһен бөтөнләй яланғас ҡалдырҙы. Ахыр сиктә атаһы уны урамға сығарып ырғытты, әсәһенең илаулауына иғтибар ҙа итеп торманы:

– Һин минең улым түгел! Башҡаса килеп йөрөмә! Үҫеп еткәнһең инде, барыр юлыңды ла үҙең һайланың. Һине дауаларға беҙҙең аҡса юҡ, файҙаһы ла юҡ, тиҙәр, уның. Әсәйең менән беҙ, исмаһам, ҡыҙыбыҙҙы әҙәм итһәк тә яраған. Башҡаса минең юлымда осрайһы булма!

Атаһына был аҙым өсөн ниндәй көс кәрәк булғанын Басан, әлбиттә, күҙ алдына килтерә алмай ине. Ләкин атаһы эш кешеһе ине һәм, берәй ҡарарға килһә, кире уйлап тормай. Ә үҙ өйөндә, үҙ аҡсаһына бер әтрәгәләм наркоманды аҫырап ятҡырыу уның тәбиғәтенә ят ине.

Тиҙҙән уҡыуҙар башланды. Элек тә уҡыуға әллә ни әүәҫлек күрһәтмәгән Басан училищеға йөрөүҙән туҡтаны. Ул башкөлләй икенсе донъяға – кешеләрҙең шәүләләре генә ҡалған, тик бер көн менән генә йәшәгән, һәр ҡайһыһы һуңғыһына әйләнеү ихтималлығы булған тормошҡа сумды. Кешеләр йәшәгән оло тормош менән йәнәшә һәр ваҡыт икенсе донъя бар инде ул: криминаль донъя, наркомандар тормошо, сексуаль аҙсылыҡтар тормошо һәм башҡалар… Ләкин криминал менән ысынбарлыҡ тығыҙ бәйләнештә йәшәһә, наркомандар донъяһы күптәр өсөн бөтөнләй ят һәм алыҫ булып ҡала килә.

Бандаһынан Басанды сығарып ташланылар, хатта туҡмап йә ниҙер таптырып та аҙапланманылар: “Һин – энә ҡоло, беҙгә нимәгә кәрәгең бар?” Ысынлап та, уларға бит ҡурҡыу белмәгән, тиҙ арала теләһә нәмәгә әҙер булған һуғышсы кәрәк, ә көн һайын “Тағы ла ҡайҙан доза табырға?” тип баш ватҡан меҫкен кемгә хәжәт? Тыуған районында ла Басан күренеп йөрөмәне, ул ер өңөндә йәшәгән дуҫына барып һыйынды. Хәйер, улар араһында дуҫлыҡ төшөнсәһе лә шулай ғына инде.

Шуныһы ҡыҙыҡ: Басандың “аңдың теге яғына” сәйәхәттәре дини яҡҡа ауыш бара ине. Ә бит ул бер ҡасан да дингә ышанманы. Башҡаларҙан күрмәксе генә, муйынына ҡыҙыл еп менән эсенә көмөш аҡса, доға һалып тегелгән күн тоҡсай тағып йөрөй. Тик был аңлы рәүештә түгел, ә модаға эйәреп, ҡалмыҡтарҙың үҙ тамырҙарын эҙләй башлауы яғына ауышыу ғына ине. Улар араһында, күңелдәрен яһил баҫһа ла, муйындарында тәре йөрөткән урыҫтар ҙа осрай ине бит.

Ҡалмыҡ халҡының тибет буддизмы аҫтындағы дүрт быуатлыҡ юлын 1917 йылғы революция ҡыйҙы. Әммә милләттең үҙаңын 1943 – 1957 йылдарҙа тотош халыҡты Себергә һөрөү тамам юҡҡа сығарҙы. Басандың ата-әсәһе лә дини кешеләр булманы. Шулай ҙа тотош ғаилә менән яңы төҙөлгән будда ҡорамына – хурулға барғандары иҫендә ҡалған. Аяҡ аҫтында мәж килгән кешеләргә һауалы ҡарап ултырған Будданың алтын ялатылған биш метрлыҡ һыны бигерәк тә хәтергә уйылды.

Хурул ҡаланың һәр еренән дә күренеп торорлоҡ итеп төҙөлгәйне. Төндәрен төрлө яҡтан яҡтыртылған был ғибәҙәтхана һауала осоп барғандай тойола.

Басанға шунан артығы кәрәкмәне лә. Будда тормошо тураһында бер кескәй китапсыҡты ҡарап сығып, ул хәҙер – наркотиктар тәьҫире аҫтында – үҙен матди донъянан айырылған итеп, ысын рухи донъяға яҡынлағандай итеп тоя ала ине. Күптәр йылдар дауамында шөғөлләнеүҙәр аша ирешә алған хәл торошона ул ябай ғына юлдар аша килеүен тойғандай булды. Ошо кисереш уны һайлантыҡ бөйөктәр иҫәбенә керетергә мөмкинлек бирә ине. Кешеләр ғүмер буйы эҙләгән сафлыҡҡа, рухи юғарылыҡҡа, баҡтиһәң, ҡанға бер аҙ ғына доза ебәреү аша ла ирешеп була икән…

Тик бер аҙҙан бындай тойғоларҙы ҡабат кисерер өсөн дозаны арттыра барырға кәрәклеге асыҡланды. Тәүге күләм тейешле ләззәтте бирмәй башланы. Әммә дозаны ла туҡтауһыҙ арттырыу мөмкин түгел. Беренсенән, бының өсөн гел аҡса кәрәк; икенсенән, артыҡ доза алып аяҡ һуҙыуың да мөмкин. Уға, наркомандар теле менән әйткәндә, бер нисә тапҡыр “йәшәреп” алырға тура килде, йәғни диспансерға ятып дауаланырға.

Наркотиктарға бәйлелек барлыҡҡа килеү менән, Басанда “һыныу” кисерештәре лә башланды. Иҫерек кешенең башы яйлап төҙәлеүгә барһа, наркомандың бындай хәле тәрәнәйә генә. Тәндең түҙеп торғоһоҙ ауыртыуы өсөнсө-дүртенсе тәүлеккә ахыр сигенә барып етә. Бар организм тоташ бер ауыртыу йомғағына әүерелә. Туҡтауһыҙ эс китә башлай. Күҙҙәрҙән йәш, танауҙан өҙлөкһөҙ маңҡа аға. Тағы ла шул ағыуҙы алғы, тағы ла ағыуланғы килеп тик тора. Бер укол өсөн әҙәм йәнен шайтанға һатырға әҙер булып китә. Йоҡлап булмағанлыҡтан, мейе эшләмәй башлай. Табиптарҙың ярҙамынан тыш бындай хәлдән сығыуы мөмкин түгел. Улар тырышлығы менән генә ике аҙна үткәс хәл еңелләшә башлай. Бындай тойғоларҙы кисереп ҡараған наркоман да артабан ләззәт алыу өсөн түгел, ә шул һыныу ҡабатланмаһын өсөн энәгә тағы йәбешә. Улар ләззәт алмай ҙа, яңы доза уларҙы бер аҙға ғәҙәти кешеләр сафына баҫтырғандай була. Шуға наркомандар араһында ошоға бәйле көләмәс тә йөрөй. Имеш, улар бергә йыйылышып алһалар, башта нисек доза табыу тураһында баш ваталар, кәйефләнеп алһалар иһә, был сирҙән нисек ҡотолорға, тип уйлай башлайҙар.

Кеше-шәүләләр менән аралашыу Басанға бер кинәнес тә килтермәне. Былар араһындағы бысраҡлыҡ, һатлыҡ йәнлек, алдаҡсылыҡты башҡа бер ерҙә лә осратырға тура килмәне уға. Бер укол өсөн һәр ҡайһыһы әсәһен һуйырға ла әҙер хәлгә етә ала. Ҡайтарып биреү шарты менән берәйһе доза биреп торһа ла, үҙҙәре мыҫҡыл менән ҡараған алкоголиктарҙағы һымаҡ ҡойроҡҡа ултырыу юҡ бында. Арала бай ғаиләләрҙән сыҡҡандар ҙа бар, уларына аҡса табыуы ҡыйын түгел. Улары тиҙ генә ярлыларҙы ташлап, үҙ төркөмдәренә ойошоп китә. Ҡалғандары ҡулынан ни килә, шул юлдар менән аҡса табыу яйын ҡарай. Өйҙән әйберҙәр сығарып һата, кеше талай, үҙ өлөшөнә өмөт итеп, наркотиктар һатыу менән шөғөлләнә… Әүҙемерәктәр тарма сәскә атҡан ваҡытта уны йыйыр өсөн күрше өлкәләргә лә сығып китә, мәк ташый. Ҡыҙҙар фәхишәлек менән шөғөлләнә. Йүнле ерҙәрҙә уларҙы береһе лә көтмәй, әлбиттә – юлдағы машиналарҙы арзан ғына хаҡҡа ҡарауыллай улар.

Басан арзанырaҡҡа алып булған наркотиктарҙың барыһын да ҡулланып ҡараны. Ағыулы бәшмәктәрҙән генә араланы яҙмыш. Ниһайәт, уға алыҫыраҡ бер туғаны аша дарыухананан рецептһыҙ ғына “солутан” тигән дарыу табыу мөмкинлеге килеп сыҡты, һәм ул ныҡлап “винт” тигән наркотикка ултырып

алды. Өҙләкһеҙ эшләнеп торған уколдарҙан уның ҡулындағы тамырҙар төйөрләнеп ҡатты, тиреләре шешенеп китте, серей башланы, шуға ул эҫе көндәрҙә лә оҙон еңле кейем кейергә мәжбүр ине. Тәненең башҡа ерҙәре лә тишкеләнеп бөттө, тотош тәне серей ине. Ҡаны ағыуланып үлеүҙән уны сираттағы йәшәреү – иҫәрҙәр йортона барып эләгеү әрсәләп ҡалды. Дауаханала ятып алыу бер аҙ көс йыйырға ла мөмкинлек бирҙе.

Наркомандар йыйылған ерҙәрҙә ҡыҙҙар ҙа осраһа ла, уларҙы береһе лә ҡатынҡыҙ тип ҡабул итмәй. Улар бында – енесһеҙ йән эйәләре, бүлмә эсендә сыр яланғас йөрөһәләр ҙә, береһе лә иғтибар итмәй. Энәлә ултырыусыларҙы секс бөтөнләй ҡыҙыҡһындырмай. Шулар араһынан Басан нисектер Маша исемле мәрйә ҡыҙына иғтибар итте. Бала ғына был ҡыҙҙы күрше ҡатыны энәгә ултыртҡан икән. Ике балаһын ҡарар һәм үҙенә наркотик табып торор өсөн, ул ҡунаҡхана янында клиенттар эҙләп өйөрөлә. Башта – балаларын ҡарап торор өсөн, аҙаҡтан – үҙенә ярҙамсы итеп, Машаны ошо һаҙлыҡҡа һөйрәй.

Басан Машаны бер төркөмдә бер нисә тапҡыр күреп, иғтибар ҙа итмәгәйне. Бер тапҡыр ҡараңғы тыҡрыҡта уны үҫмерҙәр тотоп алып, сисендерә башлағандарын күреп ҡалды. Егеттә ҡасандыр һалынған урам һуғышсыһы уянып киткәндәй булды. Ул, кирбес киҫәге һәрмәп алып, төркөм өҫтөнә ярһып ташланды. Йәштәр уның менән бәйләнеп торманы, эҙҙәрен яҙҙырҙы.

Ҡыҙыҡайҙы өйөнә тиклем оҙата барып, Басан уның тормошо тураһында инәле-сығалы хәбәрен тыңланы. Ҡыҙ телсәнлеге һәм аҡылы менән әллә ни айырылмай ине, хәйер, өләсәһенең пенсияһына ғына йәшәп, тартып-һуҙып туғыҙынсыны саҡ бөтөрә алған кешенән артығын көтөп тә булмай. Донъялағы иң боронғо һөнәр менән шөғөлләнеүҙе күрә алмаһа ла, уға башҡа юл менән аҡса табыу мөмкинлеге юҡ икән. Басан уны ысынлап йәлләгәндәй булды, ә “йәлләү” һүҙе ҡай саҡта “яратыу”, “яҡлау” һүҙҙәренә лә оҡшаш булып китә ул. Өҫтәүенә, был сикһеҙ донъяла улар икеһе лә береһенә лә кәрәкмәй булып сыҡты, ҡыҫҡаһы, уртаҡ яҡтары бар икән. Тышҡы ҡиәфәте менән дә Маша арыу ғына.

Ана шулай барлыҡҡа килде сәйер тормошта йәшәүселәр араһында үтә лә сәйер был пар. “Метистар үрсетмәксеһегеҙме?” – тип шаяртты берәү кәйефе шәп саҡта. Ә ҡалғандар иғтибар ҙа итмәне, уйҙары башҡала ине уларҙың. Ә Басандың тағы ла бер мәшәҡәте, ҡайғыһы артты. Иртәнсәк яңы доза эҙләгәндә ул Маша өсөн дә эҙләй ине. Бер тапҡыр хатта мөмкин булмаҫтайҙы ла ҡылып ташланы: үҙенең хәле бөтә барыуын тойһа ла, аҡтыҡҡы өлөшөн уға биреп ҡуйҙы.

Хәҙер улар йыш ҡына бергә йөрөнөләр. Хәлдәре барҙа, кәйефтәре булғанда “иҫерек урам”ға барып, һыра эсеп ултыралар, бейеп тә алалар. Басанды күптәр хулиган саҡтарынан хәтерләгәс, бәйләнеүсе булманы. Һуғыш мәктәбен шәп үткән егеттең әле ваҡ-төйәк шпанаға ҡаршы торорлоҡ ҡына хәле лә бар ине. Ул Машаны төндәрен ҡунаҡханаға йөрөүҙән тыйып ҡуйҙы, шул сәбәпле күрше ҡатыны уның ҡан дошманына әйләнде. Икеһенең дә наркотиктар һаҙлығында башкөлләй ултырыуы сәбәпле, улар киләсәккә әллә ни уй-ниәттәр ҡора алмай ине. Әлбиттә, Басан был бысраҡтан сығыу тураһында уйлап ҡарағаны булды, тик эргә-тирәһендәге бихисап миҫалдар киреһен күрһәтә һәм бер ниндәй өмөткә лә урын ҡалдырмай ине.

Тағы ла “винт” уколы эшләп алғас, Басан хәрәкәтләнер хәлгә килде. Хатта кәйефе күтәрелә башланы. Көн кискә ауышҡайны. Хәҙер Басан ябай наркоман түгел, уртаҡул булһа ла, алыпһатарлыҡ итә. Наркотиктар һатыу юлы менән аҡса

эшләй ала хатта. Ул матурыраҡ кейенә башланы, Машаны ла үҙе ҡарай, кәрәк саҡта доза һәр ваҡыт ҡул аҫтында. Әле лә бына бер нисә көнгә етерлек дарыу бар. Тик Маша менән генә аралары һыуынып тора. Уныһы үҙе ғәйепле: күрше ҡатынының өгөтләүенә сыҙамай, ике көнөн, йәғни ике төнөн ҡунаҡханала үткәреп ташлаған. Басан уны ныҡ ҡына итеп һүкте лә, ғәйебенең тәрәнлеген аңлаһын өсөн, ике аҙналыҡ "һөргөн" иғлан итте. Бөгөн бына кәрәкле кешеләр менән ике "эшлекле" осрашыу көтә, ярайһы ғына аҡса тамырға тейеш.

Тик уның бындай күтәренке кәйефе оҙаҡҡа барманы. Ярты сәғәт самаһы үткәс, тигеҙ һәм талғын йөрәк тибешенең һикергеләүгә әйләнә башлауын тойҙо. Былай булғаны юҡ ине әле. Баш ауыртыуынан күҙ алдары ҡараңғыланып китте хатта.

Артыҡ булған инде әллә? Һуңғы арала саманы онотоп ебәрҙеме? Ҡурҡыныс булып китте Басанға: ниҙер эшләргә кәрәк! Ул ҡалтыранған ҡулдары менән кеҫә телефонын һөйрәп сығарҙы, тик томанланған күҙҙәре һандарҙы күрмәне. Бер нисә тапҡыр асфальтҡа ҡоҫоп ебәрҙе, тирләгән күлдәге тәненә йәбеште, битенә, ҡулдарына сабыртма йүгерҙе. Тиҙерәк наркодиспансерға барып етергә кәрәклеген аңлай ул. Уны тик шунда ғына ҡотҡара аласаҡтар. Ул эргәнән үтеп торған машиналарҙы туҡтатырға маташты, тик егетте иҫереккә һанаған шоферҙар туҡтаманы. Аптырағас, йәйәү китергә булды – диспансерға тиклем йыраҡ та түгел.

Саҡ күргән күҙҙәре менән юлды айырмай, ул тойомлап ҡына атлай, шуға үтә яй ҡыймылдай. Бер нисә тапҡыр йығылып та китте, әммә сәмләнеп тороп, һаман атлауын белде. Уны ҡотҡарырға тейештәр! Үҙ ғүмерендә әле бер ни ҙә күрмәгән, кисермәгән бит ул, ә табиптар күпте белә. Ул наркотиктарҙы ташлаясаҡ, Машаны ла был бысраҡтан йоласаҡ, һәм улар бәхетле тормош ҡорорҙар… Туғандары менән дә ярашыр.

Ҡанлы пәрҙә күҙҙәрен бөтөнләй ҡапланы. Ул юл аша сыҡҡанда, килгән машиналар сайҡалып атлаусы йәш кешене урап уҙырға маташып ҡысҡырышты. Диспансерға ҡул һуҙымы ғына ҡалғас, ул туҡталышта бөтөнләй хәлдән яҙҙы ла йығылып китте. Шул арала уның йәне тәненән айырылып, бәхетлерәк тормош эҙләп осоп китте…

Басанды тауыш-тынһыҙ ерләнеләр. Әсәһе менән һеңлеһе генә илауланы. Атаһының күҙҙәре ҡоро ҡалды. Ләкин был ҡырыҫ кешенең күңеленә ғүмерлеккә ҡорт кереп оялағайны инде. "Берҙән-бер улыма ярҙам итер өсөн ҡыл да ҡыбырҙатып ҡараманым! Был һаҙлыҡтан һөйрәп сығарыу мөмкин түгел, тиҙәр ҙә ул, әммә маташып ҡарарға булған. Хәҙер артабан нисек йәшәргә бындай йөк менән?"

Ҡатҡан ҡоро тупраҡ киҫәктәре ябай ғына табуттың өҫтөнә тыпылдап төштө. Был ваҡытта Басандың йәндәш әхирәте "КамАЗ" кабинаһында үҙенә сираттағы дозаға аҡса һуға ине. Әшнәләре лә матрастар өҫтөндә кәйефләнеүен дауам итте. Был әҙәмдәрҙең шәүләләре һаман был донъяла ине әле, тик тереләрме һуң улар?

**Дамир ШӘРӘФЕТДИНОВ тәржемәһе.**

# *Башҡортостан яҙыусыларының сираттағы съезы алдынан*

## ӘҘӘБИӘТ ТОРМОШ ДӘРЕСЛЕГЕМЕ БӨГӨН?

(БАЛАЛАР ӘҘӘБИӘТЕ ИГЕНСЕ ХЕҘМӘТЕНӘН КӘММЕ ҺУҢ?)

*«Балалар әҙәбиәте нисек булырға тейеш?» тигән һорауға атаҡлы яҙыусы Максим Горький: «Ололар әҙәбиәте кеүек үк, тик... яҡшыраҡ булһын!» – тип яуаплаған.*

*Кескәй дуҫтарыбыҙ күңелен тылсымлы ҡәләмдәре менән нурландырыу балалар яҙыусылары ҡөҙрәтендә.*

*Хәҙерге башҡорт балалар әҙәбиәте баҫыуының талымһыҙ игенсеһе – Айһылыу Йәғәфәрова. Ул үҙенең ғүмер таңында серле донъя менән осраша ла уға мәңгелеккә мөкиббән ғашиҡ була. Бәлки, шуғалыр ҙа ул бер ҡасан да уның төшкөлөгөн, кискелеген көтөп йәшәмәй, мөғжизәле донъяның сағыу Ҡояшы әҙибә күңелендә байымаясаҡ, ә өләсәйҙәрҙән ҡалған моң-йомғаҡ алға табан иренмәйсә һүҙыласаҡ та күңелдәргә сихри нурҙар һуҙасаҡ...*

*Әҙибә Айһылыу Йәғәфәрова үҙе лә – серле Айҙың егәрле ҡыҙы. Тәрбиәсе, етәксе, шағирә, прозаик, сәхнә әҫәрҙәре оҫтаһы – былар барыһы ла Әсә наҙы менән һуғарылған. Ул үҙенең ғүмер юлында бер ҡасан да сабыйҙарҙың кескәй ҡулын ысҡындырмай. Оло йөрәкле тәрбиәсе, унан балалар баҡсаһында мөдир булып эшләй. Хәҙер хаҡлы ялда, тыуған төбәге – Әбйәлил районында йәшәй.*

*Айһылыу Шәйхетдин ҡыҙы менән ижад, әҙәби оҫталыҡ, заман һәм заң, башҡорт балалар әҙәбиәтенең үткәне һәм бөгөнгөһө хаҡында Силәбе дәүләт университеты доценты, филология фәндәре кандидаты* ***Ҡамса МОРТАЗИН*** *әңгәмәләшә.*

**– Һеҙ кескәйҙәр өсөн ижад итәһегеҙ. Ни өсөн был өлкәне һайланығыҙ?**

– Мин балалар әҙәбиәтен аңлы рәүештә һайламағанмындыр, моғайын... Киреһенсә, балалар әҙәбиәте минең үҙемде һайлағандыр. Минең бөтә булған донъям – балалар баҡсаһы ине. Мин кескәйҙәрҙе йылмайып, яғымлы һүҙҙәр менән ҡаршы алдым, йыуындырғанда, шаяртып, шиғырҙар уҡыным, ашатҡанда, ипле, тәртипле булһындар өсөн, ҡыҫҡа-ҡыҫҡа ғына тәрбиәүи хикәйәләр һөйләнем, иртәлектәргә сценкалар яҙҙым, йырлай-йырлай бейеүҙәр өйрәттем, бәләкәй пьесалар ҡуйҙырттым, төрлө уйындарға һамаҡтар әйттерҙем, әкиәттәр менән йоҡларға һалдым, ә инде тышта уйнағанда – әҙәбиәттең бөтә төрҙәрен дә ҡулландым.

Мин ун йыл тәрбиәсе булып эшләнем. Шунда мин баланы кеше итеүҙә әҙәбиәттең иҫ китмәле кәрәклеген аңланым. Тик кескәйҙәр менән эшләгәндә генә һин әҙәбиәттең һәм сәнғәттең бөтә төрҙәренә лә эйә булаһың. Улар үҙҙәре һине йөҙ төрлө һөнәргә эйә итә. Шуға күрә лә һин яҙыусы, шағирә, драматург,

тәржемәсе, рәссам, бейеүсе, йырсы, композитор, артист, режиссер һ.б. роленә инергә мәжбүрһең. Балалар менән бәйләнгән бөтә тормош минең әҙәби эшмәкәрлегем менән үрелеп барҙы. Мин уларҙы айырып ҡарай алманым. Ә инде ҡулды йөрәккә һалып әйткәндә, минең ижад юлым «Килендәр» романы менән башланды... 1973 йылда дүрт китаптан торған әҫәрҙе яҙып бөтөп, һуңғы нөктәһен ҡуйғанда, кескәйҙәр өсөн тәүге китабым – «Муйынса» донъя күрҙе. Ул саҡта миңә 25 йәш тулмаған ине...

**– Үҙегеҙ яратҡан, айырыуса хөрмәт иткән балалар яҙыусыларын һанап үтһәгеҙ ине. Уларҙың ижады һеҙгә йоғонто яһанымы?**

– Беҙҙә, әлбиттә, айырым балалар өсөн генә яҙған яҙыусылар юҡ. Уларҙың барыһының да ололар өсөн тәғәйенләнгән китаптары бар. Шулай ҙа мин М. Кәрим, К. Кинйәбулатова, Ф. Рәхимғолова, С. Әлибай, Ш. Бикҡолдарҙы балалар өсөн ижад иткәнгә айырыуса хөрмәт итәм. З. Биишеваның әкиәттәрен яратам.

Ә үҙемдең ижадыма (бәлки, был ҡыҙғаныsҡа ҡаршылыр) рус һәм әкиәт яҙыусы сит ил яҙыусылары йоғонто яһаны. Бигерәк тә С. Маршак бөгөнгө көндә лә минең өсөн өлгө алырлыҡ яҙыусы булып ҡала. Әкиәттәге аҡ йомғаҡ кеүек тәгәрәй уның әҫәрҙәре, бер аҙым да унан ҡалғы килмәй... С. Михалков, Я. Тайц, Е. Благинина, В. Осеева, К. Ушинский, М. Пришвин, К. Чуковский һ.б. баҡса программаһының әҙәбиәт яҙыусылары ине. Ә уҡытыу-тәрбиә эше беҙҙә лә, мәктәптә лә урыҫ телендә алып барылды (хәҙер ҙә). Шуға күрә лә ошо яҙыусыларҙың әҫәрҙәре минең ижадыма бик ныҡ тәьҫир итте. Мин 1967 йылда эшкә килгәндә алтмышынсы йылдарҙа сыҡҡан «Наша книга» тигән хрестоматия бар ине, ул миңә биттәре ылбырап бөткәнсе хеҙмәт итте, ә аҙаҡ Мәскәүҙең «Просвещение» нәшриәте сығарған әллә күпме «Пособие для воспитателя детского сада» тигән хрестоматиялар минең ҡулдан үтте. Яңынан-яңы яҙыусылар өҫтәлде... Ә беҙҙең хрестоматия һаман юҡ ине.

**– Башҡорт халыҡ ижады традицияларына таянаһығыҙмы?**

– Мин башҡорт халыҡ ижадын әсәйемдең йөрәк түрендә ятҡанда уҡ ишетеп яттым... Минең әсәйем Шәмсиямал сәсәниә, бик оҫта, моңло йыраусы булған. Шуға күрә лә мин, шаяртып: «Мин әҙәбиәткә килмәгәнмен, әҙәбиәт минең үҙемдә йәшәгән», – тим. Тик, ҡыҙғаныsҡа ҡаршы, мин әсәйемдең итәгендә өс йәшкә тиклем генә ултырғанмын (бик йәшләй вафат була ул), шулай ҙа ул үҙенең сәсәнлек нурын һирпеп өлгөргән. Мин, ысынлап та, бала саҡтан уҡ халыҡ ижадын яратып үҫтем. Беҙҙең бәләкәй генә ауылда әкиәт, йомаҡ белмәгән өләсәйҙәр, инәйҙәр булмағандыр. Ҡышҡы оҙон кистәрҙә йә хозурҙа (аулаҡ өйҙә), йә йәй көндәре баҡса алдындағы күгүләндә ултырғанда улар беҙгә әкиәттәр, бәйеттәр һөйләй, йомаҡтар ҡоя торғайны. Аҙаҡ әкиәттәрҙе үҙебеҙҙән һөйләтәләр. Бына бит – халыҡ педагогикаһы!.. Тик мин әкиәттәрҙең насар бөтөүен яратманым. Түкмәй-сәсмәй һөйләй белһәм дә, ҡайһы бер әкиәттәрҙең аҙағын үҙемсә үҙгәртә инем. Асыуланманылар. Бишенсе синыфҡа Ҡырҙасҡа уҡырға барғас, мәктәп китапханаһынан алған беренсе китап «Башҡорт халыҡ әкиәттәре» ине. Ундағы төшөрөлгән матур һүрәттәр әле лә минең күҙ алдында тора. «Ҡаҙҙар ниңә ала булған?» әкиәтен уҡығас, төнө буйы илап сыҡтым (мин әлегә ул әкиәтте ишетмәгәйнем). Артабанғы синыфтарға барғас та иң тәүге алған китабым шул «Башҡорт халыҡ әкиәттәре» булды. Китап биреүсе урыҫ теле уҡытыусыһы Мария Осиповна, минең ҡыҙыҡһыныуҙарҙы белгәнгә, ниндәй китап алыуымды ла һорап тормай, тейешле китапты һонор ине.

Балалар өсөн драма әҫәре буйынса республика конкурсына «Хәлимә» исемле пьеса яҙҙым. Хоҙай Тәғәлә үҙемә тылсымлы әкиәт ҡәләме биргәс, мин үгәй ҡыҙҙы яңғыҙ ҡалдырманым: һөйгән егете уны Ҡотһоҙ Ҡотой ҡулынан – ҡол-лоҡтан ҡотҡара һәм Хәлимә бәпкә рәүешенән кире һылыуҡайға әйләнә... Ҡасандыр балаларға һөйләгән әкиәттең аҙағы ошолай ине. Был әкиәтемде мин «Һандуғас моңо» китабыма индерҙем.

Беҙ, педагогтар, кешелектең таңы халыҡ ижады китабынан башланғанын беләбеҙ. Көйләү өсөн – һамаҡ, һөйләү өсөн – әкиәт бала өсөн иң кәрәкле аң сығанағы. Өләсәйҙәрҙең әкиәт һөйләп, көйләп ултырыуы юҡҡа түгелдер... Минең бөтә жанрҙарымда ла әкиәт сағыла. Мәҫәлән, «Һунарсы» шиғыры башҡорт халыҡ әкиәтенә нигеҙләнеп яҙылды, драмаларҙа – әкиәт һынланышы, төрлө башҡорт халыҡ йолаларында әкиәт геройҙары ҡатнаша («Ҡарға бутҡаһы»нда – Шүрәле, Мәскәй әбей, һыу байрамында – Шүлгән батша, Нәркәс, шайтандар, Әбйәлил...). Хатта хикәйәләрем дә әкиәткә тартым – изгелек еңә... Мин халыҡ ижадына, педагогикаһына таянам, үҙ-үҙебеҙгә – асылыбыҙға ҡайтыуыбыҙ шулдыр.

**– «Ҡәләмдәр» исемле бик фәһемле хикәйәгеҙ бар. Һеҙҙеңсә, балалар ҙа, төҫлө ҡәләмдәр шикелле, төрлө-төрлө. Хикәйә әҙәбиәттә яңылыҡ булғандыр?**

– Мин, В. Маяковский кеүек, был нәмә насар, был нәмә яҡшы, тип ҡырҡа кәртә ҡуйырға йыйынманым. Бер нәмә менән яуызлыҡты ла, яҡшылыҡты ла эшләп була, тип аңғартҡым килде. Мәҫәлән, ҡыҙыл ҡәләм... Ул бөтә донъяны ялмарлыҡ ут тоҡандыра! Бына-бына!.. Әлдә ямғыр яуа. Атомдың да кешелеккә ярҙам итеүе йә иһә бөтә тереклекте юҡ итеүе мөмкин. Тирә-яҡ менән танышыу, аңлау, фекерләү бына ошо «фән»дән – ҡәләмдән башлана ла инде.

**– Һеҙ әҙәби тәржемәләрегеҙ менән балалар әҙәбиәтенә йән өрҙөгөҙ түгелме? Тәржемә эшмәкәрлегенең әҙәби оҫталыҡҡа, камиллыҡҡа өлгәшеүҙә әһәмиәте бармы?**

– Минең яҡшы тәржемәсе булыуымды (маһайып әйтмәйем), «Йәйғор» хрестоматияһын сығарғас, тәрбиәселәр, уҡытыусылар ҡыуанып, билдәләп, тәүге һүҙҙе әйттеләр. Яҙыусыларға ла, башҡа юғарылыҡтарға ла түгел, үҙем кеүек ябай тәрбиәселәргә, уҡытыусыларға кәрәк булған был тәржемәләр. Балалар баҡсаһы өсөн хрестоматия төҙөгән саҡта мин 30-ға яҡын сит тел яҙыусыһының 50-нән ашыу бәләкәй әҫәренә тәржемә яһап, китапҡа индергәнмен. Тик шуныһы йәл: ике китаптан торған хрестоматияның тәүгеһендә, тәржемә аҫтында, үҙемдең фамилиямды ҡуйырға онотҡанмын. Ҡайһы берәүҙәр һамаҡтарға, йыр яҙа белмәгәнгәлер инде, икенселәрҙең исемен ҡуя...

Л. Н. Толстойҙың бәләкәй хикәйәләр циклында төрлө халыҡ әкиәттәре, матур шиғырҙар, йырҙар, халыҡ ижады өлгөләре бар. Тәржемә өҫтөндә эшләгәндә мин бер ваҡытта ла С. Я. Маршактың кәңәштәрен онотманым.

**Ирина ТОКМАКОВА**

***ҠАР***

*Тау башында – ҡар, ҡар,*
*Тау аҫтында – ҡар, ҡар,*
*Шыршы аҫтында ла ҡар,*
*Унда бер айыу ҙа бар.*
*Ҡурҡытмағыҙ, йоҡлаһын,*
*Тауышығыҙ сыҡмаһын. Сеү!..*

***СНЕГ***

*Как на горке – снег, снег,*
*И под горкой – снег, снег,*
*И под елкой – снег, снег.*
*А под елкой спит медведь,*
*Тише, тише. Не шуметь!..*

Урыҫ классиктарының, башҡа халыҡ яҙыусыларының балаларға яҙған әҫәрҙәре мине нимәһе менән ылыҡтырҙы һуң? Беренсенән, бигерәк тә хәҙерге ваҡытта, уҡытыу-тәрбиә эшенең ике телдә булыуына ынтылыш, икенсенән, ошо яҙыусыларҙың әҫәрҙәрен яратыуымдандыр. Ә инде әкиәттәргә килгәндә, балаларҙы улар менән таныштырыу – ҡояш нуры һүрентеһенән баштарына таж үреү менән бер ул...

Балалар баҡсаһында эшләүҙең тәүге йылдарында уҡ мин тәржемә эше менән шөғөлләнә башланым. Унда эшләгән башҡорт милләтле тәрбиәселәрҙең тәүгеһе мин инем. Мөдир башҡаларға: «Бер аҙна ла эшләмәҫ, ҡасыр!» – тине. Тәүге көндә үк башҡа милләт балаларының бер-береһенә: «Һин – башҡорт! Һин үҙең – башҡорт!» тигән кәмһетеү, мыҫҡыллы үсектереүен ишеттем. Нимә-нимә, был мине аптыраштa ҡалдырҙы... һәм иң беренсе булып миңә ярҙамға Әҙәбиәт килде! Мин үҙем дә йырларға, бейергә, һүрәт төшөрөргә, төрлө уйындар уйнарға ярата инем. Ә әҙәбиәт минең ике ҡулымда ла булды! Мин балаларға иң алда башҡорт халыҡ әкиәттәрен һөйләнем, «Аҡ тирәк, күк тирәк» кеүек уйындар уйнаттым. «Ете ҡыҙ»ҙы бейеү өсөн таҫма һалдырып күлдәк, камзул тектерттем, баштарына ҡашмау эшләнем. Башҡорт бейеүҙәрен урыҫ, украин бейеүҙәре араһына «ҡыҫтырҙым», ләкин башҡортса шиғыр һөйләтә алманым. Үкенескә ҡаршы, ата-әсәләр ҙә шымды. Беҙҙең программала ятлау өсөн шиғырҙар, бигерәк тә фольклор материалдары, ғәжәп күп ине. Ятлатам да бер-ике һүҙ башҡортса әйтәм, ятлатам да бер нисә һөйләм ятлатып ҡарайым (башҡорт балаларынан). Тик иртәлектәрҙә үҙаллы һөйләмәнеләр, уңайһыҙландылар. Шул саҡ мин бәләкәй генә шиғырҙарҙы башҡортсаға тәржемә яһай башланым. Бөтә төркөмгә урыҫса ятлайбыҙ ҙа, ҡурсаҡтар менән уйната-уйната, үҙем шул шиғырҙы башҡортса һөйләйем. Хәҙер балалар башҡорт телен: «Кәлә-бәлә һөйләшәләр...» – тип әйтмәй башланы, үсектерешеү бөттө. Иртәлектәрҙә ике баланы ярыш ҡуям да, бер үк шиғырҙы бер бала – урыҫса, икенсеһе башҡортса һөйләй...

Бына шулай башланды минең тәржемә өлкәһендәге хеҙмәтем, йөрәк ҡушыуы буйынса, кәрәк булған өсөн, беҙҙең телдең дә башҡалар менән тиң булғанын иҫбат итеү өсөн тотондом мин был эшкә, был ваҡиғаларға 40 йылдан ашыу ваҡыт та уҙған... Тәржемә еңел бирелмәй. Был – эҙмә-эҙлекле, әҙәби оҫталыҡҡа ынтылған ауыр юл. Бер ваҡыт филология фәндәре кандидаты Рәсимә Ураҡсина былай тип яҙғайны: «Айһылыу Йәғәфәрованың урыҫ теленән тәржемә иткән шиғырҙары, әкиәттәренең теле шымартылған алмас кеүек ялтырап тора».

**– Балалар донъяһын сағылдырыуҙағы аҫҡыс нимә? Сере нимәлә?**

– Мин балалар баҡсаһында 37 йыл эшләнем. Мөдир Татьяна Васильевна әйткәнсә, бер аҙнанан һуң ҡасманым, хаҡлы ялға сыҡҡанғаса кескәйҙәр менән бергә йәшәнем, өс быуынды тәрбиәләргә өлгөрҙөм. Бер ҡулым менән баланы, икенсе ҡулым менән әҙәбиәтте яраттым, икеһен дә берҙәй күреп ҡосаҡлап шатландым, икеһенең дә характерын өйрәнергә, аңларға тырыштым. Минең әҙәбиәтте яҡшы белгән Гөлшат Әхмәтҡужина былай тип яҙып сыҡҡайны: «Айһылыу Йәғәфәрова – мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы тәрбиәләү методикаһына ҙур өлөш индергән ғалим да ул. Кескәйҙәр психологияһын унан да яҡшыраҡ аңлаған тағы берәй яҙыусыны атауы ауыр».

37 йыл... Мин ошо дәүерҙәге бар нәмәне һаҡларға тырыштым: фотоальбомдар, кескәйҙәр хаҡында яҙған күҙәтеүҙәр, уҡытыу-тәрбиә тураһындағы мәҡәләләр, күренекле иҫтәлектәр, бәләкәстәргә арналған хикәйә, әкиәт, шиғыр, пьесалар,

тәржемә әҫәрҙәре, һүрәттәре, иртәлек өлгөләре, халыҡ ижадынан тупланған гәүһәр ҡомартҡылар... Әле уйлайым да, минең яҙмышым кескәйҙәр менән бәйләнмәһә, ошоларҙың барыһын да хазина һандығына тултыра алыр инемме икән, тип ғәжәпләнеп ҡуям. Юҡтыр. Тик ошо кескәй саф йөрәктәр генә күңелем ҡыңғырауын сыңлата алғандыр, эскерһеҙ йылмайыуы менән йомшаҡ күңелле диуанаға әйләндереп, тылсымлы әкиәт донъяһына юлыҡтырғандарҙыр. Йылдар үтеү менән мин шуны аңланым: бер ваҡытта ла үҙеңде баланан өҫтөн ҡуйырға ярамай икән, һәм ошо һыҙаттар һинең балалар өсөн яҙған әҫәрҙәреңдә сағылыш табырға тейеш икән. Ошо йәшемә тиклем мин бала шәхесен яҡланым, ирееген быуманым, уларҙы тупаҫлыҡтан, насарлыҡтан ҡурсаларға тырыштым. Ниндәй генә жанрҙа яҙһам да, ҡәләмем менән яуызлыҡты еңергә, көсһөҙҙө яҡларға, көслөнө батыр, ғәҙел итергә тырыштым. Ололар өсөн берәй нәмә яҙғанда ла, балалар тураһында һүҙ сыҡһа, күңелем ирене, иркенлек хасил булды, гүзәл образдар тыуҙы. Кескәйҙәр өсөн яҙыуы миңә күңелле. Бер генә матур шиғыр яҙһам да, аҙналар буйы ҡыуанып йөрөйөм. Башта әйтеп үткәнсә, эшемдән ижадымды айырып ҡарай алманым. Сөнки уларҙың икеһен дә донъя йөҙөндәге иң ғәзиз нәмә – балалар бәйләне. Ғөмүмән, серле асҡыстың хикмәте шундалыр: кескәйҙәр өсөн әҫәрҙәремдең һүҙҙәр менән түгел, ә наҙ, моң менән мөлдөрәмә тулыуындалыр-яҙылыуындалыр...

**– Лирика, дидактика, аллегория, фантазия, реализм – быларҙың ҡайһыһы нығыраҡ күңелегеҙгә ята? Ә кескәй балалар, һеҙҙеңсә, нимәне нығыраҡ үҙ итә һуң?**

– Башҡорт халҡының шундай мәҡәле бар: «Оло өйгә ни кәрәк, кесе өйгә лә шул кәрәк...» Һүҙ төбөн, моғайын, аңлағанһыңдыр. Әлеге лә баяғы, мин 60-сы йылдарҙағы «Наша книга» китабынан балаларға Б. Катаевтың «Цветик-семицветик» әкиәтен яратып уҡығайным («Лети, лети, лепесток» шиғырына тәржемә яһағанмын). Ысынбарлыҡ менән әкиәт сәскәһенең бергә елпенеүе миндә ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырғайны... Балалар тормошона тағы ла яҡыныраҡ булһын өсөн, минең әкиәт йомғағым да ошо һуҡмаҡты үҙ итте. Бындай күренештәрҙе минең «Алтын тараҡ», «Һандуғас моңо» китаптарымда күрергә мөмкин. Бер мәл шулай, мин әле йәш саҡта (әлбиттә, сағыштырмаса...) бер әкиәттәр ҡулъяҙмаһын тикшерәбеҙ. Нәүбәттәге секция рәйесе, оло ғына бер яҙыусы ағай (ул да балалар өсөн яҙа ине, хәҙер мәрхүм, китаптары хәҙер нәшер ителмәй) «Бындай әкиәттәрҙән баш тартырға, китап итеп сығармаҫҡа!» тигән тәҡдим индерҙе. Балалар әҙәбиәтен яҡшы белгәнгә күрә һәм дә урыҫ әҙәбиәтенә лә таянып, мин иҫбат итә башланым. Айболитты, Мойдодырҙы һ.б. иҫкә төшөрҙөм, ныҡыштым. Булмай. С. Әлибай ағай ҙа ҡаты ғына итеп әйтеп ҡарай. Шул саҡ минең эргәмдә ултырған Мөкәрәмә Садиҡова апай урынынан ырғып торҙо ла: «Әкиәттәр шул тиклем матур, һеҙ нимә, быларҙың балалар әҙәбиәте икәнен онотмағыҙ, аҡылығыҙҙан яҙҙығыҙмы әллә!..» – тип ҡысҡырып, өҫтәлгә һуғып ебәрмәһенме?! Бына... шулай ине 70 – 80-се йылдарҙағы беҙҙең оло быуын менән осрашыуыбыҙ ҡайһы берҙә. Илаһаң да, көлһәң дә – оят түгел. Балалар, әлбиттә, матур, ҡыҫҡа шиғырҙарҙы, дидактик уйындарҙы, күбеһенсә фантазия менән һуғарылған тылсымлы әкиәттәрҙе яраталар. Әкиәттәрҙе улар сәғәттәр буйы тыңларға әҙер... Мин, мөдир вазифаһын башҡарһам да, балаларға әкиәт һөйләүҙән туҡтаманым. Хатта, «Мең дә бер кисә», «Синбад сәйәхәте» менән дә таныштырҙым. Ябай итеп, ҡурҡыныс ерҙәрен һыйпап һөйләргә тырыштым,

Рәсәй, көнбайыш халыҡтары яҙыусыларының әкиәттәре хаҡында әйтеп тораһы ла юҡ. Уларҙың ҡайһы берҙәре беҙҙең программала бар.

Әкиәт нисек тыуа? Әкиәт ҡайҙа йәшәй? Оҙаҡ уйлап йөрөйөммө, әллә көсәнеп яҙаммы?

...Өлкән төркөмгә инәм. Келәм тулып, сыр-сыу килеп уйнап йөрөгән балалар менән һаулыҡ һорашып та өлгөрмәйем, янымa йүгереп Әлиә килә, ҡулына тотоп алған уйынсыҡ тейенен миңә һуҙа.

– Мә, әкиәт һөйләгеҙ!.. – ти ул, ашығып.

Был бәпкәләремә тейен тураһында нимә һөйләйем икән, тип уйланып торғанда, уларҙың ҡапыл шым булып ҡалыуҙарына иғтибар итәм. Ҡарайым: ҡайһы арала уйынсыҡтарын йыйғандарҙыр ҙа, ҡайһы арала ултырғыстарын ҡуйып, ҡарлуғас балалары кеүек теҙелеп ултырғандарҙыр. Күрәм: шым булғандар, үҙҙәре ҡыҙыҡһынып, күҙҙәре ялтырап, миңә төбәлгәндәр. Түҙемһеҙләнеп әкиәт көткәндәре йөрәккә үтеп инә, үҙем дә сәйер тойғо кисерәм, кескәйҙәргә тиҙерәк әкиәт һөйләгем килә башлай...

Эйе, балалар донъяһы әкиәт ҡанаты өҫтөндә ултыра. Ундағы хәл-ваҡиғаларҙың һәр береһенә ышана. Шуға күрә лә мин А. С. Пушкиндың ололар өсөн яҙған әкиәттәрен балалар өсөн тәржемә иткәндә, ситкәрәк тайпылған урындарым да булды. Мин унын өсөн бала сағымдағы Пушкин ағай рухынан ғәфү үтендем.

*Сказка ложь, да в ней намек!*
*Добрым молодцам урок.*

*Әкиәт – алдаҡ һымаҡ,*
*Ләкин йәштәргә – һабаҡ!..*

Әкиәт – алдаҡ... алдаҡсы ул, тип әйтергә хаҡым юҡ... Йә булмаһа...

*...Иль башку с широких плеч*
*У татарина отсечь,*
*Иль вытравить из леса*
*Пятигорского черкеса.*

Был юлдарҙы уҡығанда мин үҙебеҙҙең педагог-яҙыусы В. Сухомлинскийҙың әхлаҡи әҫәрҙәрен иҫемә төшөрҙөм һәм быларҙы «үтеп киттем» – ураП. Ғөмүмән, ниндәй генә жанрҙа яҙылмаһын, әкиәт өйөрмәһендә үҫә бала.

**– Совет осоро һәм хәҙерге заман балалар әҙәбиттәре бер-береһенән айырыламы? Нимәһе менән айырмалы?**

– «Заман башҡа – заң башҡа» тип әйтәләрме әле?.. Беҙҙең быуынға ике заманы күрергә тура килде... Ҡапма-ҡаршы ҡоролош. Был хәл яҙыусылар өсөн, моғайын, икеләтә ауырҙыр... Сабата сисеп, ялтыр туфли кейеү түгелдер бит был. Йә булмаһа, киреһенсә... Беренсе хрестоматия 1992 йылда донъя күрҙе, ә икенсеһе – 2006 йылда. Икенсе баҫмаһында нимәләрҙе алып ташлатҡандарын үҙең дә беләһеңдер. Әйтерһең дә, беҙҙең быуат башындағы тарих булмаған... Бына шулай. Шулай ҙа, ниндәй генә замана ҡалҡмаһын, беҙ, балалар яҙыусылары, башҡорт рухын, асылын оноторға тейеш түгелбеҙ: батырҙарыбыҙҙы данлаясаҡбыҙ, йолаларыбыҙҙы күтәреп сығасаҡбыҙ, быуындар сылбырын өҙмәҫкә тырышасаҡбыҙ. Беҙ уларҙы әкиәттәребеҙҙә, хикәйәләребеҙҙә, шиғырҙарыбыҙҙа, пьесаларыбыҙҙа күрһәтәсәкбеҙ. Минең балалар баҡсаһында яҙып ҡалдырған һүҙҙәрем бар: «Баланы кесе йәштән изге милли рух нурында ҡойондороп

үҫтермәйенсә, яңы Башҡортостандың патриот-хужаһын тәрбиәләп булмай». Ололар өсөн яҙған яҙыусылар аҡ тирмәләр ҡорғандар, уларға барыр юлды беҙҙең быуын белә. Ләкин «Тирмәкәй»гә инмәгән баланың юлы ул яҡҡа боролормо?.. Шуның өсөн балалар әҙәбиәтенә лә яуаплы, ихтирам һәм иғтибар менән ҡарарға кәрәк. Түрәләр ҙә был яҡҡа һүлпән, үҙҙәренең коллегалары булған балалар яҙыусыларын да күтәрә белмәйҙәр. «Яҙа икән – яҙа, әйҙә, яҙа бирһен...» (Беҙҙең күрше Батыр Мортазин ағай: «Ҡайһы берәүҙәр икмәкте, әҙер булка булып үҫә, тип уйлайҙар!» – тип асыулана торғайны.) Балалар әҙәбиәте игенсе хеҙмәтенән кәмме һуң? Бала аңына сүп-сарҙы тултырыу – киләсәгенә боғалаҡ аҫып ҡуйыу түгелме һуң? Көнбайыштан ингән әҙәпһеҙ әҙәбиәт, сәнғәт өлгөләренә ҡаршы ҡуйырлыҡ ниндәй сараларыбыҙ бар һуң? Совет осоронда беҙ балаларҙы әхлаҡһыҙлыҡтан һаҡлай алдыҡ, ә бөгөнгө көндә Рәсәй алдында «Ҡайҙа һеҙ, Маршактар?!» тигән оран тора («АиФ» мәҡәләһе). «Телик» нимәләр генә күрһәтмәй! Ғәҙеллек эҙләгән герой үҙе үк йөҙәрләгән кешене үлтерә, беҙҙең балаларыбыҙ өсөн ул – үрнәк тәрбиәһеме? «Бишектәге бала бишкә төрләнә», – ти халыҡ. Бәлки, баланың миллионер булғыһы киләлер? Ғәҙәттәгесә, башта уның, миллионер геройҙың, нисек байығанын күрһәтәләр. Әлбиттә, ул әсе тир түгеп тиҙ генә байып китә алмай (хәҙер хеҙмәткә дан йырламайҙар). Әле тамырында совет йәшәү осоро, рәүеше һаҡланған ата-әсәләрҙең балалары ҡайһы геройҙы яҡын итер һуң? Ҡырыҫ геройҙымы, әллә олигархтымы? Ғ. Сәләм әйтмешләй, тормош атын ҡайһы юлға борорға? Суицид арҡаһында үлеүсе үсмерҙәрҙең дөйөм һаны буйынса Рәсәй донъяла беренсе урында тора. Был юҡҡа түгел. Ҡапма-ҡаршы ҡоролош арҡаһында ҡыҫылып, беренсеһенән айырыла, икенсеһенә йәбешә алмаған үсмерҙәр афәте был! Үсмерҙәрҙең генә түгел, ил фажиғәһе. Шуның өсөн беҙҙең балаларыбыҙ үҙҙәренең ниндәй милләттән, ниндәй ҡамырҙан яһалғандарын белергә тейеш. Уны аңлатыу – Милли Рух бетеүен тапҡан яҙыусыларға, уҡытыусыларға, тәрбиәселәргә төшә.

Минең совет осорондағы әҫәрҙәремдә тел темаһы урын алһа («Һандуғас моңо» китабында һандуғас моңо – ул башҡорт теле), хәҙер Ер мәсьәләһе нығыраҡ борсой («Тирмәкәй» китабында – Салауат батырҙың аманаты). «Йәншишмә» гәзитенә бер әкиәт ебәргәйнем. Крәҫтиәндәрҙең ауыр хәле, бомжлыҡ, баланы ҡол кеүек эшләтеү, йәберләү, урам малайҙары, байҙар... һәм дә ололар араһында яҡшы күңелле кешеләр, Хызыр Ильяс... Шуныһына үҙем аптыраным: бындағы геройҙарға мин урыҫ исемен дә, башҡорт исемен дә ҡуйырға баҙнат итмәнем... Хатта, миллионлаған балалар урамдыҡы булһа ла... Швед әкиәттәренең исемдәрен алдым: Карл, Матс, Свэнд, Марийка... «Изгелек ерҙә ятып ҡалмай» тип атала әкиәт (Тик ул баҫылманы. «Н» ерендә булғанғалыр инде...).

Ниндәй генә заманала йәшәһәк тә, беҙ ғәзиз илебеҙгә – Башҡорт иленә, туған халҡыбыҙға хеҙмәт итергә тейешбеҙ.

**– Донъяла мөғжизә барлығына ышанаһығыҙмы?**

– 2008 йылда «Аманат» журналының 9-сы һанында минең «Берғанат» исемле хикәйәм сыкты. Уны халыҡ бик оҡшатҡан. Рәхмәт әйтеп өйгә шылтыратыусылар күп булды. Минең өсөн балалар әҙәбиәте – үҙе бер оло донъя. Мөғжизәгә ышанмаған яҙыусы ул донъяның ҡапҡаһына етә лә, асып, эскә үтә лә алмай!..

## СӘСӘНЛЕКТЕ ТЕРГЕҘӘЙЕК

Билдәле булыуынса, сәсәндәрҙең берәүҙәре халыҡ араһында йәшәп, ижадында халыҡтың тормош хәлен, шатлыҡ-ҡайғыһын сағылдырған. Икенселәре, тәхет тирәһендә ялланып батшаның, хандың, тархандың, бейҙең, байҙың, старшинаның, мулланың һ.б. хәллеләрҙең ҡалъя ҡалдығы менән туҡланған.

Һәр сәсәндең һүҙ ҡеүәһе, әлбиттә, айырым. Әйтәйек, Мөхәмәтша Буранғоловты Йәрми Сәйете менән сағыштырыу мөмкинме? Тормошта ла, фәндең теләһә ниндәй өлкәһендә лә талант бар, эшем эйәһе булып күренергә тырышыусылар бар. Әммә алтын ҡомдан яралһа ла, ҡомдо алтын тимәйҙәр.

Сәсәндең дә, шағирҙың да төп уртаҡ сифаты — рифма менән ритм ҡанундарына буйһонған һүҙ теҙмәһен ижад итеү. Сәсәндәр тел формалашҡас та күренә башлағандыр, ә шағирҙар яҙыу уйлап табылғас ҡына тарихта билдәлелек ала. Әлбиттә, яҙыу сыҡҡас, сәсән шағир ҙа булып китә алған, шағир сәсән рәүешендә шиғырҙарын һөйләп, көйләп, таҡмаҡлап, һамаҡлап та әйткән. Әммә яҙып ижад иткән кешене сәсән тип һирәк әйткәндәр. Мәҫәлән, Ҡол Ғәлиҙе, Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевты сәсән тимәйҙәр. Йәрми Сәйетен шағир һанамайҙар (ижады яҙылған, бер китабы сыҡҡан булһа ла). Мөхәмәтша Буранғоловҡа “Башҡортостандың халыҡ сәсәне” исеме бирелһә лә, әҙәбиәт тарихында ул ғалим, шағир, яҙыусы, драматург булараҡ урын алған.

Йәмғиәттә йәшәгән һәр кешенең үҙ вазифаһы була.

Власть иһә үҙ йәмғиәт ағзаларынан ҡабул ителгән ҡанундарҙы үтәүҙе талап итә. Сәсәндәр ошо нигеҙҙә икегә бүленә. Ҡанундарҙы үтәтеүселәр (власть) яғында йә уға ҡаршылар (хәҙерге телдә әйтһәң, оппозиция) рәтендә була. Байҙарҙың, түрәләрҙең йырын йырлаусыларҙы тәхет сәсәне тип атарға мөмкин. Оппозиция сәсәне иһә, нигеҙҙә, ҡанундарҙы үтәргә тейеш күпселектең мәнфәғәтен сағылдыра, шуға уны халыҡ сәсәне тип нарыҡлай. Әлбиттә, бай һәм түрәләрҙең ҡаҙаны тирәһендә йөрөгән тәхет сәсәненең тормошо еңелерәк. Уның донъяһы ла етеш, ҡатыны, бала-сағаһы рәхәт йәшәй. Үҙе байҙар, түрәләр ойошторған мәжлестәрҙә, ҡоролтайҙарҙа сығыш яһай һәм ҡиммәтле бүләктәр ала, миҙал, ордендар тағы.

Халыҡ сәсәненә (бында властар тарафынан бирелгән халыҡ сәсәне исемен йөрөтөүселәр менән бутарға ярамай) матди яҡтан ауырғараҡ тура килә, әлбиттә. Сөнки ул мәнфәғәтен сағылдырған ҡатлам (күпселек һәм оппозиция) бай түгел һәм дәүләт мөлкәтен бүлеүҙә ҡатышмай. Байҙар

һәм төрҙәр тәхет сәсәнен ҡараған (тәьмин иткән) һымаҡ, күпселек тә үҙ сәсәнен баһалай белә. Тегеләр кеүек өйөнә саҡыра, хәл ҡәҙәренсә һыйлай, күстәнәсен бирә. Тик хәл генәһе самалы шул. Сәсән табынына ҡуйылған ризыҡ хужаның бала-сағаһына бер аҙнаға етер ине. Шуны ла күрә сәсән, ас булһа ла ашамай, күстәнәстән дә баш тарта. Баш тартыуын тарта ла бит, тик өйҙә балалары көтөп тора. Мандымай халыҡ сәсәне. Ә күңел байлығы уның етерлек. Тапҡыр һүҙе, тура һәм әсе теле менән халыҡ мәнфәғәтен яҡлағаны өсөн йөҙәр, меңәр кеше уға рәхмәт уҡый, балаларына, ейәндәренә, бүләләренә сәсән тураһында һөйләп ҡалдыра. Шул арҡала ғына, әйтәйек, Ҡарас сәсәндең, Буранбайҙың исемдәре бөгөнгө көнгә тиклем онотолмаған. Ә байлыҡта кинәнгән, миҙал һәм ордендар таҡҡан тәхет сәсәндәренең кем булғанлығын хәҙер берәү ҙә белмәй.

Һығымталап шуны әйтәйек: сәсәндәрҙең барыһы ла (тәхеттеке лә, халыҡтыҡы ла), йәмғиәттең торошон дөйөмләштереп, әҫәр ижад итә, әммә уларҙың һәр ҡайһыһы йә тәхеттең, йә халыҡтың мәнфәғәтен сағылдыра. Ҡалған эштәре йәмғиәттең бүтән ағзаларыныҡы менән бер үк. Сәсәндең вазифаһы бына ошо. Йәғни бүтән кеше күтәргәнде ул да күтәрә, шуға өҫтәп ниндәйҙер ҡатлам мәнфәғәтен һүҙ теҙмәһендә оҫта сағылдырыу бурысын үҙ өҫтөнә үҙ ирке менән ала. Сәсәнлек вазифаһын уға берәү ҙә йөкмәтмәй. Ул бары Аллаһы Тәғәлә биргән һәләтте асыу ғына.

Халыҡ сәсәндәренең күбеһе ошо вазифаны үтәү юлында үҙ өҫтөнә күп михнәттәр ҙә ала. Әйтәйек, дәрүиш сәсәндәрҙең тормош әсеһен күп татыуҙары билдәле. Аҡмулла менән Буранғол сәсәндәр зинданда ултырып сыға, әммә сәсәнлек вазифаһынан баш тартмай. Бөгөнгө шағир менән яҙыусылар ҙа үҙ индәренә үҙҙәре өҫтәмә вазифа алған. Бының өсөн бәғзеләре данға һәм орденға күмелгән, бүтәндәр властар тарафынан һүгелгән. Әлбиттә, һуңғы 50-60 йыл эсендә һүҙ әйткән өсөн зинданға бикләгәндәре юҡ, әммә "бикләйбеҙ" тип янағандары бар.

Тарихтан билдәле булыуынса, ырыу йәмғиәтендә бар кешенең тапҡан-таянғаны (һунар, балыҡ тотоу, емеш-еләк йыйыу) дөйөм булған һәм тулыһынса тамаҡ туйҙырыуға һәм кейем-һалымға киткән. Тора-бара металл эшкәртергә, иген сәсергә, таш ҡырҡырға, ағас йыйып өй һалырға өйрәнгәс (Арҡайым осоро), йәмғиәт ғаиләләргә бүленә башлай, сөнки яҡшы эш ҡоралы, һунар ҡоралы аҙыҡты күп табырға, өйҙө күп төҙөргә мөмкинлек бирә һәм һәр ғаилә үҙ-үҙен ҡарарлыҡ хәлгә етә. Йәғни ырыу йәмғиәте яйлап тарҡала һәм ғаиләләр йәмғиәте барлыҡҡа килә. Ошо осорҙа дөйөм йәмғиәткә хеҙмәт иткән кешеләрҙе ҡарау (ашатып-эсереү, кейендереү, торлаҡ биреү һ.б.) бар ил өҫтөнә төшә һәм ул һәр ғаиләгә һалым һалыу юлы менән башҡарыла. Йәмғиәт үҙ елкәһендә батшаларҙы, хан, ҡағандарҙы, хәрбиҙәрҙе аҫрай. Һалым тәүҙә күп булмай, әммә торған һайын арта, сөнки дәүләт сығымдары ҙурая, бигерәк тә хәрби сығымдар. Һуғыш барған осорҙа хәрби сығымдар дәүләт бюджетының 70-80 процентына тиклем барып етә. Тыныс йылдарҙа ла ул бик күп була — 30-40 проценттан кәмемәй. Шул ваҡытта ҡайһылыр аҡыллы кешенең башына уй килә: хәрбиҙәрҙе дәүләт ҡаҙнаһынан ситләтеп була бит. Хәрби кешегә,

башҡортҡа, ер бүлеп бирәһең (бығаса һәр ауыл ере дөйөм эшкәртелгән, уңышы ғаилә ағзалары иҫәбенән бүленгән), әйҙә, үҙе (ғаиләһе) эшкәртһен, сәсһен, урһын,уңышы үҙенеке булһын, әммә хәрби хеҙмәт өсөн (аты, ҡоралы, кейеме, тамағы) дәүләт ҡаҙнаһына инмәһен. Ошо рәүешле аҫаба башҡорт барлыҡҡа килә. Икенсе төрлө әйткәндә, ерле башҡорт — Аҫаба. Боронғо иран-арий телендә **ас** — ер тигән һүҙ, **ба** — атай (хәҙерге башҡорт телендә “бабай” атайҙан өлкән кеше, төрөк телендә **“бабай”** атайҙы белдерә); аҫаба —йәғни **атай ере.**

Боронғо ирандарҙа, уларҙы арий тип атап йөрөткән дәүерҙә Иран дәүләтенең беренсе батшаһы Йома булған, унан һуң йәнә ете кеше батшалыҡ иткән. Күпмелер дәүерҙән һуң батшалыҡ Ҡәүи нәҫеленә күсә. Ҡәүи, боронғо һинд-арий теленән бөгөнгө беҙҙең лөғәткә әйләндерһәң, әүлиә шағир, аҡыл эйәһе була. 4-5 мең йыл әүәл Ҡәүи кеше исеме түгел, ә уның һөнәрен, йәмғиәттәге урынын, башҡарған вазифаһын аңлатҡан. Ҡәүиҙәр арийҙар йәмғиәтенең руханиҙар ҡатламына (башҡорттарҙа — хәрбиҙәр ҡатламына) ҡарай һәм улар арийҙарҙың хоҙайҙарына гимндар, арнауҙар — шиғри өндәмәләр менән мөрәжәғәт итергә бурыслы була. Шул уҡ ваҡытта ҡәүиҙәр ил башлығы вазифаһын да үтәй. Ҡәүи арнау әйткән саҡта Хоҙай менән бәйләнешкә ингән.

Ҡәүиҙәр арий дәүләтенең башында торған саҡ уларҙың Уралда берҙәм ил булып йәшәгән дәүеренә тура килә. Шунан был йәмғиәт тарҡала: арийҙарҙың бер өлөшө Уралда ҡала, икенселәре — көнбайышҡа, өсөнсөләре — төньяҡҡа, дүртенселәре — көнсығышҡа һәм бөгөн фарсы, ҡорт тип аталмыштары көньяҡҡа күсенә, Тигр менән Евфрат йылғаларының көнсығышында — Иран тауҙарында (Уралдағы һымаҡ) көн итә. Иран дәүләте көслө, алдынғы илдәрҙең береһе була. Төрлө осорҙа уға төрлө батша (әйткәндәй, боронғо арий телендә батша— башта тигәнде аңлата) етәкселек итә, шул иҫәптән бик ҡеүәтле сәсәндәр нәҫеле лә баш була. “Сәсән” һүҙе лә кеше исеме түгел, ә һөнәр эйәһен, йәмғиәттә тотҡан вазифаны аңлата. Сәсән нәҫелле батшаларҙың барыһы ла — һүҙ оҫтаһы һәм һүҙ ҡәҙерен, ил тарихын белеүсе һәм хөрмәт итеүсе, уларҙы киләсәк быуындарға түкмәй-сәсмәй еткерергә тырышыусылар. Йәғни улар башҡорттарҙа сәсәндәр башҡарған вазифаны үтәгән, шуның өҫтөнә ил башлығы ла булған.

Башҡорттағы сәсәнлек тарихының башы ана шунда ята: йәғни һүҙ оҫтаһы, тарих белгесе, халыҡтың мәнфәғәтен сағылдырыусы сәсәнлек эше боронғо арийҙар осоронда башлана ла бөгөнгә тиклем килә.

Бөгөн (һуңғы 50-60 йылды күҙ уңында тотам) тарихи төшөнсәләге сәсәндәр юҡ. Йәғни һүҙ оҫтаһы булған кеше ил башлығы ла түгел, ил башлығы булғаны шиғри тел менән тарих та һөйләмәй, арнау ҙа әйтмәй, киләсәкте лә күҙалламай. Әммә был хәл “сәсәндәр юҡҡа сыҡҡан” тигәнде аңлатмай. Эйе, сәсәндәрҙең вазифаһының бер өлөшөн шағирҙар, икенсеһен яҙыусылар, тарихсылар (тарих яҙа), өсөнсөһөн сәйәсмәндәр (күҙаллай) башҡара. Тик был вазифаларҙың барыһын да бер юлы башҡарырҙай кешеләребеҙ юҡмы ни? Ни эшләп булмаһын, тик беҙ уларҙы һуңғы йылдарҙа үҫтергәнебеҙ, сәсән итеп тәрбиәләгәнебеҙ юҡ.

Бәлки, уларҙың бөгөнгө йәмғиәткә кәрәге лә юҡтыр? Минеңсә, кәрәге бар, сөнки техник мөмкинлектәр (яҙыу, компьютер, телефон һ.б.) нисек кенә киң булмаһын, уларҙың бөтәһен дә кешенең аҡылы барлыҡҡа килтерә.

Кешенең аҡылы, мейенең эшләү тиҙлеге һәм киңлеге тик аҡылды, мейене туҡтауһыҙ хәрәкәтләндергәндә, эшләткәндә генә бик яҡшы һөҙөмтәләр бирә. Башҡорттоң, "Йөрөгән таш шымара, тик ятҡаны мүкләнә" тигән мәҡәле шуға ишара бит инде. Шиғыр, повесть, роман, хикәйә, арнау, сәйәси доклад яҙып та башты эшләтергә була, әлбиттә. Әммә аҡылдың тиҙлеге, фекерҙе ярты һүҙҙән тотоп алыу һәм уны үҙеңә кәрәк юҫыҡта үҫтерә белеү, өҫтәүенә яңы фекерҙе бик тиҙ рәүештә матур һүҙ теҙмәһенә оҫта итеп төрөү, бүтән кешеләргә еткерә алыу тик аҡыл, фекер, һүҙ ярышында ғына барлыҡҡа килә. Быының бер формаһы — сәсәндәр әйтеше. Сәсәндәр әйтешендә ҡатнашыу, һөйләшеү генә түгел, еңеп тә сығыу өсөн кеше тәрән аҡыллы, киң белемле, музыкаль һәләтле, бик оҫта телле булырға тейеш, йәғни сәсәндәрҙең иң күркәм сифаттарына өлгәшеү шарт.

Беҙҙә һүҙгә оҫта, теле үткер, аҡылы камил кешеләр етерлек. Һәр ауылда, һәр районда, һәр ҡалала бар улар. Шуларҙы бер урынға йыйып, сәсәндәр әйтешен ойошторорға ине! Әйтеш — ул ниндәй ҙә булһа бер темаға һүҙгә маһир кешеләрҙең үҙ фекерен телдән шиғыр рәүешендә белдереү ул. Был һорау — яуап формаһында ла, монолог кеүек тә барырға мөмкин. Әйтеш ҡурай, ҡумыҙ, думбыра, гармун, баян, фортепьяно кеүек музыка ҡоралдары оҙатыуында ойошторолһа, тағы ла яҡшыраҡ.

Күренеүенсә, сәсәндәр әйтешен аяҡҡа баҫтырыу өсөн әллә ниндәй эш тә, ҙур аҡса ла кәрәкмәй. Бары тик теләк һәм тағы бер тапҡыр теләк кенә булһын.

Кем ойоштора алыр ине быны? Иң алдан ҡараш Әбйәлил яғына төбәлә. Сөнки республикабыҙҙа хәҙер халыҡ йолаһына әйләнеп киткән "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!", "Шәжәрә байрамы" сараларын да улар башланы. Республикабыҙҙың Яҙыусылар берлеге лә был эште хуп күрер, тигән өмөт бар.

Сәсәнлектең 4 мең йылдан ашыу тарихы бар. "Урал батыр", "Аҡбуҙат", "Заятүләк менән Һыуһылыу" әҫәрҙәрен ижад итеүселәр — аҡыл эйәһе, ил етәксеһе булып танылған. Шул ҡәҙәр бөйөк аҡыл дарьяһы беҙҙең дәүергә еткәс, ҡорор, һуңғы тамсылары ҡомға һеңеп, быуланып күккә осормо ни? Юҡ, быының менән күңел дә, аҡыл да килешә алмай. Сәсәнлекте тергеҙәйек, йәмәғәт.

**Фәлим ХИСАМОВ.**

# ХАЛЫҠ МИРАҪЫНА МӨНӘСӘБӘТ

*2000 йылда “Китап” нәшриәтендә РФ Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ғалимдары төҙөгән “Башҡорт халыҡ ижады. V том” исемле тарихи эпостар йыйынтығы баҫылып сыҡты. Халҡыбыҙҙың урта быуаттар тарихына ҡағылған материалдарҙың донъя күреүе – ҡыуаныслы хәл. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, йыйынтыҡтың етди етешһеҙлектәре лә бар. Уның менән танышып сыҡҡас (артабан ул “Күрһәтелгән хеҙмәт” тип кенә аталыр – **И.Й.**), “Комментарии опубликованному Н.Зариповым и Г.Шафиковым эпосу “Идиге и Мурадым” и опубликованному М.Ахмедзяновым “Шэжерэ – родословной Идиге” тигән китабымды баҫтырып сығарырға мәжбүр булдым. Әле шул хеҙмәттән өҙөктәр тәҡдим итәм.*

Шәжәрәләргә бәйләп тикшергәндә, “Иҙеүкәй менән Мораҙым” эпосын Баба Түкләстән башлау маҡсатҡа ярашлы. Күрһәтелгән хеҙмәттең 47-се һәм 307-се биттәрендә ошондай юлдар бар:

*Урал армыт типһәндә*
*Таша булған сыуалдай,*
*Ҡашҡа булып илендә*
*Үмәр тигән ете яттың,*
*Туғыҙ йәштә әүлиә (булған),*
*Утыҙ йәштә ил гиҙгән,*
*Хаким иткән Бабаның,*
*Иң кинйәһе Түкләстең...*

Эпосты баҫтырыусылар үҙ аңлатмаларында (306-сы бит), “Үмәр батыр” башҡорт халыҡ эпосында тәү башлап күренә, тип әйтеү менән генә сикләнеп, был шәхестең тарихын өйрәнеүҙе кәрәкле тип тапмаған. Дөрөҫ, улар артабан Үмәр тураһында шунда уҡ “Баба Түкләс Чашлы Азиз” рәүешендә, әммә бөтөнләй икенсе бер шәхес итеп телгә ала. “Үмәр ата” ла, “Чашлы Азиз” да, “Хөсәйен багги”ҙа – бер үк кеше. “Хөсәйен багги кәшәнәһе”ндәге ҡәбер ташында түбәндәге яҙыу сүкелгән булыуы билдәле: “Бабы дагилаш шжаглы Азиз Хөсәйен багги әл әмир әл кәбир Гөмәр бәк әт-Төркөстани. Фи шәһер мөхәррәм, 7-се көнөндә, 744 сәнәлә”. Был яҙманың тәржемәһе: ( “Бабы дагилаш” (Баба Түкләс, Бабату Ключев) – шөғәлә доға ҡылыусы; “Шжағлы Азиз” (Шашлы Азиз, Шалғыҙ) – ғәйрәтле хаким; “Хөсәйен багги” (Хөсәйен бәк) – мәңгелек ил етәксеһе; “әл әмир” – бойороусы; “әл кәбир” – бөйөк; “әт-Төркөстани” – тыумышы менән Төркөстандан; “Фи шәһер мөхәррәм“ – мөхәррәм айының; “ 744 сәнәлә” – 744 һижри (1341 миләди) йылда. Аңлашылыуынса, Үмәр ата 1341 йылда Башҡортостанда үлеп, хәҙерге Шишмә районындағы Аҡ зыярат ҡәберлегендә үҙ кәшәнәһендә

ерләнгән. Уның бүтән ҡушаматтарынан “Күҙле ата”, “Хәсән ата”, “Асан ата” тигәндәре лә билдәле. Әйткәндәй, аллегория рәүешендә, “Иҙеүкәй менән Мораҙым” эпосын нәшер итеүселәрҙең эшмәкәрлеген Үмәр атаның үҙе яҙған тулғауы аша баһалау урынлы булыр, моғайын.

“Ҡарыйҙың (Ҡөрьән уҡыусының) башына алйотлоҡ килер, тоҡомдарының дауамы тамам булыр, ул ваҡытта ҡарындаштар ят булыр, тәндән көс, әҙәмдәрҙән сыҙам китер, улың-ҡыҙың ятҡа мәйел итер, илең рухы, аҡыл йортоң шунда бөтәр...” Ул тағы ла ҡатыраҡ әйткән: “Тинтәк аҡыл ямандыр, ил ҡәҙерен белмәҫ”.

Эпосты әҙерләүселәр 306-сы биттә Тирмә (Тора) бәк тураһында түбәндәге аңлатманы биргән. “Башҡорт шәжәрәләрендә, легендаларҙа йәки риүәйәттәрҙә Тора хан исемендә йөрөй. Ҡайһы бер легенда-риүәйәттәрҙә башҡорт ханы, икенселәрендә нуғай ханы тип атала. “Бөрйән, Ҡыпсаҡ, Үҫәргән, Тамъян ырыуҙарының шәжәрәһе“ндә башҡорт халҡына “билистиклал” (бойондороҡһоҙ) хан булыуы әйтелә. Стәрлетамаҡ янындағы Торатау (шәжәрәлә “Тураг таг”) – уның торған ере, “аның сарайы урынылыр” тип күрһәтелә.

Ғилми дәрәжәле рәсми заттарҙың уйҙырмаларҙы тарих итеп күрһәтергә тырышыуын миңә “Урыҫ тарихы” китаптарында ғына күрергә насип була торғайны. Баҡтиһәң, унан беҙҙең “ғалимдар”ҙа тартынмай. Бындай алым ҡулланыуҙан “Иҙеүкәй менән Мораҙым” эпосында ла, башҡорт шәжәрәләрендә лә Тора бейҙең баш ҡалаһының ҡайҙа булғанлығы асыҡланмай. Эпоста бары тик Тора бей етәкләгән дәүләттең сиктәре генә күрһәтелгән.

*Ахыр сиктә атаһын*
*Үҙ йәйләүенә ҡуйып,*
*Үҙе Иҙел буйлаъан,*
*Тора бейҙең йәйләүе –*
*Нөгөш, Иҙел тамаъы,*
*Һәләүек-Нөгөш араһы,*
*Симдән таъы Димгәсә*
*Уның булъан төйәге.*

Тора (Тирмә) бей дәүләтенең сиктәрен ана шулай күҙаллап була. Ә баш ҡалаһының хәҙерге Өфө урынында булыуын монах Иоганка яҙмаларына нигеҙләнеп кенә белергә мөмкин. Был осраҡта ла Тора (Тирмә) бейҙең хакимлыҡҡа 1341 йылда атаһы Үмәр ата үлгәс кенә килеүенә таянып фекер йөрөтөргә ҡала. Эпосты баҫтырыусылар һылтанған шәжәрәлә иһә һүҙ бөтөнләй икенсе нәмә тураһында бара.

“Нәһер (оло йылға) Иҙелдә Тора тау риямагта (өйрәнеү эштәрендә) мәшһүрҙер, аның сарай (билдәләнгән) урынылыр. Башҡорт халҡына билистиклал хан булмыштыр. Аның улы Ҡасим хан булды. Ул заманда Сарайсыҡта Бураҡ хан моҡатәләсе (ҡан ҡойошоуы), йәғни ер-һыу өсөн ваҡиғалар булды. Ахыры Ҡасим хан энесе Бирдебәк солтанды ғәскәр менән төньяҡ тарафына күндерҙе. Бураҡ идас (урынбаҫары) Мансурҙы көньяҡ тарафта күндерҙе. Һуңынан ике жәнибтән (тарафтан) мокабил (осрашыуҙар) булдылар, сайбандар (йоҡлар урын) ҡорҙолар. Илсе тотоп шөйлә (шулай) мосалихә (килешеү) ҡылдылар. Самар ырыуының көньяғы Бураҡ ханға булып, рәғиәте (ҡул аҫтындағы халҡы) нуғай ине. Самар ырыуының төньяҡ тарафы Ҡасим ханға булды, рәғиәте башҡорт ине...”

Күренеүенсә, шәжәрәлә һүҙ өйрәнеү урыны тураһында ғына бара. Тирмә (Тора) бей 1395 йылда вафат булып, хәҙерге Шишмә районындағы үҙ кәшәнәһендә ерләнгән. Күрһәтелгән хеҙмәттә авторҙар Туҡтамыш хан менән Тимер Ҡотлоҡ тураһында ентекле мәғлүмәттәр биреүҙән тыйылған. Бәлки, “был

шәхестәр барыһы ла билдәле, аңлатма кәрәкмәҫ” тигәндәрҙер. Хата фекер был, сөнки, был ике кешенең тарихын яҙмау арҡаһында, ғалимдар үҙҙәре үк эпосҡа биргән аңлатмаларында бик күп уйҙырмаларҙы ысынбарлыҡ рәүешендә ҡабул итергә мәжбүр булған. Туҡтамыш менән Тимер Ҡотлоҡтоң шәжәрәләре бар. Мин уны үрҙә аталған урыҫса хеҙмәтемдә күрһәттем.

307-се биттәге аңлатмаларында йыйынтыҡты әҙерләүселәр Дәмми бей һәм Ыршаҡ бейҙе “тарихта билдәһеҙ шәхестәр” тип атаған. Ысынында ике бей ҙә тормошта булған. “Дәмми бей” (Дюма бей) – Тимер Мөлөк хандың ҡушаматы. Ул Иҙеүкәйҙең һеңлеһенә өйләнеп, Иҙеүкәй өсөн “дюммә”, йәғни “кейәү” була. “Ыршаҡ бей” (Варисаг бей) иһә – Тимер Ҡотлоҡтоң ҡушаматы. “Варисаг” башҡортса “тәхет вариҫы” тигәнде аңлата.

Тимер Мөлөк хан 1378 йылда Ғәрәпшаһты ҡыуып ебәреп, Аҡ Урҙа хакимы булып китә, ә 1378 – 1379 йылдарҙа бөтөн дәүләтебеҙ ханы була. Тимер Мөлөк – Ырыҫ хандың улы, дәүләт тәхетенә туғаны Тули Ходжаны үлтереп менеп ултыра. Туҡтамыш иһә – Тули Ходжаның улы, атаһы яҙмышын уртаҡлашыуҙан бары тик Сәмәрҡәнд әмире Аҡһаҡ Тимер янына ҡасып ҡына ҡотола.

Ғәрәпшаһ – Иҙеүкәйҙең олатаһының олатаһы, эпоста телгә алынмай. Әммә уның тарихын Иҙеүкәйҙең шәжәрәһенә бәйләп аңлатыу эпосты аңлау өсөн мотлаҡ кәрәк. Ғәрәпшаһ 1375 – 1377 йылдарҙа Аҡ Урҙаға Мамай мырҙа тәғәйенләп ҡуйған хандыр. Ул – 1377 йылда Пьяна йылғаһы буйында Дмитрий Донской ғәскәрҙәрен ҡыйратҡан кеше. 1377 - 1378 йылдарҙа Мордовия менән етәкселек итә. Аҙаҡ, хажға барып, Ғәрәбстанда йәшәргә ҡала. Әйткәндәй, беҙ Иҙеүкәйҙе уның улы Абу Фалан ибн Ғәрәпшаһ яҙмалары буйынса ғына күҙ алдына килтерә алабыҙ. Бына ул яҙма: “Ул (Иҙеүкәй) уртаса буйлы, йөҙгә ҡара, олпат кәүҙәле, батыр, ҡарауға ҡурҡыныс, оло аңлы, йомарт, мөләйем итеп йылмайыусы, зирәк һәм талапсан аҡыллы кеше ине.”

“Күп һаҡланған”аңлатмаһын йыйынтыҡты әҙерләүселәр “халыҡта һаҡланған” мәғәнәһендә бирә. Әммә был һүҙ – “кәффә” (барлыҡ,тәжрибә) һүҙенең боҙоҡ калькаһы (яңғырашы). Уның иң боронғо теркәлеше хәҙерге Ейәнсура районының Муйнаҡ ауылы көмбәҙендә теркәлгән. Һүҙ Төрки ҡағанаты осоронда уҡ ҡулланылышта булған. Көмбәҙҙә: “Кәффә раз бат: Азиз”, йәғни “зирәклек һәм ахмаҡлыҡ таратыусы мәңгелек: Ғәзиз” тип яҙылған. Тимәк, “күп һаҡланған” һүҙе бары тик “тәжрибә һаҡланған” тип тәржемә ителә.

Эпосты баҫтырыусылар Келәйлене “эпик герой” тип аңлата. Ысынында иһә Келәйле батыр – Туҡ һәм Соран йылғалары араһында йәшәгән тарихи шәхес. Туҡ йылғаһы эргәһендәге Мәсет тауы ҡаяларында уның үҙ ҡулы менән яҙған мәнкәбәһе һаҡланған. Текста “Мәнкәбә. Мин Клилә батыр фагилән аль бина (тәрәген эшләүсе) Туҡтамыш дәүләтенең” тигән һүҙҙәр сүкелгән. Аҙаҡ ошо Келәйле батырҙың ғәскәр башлыҡтары Туҡһан, Сәфәр, Аҙнай, Ҡасҡын, Бикҡол, Ҡаныҡай батырҙар Сорандан алып Дим йылғаһы башына тиклем ерҙәрҙе биләй. Бындағы ауылдарҙың ҡайһы берҙәре әле лә уларҙың исемен йөрөтә.

“Ҡуян йылы” – боронғо башҡорттарҙың “Кояш календары – Мосал” иҫәбендә айырым йыл һәм ай исеме. Башҡорттарҙа был йыл иҫәбе беҙҙең эраға тиклемге 3000 йылдарҙан һуң билдәлелер. Бөрө районының Яңы Ҡолсобай ауылы янындағы Рәүеф Әхмәров һүрәткә төшөрөп алған Тамғаташ ҡаяһына түбәндәгеләр сүкелгән: “Мосал. Балыҡтан йондоҙлоҡ; Ҡуй йондоҙлоғо; Ат йондоҙлоғо; Бисин йондоҙлоғо; Әтәс йондоҙонан йондоҙлоҡ һәм тағы Эт йондоҙлоғо; Дуңғыҙҙан йондоҙлоҡ; Сысҡандан йондоҙлоҡ; Ялман (Ҡуян) йондоҙлоғо; Йыландан йондоҙлоҡ; Һеләүһендән йондоҙлоҡ. Тынь Дзн сүкене.”

Артабан был 12 цикллы Мосал иҫәбе, истәк (башҡорттар) – ҡумыҡ – тыва – төрөк ҡәүемдәре Инь һәм Шань дәүләттәрен баҫып алып Чжоу дәүләтен төҙөгәс, Цзи Чан исемле Чжоу дәүләте батшаһы тарафынан (оран–тамға–ағас–ҡош–

һауыт атрибуттарын ҡулланып) 60 цикллы йыл иҫәбенә әйләндерелә. Беҙҙең эраға тиклемге 1027 йылда була был. Цзи Чандың улы Цзи Дан (йәки Чжоу гунн) ошо 60 цикллы йыл иҫәбенә аңлатмалар яҙа һәм был йыл иҫәбен айырым бер фәлсәфәүи йүнәлеш итеп формалаштыра. Цзи Дандың хеҙмәте юрауҙар өсөн ҡулланыла башлай. Әйткәндәй, ошо юрау ысулдары – башҡорттарҙа оҙаҡ һаҡланған фәлсәфәүи күренештәрҙең береһелер. Юрау өсөн ҡулланылған махсус һөйәктәр Рәсәйҙең төрлө төбәктәрендә әле лә табыла. Шуларҙан ике өлгө ҡарап үтеү зыян итмәҫ, моғайын.

Дон йылғаһында табылған бер һөйәктә “Әмәг нәчамак: Сәилмак рк: әнчәк кәг”, йәғни “Ил ни эшләргә тейеш? Һайланыусы ҡол: ә нисек эшләргә?” тип яҙылған. Ейәнсура районындағы Үрген йылғаһында табылған һөйәктә иһә “Тәңре” һүҙе генә һаҡланып ҡалған.

Күреүегеҙсә, эпосты баҫтырыусылар “Мосал” йыл иҫәптәрен “тоҡомһоҙ Көнсығыш йыл иҫәбе” тип аңлатып яңылыша. Был саф башҡорт йыл иҫәбелер. “Ҡуян” йылы”н “лыу” менән алмаштырып, йыл башын “Эт сыуағы”н китәреп, “Әбей сыуағы”н сығарып, тигән юлдарҙы йыйынтыҡҡа әҙерләүселәр бер нисек тә аңлатмаған. Был хәлдең асылы иһә түбәндәгесә. Төрки халыҡтар тарихында йыл башын алмаштырыу ғәҙәте бар. Беҙҙең эраға тиклемге 206 йылда Мәте ҡаған хакимлыҡҡа килгәс, йыл башы итеп боронғо “Балыҡ йондоҙлоғо” (көҙгө көн-төн тигеҙлеге) түгел, ә “Сысҡан йондоҙлоғо” (яҙғы көн-төн тигеҙлеге) иҫәпләнә башлай. Мәте ҡаған индергән йыл иҫәбе Туҡтамыш хан тәхеткә ултырғанғаса дауам итә. Сөнки бар төрки халыҡтар ҙа Алтын Урҙа дәүләтен Мәте төҙөгән дәүләттән айырып ҡарамай һәм уны “ә Мәт хәммиәт хин”, йәғни “Мәтенең башҡаларҙың зыян килтереүенән һаҡлау дәүере” тип атап йөрөтә. “Юрматы башҡорттары шәжәрәһе”нән бирелгән өҙөктә түбәндәгеләр бар: “әүәл заманда, Мәтенең башҡаларҙың зыян килтереүенән һаҡлауы дәүерендә ныҡ ҡул аҫтында торҙолар. Унан һуң ҡаған Ҡытайға дошманлашҡан булды. Бер-береһенә, хакимлыҡтарына дәғүәләшкән булып, бер-береһенә ҡылыс саба башланылар”.

Эпоста иһә Иҙеүкәй Тирмә (Тора) бейгә тап ошо “ә Мәт хәммиәт хин” осоронаң бөтөүе һәм яңы хакимлыҡ башланыуы тураһында хәбәр итә:

*Ҡуян йылын(да) “Лыу” менән*
*Алмаштырып йыл башын,*
*Атайҙар хакимлығын бөтөрөп,*
*Бабалар хакимлығын ҡайтарып...*

Был юлдарҙа һүҙ Туҡтамыш хандың “Ҡуян йылы”нда йыл иҫәбен үҙгәртеп, Мәте ҡағанға тиклем булған иҫәпте кире ҡайтарыуы тураһында бара. “Эт сыуағы” (Ата сәвәге) – “Атайҙар тотҡан юл” тигән һүҙҙәрҙер.

“Кәпәс” – урта быуаттарҙағы башҡорт теленең “ян; йәйә” мәғәнәһендә йөрөгән һүҙенең боҙоҡ калькаһы. Эпоста иһә йәйәләрҙең һәр бер һуғышсының шәхси таһыллығына, зауығына яраҡлаштырылып эшләнеүе тураһында һүҙ бара.

Эпоста телгә алынған “Янбай”( Ҡанбай) – Сыңғыҙ тоҡомонан булған бей.

“Күк бурҙай” һүҙбәйләнешен күрһәтелгән хеҙмәт авторҙары “күк бүре” һүҙе менән генә бәйләй (321-се бит). Әммә был һүҙ “күк төрки” һүҙенең синонимы ғына. Эпоста һүҙ “Тәңре һайлаған төркиҙәр” (һайланған ирҙәр) тураһында бара. Ысынлап та, бик борондан уҡ башҡорттар ҙа, башҡа төркиҙәр ҙә үҙҙәрен мотлаҡ “бүре-эт тоҡомо” (бүре-эт халҡы) тип йөрөткән. Мәҫәлән, Күгәрсен районындағы Санъяп ауылы янында Наҡаҫ тауы һыртында табылған рун яҙмалы таштарҙа ошолар яҙылған: “кәзнәб (һаҡланыусы урын) әмәдәш (бергәләп хаким итеүсе) әмнәсәб (бер нәсәбтән булған) тоҡомдаш уччнчыкдма (бүре-этемә): тәслим (бүләк иттем) абданч (торар ерен).” Был яҙма ҡомартҡы беҙҙең эраға тиклемге 198 йылда, Мәте ҡаған осоронда, яҙылған.

“Күк бурҙай” һүҙенең яңы айышын ҡулланып уҡығанда шиғри юлдар ошолай яңғырай:

*Башына торҡа кейеп,*
*Һайланъан ирҙәрҙе алып,*
*Ҡола атына менеп,*
*Иҙеүкәй үҙе баш булып,*
*Сатмыр Ханъа киткән, ти...*

“Кабардин” – тарихи риүәйәттәрҙә “Тире иләүсе батыр” (Богатырь Кожемяка) булараҡ телгә алыныусы билдәһеҙ шәхес. Эпоста “Дәббаги бәндә ин-Али” һүҙенең калькаһы “Дәү Кабардин Али” һүҙе ҡулланылырға тейеш булһа ла, авторҙар ниндәйҙер “Кабардин хан”ды ҡуйыуҙы хуп күргән һәм был хатаны эпостың артабанғы юлдары инҡар итеүен дә күрмәгән. Ысынлап та, әгәр ҙә “Кабардин” хан булһа, ул ни эшләп әле Иҙеүкәйҙең атта оҫта йөрөүенә йәки ҡарсыға менән өйрәк алыуына иҫе китергә тейеш? Был оһоллоҡ шул осорҙоң юғары ҡатламы өсөн тәбиғи күренеш тә баһа! Ә “Тире иләүсе” иһә Иҙеүкәйҙең был “егетлектәре“нә һоҡланыр ине.

“Салахи” – Солхатти, Солхат ҡалаһы кешеһе тигән һүҙҙең боҙоҡ калькаһы. Ҡырымдағы Солхат ҡалаһы хакимы.

“Камҡалы кул ҡом сәвәк”. “Кәмә һуа алъ кавәл” (Тап шул урында, әйтеүҙәренсә...) тигән урта быуаттағы башҡорт һүҙенең боҙоҡ калькаһы. Эпостың шиғри юлы тулыһынса ошолай яңғыраған: “Кәмә һуа алъ кавәл Комо сук” (тап шул урында, әйтеүҙәренсә, Комо сук куле бар). Ҡомо суҡ күле хәҙерге Пермь крайының Чердынь ҡалаһы янында урынлашҡан. Күлдең исеме аҙыраҡ үҙгәреш кисереп, хәҙер Ҡомо ҡуш тип йөрөтөлә.

“Һабрау” – бик күп, билдәһеҙ тарихи шәхестәрҙең вазифа ҡушаматы. “Һаваир опа” (Хор етәксеһе) тигән манихей сиркәүе архиепископы титулынан килеп сыҡҡан боҙоҡ калька. Һабрауҙар Дәште-Ҡыпсаҡ дәүләте осоронан (1016 – 1220 йылдар) билдәле. Улар дәүләттең рәсми сиркәүе булған “Мана сиркәүе”нең юғары советы менән етәселек итеп, дәүләт башлығының дини урынбаҫары була. Әйткәндәй, был мана сиркәүенең юғары советына ун ике архиепископ инер булған. Уларҙың вазифа ҡушаматтары барыһы ла тарихсыларға билдәле. Бына улар: Тәвәкыйз оп (Туксоба – мәхкәмәлә яҡлаусы), Аль Дан опа (Алтын опа – ғилемлек), Сангиар опа (Чнгр опа – сәнәғәт), Гаден опа (Кидан опа – ябай), Ырыҫ опа (Урус опа – тыуым), Джб опа (Епи опа – ҡаҙна), Ага опа (Аги опа – матбуғат), Кол опа (Кали опа – бойондороҡлоҡ), Аси опа – етешһеҙлек, Дар дар опа (Тртр опа – ил менән идара итеүсе).

Башҡорттар тарихында билдәле 13 Һабрау бар.

| | | |
|---|---|---|
| 1. | Беренсе Ҡыпсаҡ Һабрауы: | 1016 – 1095 йылдар, |
| 2. | Икенсе Ҡыпсаҡ Һабрауы: | 1095 – 1130 йылдар, |
| 3. | Өсөнсө Ҡыпсаҡ Һабрауы: | 1130 – 1220 йылдар, |
| 4. | Беренсе Манғыт Һабрауы: | 1220 – 1310 йылдар, |
| 5. | Икенсе Манғыт Һабрауы: | 1310 – 1405 йылдар, |
| 6. | Өсөнсө Манғыт һабрауы: | 1405 – 1470 йылдар, |
| 7. | Дүртенсе Манғыт Һабрауы: | 1470 – 1530 йылдар, |
| 8. | Бишенсе Манғыт Һабрауы: | 1530 – 1590 йылдар, |
| 9. | Алтынсы Манғыт Һабрауы: | 1590 – 1650 йылдар, |
| 10. | Етенсе Манғыт Һабрауы: | 1650 – 1710 йылдар, |
| 11. | Һигеҙенсе Манғыт Һабрауы: | 1710 – 1750 йылдар, |
| 12. | Беренсе Башҡорт Һабрауы: | 1750 – 1800 йылдар, |
| 13. | Икенсе Башҡорт Һабрауы: | 1800 – 1860 йылдар. |

Мана ойошторған был сиркәү диндарҙары Аллаһының барлығын һәм берлеген таныған, пәйғәмбәр һәм әүлиәләрҙең бары тик Аллаһы илселәре икәнен аңлаған, тик улар пәйғәмбәрҙәр һәм әүлиәләр, Аллаһының ҡашҡалары булараҡ ҡайтанан тыуырға һәләтле, тип һанаған. Мана сиркәүе – Башҡортостан ерҙәрендә Төрки ҡағанаты осорҙарында уҡ нығынып ҡалған дин. Ошо көндәргәсә башҡорттарҙа Мана сиркәүенең архиепископтары Сисинний (274 – 289 йылдар) һәм Иннай (289 – 320) фәтүәләре сүкелгән көмбәҙҙәр һаҡланған.

Фәтүәлә "Сайә факиһә сәмәхәт жәфә: Суфи Сисинний Лалә" (Насарлыҡ киләсәктәге яфа башланғысы: Суфый Сисинний тәрбиәсе) тигән һүҙҙәр бирелгән. Иннай фәтүәһендә иһә "Пһасага джаһата нау татһала Иннай даи" (Баһалау ижтиһат итеүсенең Яңы Тәғәләһенән: Иннай даһи) тигән һүҙҙәр сүкелгән. Яҙмаларҙың тәүгеһендә арамей, икенсеһендә брахми хәрефтәре ҡулланылған.

Эпостағы "һул күҙене йоморға" тигән һүҙбәйләнеште иһә "Үмәр атаның ислам тәғлимәттәренә күсергә саҡырыуы" тип аңларға кәрәк.

"Етмештек", "Жади ма саадака" (Яңы оҡшашлыҡ) тигән урта быуаттағы башҡорт һүҙенең боҙоҡ калькаһы. Эпостағы шиғри юлдар түбәндәгесә аңлатыла:

*Һинән булдым һорарға:*
*Берәү барған баҙарға*
*Бер йөк күмер һатырға.*
*Һораған өс оҡшашлыҡ*
*Йөгөндәге барына.*
*Алыусы ҡарап торған да,*
*Ун оҡшашлыҡ биргән дә*
*Нимә булһа йөгөндә –*
*Һатып алған барын да.*

Йомғаҡлап шуны әйтеү мотлаҡ: эпосты нәшер итеүселәрҙең төп етешһеҙлектәре түбәндәгесә:

1) шул замандың боҙоҡ калькалары;
2) ваҡиғаларҙың мотлаҡ уны ижад иткән осорҙағы хәлдәргә лә ауаздашлығы;
3) ваҡиғаларҙы үҙ заманының ҡараштарына яраҡлаштырырға тырышып һөйләнәсәге иҫәпкә алынмаған.

Был етешһеҙлектәрҙең сәбәбе авторҙарҙан ғына тормай. Беренсенән, был илебеҙҙә ҡабул ителгән, ғилми дәрәжәләр яҡлау буйынса ҡалыплашҡан талаптарға бәйле. "Урыҫ тарихы", "урыҫ фәлсәфәһе" буйынса дәүләт имтихандары тапшырған белгес төрки тарихын ҡайҙан аңлаһын? Икенсенән, был етешһеҙлек юғары уҡыу йорттарында һис юғында башҡорттоң рун һәм ғәрәп яҙмаларын ғына өйрәтеүҙән дә килә. Бүтән төр яҙмаларыбыҙҙы күрмәй-белмәйенсә, урыҫ китаптары уҡып ҡына диплом алыусынан ниндәй милли белгес сыҡһын инде.

Өсөнсөнән, дин әһелдәребеҙ "беҙ элек мәжүси булғанбыҙ" тип өйрәткәндә, ҡыҙыҡһыныу кемдә генә тыуһын. Был күрсәктән сығыу өсөн юғары уҡыу йорттарында "мантиҡ" һәм "граффитиология" фәндәрен өйрәнеү мотлаҡ. 450 йылдан ашыу Рәсәйҙә йәшәһәк тә, уның боронғо акттары архивында һаҡланған төрки документтарҙың төп нөсхәләренең һаман да баҫтырылып сығарылмауын иҫтә тотоп, беҙгә "Башҡорттарҙың боронғо акттары архивы"н булдырыу мотлаҡ һәм зарур.

**Иршат ЙӘНБИРҘИН.**
**Ейәнсура районы.**

# АЛЛАҺЫ ТӘҒӘЛӘ – ҺУҢҒЫ ТАЯНЫС

## Дин һәм йәмғиәт

Ҡайһыһы был донъяға беренсе булып килгән: динме, әллә кешеме? Был һорауға дөрөҫ кенә яуап табыу мөмкин түгел, сөнки кешелек донъяһының тептеүәл ҡасан яралғаны билгеһеҙ. Кешелек донъяһының тарихын, йәшәү шарттарын диндән башҡа күҙ алдына килтереү ҙә мөмкин түгел.

Динһеҙҙең дин тотҡан кешенең тәртибенә ҡыҫылырға хаҡы юҡ. Үҙаллылыҡҡа ынтылған Әҙәм балаһы башҡаларҙың үҙаллылығына ҡаршы тормаҫҡа бурыслы. Ә шулай ҙа кешелек тарихы зарурлыҡты раҫламай. Тарих төпкөлөнән алып бөгөнгө көнгә тиклем һәр дин тейешлекте үҙенсә аңлатырға тырышҡан, хатта көс ҡулланыуҙан да баш тартмаған. Шуныһы мәғлүм: һәр дин тарихы, халыҡтар йылъяҙмаһы кеүек, үтә ҡыҙыҡлы. Мәҫәлән, мәжүсилек тупһаһы аша атламаған этнос юҡтыр. Ни тиһәң дә, был дин төрө аңлайышлы, ябай, ҡанундары һәр кем өсөн билгеле.

## Дин һәм архитектура

Был ике төшөнсәнең үҙ-ара бәйләнешенә аптырарға түгел, сөнки дин үҙенең тыумышы менән Аллаһы Тәғәләне, тәбиғәтте тәбрикләү бурысына бәйле. Тәүтормош-община ҡоролошо кешеләре табыныу урыны итеп күркәмерәк урындарҙы һайлаған. Тауҙарҙы әйтеп тораһы түгел: ҡояш йылыһы ла, ай яҡтыһы ла, йондоҙҙар йымылдауы ла – күктән. Ә тауҙар күккә ашҡына, тауҙар Тәңрегә яҡыныраҡ.

Архитектура ла шул юлды һайлаған. Әйтәйек, Мысыр фирғәүендәре үҙҙәрен Аллаһ итеп һүрәтләргә тырышҡан, ә төҙөткән пирамидалары күккә олғашырға тейеш булған. Пирамидалар төҙөү өсөн түгелгән көс башҡа этностарҙы буйһондороуға киткән булһа, бөгөнгө донъя икенсерәк булыр ине, буғай. Эйе, кешелек донъяһы үҫеше башҡа юлдан китер ине. Тимәк, дин үҙенең хәл-торошон өгөт-нәсихәт, табыныу менән генә сикләмәй, ә төҙөлөштәр менән дә кеше зиһенен үҙгәртә белә. Ошо йәһәттән төрөк солтандарының дингә ҡарашы айырыуса фәһемле кеүек. Билдәле, Константинополь (хәҙерге Истамбул) ҡалаһын күптәр яулап алырға тырышҡан. Уйлап ҡарағыҙ, ҡаланы уратҡан өс ҡат стенаның береһенең генә ҡалынлығы алты-ете метр тәшкил иткән. Төрөк солтаны Морат II был диуарҙы емереү өсөн венгр оҫтаһы Урбанды саҡырта. Урбан пушкаһы утыҙ ботло, йәғни ярты тонна самаһы ҡая ташы менән стенаға атҡан. Сағыштырыу өсөн: Мәскәү Кремлендәге пушка-батша Урбандыҡы алдында уйынсыҡ кеүек кенә, һәм ул атмаған да. Ә солтан пушкалар ярҙамында таш диуарҙарҙы ҡыйратҡан. Стеналар емереүсе солтан архитектураға, Аллаһы Тәғәләгә ҡаршы булғанмы? Юҡтыр. Минеңсә, солтандар Аллаһ барлығын онотмаған.

Босфор боғаҙы аша Истамбул ҡалаһы уртаһынан караптарҙа уҙған туристар ҡыҙыҡһыныуҙың иң бейек нөктәһенә менә түгелме? Истамбул мәсеттәре... Манараларҙан ишетелгән аҙандар... Юҡ, был сихри күренеш түгел, был – Аллаһҡа табыныу.

Донъя тарихы ни һөйләй? Күп аллалы Бөйөк Рим империяһы сәйәси көндәше Карфаген менән ни ҡылды? Алтын Урҙаның гүзәл башҡалаһы Һарайҙы кемдәр емерҙе лә кирбестәрен ҡайҙа алып китте? Быңдай миҫалдар күп, бигерәк күп. Ә бына Константинополдең киләсәге бай булды. Төрөк солтаны Мәхмүт II ҡаланың София соборына аҡ толпар өҫтөндә килеп ингән. Уның беренсе фарманы: “Гүзәл Софияла мәсет булһын!“ Әйтергә кәрәк, тәре йөрөтөүселәр ҙә был ҡаланы хәйлә менән булһа ла ҡулға төшөргән һәм София соборының ҡиммәтлерәк әйберҙәрен ватып-емереп, алып киткән. Был йәһәттән күпте әйтеп булыр ине, сөнки София соборы Ай-Суфия мәсете булыу менән генә эш бөтмәгән. Сәлжүктәр, йәғни хәҙерге төрөктәр емереү хәстәренән бөтөнләй баш тартҡан. Әйтәйек, ҡаланың иң боронғо ҡомартҡылары: Константин, Өс йылан, готтар колонналары, сиркәүҙәр, акведуктар һ.б. әле лә – урындарында. Мәхмүт II София соборы менән һоҡланып ҡына ҡалмаған, яңы мәсет төҙөргә бойорған, тип әйткәйнек. 1463 йылдан башлап, һигеҙ йыл эсендә Мәхмүт Фәтих йәмиғ мәсете төҙөлөп, уның баҡсаһында Мәхмүт солтан үҙе лә ерләнгән.

Мәхмүттән башҡа солтандар ҙа үрнәк алған. Баязит йәмиғ мәсете – солтан Баязиттан, Сәлим йәмиғ мәсете – Сәлим солтандан, Сөләймән йәмиғ мәсете һ.б. Иң күркәме булып Әхмәт йәмиғ йәки алты манаралы зәңгәр мәсет иҫәпләнә. Был йәһәттән мәшһүр архитекторҙың исемен дә атамай булмай. XVI быуат урталарында Истамбулда архитектор Синан тарафынан байтаҡ мөһәбәт биналар төҙөлә. Ҡайсари ҡалаһында тыуған грек мосолманы Синан күренекле архитектор ғына түгел, ижтимағи эшмәкәр ҙә булып, ул ижад иткән биналарҙы иҫәпләп бөтөрөрлөк түгел. Уйлап ҡарағыҙ, Осман империяһының төрлө ҡалаларында Синан етәкселегендә 81 соборлы мәсет, 50 ябай мәсет, 55 мәҙрәсә, 32 һарай, 19 мавзолей, 17 имарет, өс дауахана, ете акведук, һигеҙ күпер, 17 каруанһарай, 33 мунса төҙөлгән. Мәшһүр архитектор 110 йәшкә етеп вафат булған. Күрәһең, Аллаһы Тәғәлә үҙе Синанға йәшәү көсө биргәндер.

Мосолман архитектураһын Истамбул ҡалаһындағылар менән генә сикләү дөрөҫ булмаҫ, шулай ҙа был миҫалдың тағы бер сере бар: Истамбул ҡалаһы төҙөлөшө боронғо Константинополь һәм грек-эллинистик архитектураға таянып үҫешкән. Тимәк, мосолман архитектураһы башҡаларҙан ситкә тайпылмаған. Ә Испаниялағы Аль-Гамбра архитектураһы ла бөйөк бит! Бына шулай, мосолман дине генә түгел, ә башҡа диндәр ҙә мөһабәт архитектураһы менән халыҡ күңелен үҙенә йәлеп итә белгән. Христиан дине лә был йәһәттән артта ҡалмаған. Графика стиле генә лә күпте һөйләй. Әйтергә кәрәк, христан дине халыҡты үҙ яғына ауҙарыу өсөн архитектура менән генә сикләнмәгән. Һүрәттәргә (икона – **И.Н.**) табыныу христиан диненең бер осоро ғына түгел, ә булмышы, бар торошо. Христиандар өсөн иконалар беренсе булып, архитектуранан да юғарыраҡ баһалана. Бында аптырарлыҡ бер ни ҙә юҡ. Миҫалға грек, Рим дәүеренең күп аллалы осорон алайыҡ. Венера, Марс, Аполлон, Гермес, Афродита... Күренеп тора, һәр Алла әҙәм затынан ғибәрәт. Һүрәттәргә табыныуҙың уңайлы яҡтары етерлек, мөмкинлектәре лә ифрат күп. Рәссамдар өсөн юл иркен. Дин әһелдәренең һынлы сәнғәт мөмкинлектәрен дин файҙаһына оҫта ғына бороуы күҙгә ташлана.

# Йыр-моң, музыка

Был тәңгәлдә диндәр ярышып эшләй. Эйе, тәүтормош табыныусылары бейеү хәрәкәттәрен, моңдо, әйберҙәр ярҙамында тыуҙырылған тауыш эффекттарын табыныуға бәйләргә өйрәнә. Әйтергә кәрәк, бындай саралар кешелек донъяһына алға тиҙерәк барырға ярҙам итә, сөнки табыныу – айырым кешенеке генә түгел, ә дөйөм эш. Табыныу һәр кемдең үҙ ихтыярына бәйләнмәгән, унда мәжбүрилек хөкөм һөрә. Бер генә миҫал. Италия – католик дине үҙәге. Бала төшөрөү тыйыла, ирҙәрҙе сөннәтләтеү – юҡ. Сөннәтләнгәндәр кемгә кәрәк? Дингә көлкө түгел.

Бер һүҙ менән әйткәндә, тәбиғәт үҙе – дин сығанағы. Бейек тауҙар – Аллаһы Тәғәлә тарафынан бирелгән. Ел-дауылдар ҙа – уның ҡөҙрәте. Ер-һыуҙы Аллаһ үҙе яратҡан. Шулай булғас? Эйе, ер өҫтө өҫтәл кеүек тигеҙ түгел. Урындар байлыҡтары йәки башҡа үҙенсәлектәре менән дә бер-беренән айырыла.

Миҫалға «табын» һүҙен алайыҡ. Эйе, Табын иконаһы ла бар бит. Табын башҡорттарға борон-борондан таныш. Күрәһең, борондан башҡорттар был урынды табыныу урыны итеп һайлаған. Шуның өсөн да әйтергә: был урын мәжүсилек осоронда әһәмиәтлерәк булған. Ә мосолманлыҡ килгәс, урындың әһәмиәте кәмегән. Был турала тикшеренеүҙәр кәрәк әле. Шифалы һыу тәмен миссионер урыҫ динселәре бик тиҙ һиҙеп алған. Әйтергә кәрәк, табыныу урынын һайлай белеү – ҙур хәрби бәрелештәрҙәге еңеүгә тиң. Имеш, Табын тирәһенә христиандарҙың аллаһы үҙе килеп киткән. Ҡасаба исеме ни һөйләй – Богоявленск. Бына шулай, әгәр Аллаһы Тәғәлә бәреү генә тип һанаһаҡ, ул башҡорт еренә әүәлге замандарҙа уҡ килгән. Урыҫтар килгәс, яңынан килеп китергә булғанмы? Ҡыҙыҡ. Ә кемдәр өсөн ҡыҙыҡлы?

…Бала сағым. Әптек ауылы. Йәй уртаһы. Мин баҡсала бәрәңге утайым. Аптырарлыҡ күренеш: беҙҙең тыҡрыҡтан күп һанлы халыҡ Табын яғына ағыла. Бер нисә йөҙ ҡатын-ҡыҙ. Күберәге оло йәштә, ялан аяҡлылар. Барыһының да тип әйтерлек арҡаһында – аҙыҡ-түлек тултырылған муҡса. Күптәре таяҡ таянған. Эйе, ул ваҡыттарҙа Табынға барыу ҙур мәшхәр ине. Верхотор – Табын юлы беҙҙең Әптек ауылы аша үтә. Һәләүек йылғаһы аша йыуан ҡарағай бүрәнәләрҙән һалынған ҙур күпер ҙә бар ине. Хәҙер был юл онотолдо, күпер күптән һүтелде. Табынға йәйәүләп йөрөүсе бер кем дә юҡ. Эйе шул, Аллаһы Тәғәләгә, дингә ышаныуҙың да сифаты үҙгәрҙе. Әллә дин ҡанундары үҙгәрҙеме? Юҡ шул, әлеге әйтелгән юлдың үҙ сере бар. Батша ваҡытында Верхоторҙағы баҡыр иретеү заводы ҙур файҙа килтергән. Әйтәйек, Мәскәүҙәге Пашков йорто һәм башҡа төҙөлөштәр Верхотор заводынан алынған табышҡа төҙөлгән. Был тирәләге ауыл-ҡасабаларҙың халҡы ла байтаҡ һәм дингә ышаныусан булған. Бына ни өсөн был тирәгә Аллаһ үҙе лә “килеп киткән“. Бына шулай, Аллаһы Тәғәләгә ышанған халыҡ – үҙе байлыҡ. Совет хөкүмәте генә был байлыҡтың ҡәҙерен белмәне.

Табыныуҙың ике төрө бар. Беренсеһе – дин ҡанундарын тейешенсә башҡарыу мосолман өсөн мотлаҡ: биш намаҙҙы үтәү, ураҙа тотоу, сусҡа итенән баш тартыу, хәмер-араҡы эсмәү, гигиенаны онотмау, ярҙамсыл булыу һ.б. Минеңсә, дин ҡанундарын үтәгән заттың ғүмере оҙонораҡ. Мәҫәлән, мосолман гигиенаһы ғына үҙе ни тора! Ураҙа тотоу, араҡы эсмәү – ҙур файҙа. Ә шулай ҙа ҡайһы бер шәхестәргә дин ҡанундарын үтәү ауыр йәки мөмкин түгел. Бындайҙарға ла уңайлы юл бар. Мәҫәлән, үҙенең табышлы эше менән мауығып дин ҡанундарын үтәй алмаған зат хажға барып ҡайтһа, бар гонаһтары юйыла ла ҡуя. Әйтергә түгел. Төрөк солтандары юлы ла бар. Солтандар иҫ китерлек матур мәсеттәр

төҙөткәндәр, тимәк, бик ҙур гонаһтары барлығын һиҙеп эш иткәндәр. Нисек булһа ла солтан гонаһын кисереп булалыр, мәсетһеҙ дин – дин түгел. Мәсеттәр, сиркәүҙәр төҙөү күп матди сығанаҡтар талап итә. Ә ниңә аптырарға, был донъяла гонаһлы «ҡалын кеҫәлеләр» етерлек. Ни етмәй? Яҡшы дини психологтар кәрәк. Һүҙ һөйләй белгән, яҡшы вәғәз уҡыған мулла – үҙе иң ҙур байлыҡ.

Ҡайһы берәүҙәрҙе, мәҫәлән, Аллаһының барлығы менән генә ышандырып булмай, гонаһтарҙың ауырлығын да тейешлесә аңлата белеү мотлаҡ. Юҡ, һәр йомарт үҙ мөлкәтен гонаһтарынан ҡотолор өсөн генә килтереп бирмәй. Дөрөҫ, ысын күңелдән килтереп биреүселәр менән бергә, үҙен күрһәтер өсөн биреүселәр ҙә бар. Дөйөм алғанда, бында зыянлы эштәр юҡ.

## Ҡала йәме

Стәрлетамаҡ ҡалаһының үҙәк баҙары эргәһендә балҡып торған дүрт манаралы мәсет һалып ҡуйҙылар. Күптәр өсөн көтөп алынған йорт булды ул. Нигеҙ ташы тантаналы рәүештә 2004 йылдың 5 июнендә һалынғайны. Мәсет төҙөү ябай эш түгел, был йәһәттән төҙөлөштө башлаусы Ришат хәҙрәт һөйләшәһе кешеләр менән һөйләшә белде, ныҡышмалылыҡ күрһәтте. Мәсет проектын "Башжилкоммунпроект" бүлексәһе үтәне, заказсы итеп СМП-185 идаралығы тәғәйенләнде. Генераль подрядсы бурысын ВНЗМ-1 идаралығы үҙ өҫтөнә алды. Идаралыҡтарҙың етәкселәре еҡ һыҙғанып эште хәстәрләне, шуға мәсет төҙөлөшөндә етди етешһеҙлектәр булманы. Ришат хәҙрәт хатта үҙе прораб ролен башҡарҙы, буғай. Бына шулай, төҙөүсе һөнәренә эйә булмаған хәҙрәт һәм мулла булмаған төҙөлөш етәксеһе Р. Х. Фәхретдинов, эш тамамланғас, үҙҙәренең уңышына ышанмайыраҡ торҙо шикелле.

Халыҡ мәсеткә ағыла башлағас – ышандылар. Ә сығымдарҙы кемдәр күтәрҙе? "Йөк"төң иң ауыр өлөшө "Сода" акционерҙар йәмғиәте өҫтөнә төштө. Предприятиеның ул ваҡыттағы етәксеһе Самедовҡа хәҙрәттең рәхмәте айырыуса ҙур. Эйе, Фәрхәд Самедов үҙе лә төҙөлөш эштәрен яҡшы белә икән. Мәсет манараларының күккә ашыуын хәстәрләгән тағы бер етәксе бар – "Таттрансгаз" начальнигы Кантюков әфәнде. Тыумышы менән ул Стәрлетамаҡ районынан. Ишембай ҡалаһы яғынан Стәрлетамаҡҡа килә ятҡанда, уң ҡулда Кантюковка ауылы күренә. Унда ла алтын көмбәҙле бына тигән мәсет мосолмандарҙы ҡыуандыра. Әллә ҡайҙан күҙгә ташланып торған был Аллаһы Тәғәлә йортона аҡсаны ла Кантюков әфәнде табып биргән. Бына шулай, туғандар, мәсеттәр йәмен күрер көндәребеҙ бар. Булһын. Ә Ришат хәҙрәт ҡул ҡаушырып ултырырға яратмай – Стәрлетамаҡтың тағы бер урамында яңы мәсет манараһы күтәреү менән мауыға.

## Әхлаҡи терәк

Бала сағыбыҙ ҡыҙыҡлы дәүерҙәргә тура килмәне. Ҡыҙғаныслыһы нимәлә? Әптектә лә мәсет бар ине. Бик матур бина, ике ҡатлы, бейек манаралы. Ауылға йәм биреп тора. Алдамайым, мәсет урамына аяҡ кейеме менән инеү оятыраҡ булды, буғай. Семгән үлән, тип-тигеҙ үҫә, орлоғо – күгәрсен-турғайҙар ризығы. Был үлән – ысынлап та, Аллаһы Тәғәлә бүләге, үҙ ыңғайына үҫә, ҡәҙер-хөрмәт талап итмәй. Ул үлән – күберәк ялан аяҡлыларҙы яраҡандыр, моғайын. Ә нимәләрҙе яратманы? Көрәкте, тимер тәгәрмәстәрҙе, сусҡа моронон. Эйе, был үлән ҡыйырһытыуҙарҙан ҡасып ҡотола алмай, шул урында һәләк булыуҙы хуп күрә.

Һуғыш ваҡытында уҡ мәсеттең беренсе ҡатында утын яндырып, иген киптерҙеләр. Ә икенсе ҡатта – клуб, унда халыҡ кино ҡарай. Мәсет бинаһы иҫкерә

башлағас, манараһын ауҙарып һүттеләр. Мәсет урамы ыҡсым ғына таш ҡойма менән кәртәләнгәйне. Ҡойманы һүтеп, Ишембай ҡалаһына биналарҙың нигеҙҙәренә һалыу өсөн алып киттеләр. Зыярат ҡоймаһының таштары ла шул тарафтарға оҙатылды. Хәҙер элекке мәсет урынында шайтан таяғы үҫә, сусҡалар соҡона. “Был урында мәсет булғайны“ тип иҫкә алыусы ла юҡ. Шуныһы ҡыҙыҡлы: мәсетте һүткәс, бүрәнәләренән бер ҡатлы клуб һалдылар. Бинаны, һуңыраҡ, төндә Әптек эскеселәре яндырҙы. Ғәйеплеләрҙе эҙләп маташманылар, сөнки клубтың да кәрәге ҡалмағайны.

Ә мин бәләкәйҙән ниҙер аңлай инем, буғай. Манаралы бинала мәсет юҡ, ә барыбер мәсет урамына ингәс, тәртиплерәк булырға тырышаһың. Күрәһең, мәсеттең, мәсет урамының үҙ «аура»һы бар.

Беҙҙең замандағы административ система дингә ҡаршы киҫкен көрәш алып барҙы, уны ҡәтғи тыйҙы. Тимәк, һәр кемдең ата-бабаһының ғөрөф-ғәҙәттәрен кире ҡағып, яңы кеше тәрбиәләү маҡсатын ҡуйҙы. Маҡсат бар ҙа, уны нисек үтәргә? Дин тыйылғас, кешеләр зиһенен үҙгәртеү мотлаҡ таһа. Ә нисек? Маркс... Ленин... Бик шикле сара. Ышанмаусылар күберәк. Ә ҡурҡытып була. Ҡурҡыттылар. Тик был ярым сара ғына. Тағы ни эшләргә? Зиһендәрҙе үҙгәртеү өсөн иблис ашы кәрәк. Иблис ашы бар ҙаһа, берәү генә түгел: араҡы, шарап һ.б. иҫерткес эсемлектәр. О-о! Был турала бик оҙаҡ һөйләп булыр ине. Эскелек механизмы. Ни өсөн эсәләр? Шатлыҡлы ваҡиғала эсәләр: туйҙар, юбилейҙар, уңыштар, табыштар, тамамлауҙар. Ҡыҫҡаһы, ҡыуаныстан эсәләр. Ә уңышһыҙлыҡ, юғалтыуҙар? Бындай осраҡтарҙа ла эсәләр бит. “Йәшел йылан“ холҡон әүәлге хужалар ҙа белгән, иҫерткестәр менән файҙаланыусылар үткән быуаттарҙа ла булған. Совет системаһы хужалары ла иҫерткестәрҙең кеше зиһененә үтә тиҙ тәьҫир иткәнлеген аңлаған. Эш хаҡын иҫерткес менән түләү – борондан. Мысырҙа пирамидалар төҙөүселәргә көн һайын һыра биргәндәр.

Хәтерләйем, һуғыш ваҡытында – ул саҡта миңә өс йәш самаһы – олатайым менән магазинға барҙым. Һатыуҙа һабын юҡ, шырпы ла һирәкләп кенә күренә, ашамлыҡтар бөтөнләй күренмәй. Ә бына араҡы һәр саҡ бар. Тик уны шешәләргә ҡойоп түгел, мискә менән килтерәләр ҙә сүмескә һалып, үлсәп бирәләр. Баҡтиһәң, шешәләр немец танкыларына ҡаршы утлы шыйыҡса ташлар өсөн фронтта кәрәгерәк икән. Олатай һуңғы тапҡыр араҡы алып ҡайтҡанда, ҡыҙыҡ өсөн, миңә лә шәшке аҫтына аҙ ғына ҡойоп бирҙеләр. Бер нисә тамсыһын йотоп ҡарағайным, бик нык сәсәнем. Ә ҡарттар көлөшөп алды:

– Өйрәнерһең, балам, өйрәнерһең, – тинеләр.

Ысынлап та өйрәтте тормош, хатта күптәрҙе уҙҙырып ебәрҙем. Булды уныһы ла. Ярай, фирғәүендә аңлап була, ни тиһәң дә, ул үҙен Аллаһыға тиңләгән. Күп империя башлыҡтары иҫерткес эсемлектәргә ыңғай баһа биргән. Мәҫәлән, Екатерина II эскелек тураһындағы әйтеме тураһын һуҡтыра: «Эскелеккә бирелгән зат тиҙерәк баш эйә».

Тимәк, Советтар хакимиәте лә шул уҡ юлды ҡыуған. Хәйер, Советтар дәүерендә эскелек дингә ҡаршы тороу өсөн ҡеүәтле ҡорал булды, ниндәйҙер осраҡтарҙа эскелек хатта динде алмаштырырға тейеш ине. Һөҙөмтәһе нисекме? Әйтәйек, мин бәләкәй саҡта Әптек ауылында “бөткән“ эскесегә – ул берәү – бармаҡ төртөп күрһәтһәләр, һуңғы ваҡытта бөтөнләй эсмәүсегә – ул да берәү – шулай итәләр. Эскелек еңде, һәм был – иблис уңышы, динһеҙлек емеше. Әйтәйек, Исламдың әхлаҡи нормалары ентекләп яҙылған. Харам – Ислам өсөн ҡабул ителгеһеҙ күренеш. Ә ни өсөн илебеҙҙә күпселек «харам»ға тартылды? Әллә тар маңлайлы Сталин ысынлап та генийме? Хикмәт Сталинда түгел. Петр I үҙенә

тоғро хеҙмәт иткәндәргә ауылдар, ер биләмәләре бүләк иткән. Ә социализм был йәһәттән ниндәй саралар ҡулланды? Маҡтау грамотаһы йәки «ҡалай киҫәге» күптәр өсөн –«көлкө киҫәге». Ҡулға тотоп ҡыуанырлыҡ матди бүләк кәрәк бит. Матди мөмкинлектәр иһә сикләнгән, улар күпселек өсөн түгел. Бына шулай күпселек өсөн– иблис ашы. Ә ул бер юлы «ике ҡуян»ды тота: күпселекте күндерә, динде ситкә этәрә. Шулай, хәмер – дарыу. Кем өсөн? Юҡ, мин, эскелек динде алмаштыра, тип әйтергә йыйынмайым. Шуны ғына әйтмәксемен: иҫерек затҡа Аллаһының кәрәге юҡ, ул – үҙенә үҙе алла. Яҡшы хәтерләгән, күп тапҡырҙар шаһит булған күренештәр тураһында ғына әйтәм.

Эйе, эсмәгән кешене тормоштан артта ҡалғанға тиңләнеләр. Эскән килеш ҡылынған енәйәт яңылышлыҡҡа тиңләнде. Дөйөм алғанда, динде инҡар итеү – Рәсәй ерлегендәге социализмдың иң ҙур хатаһы. Ул иһә башҡаларын тыуҙырҙы. Береһен атап үтәм: социализм – оҙон-оҙон сираттар. Иң ҙуры араҡы артынан булғанын мин дә хәтерләйем. Ә икмәкте тибеп йөрөттөләр. Сүплектәр икмәк менән тулғайны түгелме? Зыя Нуриев ағайҙың “Ауылдан – Кремлгә“ тигән китабын мин ентекле уҡыным. Бихисап хаталар тураһында ул китап. Нишләйһең, автор барыһын да әйтеп бөтөрмәгән. Ярамайҙыр. Сәбәп нимәлә? Бер мәл мин М. Горбачевтың Целиноград (хәҙер Ҡаҙағстандың баш ҡалаһы Астана – **И.Н.**) ҡалаһында һөйләгән телмәрен иғтибар менән тыңланым. Телмәр аҙағында әйттем: “Был затты колхоз рәйесе итеп тәғәйенләү ярамаҫ ине, ә партком секретарына барырлыҡ“. Ни әйтерһең? Йөҙөм баҡсаларын һөрөп ташлау ғына ни тора! Тимәк, көмөшкә эсеү яҡшыраҡ? Кит, әй! Был – яңылышлыҡ түгел, ә ахмаҡлыҡ.

Тағы бер миҫал. Директор булараҡ бер милиция башлығы менән әңгәмәләшкәндә, ул, минең Әптектән икәнемде белгәс: «О-о! Мин Әптек ауылында күп эштәр башҡарҙым. Унда Бәләкәй мулла тигән кеше бар ине. Ул совет системаһына ҡаршы булды. Мин уны ҡурҡытып тоттом. Мин уның телен тыйҙым», – тип маһайҙы. Ә минең хәтер китабым теүәл. Эйе, Әптек муллаһының исемен белмәйҙәр, сөнки беҙҙә ҡушамат – беренсе урында. Йәйге ғәйет байрамдары беҙҙең өй эргәһендәге тау башында үтте. Бәләкәй мулла, ғәйет намаҙын уҡып бөткәс, һәр саҡ бер һүҙ әйтер булды:

– Йәшәһен иптәш Сталин! Йәшәһен сәүит хөкүмәте! Партияға мең рәхмәт!

Шулай, дин хакимиәткә ҡаршы булманы, ә хакимиәт дингә ҡаршы ине. Ә был бәндә – район милиционеры – атайымды нахаҡҡа төрмәгә ултыртты. Был турала мин уға һиҙҙерմәнем. Эйе, быныһы – икенсе тема.

## Дини агрессия

Дөйөм алғанда, дини агрессия юҡ. Агрессия – Аллаһы Тәғәлә эше түгел. «Дини агрессия»ның тарихта иң тәрән эҙ ҡалдырғаны – Тәре походтары. Сәбәбе нимәлә? Иерусалимдағы Аллаһ улының ҡәберендәме? Ышанмағыҙ. Сәбәп – һәр тәре йөрөтөүсенең ашҡаҙанында. Тәреселәрҙең кем икәнлеген викингтарҙың кемлегенән дә аңлап була. Ә викингтар иһә – артыҡ әрәм тамаҡтар. Әйтәйек, бер ғаиләлә өс малай тыуып үҫкән. Икәүһенә бирерлек мөлкәт булғас – бирелгән, ә өсөнсөһө буш ҡалған. Барыһы ла теге йәки был этностың йолаһы буйынса эшләнә. Ә «артыҡ ауыҙ»ға йола бер ни ҙә бирә алмай. Бына ошондай артыҡ ауыҙҙар, йыйылышып, сит ерҙәргә табыш эҙләп китергә мәжбүр була. Эйе, һәр этностың үҙ дини ғөрөф-ғәҙәттәре бар. Шуныһын да әйтергә кәрәк: викингтарҙың башҡа юлы булмаған – Рюриктар славяндар иләндә яңы династия нигеҙләгән.

Тәре походтары алдынан Европала халыҡ бик тиҙ үрсей башлай. Ер биләүсе синыфтың «артыҡ ауыҙ»ҙары арта. Католик сиркәү был хәлдән оҫта файҙалана.

Ә маҡсат низә? Әлбиттә, асыш яһарға ынтылыуза түгел. Билдәле ки, тәмле тамаҡтар күбәйһә, тәмле аҙыҡ етешмәһә, дәүләттә көсөргәнеш арта.

Урта быуаттар Европаһындағы пассионарлыҡ күренештәре тураһында бик күп һөйләп булыр ине, шуныһын ғына әйтәйек: евроцентризм һундар батшаһы Атилла тураһында ниндәй генә уйҙырмалар сығарманы, ә бына конкистадорҙар тураһында тыйнаҡ булды. Эйе, урта быуаттарҙа Европа дәүләттәре ҡот осҡос вәхшилек ысулдарын ҡулланған. Ысынлап та, Атилла Европаны ҡоллоҡтан ҡотҡарҙы, ә Европа «геноцид» тип аталған яңы «уйын» уйлап сығарҙы.

Европаларға «ҡояш аҫтында» иркен урын кәрәк. Ә нисек нәфсене туйҙырырға? Бына ошо мәлдә «тәре» ярҙамға килә. Тәрене беҙ интегеүселәр символы тип беләбеҙ. Ә европалар тәренән ни яһаны? Интектереүселәр символына әйләндерҙе. Инквизиция ҡорбандарын һанап бөтөрөрлөк түгел. Жанна д Арк, Джорджано Бруно, Паганини һ.б. бихисап ҡорбандар. Тышҡы маҡсаттарҙы тиҙ аңлап була: һәр этнос өҫтөнлөккә ынтыла, һәр милләт иркенлекте хуплай. Дини идеяларға нигеҙләнгән һуғыштарҙың иҫәбен күрһәтеү ауыр, сөнки улар күп. Ә бына диндең һәр дәүләт эсендәге әһәмиәте, абруйы ҡыҙыҡлы. Эйе, ҡайһы бер дәүләттәрҙә дини ҡанундар законға тиң, ә икенселәрендә хөкүмәттең диндә бөтөнләй эше юҡ. Был турала күптәр белә.

Йомғаҡлап әйткәндә, диндең һәр йәмғиәттәге ролен ыңғай һүрәтләү урынлы. Дин килем сығанағы була аламы? Һис шикһеҙ. Дингә таянып байыған дәүләттәр аҙ түгел. Йолалар борондан байлыҡ туплау өсөн файҙаланылған. Бына мин бер мәсет асылыу тантанаһын ситтән күҙәтеп торҙом. Дин әһелдәре ҡиммәтле сит ил машиналарынан килештереп сыға ла матур итеп күрешә, бер-береһен тәбриклəй. Ҡолаҡ һалам: ғәйбәтселәр  өсөн ҡиммәтле хәбәр. Яңы һорауҙар тыуа. Дин ҡанундарын файҙаланып кесә ҡалынайтыу бармы, булһа, был гонаһмы? Яуапты көтмәйек, сөнки барыбер һәр кем үҙенсә фекер йөрөтә. Ә мин шуныһын ғына әйтә алам: әйҙәгеҙ, был хәлгә виртуаль күҙлектән ҡарайыҡ. Әйтәйек, алама ғына кейенгән мулла таяғына таянып, йәйәүләп килеп етте, ти. Уйлап ҡарағыҙ, ғәйбәтселәр ни әйтер? Билдәле, яҡшы тимәҫтәр. Ни тиһәң дә, мулла булыу өсөн уҡымышлылыҡ мотлаҡ. Бынан тыш, мулланың психолог булыуы ла зарур. Ҡалғанын һөйләп тораһы юҡ. Ғаиләнән, нәҫелдән йүнле мулла сыҡһын өсөн, туған-тыумасалар мөлкәттәрен сарыф итергә әҙер ҙә баһа. Бүләк биреүселәр етерлек. Эйе, ҡайһы бер диндәр әһелдәренең аскетик шарттарҙа көн итеүен хуплай. Ә бына христиан руханиҙарына күҙ һалһаң – алтын-көмөш, ҡиммәтле таштар. Һәр диндең үҙ тәртибе. Беҙҙең Исламда таҙалыҡ, төҙөклөк – беренсе урында. Ҡиммәтле кейем – һуңынан.

Дин һәм йәмғиәт. Был турала күп әйтелгән, яҙылған. Бөйөк яҙыусылар, шул иҫәптән Мәжит Ғафури, үҙенең дингә ҡарашын анығ әйткән. Эйе шул, барыһы ла Аллаһы Тәғәлә ҡушҡанса булманы, талау, кәмһетеү хөкөм һөрҙө. Ә бөгөнгө көндә? Хәҙерге күпселектең Аллаһыла эше юҡ,  тип әйтергә мөмкин.

Ҡорбан байрамы. Мәсет урамы. Халыҡ аҙ, тип әйтергә түгел. Хәйер-саҙаҡа биреүселәрҙең иҫәбе-һаны юҡ. Ә күпселек Аллаһыға ышана, ә табыныуҙың ни икәнлеген белмәй. Ни эшләмәк кәрәк, социализм мираҫы.

Ҡыҙыҡ, Ислам ҡанундарын үтәмәгән зат үҙен мосолман иҫәпләргә хаҡлымы? Белмәйем, йәмғиәтбеҙҙә яуапһыҙ һорауҙар күп, бигерәк күп. Мин хәрби хеҙмәтте Төркмәнстанда үттем. Комсомол ойошмаһы секретары буларак, урындағы йәмғиәт менән бәйләнеш тоторға тура килде. КПСС-тың район комитеты секретары доғаларын онотмай, ҡыҙын ҡалымһыҙ бирмәй, мосолманлығын белә. Шулай. Өс йылда бер иҫерек төркмән күргәнем булманы. Эйе, һәр милләттең үҙ

менталитеты, үҙ ғөрөф-ғәҙәте. Оятһыҙ һүҙҙәрҙән айнымаған зат, ҡапыл тыуған ҡыйынлыҡ алдына баҫһа, Аллаһын иҫенә төшөрә. Ҡайһы саҡта уйлап ҡуям: ябай кешенең телендә Аллаһы аҙыраҡ, ә мейеһендә күберәк булырға тейеш. Тик аҙашҡан малай атай йортона ҡайтырмы? Тарих ни һөйләй? Мосолман динен көрәш ҡоралына әйләндереү маҡсатын ҡуйғандар күбәйҙе. Намаҙлыҡта – бандиттар, террорсылар? Кеше талаусы, наркотик менән сауҙа итеүселәр ураҙа тота, доғалар уҡый.

Диндең киләсәге нисек буласаҡ? Был турала уйлау ҙа ҡыйын. Әүәлге халыҡ киләсәккә ҙур өмөт менән ҡараны. Хәҙер иһә – технократия йәмғиәте, күберәген компьютерҙар уйлаясаҡ. Компьютерҙар, әлбиттә, Аллаһыға табынмаясаҡ. Әллә Аллаһы Тәғәлә онотоласаҡмы? Юҡ, әлбиттә. Тарих дауамында ҡайһы бер этностар юғала. Берәүҙәргә үҙ телендә аралашыу артыҡ хәсрәткә әүерелә. Бындайҙарға Аллаһы ниңә кәрәк.

Күптәргә оҡшамаған һүҙҙәр әйтергә мәжбүрмен. Кем ул тәүге мәжүси? Ул тәбиғәткә зыян килтермәгән. Ағас ботағын һындырыуҙы ла гонаһҡа һанаған. Ергә, һыуға, күккә табынып йәшәгән. Бөгөн күпме зарарлы ҡалдыҡтар ер йөҙөн бысрата! Тымыҡ океанда пластик һауыттарҙан йыйылған ҙур утрау байтаҡтан бирле йөҙә. Ярай, киң билдәле олигарх Роман Абрамович популяр зат түгел. Ә «Рәсәй примадоннаһы» Алла Пугачеваны нисек һүрәтләргә? Бындай талантларҙы Рәсәйҙә меңәрләп табып була, тик башҡалар бот-арттарын һелкетеп күрһәтергә баҙнат итмәйҙәр, оялалар, Аллаһынан ҡурҡалар. Ә Алла Аллаһынан ҡурҡмай, сөнки Алланың Аллаһы юҡ. Ул – яңы мәжүси, технократия мәжүсийе. Тимәк, тәүге мәжүсиҙәр тәбиғәтте һаҡлаған, тәбиғәткә табынған. Ер йөҙөндәге Ислам йәки Христиан диндәре һәм башҡа диндәр Аллаһыға табыныуҙы талап итте. Йыһандың, ер-һыуҙың ҡәҙерен белеп йәшәргә өндәне. Тәртиплеләргә, табына белгәндәргә ожмах тәғәйенләнеләр. Коммунистар иһә яҡыныраҡ, ошо материялағы йәннәтте вәғәҙә итте, ләкин бирә алманы.

Яңы мәжүсиҙәр беҙҙе ахырызаманға алып бара түгелме? Хәҙерге мәжүсиҙәр файҙа алыр өсөн теләһә ни эшкә барырға әҙер, закондан, Аллаһынан ҡурҡыу юҡ. Аҡсаға барыһын да һатып алырға мөмкин, тип иҫәпләй улар. Ә Аллаһы Тәғәлә һатлыҡ түгел.

Диндең әһәмиәтен, Аллаһының барлығын һәр кемгә аңлатыу ҡыйын, үтә ҡыйын. Ә шулай ҙа һәр кемгә барып етерлек, һәр ҡайһыбыҙҙың бер көнө бар. Был – фани донъялағы һуңғы көн. Ер шарындағы тормош, һис шикһеҙ, мәңгелек түгел. Һәр формация тыуа, юҡҡа сыға.

Ахырызаман – һәр кем өсөн тигеҙлек көнө. Туҙан менән мин тиң, Дерипаско минең менән тиң. Ә мин кем? Етмеш йәшемдең күп өлөшөн эшләп уҙғарҙым. Алты йәштән үҙ тамағымды үҙем туйҙырҙым. Байтаҡ йылдар яңғыҙым ике-өс кеше өсөн эшләнем, ә байлыҡ туплай алманым. Ә ниңә эшләмәгәндәр байый? Артыҡ байыйҙар. Был хәлдең серен беләм, күптәр белә, әйтеп тораһы түгел.

Ер шарында кеше алдамаған закондың бер ҡасан да сыҡҡаны юҡ. Булмаҫтыр ҙа, моғайын. Аллаһы Тәғәлә – ышаныусы өсөн һуңғы ышаныс. Эйе, Аллаһы өсөн vip-персоналар юҡ, шуныһы өсөн уға ышанғы килә.

Ышанабыҙ.

**Ишғәле НУРҒӘЛИЕВ.**
**Стәрлетамаҡ ҡалаһы.**

## Батырлыҡ

Табип Ғөзәйеровты беҙҙең ҡалала күптән инде «Ғазраилов» тип йөрөтәләр. Дауахананың яман шеш ауырыуҙары белгесен шулай атамай, нисек атаһындар? Һуңғы һүҙҙе байтаҡтарға ул әйтә, һуңғы ҡарарҙы ул сығара. Ҡәһәрле вазифа! Әҙәп һаҡлап, уратып һөйләй торған әҙәмдәрҙән түгел ул, эскерһеҙ йәшел күҙҙәрен йөҙөңә төбәп, яра ла һала. Бәлки, шуның өсөн дә айныҡ сағынан һалмыш сағы күберәк булалыр.

Әле лә, Фәруҡшиндың ауырыу тарихын аҡтарып, рентген һүрәттәре, анализдар менән танышҡас, башын сайҡап, аптырап ултырманы.

– Күңелеңә ауыр алһаң алырһың, энем, хәлең хөрт, – тине. – Шешеңдең тамырҙары тәрәнгә киткән. Ҡалһа, ике аҙна самаһы… ҡалған.

Фәруҡшиндың күҙ алдары ҡараңғыланды, йығылып китмәҫ өсөн таяғына тотондо. Бер секунд эсендә ҡороп, бер-береһенә йәбешкән ирендәрен көс-хәл менән генә аса алды.

– М-миңә н-нишләргә һуң? – тип ярым бышылданы.

– Бер ни эшләп булмай, туған. Һин тәүгеһе, һин һуңғыһы түгел, – тине табип ҡәтғи тауышы менән. – Хәйер, юллама бирәм: киләһе аҙнала Өфөгә, яман шеш ауырыуҙары үҙәгенә, барып ҡайтырһың. Батып барғанда һаламға булһа ла йәбешергә кәрәк, тиҙәр…

Фәруҡшин урамға сыҡты. Машиналар себен урынына ҡайнашҡан урамда уның өсөн ҡәбер тынлығы, күктәге яҙғы ҡояш ҡара шәүлә кеүек. Ни эшләргә? Һанаулы ғына ҡалған көндәрен нисек үткәрергә? Кемгә күпме ҡалдырырға, тип баш ватырлыҡ малы юҡ. Үҙенең ике бүлмәле «хрущевка»һы ла, «копейка» ҡушаматлы утыҙ ике йәшлек машинаһы. Улы, килене, ике балалары бер бүлмәлә ыҙалап көн күрә. Бисәһенә: «Мин үл… мин ваф… мин теге донъяға күсенгәс, фатирҙарығыҙҙы алмашығыҙ»,– тип кенә әйтеп ҡалдырмаһа? Ямаштырып-ҡораштырып, теге «картлас»тыла, бәлки, улы йөрөтөр…

Ни эшләргә? Ҡалған һанаулы көндәрен нисек үткәрергә? Шәрәев кеүек хәмер һөрөмөндә йөҙөр ине, шайтан төкөрөгөн ҡабып та ҡарағаны юҡ. Хәйрушиндай йөрөмтәл булһа, бар һөйәркәләрен (тағы бер мәртәбә, һуңғы мәртәбә) барлап сығыр ине, үҙ ғүмерендә Фирүзәһенән башҡа бисә-сәсәгә күтәрелеп ҡарағаны ла булманы. Эйе, Фәруҡшин ҡатын-ҡыҙ менән оялсан, өйөндә тыйнаҡ, эшендә – йыуаш. Юҡҡа ғына «Шомбай Фәһим» тип йөрөтмәйҙәр ҙә.

Бәлки!.. Бәлки, ысынлап та, тәүге һәм һуңғы мәртәбә холҡон күрһәтергәлер? Һуңынан «Аҡман-тоҡман» ООО-һы бүлек мөдире Фәһим Фәруҡшинды һағынып

*Закир Әкбәров — яҙыусы һәм журналист. Дүрт китап авторы, Яҙыусылар союзы ағзаһы. Күмертау ҡалаһында йәшәй.*

һөйләрлек итеп… Был – идея! Ҡабул ителгән ҡарар Фәруҡшиндың күңеленә хуш килде. Ул хатта хәтәр хәлен онотҡандай булды.

«Аҡман-тоҡман» ООО-һының квартал һөҙөмтәләре буйынса йыйыны ғәҙәти йыйылыштан бер нәмәһе менән дә айырылмаған кеүек ине. Генераль директор Түләбаевтың ялҡынлы сығышын йүнләп тыңлаусы ла булмағандыр. Күпме сәйнәһәң дә, шул бер балыҡ башы лаһа: «матди ауырлыҡтар», «сеймалдың сифатһыҙлығы», «конкуренттарҙың һөмһөҙлөгө», ниһайәт, «донъя финанс кризисы»… Түрә сығышынан һуң ҡапыл Фәруҡшиндың һүҙ һорауы ғына йоҡлағандарҙы йоҡоһонан уятты, йоҡламағандарҙы һағайтты. Шомбай Фәһим… һүҙ һорай! Фәруҡшин сығыш яһарға йыйына! Ирҙәр араһындағы мәрәкә әңгәмәгә ҡушылырға ла тартынған Фәруҡшин! Ни әйтергә йыйына икән? Түләбаевты маҡтап, уның ышаныслылары рәтенән урын алырға самалайҙыр…

– Түләбаев…– тип башланы һүҙен Фәруҡшин. «Аңлашыла!» тигән мәғәнәлә күҙ ҡыҫышты бер-береһенә залда ултырыусылар. Былай булғас, коллективта тағы бер тәрилкә ялаусы хасил булды тигән һүҙ. Фәруҡшин залды һөҙөп күҙҙән үткәрҙе һәм сығышын дауам итте.

– Түләбаев алдай, йәмәғәт, – был ғәйепләүҙе ишеткәс, зал урынынан һикереп торорҙай булды. Быға саҡлы бер кемдең дә түрә йөҙөнә бәреп әйтергә батырсылығы еткәне юҡ ине әле. – Эйе, оятһыҙ рәүештә алдай. Эштәребеҙ һис кенә лә алға тәгәрәмәй, артҡа китеп бара. Шулай булмаҫ ине, Түләбаев предприятиебыҙҙың финанс сәйәсәтен дөрөҫ ойоштора белмәй, йә булмаһа, белергә теләмәй. Сөнки түрәбеҙҙең бармаҡтары үҙ яғына кәкре. Сиктән тыш ҙур хеҙмәт хаҡы – үҙенә, ай, квартал, йыл премиялары – үҙенә. Үҙенә һәм фирмабыҙҙы Ҡырым сиреүеләй баҫҡан туған-тыумасаларына. Улары эшләһә – бер хәл, эт ялҡауҙары бит, беҙҙең елкәлә көн күрә. Бына тигән техниканы үҙебеҙҙә лә һатып алып була, Түләбаев унлата хаҡҡа «хренляндия»нан ҡайтарта. Ҡайтартмаҫ ине, «откаты» үҙ кеҫәһенә тама бит! Тама ғына тиһегеҙме, йылға булып аға. Баш ҡалалағы өс ҡатлы йортон хеҙмәт хаҡына һалдырған, тиһегеҙме? Биш миллионға төшкән иномаркаһын хеҙмәт хаҡына алған, тиһегеҙме? Ә хәҙер, имеш, кризис! Финанс көрсөгө! Имеш, эшселәрҙе, хеҙмәткәрҙәрҙе ҡыҫҡартырға кәрәк. Юҡ ул көрсөк! Тағы ла нығыраҡ байыу өсөн уны Түләбаевтар уйлап сығарған. Беҙгә, йәмәғәт, Түләбаев кеүек һоро ҡорттарҙан арынырға кәрәк. Етәксебеҙ вазифаһына намыҫлы кешене һайларға! Бына шунда һәммәһе алға китер!

Түләбаев ҡыҙарынды-бүртенде, тәүҙә өҫтәл һуғып ҡараны, шунан урынынан һикереп торҙо. Ҡыҙған ораторҙы быны менән генә туҡтата алмағас, залдан сығып уҡ китте.

Ә халыҡ гөрләтеп ҡул сапты. Таралышҡанда ла «Вәт әйтте!», «Вәт кәрәген бирҙе!», «Бына һиңә Шомбай Фәһим!», «Йыуаштан йыуан сығыр!», «Һыйыр тулаһа, аттан уҙҙыра!» кеүегерәк баһалар яңғыраны.

…Анализдарын тотоп, икенсе көн Фәруҡшин Өфөгә китте. Яман шеш ауырыуҙары үҙәгендәге табип уларҙы уҡып та ҡараманы, сүп кәрзиненә ташланы. Бер үк уҡыу йортон тамамлаған булһалар ҙа, Өфө табиптары ситтәгеләрҙе һанға һуғып бармай шул. Үҙе Фәруҡшинды былдағы белгестәр ҡулына тапшырҙы. Меҫкен өр-яңынан анализдарын да тапшырырға, рентгенын да үтергә мәжбүр булды. Ә кис көнө табиптың үҙенә инде. Уныһы өҫтәленә килеп ятҡан ҡағыҙҙарҙы тағы бер ҡарап сыҡҡандай итте лә йәмһеҙ итеп һүгенде, шунан йылмайып Фәруҡшинға ҡараны.

– Нимә, ул Ғөзәйеровығыҙ тағы ла һалмыш инеме?

Фәруҡшиндың сығып барған йәне яңынан үҙ урынын алғандай тойолдо.

– Унынһын әйтә алмайым, Заһит Шәһитович, әммә күҙҙәре ялтырай ине.

– Шулайҙыр. Шулай булмаһа, анализдарыңды әллә кемдеке менән бутамаҫ ине. Бар, ҡайт! Йөҙйәшәр һаулығың булғанда, дауахана тупһалары тапап кеше көлдөрмә!

Ҡайтты Фәруҡшин. Дәртләнеп, ҡанатланып ҡайтты. Хатта кисәге батырлығы тураһында ла онотоп ҡайтты. Уныһы иртән эшенә килгәс кенә иҫенә төштө. Иғландар таҡтаһына штаттан ҡыҫҡартыусылар исемлеге сығарып эленгәйне. Фамилияһы алфавит аҙағындараҡ «Ф» хәрефенән башланһа ла, нишләптер, исемлек башында «Аҡман-тоҡман» ООО-һының бүлек мөдире Ф. Ҡ. Фәруҡшин тора ине.

## *Замана ҡаҙанышы*

Зиннәтулла ауылына һирәк ҡайта, шуға күрә һағынып ҡайта. Әле лә, энеһе йәшәгән туған йортоноң ҡапҡаһын асып инеү менән, ялбыр ҡойроғон елпелдәтеп ҡаршы алған Ялбырға колбаса ҡалдығы һуҙып, ҡолаҡтарын иркәләгәндәй итте лә бер генә минутҡа туҡтап ҡалды. Иркен ишек алдына, аҫҡы урамға, уның артындағы йылға буйы тирәктәренә күҙ һалды. Тынлыҡ… Бушлыҡ… Урамда кеше түгел, эт тә юҡ. Эйе, сатлама һыуыҡ та ул, тик ауыл кешеһе һыуыҡ тип өйөнән сыҡмай ятмаҫ инде. Сәйер. Был сәйерлек Зиннәтулланың күкрәгендәге ҡайһылыр ерен хатта өтөп алғандай итте. Әллә ауылдағы бар кеше, Ялбырҙан башҡа бар тереклек үлеп бөткән инде?

Әгәр шул саҡта өйҙән уң ҡулына силәк тотоп, һул ҡулы менән ҡолағына кеҫә телефоны ҡыҫып килене Фәрҙиә килеп сыҡмаһа, шулай аптырап торор ине әле ҡала ҡунағы.

– Бәй, ағай, ҡайттыңмы ни?.. Нишләп етем бала кеүек моңайып баҫып тораһың? Әйҙә, үт!..

Зиннәтулланың эсенә әҙерәк йән керҙе. Фәрҙиә өйҙә, Ялбыр ишек алдында, тимәк, иҫәндәр. Хужабикә менән эт кенә түгел, кесе улы Илнур ҙа иҫән булып сыҡты. Ул, үҙенең кеҫә телефонынан кем менәндер гәпләшә-гәпләшә, ағаһы менән килеп күреште.

– Ҡара әле, килен, – тине ҡунаҡ, туны менән бүреген сөйгә элеп ҡуйып, аманатын тапшырғас, – нишләп ауыл буш ул? Көнө-төнө донъя мәшәҡәте менән мәж килгән ағай-эне ҡайҙа ҡасып бөткән? Сталин бөтөрҙө-бөтөрҙө, ауылды бөтөрә алманы, Хрущев киләсәкһеҙҙәр рәтенә индерҙе, ауыл йәшәй бирҙе, демократтарҙың Черниченко атлы иң зәһәре фермерҙарға бүлгеләп тарҡатырға ынтылды, ҡыйынлыҡ менән булһа ла, халыҡтың йәшәүе һаман йәшәү ине бит әле. Әллә теге «Милли программа» атлы ғәләмәт ауылдың тамам башына еттеме?

– Етмәгән, – тине Фәрҙиә, көлөп ебәреп. – Өйҙәрендә ултыралар. Был һыуыҡта урамда йөрөп ни бар? Әллә һеҙгә, ҡаланыҡыларға ғына, рәхәттә йәшәргә тигәнме? – Ул ҡаршы тәҙрәгә ишара яһаны, – ана, күрәһеңме, ағай, теге вышканы? Уҙған айҙа ғына килеп ҡуйып киттеләр. Хәҙер Йүкәле соҡоронан да донъяның теләһә ҡайһы ҡитғаһына ҡысҡырып ишеттереп була: теләһәң – Америкаһына, теләһәң – Ҡытайына.

Шунда ғына Зиннәтулланың быға саҡлы ауылда кеҫә телефоны бәйләнеше булмауы иҫенә төштө. Ә бөгөн килеп Илнурының ҡулында ла телефон, Фәрҙиәһенең муйынына ла телефон эленгән. Тимәк, вышка ҡуйғандар, бәйләнеш булдырғандар. Фәрҙиә, ошо фекерҙе иҫбатлау ниәте менән булһа кәрәк, телефонын ҡолағына баҫты. Әллә ысынлап та Ҡытайға шылтыратырға итә инде?

– Ғәйзулла! Ғәйзулла, тим! Нимә мыштырлайһың унда? Ин тиҙерәк.

Зиннәтулланың ҡустыһы бер ҙә Ҡытайға сығып китмәгән, аҙбарҙа ғына йөрөй икән. Трубкала уның тауышы яңғыраны:

– Хәҙер, Фәрҙиәкәйем, һыйырҙарҙың тиҙәген алып, бесән һалдым. Башмаҡ менән быҙауҙы ғына ҡарайым да…

– Башмағың менән быҙауың ҡасмаҫ. Ағай килде, тиҙерәк ин. – Телефонды ҡолағынан алырға онотоп, Фәрҙиә Илнурға өндәште, – ә һин ни бысағыма шул уйынсығыңа текәлеп ултыраһың? Тиҙ генә келәттән бер ҡаҙҙы индер. Баҙға төшөп тоҙло-моҙло сығар!..

Илнур, әсәһенең күҙенә ҡарап, телефонға:

– Хәҙер, әсәй, – тине лә әмерҙе үтәргә ашыҡты. Бер-ике минуттан әсәһе трубкаһында уның тауышы йәнә яңғыраны: – Әсәй, ҡаҙҙың ҡайһыһын индерәйем: ағынмы, сыбарынмы?

– Һуйып, йөнө йолҡолған ҡаҙҙың ағы, сыбары була тиме ни? Һимеҙерәген индер, шайтан малай!

Ул арала малай, ҡаҙҙы аш бүлмәһенә индереп, баҙға төшөп китте. Телефон тауышы унан яңғыраны:

– Тоҙло помидорҙың ҡыҙылын алайыммы, әллә һарыһынмы?

– Ҡыҙылын да, һарыһын да ал. Эсвижий кәбеҫтә менән тоҙло ҡыяр сығарырға ла онотма. Бер төшкәндә ҡурай еләге вареньеһы менән ҡайнатылған баланды ла эләктер…

Был әңгәмәне ауыҙын асып тыңлаған Зиннәтулла килененең йомартлығын маҡтап берәр һүҙ әйтергә ынтылғайны, телефондан һөйләшә-һөйләшә, ҡустыһы Ғәйзулла килеп инде.

– Һин, Хисмәт, уны лимонмы, апельсинмы ҡабығы менән… Ярар, һорауың булһа, шылтыратырһың…

Үҙе килеп ағаһын ҡосаҡлап алды.

Ул арала аш бүлмәһендә ҡайнашҡан Фәрҙиәнең телефонына тағы йән керҙе. Хужабикәнең яңғырауыҡлы тауышы ишетелде.

– Әйттем дә инде, Хәҙисәкәйем, артыҡ һимерткәнһең, тип. Берәр аҙна һыу менән икмәктә генә тот. Унан һуң Майлы күҙ Маһираға ғына түгел, Мерилин Монроның үҙенә лә күҙ һалмаҫ. Бына минеке…

Ирҙәр «нисек» тә «нисек» тип хәл-әхүәл һораша ғына башлағайны, уларҙың һүҙен ишек алдында ау-аулаған Ялбыр бүлдерҙе. Өлкәндәр һүҙен кинәнеп тыңларға ҡолаҡтарын тырпайтҡан Илнур асыуланып телефонына өндәште:

– Ялбыр! Ялбыр, тим, эттән тыуған нәмә! Ниңә ғауға күтәрҙең унда? Тыйыл хәҙер үк!

Аптырарлыҡ – эт өрөүҙән туҡтаны. Әллә кәрәҙле бәйләнеште ул да үҙләштереп өлгөргән инде? Эт халҡының ғалимдар өйрәнеп бөтмәгән мөмкинселектәре бихисап бит әле уның. Туғандарҙың үҙ-ара һүҙен, һыйланған һыйын ентекләп һөйләп тороуҙың кәрәге юҡтыр, моғайын. Уҡыусыбыҙға Зиннәтулланың шатлығын ғына белдереп китәйек: ауыл үлмәгән! Ауыл йәшәй! Бары замана ҡаҙанышы – кеҫә телефоны – был йәшәйешкә үҙ биҙәген генә индергән.

**Закир ӘҠБӘРОВ.**

**Яңы китаптар**

Халҡыбыҙҙың рухи ынйыларын һөйөүселәрҙең кәштәһенә йәнә бер ҡиммәтле китап өҫтәлде: филология фәндәре докторы Фәнүзә Нәҙершина «Башҡорт халыҡ ҡобайыр-иртәктәре» баҫмаһын әҙерләп сығарҙы. Унда фольклор ҡомартҡылары тексы ғына түгел, дөйөм китапҡа инеш һүҙ ҙә, глоссарий (йәғни аңлатмалы һүҙлек) ҙа, иҫкәрмәләр, сығанаҡтар күрһәткесе лә өс телдә (башҡорт, рус, инглиз) бирелгән.

***

Киләһе йылда Рәсәйҙең 1812 йылғы Ватан һуғышында еңеүенә 200 йыл тулыу киң билдәләнәсәк. Яҡташыбыҙ, яҙыусы һәм тарихсы, ун китап авторы, Рәсәй Журналистар союзы һәм Рәсәй Федерацияһы әҙәбиәтселәре союзы премиялары лауреаты Салауат Әсфәтуллин Калугала йәшәй. Яңыраҡ ҡала нәшриәтендә Салауаттың «1812 – 1814: Башкиры» («Северные амуры») тигән китабы сыҡты.

Жанры буйынса ул – киносценарий: Янибай Хамматовтың киң билдәле «Төньяҡ амурҙары» романы буйынса автор өҫтәмәләре менән яҙылған фәнни повесть. Унда башҡорттарҙың 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм 1813-1814 йылдарҙа Европаны француз баҫҡынсыларынан азат итеүҙә ҡатнашыуы документаль-художестволы юҫыҡта хикәйәләнә. Баҫма схема-карталар, гравюралар, картиналар, наградалар, ҡоралдарҙың фоторепродукциялары менән биҙәлгән.

**Ҡотлайбыҙ!**

Күгәрсен районының Туйымбәт ауылындағы Зәйнәб Биишева музейында әҙибә исемендәге әҙәби-ижтимағи премияның яңы лауреаттарын тәбрикләү булды. Район хакимиәте башлығы Фәрит Мусин яҙыусы Ғәлим Хисамовҡа, район халыҡ суды рәйесе Мәрүәт Айбасовҡа, «Зәйнәб Биишева, беҙҙең Зәйнәб» телефильмдары өсөн күренекле режиссер, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, БР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Әмир Абдразаҡовҡа (үлгәндән һуң) дипломдар биргәндә һәр лауреаттың Зәйнәб Биишева исемен мәңгеләштереүгә, уның ижадын пропагандалауға тос өлөш индереүен билдәләне. Лауреаттарҙы шулай уҡ БР Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе урынбаҫары Ҡәҙим Аралбаев, Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан «Китап» нәшриәте директоры Зөфәр Тимербулатов, «Аҡ тирмә» башҡорт халыҡ мәҙәни үҙәге етәксеһе Ләлә Биишева, ауыл һәм районДың күренекле кешеләре ҡотланы.

Ҡәҙим Аралбаев менән Ләлә Биишева Мораҡтағы башҡорт гимназияһында уҡытыусылар һәм уҡыусылар менән дә осрашты.

***

Миәкә районы хакимиәте «Аҡмулла аманаты» (әҫәр «Ағиҙел» журналының 2010 йылдағы 2-се һанында баҫылғайны) повесы өсөн Мәжит Ғафуриҙың йорт-музейы директоры, яҙыусы Фәнис Янышевҡа Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге премияһын тапшырҙы.

***

«Алдан алтыны» романы өсөн Камил Йыһаншин Вячеслав Шишков исемендәге Бөтә Рәсәй әҙәби премияһына (2010 йыл һөҙөмтәләре буйынса) лайыҡ булды. Староверҙар тураһындағы был роман былтыр «Китап» нәшриәтендә баҫылып сыҡҡайны.